# БАШҠОРТ ТЕЛЕ ҺӘМ ӘҘӘБИӘТЕ

# 6







# БАШҠОРТ ТЕЛЕ ҺӘМ ӘҘӘБИӘТЕ 6

**Уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларында туған (башҡорт) телен һәм әҙәбиәтен өйрәнеү өсөн уҡыу ҡулланмаһы**

КИТАП
ӨФӨ • 2017

УДК 373.167.1 : 811.512.141
ББК 81.2 Баш-922
Б28

## Шартлы тамғалар

– һүҙлек эше
– әҙәби-теоретик төшөнсә
– тасуири уҡығыҙ
– ятлағыҙ
– парлашып йәки төркөмдә эшләгеҙ
– иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ
– өҫтәмә уҡыу өсөн
– проект эше
– ижади эш
– дөрөҫ уҡығыҙ
‖ – тел материалына аңлатма
– өйҙә ололар ярҙамында эш
– тәржемә итегеҙ

Б28 **Башҡорт теле һәм әҙәбиәте:** уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 6-сы класы өсөн туған (башҡорт) телен һәм әҙәбиәтен өйрәнеү өсөн уҡыу ҡулланмаһы / [авт.-төҙ. : В. И. Хажин, Ә. Х. Вилданов, М. И. Ҡарабаев, З. Р. Әминева, Ф. Ә. Аҡҡужина]. — Өфө : Китап, 2017. — 340 бит.

ISBN 978-5-295-06740-2

**УДК 373.167.1:811.512.141**
**ББК 81.2 Баш-922**

**ТП – 078/17**

**ISBN 978-5-295-06740-2**

© Хажин В. И., Вилданов Ә. Х., Ҡарабаев М. И., Әминева З. Р., Аҡҡужина Ф. Ә., 2017
© Кәримова З. И., дизайн, 2017
© БР-ҙың Зәйнәб Биишева ис. Башҡортостан «Китап» нәшриәте ДУП-ы, биҙәлеш, 2017

# Уҡыу – белем шишмәһе

## БӨГӨН – БЕЛЕМ КӨНӨ

Илебеҙ кешеләренең һәр йыл һайын көтөп алған ҙур байрамы бар. Ул Беренсе сентябрь. Был байрам дәүләтебеҙ тарафынан Белем көнө тип иғлан ителгән. Ошо көндө мәктәптәрҙә, башҡа уҡыу йорттарында миллиондарса балалар парта артына ултыра.

*Уҡығандың теле икәү; Уҡыуҙың сиге юҡ; Уҡыған уҙыр, уҡымаған туҙыр; Белгән белеменә таяныр, белмәгән белгәненә таяныр; Белеме барҙың ҡәҙере бар* һымаҡ әйтемдәрҙә белемдең кеше өсөн ни тиклем мөһим икәнлеге күренә.

Китап уҡыуҙың, белем алыуҙың әһәмиәтен халыҡтар бик боронғо замандан уҡ яҡшы белгән. Шуға ла улар китапты «белем шишмәһе» тип йөрөткәндәр.

Китап, ысынлап та, кешелек тыуҙырған иң ҙур хазиналарҙың береһе ул. Китап уҡыған кешене борон-борондан иң аҡыллы кеше тип иҫәпләгәндәр: уны хөрмәт иткәндәр, уға кәңәш һорап барғандар, төрлө һорауҙарға яуап алғандар. Халыҡ китап тураһында бик күп мәҡәлдәр сығарған. Мәҫәлән, *Китаптан хәреф эҙләмә, аҡыл эҙлә; Яҡшы китаптың һәр юлы алтын; Китапһыҙ өй – ҡояшһыҙ өй* һ. б.

Бөйөк аҡыл эйәләре, яҙыусылар, шағирҙар, ғалимдар иң күп китап уҡыусылар булғандар. А. С. Пушкин, *Белем алыуҙың иң яҡшы юлы – уҡыу,* тигән. М. Горькийҙың мәктәптә уҡыу мөмкинлеге булмаған. Шулай ҙа ул китап яратыуы, үҙ аллы күп уҡыуы арҡаһында үҙ заманының иң белемле кешеләренең береһе булып китә. Шуға ла М. Горький: «Китап – белем шишмәһе. Уны яратығыҙ, сөнки ул ғына беҙҙе рухи яҡтан көслө, намыҫлы, аҡыллы кеше итә», – тигән.

Китап – белем сығанағы. Китап аша беҙ боронғоно беләбеҙ, бөгөнгө тормошто аңларға өйрәнәбеҙ, киләсәкте күҙ алдына килтерәбеҙ, төрлө фән нигеҙҙәре менән танышабыҙ. Китап кешеләрҙе дөрөҫ йәшәргә, Тыуған иленә, халыҡҡа тоғро хеҙмәт итергә, төрлө ауырлыҡтарҙы еңеп сығырға өйрәтә.

М. Ғафури, Д. Юлтый, З. Биишева, Ғ. Туҡай кеүек бик күп башҡорт һәм татар әҙиптәре лә, М. Горький кеүек, йәштән төрлө ауырлыҡтар, кәмһетелеүҙәр, йәберләүҙәр күргәндәр, әммә тырышлыҡтары, китап яратыуҙары арҡаһында ҙур кеше булып киткәндәр.

Мәктәптә һеҙ күп фәндәр буйынса белем алаһығыҙ. Әммә һеҙ өйрәнгән предметтар араһында **художестволы әҙәбиәт** айырым урын алып тора. Уның кеше тормошондағы әһәмиәте ифрат ҙур. Был турала Н. Г. Чернышевский: «Яҙыусы яҙған әҫәрҙәрҙе уҡып, беҙ һәр төрлө түбәнлектән, әхлаҡи бысраҡлыҡтан ерәнергә, гүзәллекте аңларға һәм яратырға өйрәнәбеҙ. Был әҫәрҙәрҙе уҡып, беҙ үҙебеҙ ҙә яҡшыраҡ, изге күңеллерәк кешегә әйләнәбеҙ», – тип әйткән.

1. Текстан яңы һүҙҙәрҙе яҙып алығыҙ, мәғәнәләренә төшөнөгөҙ. Төрлө һүҙҙәр ҡушыу ярҙамында улар менән бер нисә һүҙбәйләнеш төҙөп, мәғәнәнең үҙгәреү-үҙгәрмәүенә иғтибар итегеҙ.
2. Текстағы мәҡәлдәрҙе күсереп алығыҙ, уларҙың мәғәнәләрен асыҡлағыҙ.
3. Уҡыу, китап, белем тураһында һеҙ тағы ниндәй мәҡәлдәр беләһегеҙ? Атай-әсәйҙәрегеҙҙән һорашып, үҙегеҙ белгәндәрҙе өҫтәп, уларын да яҙып ҡуйығыҙ һәм рус телендә шул мәғәнәне биреүсе мәҡәлдәрҙе табығыҙ.
4. 5-се класта алған белемегеҙҙе иҫкә төшөрөгөҙ: нимә ул мәҡәл? Үрҙә эшләгәндәрегеҙгә таянып, уның ни өсөн кәрәклеген асыҡлағыҙ.
5. *Ҙур кешеләр* тип, һеҙҙеңсә, кемдәргә ҡарата әйтәләр? Һеҙ ниндәй ҙур кешеләрҙе беләһегеҙ, уларға үҙегеҙсә характеристика бирегеҙ.
6. Нисек була ул *дөрөҫ йәшәү?* Һеҙҙеңсә, бының өсөн кеше ниндәй сифаттарға эйә булырға тейеш? Бының өсөн хәүефһеҙ тормош нигеҙҙәре (основы безопасности жизнедеятельности – ОБЖ), сәләмәт тормош ҡағиҙәләре (здоровый образ жизни – ЗОЖ) талаптарын үтәү генә етәме? Үҙегеҙ белгән миҫалдарҙы ла файҙаланып, ошо темаға фекер алышыу үткәрегеҙ. Фекер алышыуға ата-әсәләрегеҙҙе, үҙегеҙ ихтирам иткән берәй *ҙур кешене* йәлеп итергә тырышығыҙ.

7. 5-се класта ниндәй фәндәр өйрәндегеҙ, быйыл ниндәйҙәрен өйрәнәсәкһегеҙ? Уларға үҙегеҙсә характеристика бирегеҙ, әһәмиәтен аңлатығыҙ (фекерегеҙҙе тормоштан алынған миҫалдар ярҙамында дәлилләргә тырышығыҙ).
8. Текстан уҡыу, белем, китап тураһында әйткән фекерҙәрҙе табып уҡығыҙ. Был турала һеҙ нисек әйтер инегеҙ?
9. Тексты йөкмәткеһенән сығып, «Уҡыу – белем шишмәһе» тигән бәләкәй изложение яҙығыҙ. Эштәрегеҙҙе күмәкләп тикшереп, уның буйынса әңгәмә үткәрегеҙ.
10. Н. Г. Чернышевскийҙың һүҙҙәрен диктант итеп яҙығыҙ.
11. Түбәндә килтерелгән мәҡәлдәрҙе иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ, уларҙы үҙегеҙҙең телмәрегеҙҙә ҡулланығыҙ.

Китап – бөтә ғилем, белем башы.

Донъя ғилеме китап эсендә.

Үҙ аҡылың юлбашсы булһын; китап юлдашың булһын.

Белем кәңәшсең булһын.

Уҡыһаң, белемең артыр, уҡымаһаң, белгәнең дә онотолор.

Китап һүҙен юҡҡа сығарыр көс юҡ; китаптан да яҡын, аҡыллы дуҫ юҡ.

Ниндәй китаптар менән дуҫлығыңды әйт; мин һинең кемлегеңде әйтермен.

Китапҡа яҙылған һүҙҙең ҡәҙере бар; уны уҡығандың үҙ ҡәҙере бар.

Китап – белем шишмәһе, белем – ғилем нигеҙе.

Китап – тормош көҙгөһө, күҙҙәр – күңел көҙгөһө.

**Түбәнге кластарҙа тел буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау**

**1-се күнегеү.** Бирелгән хәрефтәр араһына ҡалған хәрефтәрҙе алфавит тәртибендә яҙығыҙ.

1. А, … Ҡ.
2. Ф, … Ю.

**2-се күнегеү.** Ҡайһы һүҙ һүҙлектә алда килер? Тау исемдәрен алфавит тәртибендә яҙығыҙ.

Торатау, Көнгәк, Алатау, Мәсемтау, Нарытау, Мағаш, Машаҡтау, Ирәндек, Ирәмәл, Ямантау, Ҡырҡты, Ҡараташ, Ҡыратау.

*Әсхәл ӘХМӘТ-ХУЖА*

## АЛМАШ ҮҪӘ

Был умарта йәйен генә буп-буш,
Көҙөн, ҡышын, яҙын гөж килә.
Әйтерһең дә,
Бында йәш көс йәшәй –
Йәш көс менән йәш дәрт гөр килә.

Кәрәҙ кеүек яҡты кластарҙа –
Умартаның йәме, бар ҡото.
Кластарҙа зиһен-аң үҫтерә
Мең-мең бала –
Нәҡ мең бал ҡорто.

Аяҙ булһын,
Ямғыр,
Буран булһын –
Хеҙмәт ҡаға бында ҡанатын.
Йыйғандары алтын бал түгел дә –
Алған белемдәре саф алтын.

Бөтә нәмә бында нурлы, матур,
Бөтә ерҙә тәртип, бөхтәлек.
Алмаш үҫә илгә дан өҫтәрлек,
Заман йөгөн иңгә йөкмәрлек.

Бөтә нәмә бында ысын, ихлас,
Бөтә нәмә ябай, буяуһыҙ:
Көлгән саҡта – ҡояш сағылып уйнай,
Йәш түгелһә – һығыла балауыҙ.

Бөтә нәмә бында көләс, уйсан…
Ҡаш йыйырһа ҡәтғи ағайҙар,

Үтә сая, үтә шаяндар ҙа
Өйрәткәнде шундуҡ аңлайҙар.

Йә булмаһа,
Күк сәскәләй ҡыҙҙар,
Тал сыбыҡтай шыйтыҡ малайҙар
Шуҡ һүҙ әйтһә,
Етди апайҙарҙың
Яҙыла ла китә маңлайҙар.

Тәнәфестә, ҡуҙғып, бала-саға
Һибелгәндә тышҡа күмәкләп,
Гөл еҫтәре аңҡып, балҡып тора
Аҡ умарта төҫлө аҡ мәктәп.

1. Шиғырҙа осраған яңы һүҙҙәрҙе табып, мәғәнәләрен асыҡлағыҙ, уларҙы ҡулланып, бер-берегеҙ менән **һорау-яуап** формаһында диалог ойоштороғоҙ.
2. Яңы һүҙҙәрҙе яҙып алып, уларҙың синонимдарын табырға тырышығыҙ. Иҫегеҙгә төшөрөгөҙ: нимә ул **синоним?**
3. Нимә ул *балауыҙ һығыу, ҡаш йыйырыу?* Мәғәнәләрен асыҡлағыҙ ҙа шуны уҡ икенсе һүҙҙәр менән әйтегеҙ.
4. Шағир *бында бөтә нәмә ябай, көләс, буяуһыҙ* тип нимә әйтергә теләгән?
5. Ҡәтғи ағайҙарҙың *ҡаш йыйырыуын,* етди апайҙарҙың *маңлайҙарының яҙылып китеүен* нисек аңлайһығыҙ?
6. Шағир заман йөгөн иңдәренә алырлыҡ алмаш үҫеүенә ҡыуана. Нимә ул *заман йөгө?* Һеҙ үҙегеҙҙе ошо алмашсылар рәтендә күрә алаһығыҙмы? Бының өсөн, һеҙҙеңсә, ниндәй сифаттарға эйә булырға кәрәк?
7. Балаларҙың мәктәптә *алған белемдәре саф алтын,* ти шағир. Һеҙ үҙегеҙҙең алған белемдәрегеҙ тураһында шулай тип әйтә алаһығыҙмы?
8. Шағир мәктәпте умарта менән, уҡыусы балаларҙы ҡорт күсе менән сағыштыра. Һеҙ үҙегеҙҙең мәктәпте нимә менән сағыштырыр инегеҙ?
9. Әсхәл Әхмәт-Хужа – бик күп шиғыр китаптарының авторы. Уның шәхесе, ижады тураһында белешмә төҙөгөҙ.

**3-сө күнегеү.** «Алмаш үҫә» шиғырынан *к* хәрефенә башланған исемдәрҙе алфавит тәртибендә яҙығыҙ.

**4-се күнегеү**. Һорауҙарға яуап бирегеҙ.

1. Башҡорт алфавитының ҡайһы хәрефтәренән һүҙ башланмай?
2. Башҡорт алфавитындағы ҡайһы хәрефтәрҙән саф башҡорт һүҙҙәре башланмай?

**5-се күнегеү.** Һүҙҙәрҙе рус теленә тәржемә итегеҙ. Уларҙы ниндәй һүҙ берләштерә ала?

Умарта, күс, кәрәҙ, бал ҡорто, бал, балауыҙ.

*Уран КИНЙӘБУЛАТОВ*

## УҠЫТЫУСЫМА

Ояһынан осҡан бөркөттәр беҙ,
Ҡанатыбыҙ нығый һауала.
Беҙ сығабыҙ сикһеҙ киңлектәргә –
Уҡытыусы тәүге юл һала.

Аҡбур менән аҡ нурҙарҙан
Аҡ юл һыҙҙың, уҡытыусым.
Мең-мең яҡты күңелдәрҙең
Баҡсаһы һин, уҡытыусым.

Ашҡынабыҙ матур киләсәккә,
Хыялдарға тиңдәш дәүергә.
Уҡытыусым, һинең күҙ нурҙарың
Аҡ юл булыр беҙгә ғүмергә.

Үкенесһеҙ булыр түккән көсөң,
Теләктәрең сәскә атырҙар.
Ҡош юлында «Хуш бул!» тиеүселәр
Ҡош юлынан һиңә ҡайтырҙар.

**1.** Шиғырҙы тасуири итеп уҡығыҙ. Шағирҙың нимә әйтергә теләгәнен, үҙенең мәктәбенә, уҡытыусыларына мөнәсәбәтен асыҡларға тырышығыҙ.
**2.** *Ҡош юлында «Хуш бул!» тиеүселәр ҡош юлынан һиңә ҡайтырҙар* тигәнде нисек аңланығыҙ? Фекер алышығыҙ.
**3.** Тәүге строфаның мәғәнәһенә төшөнөгөҙ. *Бөркөт ояһы, сикһеҙ киңлектәр* тип автор нимәне күҙ уңында тотто икән?

4. Һеҙҙең уҡытыусыға арналған тағы ниндәй әҫәрҙәр уҡығанығыҙ бар?
5. Мәшһүр ҡырғыҙ яҙыусыһы Сыңғыҙ Айытматовтың «Беренсе уҡытыусы» повесын уҡығыҙ. Уҡытыусының кеше тормошондағы роле тураһында фекер алышығыҙ.
6. Шиғырҙы ятлағыҙ.
7. Шиғырға композитор Р. Нәбиуллин көй яҙған, уның аудиояҙмаһын тыңлағыҙ, үҙегеҙ ҙә ҡушылып йырлағыҙ.

*Тәнзилә ДӘҮЛӘТБИРҘИНА*

## МИҘГЕЛДӘР

Һәр миҙгелдең үҙ йәме бар,
Үҙ төҫө бар һәр айҙың.
Зәңгәр сирень, йәшел үлән
Бигерәк йәмләй яҙҙы!

Йәй айҙарын аллы-гөллө
Хуш еҫле сәскә биҙәй.
Ҡыуанып һайраған ҡош та
Шул гүзәллекте һиҙә.

Уңған көҙ урманды буяй
Ҡыҙыл, һары төҫтәргә.
Шунан ҡышҡа ҡала инде
Ергә аҡ төҫ өҫтәргә.

Сиратлап миҙгелдәр ергә
Сағыу биҙәктәр һала.
Шуға йылдың һәр бер айын
Һағынып көтөп алам.

1. Шиғырҙы тасуири итеп уҡығыҙ. Авторҙың йыл миҙгелдәрен нисек күҙ алдына килтереүенә иғтибар итегеҙ. Һеҙ уның менән килешәһегеҙме?
2. Һеҙ нисек уйлайһығыҙ: йыл миҙгелдәренә һәр саҡ шулай күңелле, яҡты, сағыу төҫтәр генә хасмы? Мәҫәлән, *ҡара яҙ, ҡара көҙ* тигән төшөнсә бар. Уйлап ҡараһаң, бәлки, тағы

бүтән төҫтәр ҙә барҙыр? Һәр төҫтөң ни өсөн ҡулланылғанын аңлатырға тырышығыҙ.

3. Шағирә, *йылдың һәр бер айын һағынып көтөп алам,* ти. Ә һеҙ нисек? «Минең яратҡан миҙгелем (айым)» тигән хикәйә яҙығыҙ, ни өсөн яратыуығыҙҙы (яратмауығыҙҙы) аңлатығыҙ.
4. Рус телендә *У природы нет плохой погоды* тигән әйтем бар. Быға һеҙҙең ҡарашығыҙ нисек? Әңгәмәләшегеҙ.
5. Һәр миҙгелдең кеше (ил, халыҡ) тормошондағы урыны тураһында фекер алышығыҙ.
6. *Нимә ул синоним* тигән һорауға яуап бирегеҙ. Бүлектә бирелгән шиғырҙарҙан синонимдарҙы табығыҙ.

**6-сы күнегеү**. 4-се күнегеүҙең яуаптары.

1. ң, ҫ, ь, ъ хәрефтәренән һүҙ башланмай.
2. ё, ң, д, п, р, ь, ъ, ц, ч, щ хәрефтәре башҡорт һүҙҙәренең башында була алмай.

**7-се күнегеү.** Рус һәм башҡорт һүҙҙәренең әйтелешен сағыштырығыҙ.

| | |
|---|---|
| молоко | тормошо |
| карандаш | Ҡараташ |
| сокол | солоҡ |
| землемер | теремек |

### Һүҙ күрке – мәҡәл

Белеү – нур, белмәү – хур.
Ғилем – аҡылдың яртыһы.

# Йырым минең – Башҡортостан

## БАШҠОРТОСТАН

Башҡортостан Республикаһы Көньяҡ Уралда, Европа менән Азия осрашҡан ерҙә, урынлашҡан. Уның территорияһы төньяҡтан көньяҡҡа 550 километрға, көнбайыштан көнсығышҡа 430 километрға һуҙылған һәм 143 мең 600 квадрат километр майҙанды биләй. Пермь крайы, Свердловск, Силәбе, Ырымбур өлкәләре һәм Татарстан, Удмурт республикалары менән сиктәш.

Башҡортостандың тәбиғәте бик бай. Уның көнсығышында Көньяҡ Уралдың тау һырттары урынлашҡан. Елмәрҙәк, Алатау, Ҡалыу, Юрматау, Мәсемтау, Машаҡтау, Әүәләк, Уралтау, Ирәндек, Ҡырҡтытау һырттары төньяҡтан көньяҡҡа табан тиҫтәләрсә километрға һуҙылған. Был яҡтарҙа ҡарағай, шыршы, имән, йүкә, уҫаҡ, ҡайын, саған, муйыл, мышар, балан һәм башҡа бик күп ағастар үҫә. Ямантау (диңгеҙ кимәленән 1640 м бейеклектә), Ирәмәл (1584 м) кеүек бейек тауҙарҙың баштарында тундра үҫемлектәрен осратырға мөмкин.

Башҡортостан урмандарында айыу, бүре, төлкө, ҡуян, һуҫар, ҡондоҙ, ҡама, шәшке, мышы, ҡоралай кеүек ҡырағай йәнлектәр, торна, селән, ҡауҙы, һуйыр, ҡор, сел, бөркөт, һайыҫҡан, ыласын, ҡарға, бүҙәнә, тартай һәм башҡа бик күп ҡоштар йәшәй. Уларҙың күбеһе ҡышҡылыҡҡа йылы яҡҡа осоп китә, ә йәйгелеккә әйләнеп ҡайталар, оя ҡороп, бала сығаралар.

Республиканың территорияһы 54 районға бүленгән. Бында 21 ҡала, ҡала тибындағы 40 ҡасаба, 4674 ауыл бар. Уларҙа 4 миллиондан артыҡ кеше йәшәй. Бынан 450 йылдан ашыу элек Рус дәүләтенә ҡушылғандан һуң Башҡортостанға рустар, татарҙар, сыуаштар, мариҙар, мордвалар һ. б. күсеп килеп ултыра. Хәҙер бында 100-ҙән ашыу милләт кешеһе йәшәй.

1. Тексты ентекләп уҡып сығығыҙ. Башҡортостан тураһында үҙегеҙ белгәндәрҙе лә өҫтәп, телдән сығыш әҙерләгеҙ.
2. Текстан ҡырағай йәнлектәр, ҡош исемдәрен табып, күсереп яҙығыҙ. Һеҙ уларҙың ҡайһыларын күргәнегеҙ бар? Үҙегеҙ яҡшы белгән берәй йәнлектең йәки ҡоштоң һүрәтен төшөрөп, уның тураһында кескәй белешмә төҙөп яҙығыҙ.
3. Текста тағы ниндәй йәнлектәрҙең, ҡоштарҙың исемдәре телгә алынмаған? Исемлекте башҡортса тултырып яҙығыҙ, руссаға тәржемә итегеҙ. Уларҙың бүтән берәй телдә нисек аталыуын асыҡлағыҙ.
4. Һеҙ йәшәгән ауыл (ҡасаба, ҡала) нисек атала? Ул Башҡортостандың ҡайһы ерендә урынлашҡан? Ҡасан барлыҡҡа килгән? Унда кемдәр йәшәй, нимә менән шөғөлләнә?
5. Текстан тау исемдәрен яҙып алығыҙ, уларҙы Башҡортостан картаһынан табығыҙ. «Башҡортостан тауҙары» тигән ҙур булмаған белешмә төҙөгөҙ.
6. Һеҙ йәшәгән ауыл (ҡасаба, ҡала) тирәһендә тау бармы? Ул нисек атала? Тауға характеристика бирегеҙ, исеменең ҡайҙан килеп сыҡҡанлығын асыҡлағыҙ. Шуға бәйле легенда, риүәйәт тапһағыҙ, «Башҡортостан тауҙары» тигән альбом булдырып, шунда теркәп ҡуйығыҙ.
7. Текста исемдәре телгә алынған халыҡтарҙы беләһегеҙме? Уларҙы күргәнегеҙ, улар менән аралашҡанығыҙ бармы? Үҙегеҙ яҡшы белгән берәй халыҡ тураһында телдән сығыш яһағыҙ.
8. Башҡортостанда тағы ниндәй халыҡ вәкилдәре йәшәй? Исемлеген төҙөгөҙ, уларҙың асыл ватаны (тыуған иле) ҡайҙа икәнлеген асыҡлағыҙ.
9. Сит милләт кешеләре араһында һеҙҙең дуҫтарығыҙ бармы? «Минең татар (сыуаш, мари һ. б.) дуҫым» тигән белешмә төҙөп, дуҫығыҙға характеристика бирегеҙ.
10. Иҫегеҙгә төшөрөгөҙ: нимә ул **сағыштырыу**? Төҙөгән белешмәләрегеҙҙә, телдән яһаған сығыштарығыҙҙа мөмкин тиклем күберәк сағыштырыуҙар ҡулланырға тырышығыҙ.

**8-се күнегеү.** Рус һәм башҡорт һүҙҙәрен сағыштырып уҡығыҙ.

оса – оса
тереме – (в) тереме
болото – болото
бер эт – берет
осло – Осло
отошло – отошло
сей – сей
теремек – теремок
тормош – тормоз

**9-сы күнегеү.** Һүҙҙәрҙе башҡортса яҙығыҙ.

Баймак, Инзер, Базы, Стерлитамак, Уфа, Караидель, Янгантау, Белокатай, Акъяр, Бурзян.

**10-сы күнегеү.** Өйҙә ағастарҙың исемдәрен рус телендә яҙығыҙ.

Ҡайын, ҡарағай, шыршы, имән, йүкә, уҫаҡ, ҡарағас, саған, муйыл, мышар, балан, ерек, тал, тирәк, энәлек.

*Зәйнәб БИИШЕВА*

## БАШҠОРТОСТАН

Элек заман һин бер үкһеҙ бала инең,
Бар байлығың – ҡырыҫ, йәнһеҙ дала ине.
Шул даланда һин, имгәкләп, ауа-түнә,
Тома һуҡыр юлсы булып бара инең.
Хәҙер – көслө ир-арыҫлан, баһадир һин.
Алғы сафта бәхет даулап бараһың һин.
Юлың яҡты, көнөң көләс, теләгең саф,
Бөйөк илдең ҡәҙерле бер балаһы һин.

1. Шиғырҙы тасуири итеп уҡығыҙ.
2. Авторҙың Башҡортостандың үткәнен һәм хәҙергеһен нисек тасуирлауына иғтибар итегеҙ. Белгәндәргә таянып, шағирәнең фекерҙәрен дәлилләүсе миҫалдар килтерегеҙ.
3. Башҡортостандың хәҙерге тормошо, үҙаллылыҡ өсөн көрәше, киләсәге тураһында үҙ-ара фекер алышыу ойоштороғоҙ. Һеҙҙеңсә, Башҡортостан сәскә атһын, уның халҡы бәхетле, бай йәшәһен өсөн, тағы нимә эшләргә кәрәк?
4. Рәсәйҙең картаһынан Башҡортостанды табығыҙ. Ниндәй шағир Башҡортостандың картаһын ҡайын япрағы менән сағыштырған? Шиғырҙы табып уҡығыҙ.

5. Күрше өлкәләрҙә, республикаларҙа кемдәр йәшәгәнлеген асыҡлағыҙ. «Беҙҙең күршеләр» тигән кескәй белешмә төҙөп яҙығыҙ.
6. Башҡорттар Башҡортостанда ғына йәшәйме? Үҙегеҙ белгәндәрҙе, таба алған тиклем сығанаҡтарҙы файҙаланып, оло-ларҙан, ата-әсәләрегеҙҙән һорап, уҡытыусы ярҙамында «Башҡорттар ҡайҙа йәшәй?» тигән белешмә төҙөгөҙ.
7. Башҡортостанға арналған әҫәрҙәр исемлеген төҙөгөҙ. Республикабыҙҙың тәбиғәтен, тарихын, сәнғәтен, тормош-көнкүрешен сағылдырған материалдар йыйып, уҡытыусы ярҙамында «Тыуған илем – Башҡортостан» исемле альбом төҙөгөҙ.

**11-се күнегеү.** Бирелгән хәрефтәр араһына ҡалған хәрефтәрҙе алфавит тәртибендә яҙығыҙ.

1. А, ... И.
2. Ш, ... Я.

**12-се күнегеү.** Бармаҡ исемдәренең башҡортса һәм русса әйтелешен уҡығыҙ һәм иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ.

баш бармаҡ – большой палец
һуҡ бармаҡ – указательный палец
урта бармаҡ – средний палец
сығанаҡ бармаҡ – безымянный палец
сәтәкәй бармаҡ – мизинец

## ДАН҆ҺИҢӘ, ДАН, БАШҠОРТОСТАН!

*Рәми ҒАРИПОВ шиғыры*
*Рафиҡ СӘЛМӘНОВ көйө*

Киң Уралдың иркен күкрәгендә
Азат шоңҡар ғорур осҡанын
Ҡарайым мин сикһеҙ ғорурланып,
　　Дан һиңә, дан,
　　Башҡортостаным!
Ир намыҫы менән еңеп сыҡтың
Һин яуҙарҙа илдең дошманын.
Йырлайым мин батыр ир намыҫын,

Дан һиңә, дан,
Башҡортостаным!
Егет ҡулы тейһә, ер майы ла
Ете ҡаттан ата фонтанын.
Ҡотлайым мин халҡым егетлеген,
Дан һиңә, дан,
Башҡортостаным!
Тупрағың да алтын, тыуған еркәй,
Уңған ҡулдарында оҫтаның.
Ҡыҫайым мин уңған ҡулдарыңды,
Дан һиңә, дан,
Башҡортостаным!

1. Текст өҫтөндә тасуири уҡыу күнекмәләре үткәрегеҙ.
2. Өсөнсө куплеттың тәүге ике юлына иғтибар итегеҙ. Нимә ул *ете ҡаттан фонтан булып атҡан ер майы?*
3. *Ир намыҫы, егетлек* тигәнде һеҙ нисек аңлайһығыҙ? Шул турала әңгәмә ойоштороғоҙ.
4. Шағир тупраҡты алтын менән сағыштыра. Һеҙ быны нисек аңлайһығыҙ?
5. Шағирҙың Башҡортостанға ни өсөн дан йырлағанын асыҡлағыҙ, миҫалдар килтерегеҙ.
6. Йырҙың көйөн тыңлап, үҙегеҙ ҙә ҡушылып йырлап ҡарағыҙ.
7. Көйҙөң авторы композитор Рафиҡ Сәлмәнов тураһында нимәләр беләһегеҙ? Әңгәмә ойоштороғоҙ.

*Фаҡиһа ТУҒЫҘБАЕВА*

## ЭЙ ЯҘМЫШЫМ МИНЕҢ – БАШҠОРТОСТАН

Башҡортостан,
Һине аңлау өсөн,
Далаларың кеүек киң күңелле,
Йылғаларың кеүек моң-һағышлы,
Урмандарың кеүек мең балҡышлы,
Ҡаяларың кеүек бейек, серле
Булыу кәрәк,
Ерем – Башҡортостан!
Башҡортостан,
Һине аңлау өсөн,
Илкәйем тип, ярһып, ҡылыс болғап, –

Дауам иткән шулай нисә быуын, –
Һинең менән бергә яу сабырға,
Дарға аҫылырға, сабылырға,
Үлдем, тигәс, ҡабат терелергә,
Урал батыр булып әүерелергә
Кәрәк,
Эй яҙмышым минең – Башҡортостан!
Йырҙарыңды ергә күмһәләр ҙә,
Ҡурай булып сәскә атҡан йырың,
Йырҙарыңды ҡыра алмай ҡырғын!
Телкәйеңде ҡырҡып алһалар ҙа –
Үткерлеге уның ҡылысында,
Ә ҡылысың һәр саҡ ҡул осонда
Булған борон,
Утта янмаҫ,
Һыуҙа батмаҫ йырым минең –
Башҡортостан!
Һәр бер көнөң – моңдоң өнө, гүйә.
Аҡһаҡалдарыңдың аҡылы ла.
Сабый хыялының ялҡыны ла.
Хәләл икмәк менән хәләл тоҙоң,
Һүнгән, балҡыясаҡ һәр йондоҙоң –
Йәншишмәләй генә моңдарыңда.
Уттан сыҡҡан өсөн һәр бер һүҙең,
Һәр һүҙеңдә балҡый яҡты йөҙөң,
Эй тормошом минең –
Башҡортостан!

1. Шиғырҙы иғтибар менән үҙ аллы уҡып сығығыҙ, таныш булмаған һүҙҙәрҙе яҙып алып, мәғәнәләрен асыҡлағыҙ.
2. *Утта янмаҫ, һыуҙа батмаҫ* тип нимәгә әйтәләр? Шағирәнең был һүҙбәйләнеште ниндәй маҡсатта файҙаланғанын аңлатығыҙ. Был һүҙбәйләнеш рус телендә нисек яңғырай?
3. *Телкәйеңде ҡырҡып алһалар ҙа* тигәндә, шағирә нимәне күҙ уңында тотто икән? Күмәкләп быньң нимәгә нигеҙләнгәнен асыҡларға тырышығыҙ.
4. Шиғырҙы ҡысҡырып, тасуири уҡыу күнекмәләре үткәрегеҙ, уҡыу барышында, йөкмәткенән сығып, уның пафосын, йәғни нисек дөрөҫ уҡылырға тейеш икәнлеген асыҡлағыҙ.
5. Башҡортостанды аңлау өсөн нимә кәрәк, ти шағирә? Һеҙҙеңсә нисек? Фекерҙәрегеҙҙе дәлилләргә тырышығыҙ.

**6.** Башҡортостанды шағирә *йырым, тормошом* тип атай. Һеҙ быны нисек аңланығыҙ? «Нимә ул илһөйәрлек (патриотизм)?» тигән темаға әңгәмә ойоштороғоҙ.

**13-сө күнегеү.** Түбәндәге һүҙҙәрҙең баҫымына иғтибар итегеҙ.

Утта янма́ҫ, һыуҙа батма́ҫ. Бөтмә́ҫ-төкәнмә́ҫ. Ҡарамаҫта́н. Аңғармаҫта́н.

Юҡлыҡты белдереүсе *-маҫ/-мәҫ* ялғауҙары баҫымлы була, баҫым улар аша артабанғы ижектәргә лә күсә ала. Ә *-ма/-мә* ялғауҙары баҫымһыҙ була.

Сағыштырығыҙ: *ҡарамаҫта́н – ҡара́майынса.*

*Шәйехзада БАБИЧ*

## БАШҠОРТОСТАН

Арыҫландар үҙ ерен
Залимдарҙан таптатмаҫ,
Таптаймын тип атлаһа,
Башҡорт ҡаны атлатмаҫ.
Ил өҫтөнә сапҡан яу
Башҡорт йәнен ҡаҡшатмаҫ.
Бысраҡ табан аҫтында
Башҡорт намыҫы ятмаҫ.
Башҡортостан – гөлбостан,
Сөмбөлостан, нурбостан,
Шунда тыуған, шунда үҫкән
Башҡорт атлы арыҫлан!
Башҡортостан баҡсаһы –
Арыҫландар торған ер;
Арыҫландар бабаһы –
Ҡаһармандар йөрөгән ер;
Ҡаһармандар кәүҙәһен
Ҡосаҡлаған, күмгән ер...
Башҡортостан – гөлбостан,
Былбылстан, нурбостан,
Шунда тыуған, шунда үҫкән
Башҡорт атлы арыҫлан.

Уралҡайҙың аҫты алтын,
Өҫтө шиғыр, үҙе нур…
Башҡортостан – йәмбостан,
Илһамстан, шиғырстан,
Шунда тыуған, шунда үҫкән
Башҡорт атлы арыҫлан!
Башҡортостан йәшәһен,
Сөмбөлостан йәшәһен!
Шунда тыуып, шунда үҫкән
Арыҫландар йәшәһен!

1. Шиғырҙы үҙ алдығыҙға иғтибар менән уҡып сығығыҙ. Унда осраған яңы һүҙҙәрҙе яҙып алығыҙ, һүҙлек ярҙамында уларҙың мәғәнәләрен асыҡлап, руссаға тәржемә итегеҙ.
2. Шағирҙың Башҡортостанды нимәләр менән сағыштырғанына иғтибар итегеҙ: *гөлбостан, нурбостан, шиғырстан* һ. б. *Стан (остан, бостан) – ил* тигән һүҙ. Мәҫәлән, Башҡортостан – башҡорттар иле, Татарстан – татарҙар иле һ. б. Тимәк, автор Башҡортостанды *гөлдәр иле, нурлы ил, шиғырлы ил* һ. б. тип атай. Һеҙ быны менән килешәһегеҙме? Башҡортостанды – Тыуған илегеҙҙе – һеҙ нимә менән сағыштырыр инегеҙ?
3. Шиғырҙы тасуири итеп уҡығыҙ, унда шағирҙың Тыуған иленә, халҡына мөнәсәбәте нимәлә сағыла?
4. Ш. Бабичтың тормош юлына ҡағылышлы мәғлүмәттәр менән танышығыҙ, башҡа әҫәрҙәрен иҫегеҙгә төшөрөгөҙ.
5. Шиғырҙа осраған *таптатмаҫ, таптаймын* тигән һүҙ формалары хәҙерге телдә нисек ҡулланыла?

**14-се күнегеү**. *Стан* һүҙе ил тигәнде аңлата. Иленең исеменә *стан* һүҙе ҡушылған дәүләт исемдәрен яҙығыҙ.

Башҡортостан, …

*Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ*

## МӨҠӘДДӘС

*(«Донъя» китабынан)*

Тыуған ил, туған халыҡ, туған тел – иң мөҡәддәс тойғолар, изге төшөнсәләр.

Кеше Тыуған илен һәм туған халҡын һайламай, улар тыумыштан ата-әсәһе, тоҡомо, көнө-иле менән бергә бирелә.

Тыуған ил – һин тыуған, йәшәгән, гражданин булған ерең.

Туған халыҡ – һине кеше итешкән, ғөрөф-ғәҙәттәрен, телен биргән тоҡомдаштарың, шәхес итеп күтәргән милләтең.

Туған тел – ул ата-әсәң теле, донъяла тәү ишеткән һүҙең, рухи моңоң.

Тыуған иле, туған халҡы, туған теле булған кеше мең бәхетле.

Үҙ әсәһен, туған халҡын, туған телен һөйгән кеше генә бүтән әсәләрҙе, бүтән халыҡтарҙы һәм телдәрҙе ихлас яратырға, уны үҙенекендәй күреп ололарға һәләтле.

Милли ерлекһеҙ, туған тойғоһоҙ ысын илһөйәр һәм интернационалист булып булмай.

1. Автор өсөн Тыуған ил, туған халыҡ, туған тел – иң мөҡәддәс, йәғни иң изге, иң ҡәҙерле төшөнсәләр. Һеҙҙеңсә нисек – ошоларҙан да изгерәк нәмә юҡмы? «Минең Тыуған илем», «Минең туған халҡым», «Минең туған телем» темаларына фекер алышыу ойоштороғоҙ.
2. Һеҙ патриотмы? Ул нимәлә күренә? «Мин – патриот» тигән белешмә төҙөп яҙығыҙ.
3. Кем ул интернационалист? Һеҙ үҙегеҙҙе интернационалист тип иҫәпләй алаһығыҙмы?
4. Тыуған иле, туған халҡы, туған теле булмаған кешене күҙ алдына килтерегеҙ. Ундайҙар буламы? Уларҙы кем тип атайҙар? Рус телендә «Иван непомнящий родства» тигән төшөнсә бар – уны нисек аңлайһығыҙ? Фекер алышығыҙ.

*Назар НӘЖМИ*

## ҺИНЕҢ НИНДӘЙ УЛЫҢМЫН МИН?

Бөтәһе лә һинән килә миңә,
Бар булмышым һинән, бар моңом.
Әсәйемдең күҙ ҡарашы кеүек
Бөтә төҫөң, бөтә барлығың.

Тыуған илем, тыуған ерем,
Һинең ниндәй улыңмын мин?
Шуны беләм: һин йәшнәһәң әгәр,
Осҡоноңда булырмын мин.

Матурлығың һинең, бар сафлығың
Йөрәгемә инеп үрелгән.
Улар миңә әсә һөтө менән,
Әсә теле менән бирелгән.

Тыуған илем, тыуған ерем,
Һинең ниндәй улыңмын мин?
Шуны беләм: һин күкрәһәң әгәр,
Күкрәүеңдә булырмын мин.

Һинең исемең бар нәмәнән өҫтөн,
Һәр ауазың – миңә бер ғүмер.
Шуларҙан да әгәр мәхрүм булһаң,
Йәшәүҙәрең йәшәү түгелдер.

Тыуған илем, тыуған ерем,
Һинең ниндәй улыңмын мин?
Шуны беләм: яралана ҡалһаң,
Ҡан тамсыңда булырмын мин.

Бирелгән мәҡәлдәрҙең ҡайһылары шиғыр йөкмәткеһенә тап килә?

Атаң улы ғына булма, халҡыңдың да улы бул.

Айырылғанды айыу ашар, бүленгәнде бүре ашар.

Берҙәмлектә – көс.

Сит илдә солтан булғансы, үҙ илеңдә олтан бул.

Торған илдән тыуған ил артыҡ.

Тыуған ерҙәй ер булмаҫ, тыуған илдәй ил булмаҫ.

Атың барҙа ер таны, атаң барҙа ил таны.

Ил яҙмышы – ир ҡулында, ир яҙмышы – ил ҡуйынында.

# Уҙған ғүмер – ҡалған хәтер

*Әбүбәкер* УСМАНОВ

## БАШҠОРТТАРҘЫҢ ҒӘСКӘРИ ХЕҘМӘТЕ

Башҡортостандың Рус дәүләтенә ҡушылыуы Рәсәйҙең ҡеүәтен үҫтерә, тышҡы дошманға ҡаршы көрәшен еңеләйтә. Рәсәйҙең көнсығыш сик буйҙарын һаҡлап, һәр төрлө хәрби походтарҙа ҡатнашып, башҡорттар Рәсәй өсөн дәүләт әһәмиәтендәге эш башҡара. Улар XVI быуат урталарында уҡ рус ғәскәрҙәре составында Ливон немецтарына, Ҡырым ханлығына ҡаршы походта, XVII быуат баштарында Польша-Швеция ил баҫҡынсыларына ҡаршы көрәштә, Минин менән Пожарский ополчениеһында Мәскәүҙе Польша пандарынан азат итеүҙә, Пётр I батшаның XVIII быуат башында төрөктәргә ҡаршы ойошторған походында актив ҡатнашҡан.

Башҡорт атлыларының һуғышсан сифаттарын юғары баһалап һәм уны тулыраҡ файҙаланырға тырышып, батша хөкүмәте 1754 йылда башҡорттарҙы ғәскәри хеҙмәт менән генә шөғөлләнеүсе ярым хәрби казак хәленә күсерә. Бынан һуң улар Рәсәйҙең көньяҡ-көнсығыш сиктәрен йыл әйләнәһенә һаҡлай, хәрби походтарҙа ла күпләп ҡатнаша башлай.

Башҡорттарҙың ғәскәри хеҙмәте батша хөкүмәте өсөн бик файҙалы була, сөнки полктарҙы төҙөгәндә, ул бер ниндәй ҙә сығымдар тотмай – аттар ҙа, ҡорал да, кейем-һалым да, аҙыҡ-түлек тә башҡорттарҙың үҙ иҫәбенә етештерелә.

Батша хөкүмәтенең 1798 йылдың 10 апрелендәге указы менән башҡорт халҡы хәрби сословиеға индерелә. Улар

Тобол йылғаһынан алып Яйыҡ (Урал) йылғаһы буйлап Каспий диңгеҙенә тиклем меңәр саҡрымға һуҙылған сик буйын һаҡлайҙар.

Һәр яугирҙың икешәр аты булған, уларҙың береһен ул менеп йөрөгән, икенсеһенә ҡоралдарын, кейем-һалымын, аҙыҡтарын артмаҡлап йөрөткән. Башҡорт казактары һәйбәт һөңгө, ҡылыс, мылтыҡ һәм уҡ-йәйә менән ҡоралланған булған. Быларҙың бөтәһен дә улар үҙҙәре хәстәрләгән.

Алыҫ хәрби походтар өсөн башҡорт полктары бигерәк тә XIX быуаттың баштарында күпләп төҙөлә башлай. 1805 – 1807 йылдарҙа Францияға ҡаршы һуғышта 20 башҡорт атлы полкы ҡатнаша. Бигерәк тә 1812 йылғы Ватан һуғышы осоронда башҡорт халҡы Тыуған ил алдындағы үҙенең патриотик бурысын юғары кимәлдә аңлағанлығын күрһәтә. Наполеон армияһына ҡаршы көрәшеү өсөн, 28 башҡорт атлы казак полкы төҙөлә һәм һуғышҡа оҙатыла. Бынан тыш, тағы 24 башҡорт полкы илдең көнсығыш сиктәрен һаҡлап хеҙмәт итә.

1812 йылдың октябрендә Наполеон Мәскәүҙе ҡалдырып китә. Мәскәүҙән сигенгәндә, ул унда маршал Мортьены ҡалдыра, уға Кремлде һәм башҡа мөһим ҡоролмаларҙы шартлатырға ҡуша. Наполеондың бойороғон үтәп, Мортье янғындан имен тороп ҡалған һарайҙарҙы, йорттарҙы шартлата. Француздарҙың Кремлде шартлатырға ла ниәте була. Ләкин өлгөрмәй ҡалалар: Мәскәүгә рус казактары, партизандар менән бергә Беренсе башҡорт полкы атлылары бәреп инә, һәм шул арҡала Кремлдең ҡиммәтле ҡомартҡылары имен тороп ҡала.

1812 йылғы Ватан һуғышынан һуң да башҡорт атлылары Рәсәй алып барған һәр һуғышта ҡатнаша. 1828–1829 йылдарҙа Төркиәгә ҡаршы һуғышта башҡорт частары рус армияһын тулыландыра. Ике саф башҡорт полкы, шулай уҡ Ырымбур казактарынан төҙөлгән, яртыһын башҡорттар тәшкил иткән йәнә ике полк сик буйын һаҡлай. 1853–1856 йылдарҙағы Ҡырым һуғышында ла 4 башҡорт полкы ҡатнаша. Башҡорт яугирҙары Севастополь өсөн барған һуғышта айырыуса ҙур батырлыҡ күрһәтә.

Башҡорт ғәскәрҙәренең тарихы рус халҡының Ватан өсөн һуғыш тарихы менән айырылғыһыҙ бәйләнгән. Башҡорт

егеттәре, Дмитрий Пожарский, Пётр I, фельдмаршал Румянцев, атаҡлы полководецтар Суворов һәм Кутузов етәкселегендәге ҙур походтарҙа һәм һуғыштарҙа ҡатнашып, Рәсәйҙең көслө дошмандарына ҡаршы торорға өйрәнә, үҙҙәренең яугирлыҡ традицияларын үҫтерә.

Башҡорт атлыларының рус армияһы составындағы ғәскәри хеҙмәте был халыҡтарҙың дуҫлығын нығытты. Рус һалдаты башҡорт атлыһы йөҙөндә һәр ваҡытта ла тоғро иптәшен һәм яуҙашын күрҙе.

1. Текста аңлашылмаған ниндәй һүҙҙәр осраны? Уларҙы күсереп алығыҙ, русса мәғәнәһен асыҡлағыҙ.
2. Текстан хәрби терминдарҙы яҙып алығыҙ, уларҙың русса һәм башҡортса әйтелешенә, яҙылышына, башҡортса әйтелешендәге үҙгәрештәргә иғтибар итегеҙ.
3. Башҡорт ғәскәрҙәре ҡатнашҡан яуҙарҙың ваҡытын яҙып алығыҙ. Ул турала һеҙҙең нимәләр ишеткәнегеҙ, уҡығанығыҙ бар ине?
4. Текста һеҙ ниндәй күренекле полководецтарҙың исемдәрен осраттығыҙ? Улар тураһында һеҙ нимәләр беләһегеҙ? Үҙегеҙгә оҡшаған полководец тураһында кескәй белешмә төҙөп яҙығыҙ.
5. Башҡорттар ҡасандан башлап хәрби казак сословиеһында һаналған? Был хәл башҡорт халҡының тормошонда ниндәй үҙгәрештәргә килтергән?
6. Башҡорттарҙан башҡа тағы ниндәй казактар булған? Уларҙың исемдәрен яҙып ҡуйығыҙ. Ҡыҙыҡһынһағыҙ, Ә. Әсфәндиәровтың «Олатайҙарҙың бар тарихы...» тигән китабын уҡып сығығыҙ. Унда ошо тема буйынса бай мәғлүмәт табырһығыҙ.
7. Башҡорт халҡы үҙенең ғәскәри хеҙмәтенә арнап бик күп йыр сығарған. Уларҙың байтағы әле лә халыҡ хәтерендә: «Байыҡ», «Любизар», «Ҡаһым түрә», «Уйыл», «Әрме», «Ерән ҡашҡа атҡайым», «Эскадрон»...

**15-се күнегеү**. Айырыу билдәләрен белдергән өндө дөрөҫ уҡығыҙ.

| | |
|---|---|
| тәьмин | Мөьминә |
| мәсьәлә | маъмай |
| тәьҫир | тәьҫорат |

Тамаҡ төбө менән әйтелгән өн ошо бер нисә һүҙҙә генә осрай. Шуға ла уны махсус әйтергә өйрәнергә кәрәк. Ул өндө әйтә белмәгәндәр **тәьмин** һүҙен **тәмин, тәьҫир** һүҙен **тәҫир** тип әйтәләр. Боҙоп әйтелгән һүҙҙәр ҡолаҡҡа бик йәмһеҙ булып яңғырай. Был осраҡта халыҡ «ҡолаҡты яра» тигән һүҙҙәрҙе ҡуллана.

**16-сы күнегеү.** Һүҙҙәрҙе шәп итеп дөрөҫ уҡығыҙ.

Һыуһағанғалырмы?
Һаңғырауланмағанһыңмы?

Ошо һүҙҙәрҙе рус теленә тәржемә итә алырһығыҙмы?

## ИСЕМ

Предметтарҙы (йәғни тирә-яҡтағы әйберҙәрҙе, тәбиғәт күренештәрен, төрлө хис-тойғоларҙың, хәлдәрҙең һ. б. атамаларын) белдергән һүҙҙәр **исем (имя существительное)** тип атала.

Башҡорт телендә кешеләрҙе белдергән исемдәргә генә *кем?* (кто?) һорауы ҡуйыла. Ҡалған исемдәр *нимә?* (что?) һорауына яуап бирә.

**17-се күнегеү.** Һүҙҙәрҙе рус теленә тәржемә итегеҙ. Исемдәрҙең үҙгәрешендә ниндәй айырма бар икәнен асыҡлағыҙ.

1. Өҫтәлдең, йылғаның, әсәйҙең, тауҙың, ҡайындың, ҡайындарҙың.
2. Бала, балалар, кеше, кешеләр, әсәй, әсәйҙәр, ялан, яландар, тау, тауҙар, йылға, йылғалар.
3. Өҫтәлдә, ҡалала, өйҙә, урманда, урамда, йылғала.

**18-се күнегеү**. Һүҙҙәрҙе өлгөләгесә башҡорт теленә тәржемә итегеҙ, һорауҙар ҡуйығыҙ.

Өлгө: *комар (кто?) – серәкәй (нимә?)*

Муха, дерево, корова, камень, рыба, вода, человек, медведь, гора, сахар, репа, собака, телега, сосед, лодка, бабочка, морковь.

Ниндәй айырма күрәһегеҙ?

**19-сы күнегеү.** Йомаҡтарҙы диктант итеп яҙығыҙ.

1. Ҡойроғон ҡайсылап, ауыҙын тамсылап, ағасһыҙ, мөйөшһөҙ өй һалды еүешләп.
2. Гөлдөр-гөлдөр гөлдөрсөк, ҡыҙыл ситек, күк күлдәк.
3. Ағас башы туҡылдыҡ, туҡый-туҡый туҡ булдыҡ.

Йомаҡтарҙа ниндәй ҡоштар йәшеренгән?

**20-се күнегеү.** Түбәндәге һүҙҙәрҙең башҡортса исемдәрен яҙығыҙ.

Өлгө: *Липа – йүкә, ...*

1. Липа, клён, ольха, пихта, вяз.
2. Крапива, душица, щавель, подорожник, борщевик.
3. Волк, рысь, норка, куница, барсук.
4. Жук, оса, шмель, муравей, паук.
5. Щука, окунь, налим, форель, хариус.

## ҠОЛОЙ КАНТОН

*(Башҡорт халыҡ йыры)*

Ҡолой кантонды ла бай тиҙәр,
Ҡамсат та ғына бүрке бар, тиҙәр,
Үҙ хөкөмдәре лә үҙ ҡулында,
Ни ҡылһа ла ирке бар, тиҙәр...
Ҡолой кантондың да буйҙары
Буйға ғына үҫкән тармалай.
Ил күҙенән ҡанлы йәш ағыҙған –
Ҡолой кантон менән Ермолай...
Кантон да кантон килә, тиҙәр,
Килгән кантондарҙан ҡаҡшаныҡ.
Яуыз кантондарҙы ҡуя икән
Рәсәй генә тигән батшалыҡ.

1. Башҡорт кантондары тураһында һеҙ нимәләр беләһегеҙ? Улар ҡасан йәшәгәндәр, нимә менән шөғөлләнгәндәр, халыҡтың уларға мөнәсәбәте нисек булған?

2. Кем ул Ҡолой кантон? Халыҡ уны ни өсөн ҡарғай?
3. Текст өҫтөндә тасуири уҡыу күнекмәләре үткәрегеҙ. Йырҙың көйөн тыңлағыҙ – ул һеҙҙә ниндәй тойғолар уятты?
4. Кантондарға арналған тағы ниндәй йырҙар беләһегеҙ? Уларҙың исемдәрен яҙып ҡуйығыҙ.
5. Татар, сыуаш, мари һ. б. халыҡтарҙың ауыҙ-тел ижадында кантондар тураһында йыр юҡ. Ни өсөн икән? Һеҙ нисек уйлайһығыҙ? Үҙегеҙ таба алған тиклем оololарҙан, ата-әсәләрегеҙҙән һорап, уҡытыусы ярҙамында шул турала фекер алышығыҙ.
6. Ҡолой кантонды һеҙ нисек күҙ алдына килтерҙегеҙ? Уның һүрәтен төшөрөгөҙ.
7. Йырсылар оҙон көйлө башҡорт йырҙарының, ғәҙәттә, тәүге куплетын ғына башҡаралар. Һеҙ ҙә «Ҡолой Кантон»дың тәүге куплетын ятлап алығыҙ.
8. Иҫкә төшөрөгөҙ: нимә ул **йыр**? Нимә ул **таҡмаҡ**? Был жанрға хас үҙенсәлектәрҙе һанап сығығыҙ.

**21-се күнегеү.** 20-се күнегеүҙә бирелгән һүҙҙәрҙең тәржемәһе:

а) Липа – йүкә, клён – саған, ольха – ерек, пихта – ҡара шыршы, вяз – ҡарама.
б) Крапива – кесерткән, душица – мәтрүшкә, щавель – ҡуҙғалаҡ, подорожник – юл япрағы, борщевик – балтырған.
в) Волк – бүре, рысь – һеләүһен, норка – шәшке, куница – һыуһар, һуҫар, барсук – бурһыҡ.
г) Жук – ҡуңыҙ, оса – һағыҙаҡ, шмель – иңкеш, муравей – ҡырмыҫҡа, паук – үрмәксе.
ғ) Щука – суртан, окунь – алабуға, налим – шамбы, форель – бағры, бағыр, хариус – бәрҙе.

Һөйләмдә ҡулланғанда, исемдәр төрлөсә үҙгәрәләр. Башҡорт телендә исемдәр ялғауҙар ярҙамында үҙгәрә. Һәр ялғау исемгә ниндәйҙер мәғәнә өҫтәй: күплек, эйәлек, урын, йүнәлеш һ. б.

Башҡорт телендә һүҙ үҙе үҙгәрмәй, ә ялғау ғына өҫтәлә. Ә рус телендә һүҙҙең ялғауы ла булыуы, предлог та өҫтәлеүе, һүҙ үҙе лә үҙгәреүе мөмкин.

**22-се күнегеү.** Һөйләмдәрҙе рус теленә тәржемә итегеҙ. *Пальто* һүҙенең ҡулланылышында ниндәй айырмалар бар?

1. Минең пальтом ҡыҙыл төҫтә. 2. Кисә пальтомдың төймәһе төшкәйне. 3. Һинең пальтоң минең пальтоға бөтөнләй оҡшамаған. 4. Был пальтоны мин бик яратып кейәм. 5. Бындай кеҫә теге пальтола ла бар. 6. Һинең пальто минең пальтонан яңыраҡ икән.

Башҡорт телендә бөтә исемдәргә лә ялғау ҡушып була. Рус телендә үҙгәрмәй торған һүҙҙәр күп: *кино, пальто, метро.*

*Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ*

## РУДАСЫ ИСМӘҒИЛ ТАСИМ УЛЫ

*(Повестан өҙөк)*

Тасимовтар – аҫаба башҡорт. Боронғо ғәйнә ырыуынан. Ата-бабалары Кама йылғаһы буйында бик күп ер биләгән. Хәҙерге Ҡуян ауылын Тасим ҡарт үҙе нигеҙләгән. Шуға уны Тасим ауылы тип тә йөрөтәләр.

Был тирәгә ғәйнәләр бик борон замандарҙа уҡ Алтай яғынан килеп ултырғандар, тип һөйләй торғайны Исмәғилдең атаһы. Тәүҙә Чуд йылғаһы буйында төпләнгәндәр. Хәҙер ул йылға Чусовая тип атала. Уларҙың Мәмәтҡол менән Һөйөндөк исемле бейҙәре булған. Һөйөндөк бей уҡымышлы мулла булған. Әлеге Үрге Мулла, Түбәнге Мулла йылғаларының исеме ана шул Һөйөндөк мулланың исеменән ҡалған.

Иван Грозный Ҡазанды баҫып алғас, башҡорттар рус батшаһына баш һалғандар, үҙҙәре борондан йәшәгән ерҙәрен биләргә батшанан рөхсәт ҡағыҙы – грамота алғандар. Бының өсөн улар өй башына берәр һыҫар тиреһе иҫәбенән яһаҡ түләгәндәр.

Шулай, үҙ ерҙәренә үҙҙәре хужа булып, ғәйнәләр күпмеләр ваҡыт иркен йәшәгәндәр. Тик бындай тормош күпкә бармаған.

Бер заман Строганов тигән бер барон, бик күп кешеләр алып килеп, Каманың һул яғында ауылдар, заводтар һалдыра башлаған. Урмандарҙы күпләп ҡырҡыу арҡаһында, һунар

ерҙәре ҡыҫылған, етмәһә, Строгановтың кешеләре башҡорттарға төрлөсә насарлыҡ ҡылғандар, уларҙың бесәнлектәрен, иген баҫыуҙарын тапатҡандар, солоҡтарын туҙҙырғандар. Шунан ғәйнәләрҙең бер аҡһаҡалы, Мәскәүгә Михаил Федорович батшаның үҙенә барып, Строгановтың яуызлығы хаҡында еткергән. Батша, башҡорттарҙы яҡлап, Строгановтарҙы тыйырға бойороҡ биргән, ти.

Батшаның башҡорттарға биргән грамота ҡағыҙы менән ризалашмайынса, Строганов барон күп йөрөп ҡараған. Дәрәжәле таныштары күп бит инде. Был ерҙәр күп замандан бирле беҙҙеке, беҙ бында буш ерҙәргә батша рөхсәте менән килеп ултырҙыҡ, ти икән. Ниндәйҙер документтарға һылтанып маташҡан. Ғәйнәләрҙе батшаға ҡаршы яу ҡуптарыуҙа ғәйепләгән. Тағы әллә нимәләр тип алдашып ҡараған, әммә үҙенекен килтереп сығара алмаған. «Тырышһаң, ваҡытыңды йәлләмәй йөрөһәң, ата-бабалар яулап алған хоҡуҡтарыңды яҡларға була ул, улым, – ти торғайны атаһы Исмәғилгә. – Кешенекен алма, үҙеңдекен бирмә. Үҙ көнөңдө генә түгел, ил көнөн дә күрә бел. Кеше, иле менән бергә булғанда, көслө»...

Шулай итеп, төрлө ҡыҫым, баҫып алыу, талау, яндырыуҙарға ҡарамаҫтан, Тасим ҡарт ата-бабалар ерен һаҡлап ҡала алған барыбер.

Исмәғил үҫеп килгәндә, ғәйнә ерҙәрендә бер нисә заводтың мөрйәләре төтәй ине инде. Рудниктары ла әллә ни хәтле. Һунар ерҙәре йылға үрҙәрендә, тау эстәрендә генә ҡалып бара. Халыҡ хәҙер күберәк иген үҫтерә, урман ҡырҡа, күмер үртәй. Күптәр руда ҡаҙыу, уны заводтарға ташыу эшенә күскән.

Исмәғил дә, ата-бабаларының хәҙер онотола барған боронғо һөнәрҙәрен ташлап, руда эшенә тотондо. Ҡаҙнанан үтескә аҡса алып, рудник асып ебәрҙе, быға ағай-энеләрен, ауылдаштарын да йәлеп итте. Тасимовтарҙың рудниктары бер саҡ ун бишкә барып етте. Сығарған рудаларын улар Ягошиха, Үрге Йоҡ, Түбәнге Йоҡ заводтарына ташынылар, һәр йөктән, тинләп булһа ла, төшөм килә торҙо. Меңәрләгән бот руданың тиндәренән һумдар йыйылды. Ә улары рудниктарҙы киңәйтергә, иҡтисадты нығытырға мөмкинлек бирҙе.

Шулай итеп, ғәйнә башҡорттары үҙ ерҙәрендә төрлө мәғдән таптылар, рудниктар ҡорҙолар, сығарған рудаларын заводтарға ташынылар. Илленсе йылдарҙа Ҡуян ауылынан Тасимовтар, Ҡаҙмаҡтынан – Ишбулатовтар, Ҡолтайҙан Ҡолтаевтар билдәле рудопромышленниктарға әйләнеп бара ине инде.

* * *

Бер көндө Исмәғил туғандарын ҡунаҡҡа йыйып алды. Төптәнерәк кәңәш-төңәш итеү ине иҫәбе, һыйҙы ла мул әҙерләтте. Оҙон өҫтәл янында бер аҙ һыйланып алғас:

– Беҙгә хәҙер иҫкесә эшләү генә түгел, иҫкесә йәшәргә лә ярамай, – тине ул. – Беҙ былай үҙ эшебеҙҙе яҡшы беләбеҙ кеүек. Ләкин, минеңсә, былар ғына әҙ хәҙер. Беҙгә руданы эшкәртеү, иретеү һөнәрҙәрен дә өйрәнәһе ине. Йәштәребеҙҙе шуға уҡытыу хаҡында уйлайым мин. Тау мәктәптәрендә, мәҫәлән. Тик шуныһы – унда беҙҙең кеүек инородецтарҙы алмайҙар. Шуға әллә, мин әйтәм, үҙебеҙгә тау мәктәбе асырыуҙы юллап ҡарарғамы, тим. Теге Екатеринбургтағы кеүек кенә түгел, яңысараҡты. Мәҫәлән, кадет корпусы һымағыраҡты. Шул саҡта үҙебеҙҙән, беҙҙең халыҡтан да, мастерҙар, тау белгестәре сығыр ине. Ул саҡта үҙ көсөң, үҙ кешеләрең, үҙ уҡымышлыларың менән завод төҙөп, уларҙа руда ҡайнатыу эшен юлға һала алыр инек. Руда сығарыу ғына етмәй, уны эшкәртергә заводы ла, белгестәре лә кәрәк беҙгә. Ҡаҙнаның ундай мәктәп асырға аҡсаһы юҡ, тиһәләр, аҡсаны үҙебеҙ табабыҙ, уны тотоу сығымдарын да үҙебеҙ күтәрәбеҙ, тиергә мөмкин. Батшаның башы йомро, әлбиттә. Ләкин беҙгә лә юғалып ҡалмаҫҡа ине...

Йыйылған ҡунаҡтар, Исмәғил ҡорған пландарҙы буш хыял, тип ҡабул итһәләр ҙә, үҙ иҫәптәренә мәктәп асыу фекере менән ризалашҡандай булып таралдылар...

Шунан һуң Тасимов ике-өс тапҡыр Екатеринбургка барып ҡайтты. Элекке бер танышы – Ҡарамышев исемле уҡытыусы ярҙамында ундағы тау мәктәбенең эше менән танышты. Башҡорт булһа ла, русса уҡып, күптән ҡалала йәшәп, руслашып бөткән Ҡарамышев буласаҡ мәктәптең профилен, программаһын асыҡларға ярҙамлашты. Уның менән икәүләп мәктәп асыу тураһында ғариза яҙҙылар. Исмәғилдең төркисә үҙе яҙғаны оҙонораҡ, тарҡауыраҡ килеп сыҡҡайны. Ул үҫә барған тау промышленносы өсөн әҙерлекле кадрҙар кәрәклеген, ындай кадрҙарҙы урындағы халыҡ вәкилдәренән булдырыуҙы үҙенсә нигеҙләргә тырышҡайны. Тау мәктәбен Йоҡ заводтары янында асып, уның кадет корпусы тибында булыуын теләгәйне. Уҡыу программаһына металлургия, химия, механика, минералогия, геология, геодезия кеүек фәндәрҙе индергәйне.

Ғаризала техниканы, технологияны камиллаштырыу, тау промышленносын нығытыу юлдары ла күрһәтелгәйне. Был фекерҙәрен Исмәғил Тасимов төрлө иҫәп-хисаплауҙар, цифрҙар менән дәлилләргә тырышҡайны.

Ҡарамышев менән был хатты ныҡлап ҡарап, йыйнаҡлап, шымартып сыҡҡас, руссаға әйләндереп, писарҙан һәйбәтләп күсертеп алдылар. Ғариза төплө, ышандырғыс килеп сыҡты.

Китте Тасимов Санкт-Петербургтың үҙенә. Төрлө түрә-чиновниктар сәйерһенеп танышты ғариза менән. Үҙҙәренең башы етмәй, Сенатҡа ебәрҙеләр. Сенат, байтаҡ уйланғас, был мәсьәлә буйынса 1773 йылдың 21 октябрендә Екатерина I-нең үҙенә доклад менән мөрәжәғәт итте...

Тик, түрәләргә ышанма, һыуға таянма, тигән боронғолар. Исмәғил ышанған булды, әммә мәғрифәтле әбей батша тарафынан төп башына ултыртылды. Ул юллап йөрөгән уҡыу йортон батша, башҡорттар теләгәнсә, Йоҡ заводы янында түгел, ә Санкт-Петербургтың үҙендә, мәктәп итеп түгел, ә Тау училищеһы итеп асырға бойорҙо. Башҡаһы ла батшаса булды: башҡорттар юллап астырған училищеның ишектәре башҡорт балалары өсөн ябыҡ ине. Хатта училищены үҙ иҫәбенә тотошҡан Тасимовҡа ла унда үҙ улдарын уҡытыу насип булманы. Уҡымышлы булырға теләгән башҡорттарға батша һабаҡты шулай уҡытты.

Батшаның үҙенән алданған Исмәғил Тасимов ҡартайған көнөндә бер йыуаныс тапҡан булды: уға ярҙам итешкән Ҡарамышевтың улы Алексей, Мәскәү университетын тамамлағас, Тасимовтың ошо Тау училищеһына инеп уҡыны, аҙаҡ шунда уҡ металлургия менән химия фәндәрен уҡытты. Фән донъяһында оло исеме сығып, Рәсәй һәм Швеция Фәндәр академияһының ағза-корреспонденты дәрәжәләренә күтәрелде. Аҙағыраҡ, училище Тау институтына әйләнгәс, башҡорт балаларына ла бер нисә урын бирелде. Тик уларҙы Исмәғил Тасимов үҙе генә күрмәне.

1. Текстан быға са үҙегеҙгә таныш булмаған һүҙҙәрҙе яҙып алығыҙ, бергәләп уларҙың мәғәнәләрен асыҡлағыҙ, руссаға тәржемә итегеҙ. Уларҙың хәҙерге йәнле һөйләү телендә ҡулланылыу-ҡулланылмауын, уның сәбәптәрен асыҡлағыҙ.
2. *Баш һалыу, баш етмәү, төп башына ултыртыу* һүҙбәйләнештәрен һүҙмә-һүҙ тәржемә итегеҙ.

3. Текста *меңәрләгән бот руда* тураһында һүҙ бара. Ниндәй үлсәү берәмеге ул бот? Элек тағы ниндәй үлсәү берәмектәре булған? Ололарҙан, ата-әсәләрегеҙҙән һорап, уҡытыусы ярҙамында ауырлыҡ, оҙонлоҡ үлсәмдәрен асыҡлап яҙығыҙ.
4. Элек уҡыуҙы *һабаҡ алыу (һабаҡ уҡыу)* тигәндәр. Һеҙ әле ниндәй фәндәрҙән һабаҡ алаһығыҙ? Һәр уҡыған предметығыҙға характеристика бирегеҙ, уларҙың тормошта ни өсөн кәрәклеге тураһында фекер алышығыҙ.
5. *Башы йомро, башы етмәй* тип кемгә ҡарата һәм ниндәй осраҡта әйтәләр? Руссаға тәржемә итеп яҙығыҙ.
6. Исмәғил Тасимов асыласаҡ мәктәптең *кадет корпусы* тибында булыуын теләй. Ниндәй уҡыу йорто ул кадет корпусы? Республикала әле бер нисә кадет корпусы бар. Ғәҙәти мәктәптән улар нимәһе менән айырыла?
7. Исмәғил Тасимов асыласаҡ тау мәктәбендә балаларға ниндәй фәндәрҙе уҡытыуҙы кәрәк тип иҫәпләй? Текстан табып, ул фәндәрҙең исемдәрен яҙып алығыҙ, күмәкләп уларға характеристика бирегеҙ.
8. Тасим ҡарттың улы Исмәғилгә биргән кәңәштәрен текстан табып уҡығыҙ, уға үҙегеҙҙең ҡарашығыҙҙы белдерегеҙ.
9. Әҫәрҙә ҡайһы осор ваҡиғалары тураһында һүҙ бара? Һеҙ уны нисек күҙ алдына килтерҙегеҙ? Шул турала, үҙегеҙ белгәндәргә таянып, әңгәмә ойоштороғоҙ.
10. Исмәғил Тасимовтың тау мәктәбе астырыу тураһында тырышлығы, асылда, нимә менән бөтә? Ни өсөн тип уйлайһығыҙ? Был уҡыу йорто әле нисек тип атала, ҡайҙа урынлашҡан?

**23-сө күнегеү.** Һүҙҙәрҙе рус теленә тәржемә итегеҙ. Башҡорт һәм рус телдәрендә был осраҡта ниндәй айырмалар бар?

Сана, саналар, ҡайсы, ҡайсылар, коньки, конькиҙар, саңғы, саңғылар, сәғәт, сәғәттәр, күҙлек, күҙлектәр, һәнәк, һәнәктәр, шахмат, шахматтар, каникул, каникулдар, салбар, салбарҙар, ҡапҡа, ҡапҡалар, тәүлек, тәүлектәр.

Рус телендә күплек формала ғына ҡулланыла торған исемдәр байтаҡ. Башҡорт телендә ундайҙар юҡ.

**24-се күнегеү.** Һөйләмдәрҙе уҡығыҙ. Ҡалын хәреф менән бирелгән һүҙҙәрҙең күплек ялғауы ул предметтарҙың күплеген белдерәме, юҡмы, аңлатып бирегеҙ.

1. **Ағиҙелкәйҙәрҙең** аръяғынан
Атып алдым кейек ҡоштарын.

2. Наполеонға тәхет кәрәк,
Үҙ еренә һыймаған.
**Мәскәүҙәргә** килеп ингәс,
Ул да үҙен һынаған.
*(Башҡорт халыҡ йырҙарынан)*

3. Мин был һүрәтте Фариза **еңгәмдәргә** барып эшләнем. *(С. Агиш)*

4. **Ришаттар** урмандан ҡайтҡанда, уларҙың өйө тапҡырында оло машина ултыра ине. *(Р. Солтангәрәев)*

Башҡорт телендә яңғыҙ предметты белдергән һүҙҙәргә лә күплек ялғауы ҡушыла ала.

**25-се күнегеү.** Һөйләмдәрҙә хаталар юҡмы? Булһа, төҙәтегеҙ.

1. Уның ҡул сәғәттәре 5 минутҡа артта.
2. Октябрҙең һуңғы йәкшәмбеһендә сәғәттәрҙе бер сәғәткә артҡа күсерә торғайныҡ.
3. Ҡышҡы каникулдарҙа олатайымдарға ҡунаҡҡа барырға уйлап торам.
4. Быйылғы каникулдарҙа бер ҡайҙа ла бара алманым.

*Таңһылыу ҠАРАМЫШЕВА*

## МАЛАЙҘАР

Бер ҡарауҙа һөйҙөрә
Һөйкөмлө һөйәгегеҙ,
Осҡонло күҙҙәрегеҙ,
Эскерһеҙ һүҙҙәрегеҙ.
Тал сыбыҡ – эйәрегеҙ,
Күк үлән – өҙәңгегеҙ,
Һайтылдап еләһегеҙ,
Һаһылдап көләһегеҙ.
Килер уйын ҡуйыр саҡ,
Тал сыбыҡтан туйыр саҡ,

Ир ҡорона тулыр саҡ,
Донъя һеҙгә булыр саҡ.
Елкәнгә юҡ ыңғырсаҡ,
Күңелдә юҡ оронсаҡ –
Әлегә һеҙ ҡолонсаҡ,
Шундай сая, уйынсаҡ.
Әммә һеҙгә – Ер күҙе,
Ҡарай йыһандың үҙе:
Уларҙың бар таяуы –
Малайҙарҙың уяуы.

1. Таныш булмаған һүҙҙәрҙе яҙып алығыҙ. Уларҙың тура мәғәнәләрен асыҡлағыҙ. Уларға шағирә үҙенсә ниндәй мәғәнә һалған?
2. Малайҙарҙың бала сағын шағирә нисек күҙ алдына килтерә? Һеҙҙең бала саҡҡа оҡшағанмы?
3. Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ. 3-сө һәм 5-се строфаларға иғтибар итегеҙ, малайҙарҙың иңенә төшәсәк бурыс тураһында фекер алышығыҙ.

**26-сы күнегеү.** Икенсе строфаның һәр юлындағы һуңғы һүҙгә баҫымдарҙы ҡуйығыҙ. Айырма бармы?

**27-се күнегеү.** Бирелгән темалар буйынса һөйләшегеҙ.

1. Башҡорт һәм рус телдәрендә исемдең айырмалары бик күп. Шуларҙы табырға тырышығыҙ.

2. 8-се, 10-сы күнегеүҙәге миҫалдарҙы файҙаланып, башҡорт һәм рус телдәрендәге исемдәрҙең «һөйләшеүен» ойоштороп ҡарағыҙ.

**28-се күнегеү.** Һүҙбәйләнештәрҙе башҡорт теленә тәржемә итегеҙ.

Голубая шаль, голубое небо, голубой платок, голубое платье, голубой цветок, голубая краска.

*Лев ТОЛСТОЙ*

## КЕШЕГӘ КҮПМЕ ЕР КӘРӘК?

Пахомдың ун биш десятина ере бар ине. Шунда ул иген сәсте, бесән сапты. Малын көттө. Уның игене лә уңды. Малы ла күр булды. Бәләкәй генә булһа ла, урманы ла бар ине. Ул шунда йорт ҡаралтыларын йүнәтерлек ағасын да киҫте.

Әммә был тыныс тормош оҙаҡҡа барманы – ауыл малы уның баҫыуына, сабынлығына төшә башланы. Пахом

мужиктарға, малығыҙҙы ебәрмәгеҙ, тип күп тапҡырҙар әйтеп ҡараны. Һөҙөмтә булманы. Игенемде, сабынлығымды тапаталар, тип судҡа ла мөрәжәғәт итте, бер нисә мужикка штраф һалдыртты. Мужиктар менән дошманлашып бөттө. Тегеләре Пахомдың донъяһына ут һалыу менән янай башланылар.

Шулай ҡаңғырып йөрөгәндә, бер үткенсе сауҙагәр килеп сыға быларға. Волганың арғы яғынан ҡайтып килә икән. Пахом уға ер етмәүгә зарлана, ҡайҙа иркенерәк ер бар икән, тип ҡыҙыҡһына. Сауҙагәр үҙенең башҡорттар йәшәгән яҡтан килеүен әйтә.

– Унда ер шул тиклем күп, йыл буйына барһаң да, әйләнеп сығырлыҡ түгел, – ти ул. – Ә халыҡ шул тиклем йомарт, үҙе бер ҡатлы. Бына мин биш мең десятина һатып алдым. Десятинаһы егерме тингә генә төштө. Үҙҙәрен әҙерәк һыйланым, әлбиттә, күренеклерәктәренә халаттар, келәмдәр бүләк иттем, ҡалғандарына сәй тараттым. Уныһына тағы йөҙ һум самаһы китте.

Пахом сауҙагәрҙе ауыҙын асып тыңланы. Тегеһе купчий ҡағыҙын да сығарып күрһәткәс, уғата дәртләнде. Сауҙагәр китеү менән, үҙе лә ул килгән яҡҡа – башҡорттар йәшәгән ергә барырға булды. Ат егеп, хеҙмәтсеһе менән юлға сыҡтылар, ҡалаға һуғылып, сауҙагәр әйткәнсә, төрлө бүләктәр алдылар.

Улар бик оҙаҡ барҙылар. Етенсе көн тигәндә, биш йөҙләп саҡрым ер үтеп, бер башҡорт йәйләүенә килеп сыҡтылар.

Сауҙагәр дөрөҫ һөйләгән икән: башҡорттар далала, йылға буйына ҡоролған кейеҙ тирмәләрҙә йәшәп яталар. Ер һөрмәйҙәр, иген сәсмәйҙәр. Бөтә малдары, өйөр-өйөр аттары далала йөрөй. Тирмәләрҙән йыраҡ түгел ҡолондар бәйле тора. Уларға көнөнә ике мәртәбә инәләрен килтереп ҡушалар. Ҡатындар бейә һауалар, ҡымыҙ бешәләр, ҡорот яһайҙар. Ә ирҙәре көндәр буйы ҡымыҙ, сәй эсәләр, ит ашайҙар, ҡурай тарталар. Күңелле йәшәйҙәр.

Пахом килеп күренеү менән, башҡорттар йыйылып китте, ҡунаҡты уратып алдылар. Араларында берәүһе русса белә икән, Пахом уға ер мәсьәләһе буйынса килеп сығыуын әйткәс, бөтөнләй йәнләнеп киттеләр: ҡунаҡты тирмәгә индереп, келәмгә ултырттылар, аҫтына мамыҡ мендәрҙәр һалдылар. Үҙҙәре лә тирәләп ултырҙылар ҙа ҡунаҡты ҡымыҙ, сәй менән һыйлай башланылар. Һарыҡ һуйып, һарыҡ ите ашаттылар. Пахом килтергән бүләктәрен таратып биргәс, былар

тағы ла ҡыуанып киттеләр. Үҙ-ара ҡыҙыу ғына һөйләшеп алғандан һуң, тәржемәсегә әйтергә ҡуштылар.

– Улар әйтә, – тине тәржемәсе, – һин беҙгә оҡшаның, тиҙәр. Беҙҙә бүләккә ҡаршы бүләк биреү ғәҙәте бар. Һин беҙҙе бүләкләнең, беҙ һиңә нимә бүләк итәйек? Беҙҙә һиңә нимә оҡшаны? – тип һорайҙар.

– Миңә һеҙҙең ерҙәрегеҙ бигерәк оҡшаны, – ти Пахом. – Беҙҙә ер бик аҙ, булғаны ла һөрөп бөтөлгән. Ә һеҙҙә ер бик күп, үҙе шул тиклем яҡшы. Мин бындайҙы күргәнем юҡ.

Тәржемәсе уның һүҙҙәрен аңлатҡас, башҡорттар үҙ-ара байтаҡ ҡына көлә-көлә ҡысҡырып һөйләштеләр ҙә Пахомға ҡарап тынып ҡалдылар.

– Улар әйтә, һинең бүләктәрең өсөн күпме теләйһең, шул тиклем ер бирәбеҙ, ҡайҙан теләй, шунан алһын, тиҙәр.

Ултыра торғас, башҡорттар үҙ-ара бәхәсләшә башланылар. Ни эшләп бәхәсләшәләр, тип һорағас, тәржемәсе Пахомға:

– Берәүҙәре, был турала старшинанан һорарға кәрәк, ти, икенселәре, унһыҙ ҙа мөмкин, ти.

Шул ваҡыт төлкө бүрек кейгән бер кеше күренде. Бөтәһе лә аяғүрә баҫып тынып ҡалдылар.

– Ошо инде старшина, – тип аңлатты тәржемәсе.

Пахом, килтергән бүләктәре араһынан иң яҡшы халатын алып, янына күп кенә сәй өҫтәп, старшинаға бирҙе. Старшина түргә үтеп ултырғас, башҡорттар уға ҡыҙып-ҡыҙып ниҙер аңлаттылар. Старшина тыңланы-тыңланы ла, Пахомға русса өндәште:

– Ярар, – ти, – мөмкин. Ер күп. Ҡайҙан оҡшай – ал.

– Йылы һүҙегеҙ өсөн рәхмәт, – тине Пахом. – Һеҙҙең ерегеҙ күп, миңә улай күп кәрәкмәй. Тик ул ерҙе, купчий төҙөп, минең исемгә теркәп ҡуйырға ине.

– Мөмкин, – тине старшина. – Беҙҙең писарь бар. Купчий төҙөп, ҡалаға барып, кәрәкле мисәттәрен дә һуғырбыҙ.

– Хаҡы күпме булыр һуң? – тип һораны Пахом.

– Ерҙең хаҡы беҙҙә берәү – көнөнә мең һум.

Пахом аңламаны:

– Нисек инде – көн? Унда нисә десятина була һуң?

– Беҙ ерҙе көнләп үлсәйбеҙ, көнләп һатабыҙ. Көн эсендә күпме ерҙе урап сығаһың – шул һинеке. Хаҡы – мең һум.

– Көн эсендә бит күп ерҙе урап сығырға мөмкин, – тип аптыраны Пахом.

Старшина көлөп ебәрҙе:

– Күпме ерҙе урайһың – бөтәһе лә һинеке. Тик шундай шарты бар: ҡояш байыуға, башлаған ереңә килеп өлгөрмәһәң, аҡсаң менән хушлашаһың.

Пахом бик ҡыуанды. Ҡымыҙ эсеп, һарыҡ ите ашап, тағы байтаҡ ултырҙылар. Иртә таңдан йыйылырға һүҙ ҡуйышып таралышҡанда, төн уртаһы еткәйне инде.

Пахом төнө буйы йоҡлай алманы. Йәйге оҙон көндә илле саҡрымдан да кәм ер үтмәм, моғайын, тип уйланы ул. Ул тиклем ерҙә күпме иген сәсәсәген, күпме мал көтәсәген самаланы, күпме хеҙмәтселәр яллаясағы тураһында хыялланды. Йомшаҡ түшәктә борғоланып ята торғас, таңға табан ғына йоҡлап китте...

Ҡояш сыҡмаҫ борон, старшина башҡорттарҙы, Пахомды эйәртеп, бер түбәләскә алып килде.

– Бына, – тине ул Пахомға, – бөтә был күренеп ятҡан ерҙәр беҙҙеке. Һайла.

Пахомдың күҙҙәре яна: ҡап-ҡара тупраҡлы тип-тигеҙ ҡылғанлы дала, уйһыуыраҡ ерҙәрҙә бил быуарынан үлән.

Старшина төлкө бүреген сисеп ергә һалды:

– Бына, ошо билдә булыр. Ошонан башлайһың, ошонда киләһең. Күпме ер урап сығаһың – һинеке булыр.

Пахом аҡсаһын сығарып бүрек өҫтөнә һалды. Кафтанын сисеп, билен быуҙы, ашантыларын ҡуйынына тыҡты, ҡулына бәләкәс көрәк тотоп, ҡояштың тәүге нурҙары күренеү менән, далаға табан атланы.

Тәүҙә ул ашыҡмай ғына барҙы. Бер саҡрым самаһы үткәс, көрәген алып, бер нисә кәҫ аҡтарып алды ла, күренеңкерәп торһон өсөн, уларҙы өҫтө-өҫтөнә һалып, ары китте. Бара торғас, йоҡоһо бөтөнләй осто. Пахом аҙымдарын ҡыҙыулатты, кәҫтән билдәләр яһай-яһай ары китте. Ун саҡрым самаһы үткәс, ултырып ашап алды, атлауы еңелләште. Тағы шулай биш саҡрымлап үткәс, артына әйләнеп ҡараны – түбәләстә ултырып ҡалған кешеләр ҡырмыҫҡа кеүек кенә күренә ине. «Инде һулға тартырға, урата башларға кәрәк», – тип уйланы Пахом. Ул ныҡ тирләгәйне, хәле бөтә башлағанын тойҙо. Ашап, ял итеп алырға булды. Ятып торманы, йоҡлап китермен, тип ҡурҡты.

Һулға боролғас та Пахом, билдәләр яһай-яһай, бик күп барҙы. Инде боролайым тағы һулға, урата башлайым, тиһә,

тағы ла матурыраҡ ерҙәр башлана, ҡалдырып китергә йәлләп, һаман бара бирә. Шулай бара торғас, ҡурҡып китте: бик шашып китмәнемме, урап сығырға хәл етерме? Шунан һуң ғына ул, ҡырҡа һулға боролоп, кешеләр ултырып ҡалған түбәләскә табан китте.

Инде бына түбәләс асығыраҡ күренә башланы. Тик Пахом шыбыр тиргә батты, яланғас аяғы ныҡ ауырта, быуындары ҡалтырай башланы. Ултырып ял итке килә, тик ҡояш көтөп тормай – ул инде байырға яҡынлаша. Уға ҡараған һайын, Пахом аҙымын тиҙләтә. Инде аяҡтарын нисек алыштырып баҫҡанын һиҙмәй. Тора-бара ул йүгерә башланы. Ә түбәләскә һаман йыраҡ әле. «Нәфсемде тыя алманым, эште боҙҙом, ҡояш байығансы барып етә алмам, ахыры», – тип уйлай ҙа тағы йүгерә. Тын алыуы ауырлашты, күкрәге тимерсе күрегендәй ҡабара, йөрәге дарҫлап тибә.

Бына ҡояш горизонтҡа барып терәлде. Бына ул яртылаш батты... Пахом, һуңғы көсөн йыйып, алға ташланды. Ҡапыл ҡараңғы булып китте. Ә түбәләс – бына ғына, бер ынтылһаң етерлек. «Бөттө, тырышыуҙарым бушҡа булды...» – тигән уй ярып үтте Пахомдың башын. Ул түбәләскә ҡараны. Унда старшина ултыра, ҡорһағын ҡосаҡлап, һаһылдап көлә. Уның алдында төлкө бүрек ята, бүрек өҫтөндә – Пахомдың аҡсаһы. Башҡорттар ниҙер ҡысҡыралар, ҡул болғайҙар... Пахом аңлап ҡалды: түбәләстең башында бит әле ҡояш күренә, шуға уны дәртләндереп ҡул болғайҙар, саҡыралар... Һуңғы көсөн йыйып, ул түбәләскә атылып менде, менде лә гөрҫ итеп бүреккә ҡарап ауҙы, ҡулы менән уны тотто ла иҫен юғалтты...

– Ай, маладис! Бик күп ергә эйә булдың! – тип ҡысҡырҙы старшина, ҡысҡырып көлә-көлә.

Хеҙмәтсеһе Пахомға ярҙамға ташланды, уны күтәреп алмаҡсы булды. Әммә һуң ине инде: хужаһының ауыҙынан ҡан китте, күҙҙәре мәңгелеккә йомолдо – ул үлгәйне.

Башҡорттар, уны йәлләп, телдәрен сыртлатып, бик оҙаҡ баш сайҡап торҙолар. Хеҙмәтсеһе, Пахомдың көрәген алып, хужаһының буйы оҙонлоғонда өс аршын ер үлсәп, ҡәбер ҡаҙҙы ла уны күмеп ҡуйҙы.

**1.** Һүҙлек эше башҡарығыҙ: таныш булмаған һүҙҙәрҙе яҙып алып, мәғәнәләрен асыҡлағыҙ, руссаға тәржемә итегеҙ, улар менән бер нисә һөйләм төҙөгөҙ. Уларҙың ҡайһы һүҙ төркөмөнә ҡарағанлығын әйтегеҙ.

**2.** Ниндәй һүҙ ул – *йылы һүҙ?* Һалҡын, һыуыҡ, әсе һ. б. һүҙҙәр ҙә буламы?

**3.** *Көлә-көлә, ҡыҙып-ҡыҙып, тыңланы-тыңланы ла, яһай-яһай* һүҙҙәренең яһалышын аңлатығыҙ: уларҙы бер мәртәбә генә ҡулланып ҡарағыҙ – мәғәнә нисек үҙгәрҙе? Тағы ла миҫалдар килтерегеҙ.

**4.** *Десятина* – боронғо майҙан үлсәү берәмеге. Хәҙерге заманда майҙан үлсәү берәмектәрен барлап сығығыҙ, уларҙың элекке заманда ҡулланылған аналогтарын табырға тырышығыҙ.

**5.** *Йоҡо осто* һүҙбәйләнешенең мәғәнәһен икенсе һүҙҙәр менән алмаштырығыҙ. Мәғәнә үҙгәреше һиҙеләме?

**6.** Хикәйәлә тасуирланған ваҡиғалар башҡорт тарихындағы ниндәй хәлдәрҙе сағылдыра? Шуға оҡшаш хәлдәр әлеге тормошобоҙҙа күҙәтелмәйме? Әңгәмә ойоштороғоҙ.

*Әхиәр ХӘКИМОВ*

## ЕҘҮКӘЙ ЯНЫНДА

*(«Һауыр ҡумта» романы буйынса)*

Еҙүкәй Уралдан башҡорт бейҙәрен көтә. Күпме илселәр ебәреп ҡараһа ла, ғәйнә, юрматы, үҫәргән, ҡыпсаҡ, түңгәүер бейҙәрен саҡырып килтерә алмағайны, хәҙер үҙҙәре, килеүҙәрен белдереп, хәбәр ебәргәндәр. Тимәк, мөһим йомоштары бар. Үҙ-ара һүҙ беркеткән булыуҙары ла мөмкин. Шулай булмаһа, биш-алтыһы бер юлы атҡа атланыр инеме ни? Әгәр, ысынлап та, бер төптән эш итергә уйлаһалар, быныһы, һис шикһеҙ, үҫәргән бейе Юлыш батырҙың ғына этлеге булыр. Бөтә бәлә шунан сыға. Бүтән ырыуҙар әллә ҡасан уҡ исламға күсеп бөттө, ә бының ырыуы һаман ҡарыша: бер ҡараһаң, Алланы ла таный кеүек, ә асылда һаман Т ә ң р е г ә табыныуын дауам итә.

Уныһы бер хәл. Иң яманы – Урҙаға баш бирмәй маташа. Яһаҡ түләмәй башланы, ғәскәргә яугирҙарын ебәреүҙе лә туҡтатты. Уға эйәреп, башҡалары ла ситкә ҡарай башланы. Етмәһә, унлап яһаҡсыны тотоп ябып ҡуйғандар. Ә бит Еҙүкәй башҡорт атлыларынан айырым төмән төҙөргә бик теләгәйне. Уйлауынса, ҡыйыу башҡорт атлыларынан торған төмән һуғыштың иң хәл иткес мәлдәрендә теләһә ниндәй дошманды

туҙҙырырлыҡ көс булыр ине. Юҡ, бер ҙә ыңғайға килмәй Юлыш. Башҡорттарҙы бергә туплап, үҙ аллы дәүләт төҙөргә хыяллана, хан булырҙай кеше әҙләй.

Еҙүкәйҙең тешен һыҙлатҡан тағы бер хәл – Һабрау исемле башҡорт сәсәне. Уныһы ла, йыр йырлап, ҡобайыр әйтеп, халыҡты Урҙаға ҡаршы ҡотортоп йөрөй. Бер ваҡыт, эҙенә төшөп, ай буйы күҙәтеп йөрөй торғас, урдуғаға тотоп килтергәйнеләр үҙен. Тик нисектер ҡасып ҡотолдо. Тотҡон сағында аслыҡтан, тән яҙаһынан яфа сиккән Һабрау элеккенән дә яманыраҡ уҫаллашты – Урҙанан мыҫҡыллап көлә, башҡорттарҙы берҙәмлеккә өндәй, Еҙүкәйгә ҡаршы ҡоторта. Тағы ҡулға килеп эләкһә, белер ине әмир уны нишләтергә!..

Еҙүкәй, сырайын һытып, өҫтөндәге тунын һелкеп төшөрҙө. Асыуланып тамаҡ ҡырыуы булды, сатыр ишеге асылып, әмирҙең тоғро хеҙмәтсеһе ҡарт яугир Ҡаратай килеп инде.

– Истәктәр килеп еттеме? – тип һораны Еҙүкәй, тыныслanырға тырышып.

– Улар кисә үк килде бит, бөйөк әмир, – тип яуапланы Ҡаратай.

– Яҡшы. Оло тирмәлә табын әҙерләнһен. Төмән, мең башлыҡтарын саҡырығыҙ. Мулла менән Дәүрән дә килһен... – Еҙүкәй табында булырға тейешле кешеләрҙең исемдәрен һананы...

Башҡорт бейҙәренең ысынлап та мөһим йомош менән килеүҙәрен, һөйләшеүҙең еңел генә булмаясағын Еҙүкәй шунда уҡ аңланы. Сөнки башҡорттар үҙҙәренең бик асыулы булыуын һис йәшермәй. Етмәһә, ғәҙәттәгесә алып килә торған бүләк-күстәнәстәре лә күренмәй ине. Әмир быға иғтибар итмәҫкә тырышты, муллаға эйәреп, аҡрын ғына битен һыйпаны ла, табын башланыуын белдереп, бер туҫтаҡ ҡымыҙҙы тын да алмай бушатып ҡуйҙы...

Ашап-эскән арала һүҙ бәхәсле нәмәләргә ҡағылманы. Табын бик мул, ҡунаҡтарҙың алды һәр төрлө тәмле ашамлыҡтар менән тулған. Еҙүкәйҙең хеҙмәтселәре, хужаның эйәк ҡағыуынан илһамланып, уҙышып-уҙышып көләмәс һөйләй, ҡунаҡтар һаһылдап көлә. Көлкө тынғанараҡ арала, улар ҙа, берәй ҡыҙыҡлы хәлде иҫкә төшөрөп, табынды тағы дәртләндереп ебәрә.

Тигеҙ ерҙә йәйрәп аҡҡан һыу кеүек, табын шулай тыныс ҡына дауам итте. Ҡурылған ҡор, сел, өйрәк, һарыҡ итенән һуң табынға ҡаҙы, эҫе һурпа, унан бишбармаҡ, ике-өс

төрлө былау килтерҙеләр. Ҡымыҙ туҫтаҡтары туҡтауһыҙ йөрөп торҙо. Аҙаҡҡа табан, ашъяулыҡты тултырып, йөҙөм, өрөк емештәре, сәтләүек һибелде, көмөш табаҡтарҙа боҙҙай һалҡын былтырғы ҡарбуз, ҡауын ҡуйылды.

Ниһайәт, аш-һыу йыйып алынды. Ҡунаҡтарҙың һәр береһенең алдына алтын-көмөш биҙәкле сәйнүк менән сәй, сынаяҡтар теҙелгәс кенә, ике яҡ та түҙемһеҙләнеп көткән төп һүҙгә күстеләр.

– Һыйыңа рәхмәт, сардар. Ашыңа ҡаршы аш бирергә яҙһын, – тине түңгәүер бейе. – Әммә...

Шуны ғына көткәндәй, уны бүлдереп, мулла һикереп торҙо:

– «Әммәһе» шул, ғали йәнәп, былар янъял сығарырға йөрөй!

– Эйе, яһаҡсыларҙы таш баҙға ябып ҡуйғандар, иманһыҙҙар!

– Бөйөк Сыңғыҙхан йолаһын мыҫҡыл иттеләр!

– Баштарын яра һуғырға кәрәк! – тип бүтәндәре лә ярһып ҡысҡырышырға кереште. Берәүһе хатта хәнйәрен һурып сығарҙы. Шау-шыу ҡупты. Яңы ғына бер-береһен һыйлап, тыныс ҡына һөйләшеп ултырған кешеләр, тимәҫһең. Күҙҙәре йылтырай, йоҙроҡтары төйөлгән, тештәре ыржайған. Әгәр Еҙүкәй, рөхсәт биреп, баш ҡаҡһа, башҡорт батырҙарын ботарлап ташларға әҙерҙәр.

Ләкин хужа рөхсәт бирмәне. Уң ҡулын күтәреүе булды, бөтәһе, мыш-мыш килеп, үҙ урынына ултырҙы. Дөрләп янырға торған ялҡын һүрелде. Әмир башҡорт бейҙәренә һөҙөп ҡарап сыҡты ла, ана, күрҙегеҙме, бөтәһенә лә үҙегеҙ ғәйепле, тигән кеүек, араларында иң өлкәненә, түңгәүер бейенә, ҡарашын туҡтатып, һүҙ башланы:

– Яһаҡсыларҙы ҡайтарырһығыҙ. Уларға бөйөк ханыбыҙ хужа. Бүтән бер кем түгел... Килеп яҡшы иткәнһегеҙ, хөрмәтле бейҙәр. Теләк-ниәттәрегеҙҙе ишетәйек.

Түңгәүер бейе иптәштәренә ҡарап алды. Тегеләре өндәшмәй генә ризалыҡ биргәс, тыныс ҡына тауыш менән һөйләп китте:

– Үҫәргәндән – биш, ҡыпсаҡтан – дүрт, түңгәүерҙән алты егетебеҙ һеҙҙә аманат булып ята. Шуларҙы ҡайтарырға бойор, сардар. Улар иҫән-һау ҡайтып етеү менән, яһаҡсыларың иреккә сығыр... – Быны ишеткәс, табын яңынан тауышлана башланы. Түңгәүер бейе быға иғтибар итмәне, тауышын

күтәрмәй генә артабан дауам итте: – Данлыҡлы әмир үҙе лә беләː быныӊ кеүек ығы-зығы – һыу өҫтөн сайпылтҡан шаян ел генә. Күршеләр араһында ни булмаҫ... Ат саптырып килеүебеҙҙеӊ сәбәбе бүтән...

– Тыӊлайбыҙ, хөрмәтле аҡһаҡал, – тине Еҙүкәй. Ҡунаҡтыӊ «күршеләр» тип, үҙҙәренеӊ Урҙа ҡарамағында түгеллеген иҫкәртеүенә ни тиклем асыуы килһә лә, быны тышҡа сығарманы. Нығыраҡ гөжләй башлаған табынға һөҙөп ҡарап, тауышты баҫты. Ул тәүҙән үк ғәҙел, киӊ күӊелле әмир булып күренергә ниәт тотҡайны.

– Үҙеӊ беләһеӊ, сардар, – тип ялғап алып китте түӊгәүер бейе, – Яйыҡтан төньяҡта борон замандарҙан бирле башҡорт ырыуҙары йәшәй. Ниӊә унда күпләп ғәскәр ебәрәһеӊ, ниӊә малыбыҙҙы талатаһыӊ?.. Унан килеп, хәҙер Иҙел буйы халыҡтары менән дә, башҡалары менән дә сауҙа итә алмайбыҙ. Киткән бер каруаныбыҙ юҡ була. Ошомо ғәҙеллек? Ошомо күршелек хаҡы?

– Мәскәү менән сауҙа итә башлағанһығыҙ бит, – тине сардар, сырайын һытып. – Аҡйылғанан бөйөк Иҙелдеӊ үренә сығып, йәнлек тиреләре, бал, балауыҙ, өйөр-өйөр йылҡы, көтөү-көтөү ваҡ мал оҙатаһығыҙ... Ҡорал, икмәк ҡайтартаһығыҙ икән...

– Ул юлды юрматылар, бүләрҙәр борондан белә. Беҙ ул яҡҡа үтә алмайбыҙ әле. Көнөбөҙ ошонда. Ә һеҙ Яйыҡтан төньяҡҡа, Һаҡмар, Юшатыр буйҙарына ҡул һуҙҙығыҙ. Тағы һуғышабыҙмы? Тағы ҡан ҡоябыҙмы?

Быны ишетеп, ишек төбөнә яҡыныраҡ ултырған Дәүрән һикереп торҙо:

– Йолҡош! Йәшәгән ерҙәрегеҙ, эскән һыуҙарығыҙ – барыһы хандыҡы. Ҡасандан бирле башҡа булып киттегеҙ әле? Һуғыша, имеш! Иртәгә үк ояғыҙҙы туҙҙырам!

– Ултыр, Дәүрән, – тине Еҙүкәй. – Ярһыма. Башҡорттар – ҡан-ҡәрҙәштәребеҙ, кесе туғандарыбыҙ.

– Эйе, әмир, беҙ – төрки халыҡ, – тип, Юлыш батыр тәү тапҡыр һүҙгә ҡушылды. – Әммә эш кемдеӊ ҡайһы ырыуҙан булыуында түгел. Кем беҙҙеӊ менән татыу булһа, ғәҙел сауҙа итһә, ҡыҙ биреп, ҡыҙ алһа, шуны туған, тибеҙ. Күрше хаҡы – Тәӊре хаҡы...

– Динһеҙ! – тип ҡысҡырҙы мулла. – Бөтә тирә-яғыӊ мосолман булып бөткән, бер һинеӊ ырыуыӊ әле һаман Тәӊрегә табыныуын ташламай. Тфү-тфү!

– Ярай, мулла, ваҡыты еткәс, Юлыш бей үҙе изге динебеҙгә бөтөнләй күсер, – тине Еҙүкәй. Үҙе һаман ыңғайға һыпырҙы: – Аҡһаҡал әйткән әсирҙәр ҡотҡарылыр. Тик һеҙ ҙә яһаҡсыларҙы ҡайтарығыҙ... Ишетегеҙ барығыҙ ҙа: башҡорттарҙан мал яһағы биш урынына өсәүгә ҡалдырылһын.

– Ә ҡан яһағы? – тип һораны Юлыш, Еҙүкәйҙең тар маңлайына ҡарап.

– Һүҙем шул хаҡта, Юлыш батыр, – тине Еҙүкәй. Ул, эсендә ҡабара барған асыуын тышҡа сығармаҫҡа тырышып, тешен ҡыҫты. Урҙаның даны, бөйөк хандарҙың тормошо, башҡорттарҙың батырлығы, тоғролоғо тураһында оҙон-оҙон итеп һөйләне. Урҙа менән башҡорттарҙың дуҫлығы, туғанлығы хаҡында телгә алды. Имеш, улар һәр ваҡыт татыу йәшәгән, башҡорт ғәскәрҙәре, ҙур яуҙарҙа ҡатнашып, Урҙа хандарынан маҡталған. Әмир, әлбиттә, ҡунаҡтарҙың хәтере ҡыҫҡалыҡҡа, тарихты белмәүҙәренә иҫәп тота. Башҡорт ырыуҙарының элек-электән Урҙа менән көрәшеүен, тарҡаулыҡтары арҡаһында ғына сараһыҙҙан буйһоноп йәшәүен онотҡандарҙыр, тип уйлай. Үҙ һүҙенән үҙе дәртләнеп, ул мыйыҡ аҫтынан һиҙелер-һиҙелмәҫ көлөмһөрәп ултырған Юлышҡа өндәште:

– Юҡ, даның алыҫ яңғыраған Юлыш батыр, һеҙ Урҙаға ят түгел. Башҡорттан миңә ҡан яһағы кәрәкмәй. Иркенлектә йәшәгеҙ. Һауалағы ҡош, һыуҙағы балыҡ кеүек үҙ иркегеҙҙә булығыҙ. Әммә бынау хәүефле заманда дуҫ-ишең, яуҙаш туғандарың булмаһа, донъя көтөү мөмкин түгел. Ана, Мәскәү дәүләте көсәйеп килә. Иҙелдең был яғына килеп сыҡһа, уны туҡтатыу ҡыйын буласаҡ. Эйе, Юлыш батыр. Хәүеф көнбайыштан килә. Дошмандың юлына, ҡалҡан булып, бергәләп баҫайыҡ. Ер-һыу кипкәс, Иҙел аръяғына сапҡын яһаясаҡбыҙ. Атҡа атланған һәр яугир үҙ ғүмеренә етерлек байлыҡ тейәп ҡайтасаҡ.

– Урыҫта үсебеҙ юҡ, сардар. Ул ҡайҙа ла, беҙ ҡайҙа? Ишетеүебеҙсә, бик һөнәрле, тыныс холоҡло, киң күңелле халыҡ икән. Ер-һыуҙары бай, тиҙәр. Ниңә улар тып-тыныс йәшәп ятҡан башҡорт иленә йомолһон?! Килә ҡалһалар, күҙ күрер, – тине Юлыш.

– Яуабың шулмы? Диндәре ят бит урыҫтарҙың! Телдәре башҡа! Заманында Урҙаны бик таныйҙар ине, хәҙер Сыңғыҙхан тәртиптәрен һанға һуҡмайҙар. Эт, һимерһә, эйәһен талай,

тиҙәр. Улар ҙа шулай. Тейешле яһаҡты түләүҙән баш тартыуҙары етмәгән... – тип, әмир тәү тапҡыр тауышын күтәрҙе. Күҙҙәрен асыулы йылтыратып бер аҙ ултырҙы ла ҡысҡырып уҡ өҫтәп ҡуйҙы: – Юҡ, Юлыш батыр! Башы һау саҡта, Еҙүкәй быға юл ҡуймаç!..

– Унынһы һинең эш, – тине Юлыш. – Беҙ һуғышыуҙан туйып бөткәнбеҙ. Ырыуҙар тыныслыҡ теләй. Килеүебеҙҙең маҡсаты ла шул. Һаҡмар, Юшатыр буйҙарынан ғәскәрҙәрең Яйыҡтың был яғына сыҡһын. Башҡорттарҙың һеҙгә буйһоноп йәшәргә теләмәгәнен тағы бер тапҡыр иҫеңә төшөрәбеҙ. Татыу күрше булып йәшәһәң, кәрәк саҡта ярҙамға килербеҙ. Юҡ икән...

– Эйе, эйе, – тип түңгәүер бейе лә унын һүҙен ҡеүәтләне.

Еҙүкәй һаман да асыуын баҫырға, һөйләшеүҙе үҙ файҙаһына борорға тырышты:

– Һуң бит, хөрмәтле бейҙәр, мин һеҙҙең зыянға һөйләмәйем!

– Һүҙҙән арҡан ишеп булмай, баһадир, – тине Юлыш. – Башҡорттарҙың күбеһе ултыраҡ тормошҡа күсеп бөтөп бара. Иген игергә, боронғо һөнәрҙәрҙе яңыртырға...

Саҡ тыйылып, сыҙап ултырған Еҙүкәйҙең йөҙө бер ағарҙы, бер күгәрҙе. Ахырҙа, түҙмәне:

– Юҡ! – тип ҡысҡырып ебәреүен һиҙмәй ҙә ҡалды. – Кейеҙ тирмә урынына ағас өй һалып, ояһынан сыҡмаç ҡарт төлкө кеүек, һаçып ятыр инегеҙме? Һеҙ урыçмы ни ерҙә соҡонорға? Батырҙың урыны – ат өҫтөндә! Табышы – уҡ, һөңгө осонда!

Былай һүҙ көрәштереп ултырыуҙың мәғәнәһе ҡалмағайны. Юлыш, иптәштәренә ымлап, күҙен ишеккә күсерҙе.

– Ҡабаланма, Юлыш бей, – тине Еҙүкәй, тағы асыуын баҫып. – Татыу йәшәргә, тиһегеҙ. Йә, анау йолҡош сәсәнегеҙ Һабрауҙың ҡылығы татыулыҡҡа алып барамы? Һәр һүҙе – ҡотҡо. Имеш, Урҙа башҡортто ҡол итмәксе, бөтә Уралды баҫып алмаҡсы. Ялған бит был! Мин һеҙгә яҡшылыҡ теләйем. Тотоп бирегеҙ шул сәсәнде!..

Быға ла Юлыштың яуабы әҙер булып сыҡты:

– Сәсән – халыҡтың күңел ҡошо. Нисек тотаһың уны? Хатта һеҙҙең һаҡсыларығыҙ тырнағынан да ысҡынып ҡайтҡан бит. Әле, ҡайҙа барһа, һеҙҙең ҡунаҡсыллыҡты «маҡтай», тәненең утлы тимер менән көйҙөргән урындарын күрһәтә.

– Бөйөк әмиргә тел тейҙерә бит был оятһыҙ! – тип, мулла Юлыш яғына ҡарап төкөрөндө.

Еҙүкәйҙең һаҡсылары, мыш-мыш килеп, асыуҙарынан ни эшләргә белмәне. Береһе, башындағы төлкө бүреген шап иттереп келәм өҫтөнә ташланы ла, Юлыштың ҡаршыһына баҫып:

– Һаҡ бул, Юлыш! Бөйөк әмир Еҙүкәйҙең дә сыҙамына сик барҙыр. Ҙурлап, әҙәмгә һанап, кәңәш иткәнде инәлеү, тип уйланыңмы? Әҙәп ҡайҙа? – тип ыҫылданы.

Уны төмән, мең башлыҡтары элеп алды:

– Эттәребеҙ ас. Шуларға тураҡлап бирәйек был битһеҙ йолҡоштарҙы! Күрше, имеш!

– Бойор, әмир, аяҡтарынан аҫам!

– Уй, юлбаҫар! Еҙүкәйгә шарт ҡуйып ултыра!

Күмәкләп ҡунаҡтар өҫтөнә ябырылдылар. Дөп тә дөп килеп, йоҙроҡ һуғышы башланып китте. Сылтырашып сәйнүксынаяҡтар ватылды, яман һүгенеү тауыштары яңғыраны.

– Етте! – тип бойорҙо Еҙүкәй, был йәмһеҙ күренеште бер аҙ күҙәтеп ултырғас.

– Эт ояһында көслө, – тип Юлыш урынынан торҙо, күн бүреген баҫырып кейҙе.

Түңгәүер аҡһаҡалы, субырлап ҡанаған танауын һөртөп, ишеккә ыңғайланы. Хужаға табан боролоп:

– Хөрмәтеңә рәхмәт, сардар. Бына, ғәҙеллегеңде лә күрһәттең, – тине.

– Ултырығыҙ! Һин дә ултыр, аҡһаҡал. Былар, – Еҙүкәй яугирҙарына ымланы, – хәрбиҙәр, һуғыш суҡмарҙары. Иғтибар итмәгеҙ… Таяҡ та тотҡан ерҙән һынмай. Ҡайтығыҙ, аҡһаҡалдарығыҙ менән тыныс ҡына кәңәш ҡороғоҙ. Башҡорт еренән биш мең ғәскәр килеү менән, Һаҡмар, Юшатыр буйҙарындағы ғәскәрҙәрем был яҡҡа сығарылыр...

Еҙүкәй усын уҫҡа һуғыуға, әле генә, йәмһеҙ шаулашып, ҡунаҡтарҙы сәйнәп ырғытырға әҙер торған төмән, мең башлыҡтары, этешеп-төртөшөп ишеккә ябырылды. Әмир, бер төмән башлығын туҡтатып, ҡунаҡтарҙы оҙатырға, артыҡ хөрмәт күрһәтмәҫкә, шулай ҙа һәр береһенә ҡыйбатлы елән кейҙерергә ҡушты, тотҡондарҙы ла ҡотҡарырға бойорҙо.

– Аңланым, әмир, – тип яуапланы төмән башлығы. – Кәңәшем дә бар ине... Был үҫәргән, ҡыпсаҡ, түңгәүер истәктәренә ҡыҫымды көсәйтеү кәрәк. Бигерәк тә Юлышҡа...

– Хуп! Күк Ҡорт ерҙәренә Дәүрәнде оҙат. Ике ҡушын бир. Тамаҡтары, көнкүрештәре Юлыш өҫтөндә булһын! – тине Еҙүкәй.

Яңғыҙы ҡалғас, оҙаҡ ултырыуҙан ойоған аяҡтарын яҙылдырып, урынынан торҙо. Башҡорт бейҙәре алдында асыуын, ғәрлеген йәшерә алмауына йәне көйҙө уның.

1. Таныш булмаған һүҙҙәрҙе яҙып алып, уларҙы дөрөҫ әйтергә өйрәнегеҙ, мәғәнәләрен асыҡлап, бер нисә һөйләм төҙөп яҙығыҙ. Был һүҙҙәрҙең күбеһенең хәҙерге телдә ни өсөн ҡулланылмауын аңлатығыҙ.
2. Тексты ҡысҡырып уҡып сығығыҙ. Йөкмәткеһен һөйләгеҙ.
3. *Һүҙ беркетеү, бер төптән эш итеү, баш бирмәү, әҙенә төшөү, сырай һытыу* һүҙбәйләнештәренең мәғәнәләрен асыҡлап, руссаға тәржемә итеп яҙығыҙ.
4. Текста ошоға оҡшаған тағы ниндәй һүҙбәйләнештәр таптығыҙ? Уларҙы күсереп алып, мәғәнәләрен асыҡлап, бер нисә һөйләм төҙөп яҙығыҙ.
5. *Һөҙөп ҡарау* тигәнде һеҙ нисек аңланығыҙ? Тағы нисек ҡарарға мөмкин:
   *мыҫҡыллы ҡарау;*
   *тура ҡарау;*
   *ҡырын ҡарау;*
   *... ҡарау һ. б.*
   Кем күберәк тапты? Тапҡан һүҙбәйләнештәрегеҙҙең һәр береһенең мәғәнәләрен аңлатығыҙ, улар менән һөйләмдәр төҙөгөҙ.
6. Башҡорттарҙың Урҙаға ҡаршы көрәшеүен Еҙүкәй Юлыш батырҙың *этлеге* тип атай. *Этлек* һүҙе бында ниндәй мәғәнәлә ҡулланылған? Ошо мәғәнәне биреү өсөн, башҡа хайуандарҙың исемен ҡулланып, мәҫәлән, *һыйырлыҡ, кәзәлек, һарыҡлыҡ* һ. б. тип әйтеп буламы? Ни өсөн?
7. Кем ул Һабрау сәсән? Ни өсөн автор уны *Еҙүкәйҙең тешен һыҙлатҡан бер хәл* тип атай? Текстан быға миҫалдар килтерегеҙ.
8. Һабрау тураһында белгәндәрегеҙҙе иҫегеҙгә төшөрөгөҙ, һеҙ тағы ниндәй башҡорт сәсәндәрен beләһегеҙ? Уларҙың исемдәрен яҙып ҡуйығыҙ.
9. Текстан *Күрше хаҡы – Тәңре хаҡы; Эт һимерһә, эйәһен талай; Һүҙҙән арҡан ишеп булмай; Эт ояһында көслө* әйтемдәрен табып, уларҙың ниндәй осраҡта ҡулланылыуын асыҡлағыҙ. Рус телендә был мәғәнәне биреүсе әйтемдәрҙе табығыҙ.

10. Текста телгә алынған йылға исемдәрен яҙып алығыҙ. Улар хәҙер нисек аталалар, ҡайһы тирәлә ағалар?
11. Текста осраған ҡорал исемдәрен яҙып алығыҙ. Һүрәттәрен төшөрөгөҙ.
12. Текстан ашамлыҡ исемдәрен яҙып алығыҙ. Был ашамлыҡтар хәҙер бешереләме? Һеҙҙең уларҙы ашап ҡарағанығыҙ бармы? Берәй ашамлыҡтың нисек бешерелеүен тасуирлап яҙығыҙ (үҙегеҙсә рецепт төҙөгөҙ).
13. Текстан кеше исемдәрен яҙып алығыҙ. Уларҙы хәҙерге исемдәр менән (үҙегеҙҙең исемдәр менән) сағыштырығыҙ. Айырма бармы? Бындай үҙгәреште аңлатығыҙ.
14. Текстан башҡорт ырыуҙарының исемдәрен яҙып алығыҙ. Улар тураһында һеҙҙең элек ишеткәнегеҙ бар инеме? Һәр ырыуҙың ҡайһы төбәктә йәшәгәнлеген асыҡлағыҙ, үҙегеҙҙең ҡайһы ырыуға ҡарағанлығығыҙҙы асыҡлағыҙ.
15. Ни өсөн мулла Тәңрегә табыныуҙы динһеҙлек тип атай? Шул турала әңгәмә ойошторoғоҙ.
16. Тексттың йөкмәткеһенән сығып, әҫәрҙә ҡайһы осор ваҡиғалары тураһында һүҙ барғанлығын әйтегеҙ, фекерегеҙҙе миҫалдар менән дәлилләгеҙ.
17. Боронғо башҡорттарҙың тормошона арналған тағы ниндәй әҫәрҙәр беләһегеҙ? Уларҙың йөкмәткеһен, авторҙарын иҫегеҙгә төшөрөгөҙ.
18. Башҡорт халҡының был осорҙағы тормошона характеристика биреп ҡарағыҙ – улар нимә менән шөғөлләнгәндәр, кемгә, нимәгә ҡаршы көрәшкәндәр, ни өсөн еңелеүгә дусар булғандар?Характеристикағыҙҙы кескәй хикәйә рәүешендә яҙығыҙ.

**Һүҙ күрке – мәҡәл**

Ир ҡайғыһы илдә.

Ирҙәр берекһә, ил таралмаҫ.

# Ил һаҡлап, азатлыҡ даулап

## БАШҠОРТ ИХТИЛАЛДАРЫ

1557 йылда Башҡортостан үҙ ирке менән Рус дәүләтенә ҡушыла. Был турала ике яҡтың да шарттарын билдәләгән килешеү төҙөлә. Уның буйынса, башҡорттар билдәле күләмдә һалым түләргә, ә батша хөкүмәте, уларҙың үҙ ерҙәренә аҫабалыҡ хоҡуғын танып, эске эштәренә ҡыҫылмаҫҡа, башҡа дингә көсләмәҫкә йөкләмә ала.

Ләкин батша хөкүмәте үҙ һүҙендә тормай. Ул төрлө һалымдарҙы арттырыу, башҡорт ерҙәрен баҫып алыу, көсләп суҡындырыу юлына баҫа. Быға ҡаршы башҡорттар XVII – XVIII быуаттар һуҙымында бик күп тапҡырҙар ихтилалға күтәрелә. Уларға ситтән килгән халыҡтар – мариҙар, мишәрҙәр, сыуаштар, татарҙар, мордвалар ҙа ярҙамға килә.

Ҡайһы бер ихтилалдар бер нисә йыл буйына бара. Иң ҙур ихтилалдар 1662 – 1664 йылдарҙа (Һары Мәргән етәкселегендә), 1681 – 1684 йылдарҙа (Сәйет батыр етәкселегендә), 1704 – 1711 йылдарҙа (Алдар батыр етәкселегендә), 1735 – 1740 йылдарҙа (Ҡараһаҡал етәкселегендә), 1755 – 1756 йылдарҙа (Батырша етәкселегендә), 1773 – 1775 йылдарҙа (Салауат Юлаев етәкселегендә) була.

Ихтилалдар барышында башҡорттар ҙур юғалтыуҙар кисерә. 1735–1740 йылдарҙағы ихтилалда ғына ла 60 меңгә яҡын кеше һәләк була. Башҡорттар үҙ ерҙәренең күп өлөшөн юғалта. Көнсығыштағы Тобол йылғаһынан Волгағаса, төньяҡтағы Чусовая йылғаһынан Уралғаса йәйрәп ятҡан элекке Башҡортостандың Ағиҙел йылғаһы бассейнындағы бәләкәй генә бер өлөшө тороп ҡала.

Шулай ҙа был ихтилалдар ҙур әһәмиәткә эйә булды. Улар батша хөкүмәтен башҡорттарҙы аҫабалыҡ хоҡуғынан мәхрүм итеү, крепостной крәҫтиәнгә әйләндереү, христиан диненә күсереү пландарынан баш тартырға мәжбүр итте.

1. Белешмәне иғтибар менән уҡып сығығыҙ, йөкмәткеһен үҙләштерегеҙ.
2. Үрҙә телгә алынған ихтилалдарға үҙегеҙ белгәндәрен дә өҫтәп, исемлеген яҙығыҙ. Уларҙың берәйһе тураһында ентеклерәк белешмә төҙөгөҙ.
3. Башҡорт ихтилалдарының сәбәбен аңлатығыҙ. Ихтилал башлыҡтары тураһында ижад ителгән әҫәрҙәрҙе иҫегеҙгә төшөрөгөҙ.
4. *Суҡыныу* һүҙенең мәғәнәһен асыҡлағыҙ. Ни өсөн батша хөкүмәтенең рус булмаған башҡа халыҡтарҙы суҡындырырға тырышыуын аңлатып ҡарағыҙ. Ул ҡайһы халыҡтарҙы суҡындырыуға өлгәшкән, ә ҡайһыларын – юҡ?
5. Тарихи Башҡортостанды күҙ алдына килтерергә тырышығыҙ. Әлеге Башҡортостандан ситтә тороп ҡалған башҡорттар, уларҙың бөгөнгө яҙмышы тураһында фекер алышығыҙ.
6. Башҡортостан менән сиктәш өлкәләрҙәге ауыл, йылға, күл исемдәренә иғтибар итегеҙ, улар араһында башҡортсаларын табығыҙ.

**29-сы күнегеү**. Тел көрмәлдергестәрҙе тәүҙә яйлап, һуңынан шәп итеп уҡығыҙ.

1. Бисара бесәй бысраҡ баҫҡыс аҫтына боҫҡан.
2. Өҫтәге өс өҫтәлде өс оҫта яһаны.

**30-сы күнегеү.** Шиғырҙы яттан һөйләгеҙ.

## КӨҘГӨ БОЛОТ

Көҙгө болоттоң
Ике күҙе бар;
Бер күҙе – ямғыр,
Ә бер күҙе – ҡар.

*(С. Муллабаев)*

**31-се күнегеү.** «Башҡорт ихтилалдары» тексының беренсе абзацындағы *ҡыҫылмаҫҡа, көсләмәҫкә, йөкләмә* һүҙҙәренә баҫым ҡуйығыҙ.

**32-се күнегеү.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.

## НӘФРӘТ ҺӘЙКӘЛЕ

*Беҙҙең яҡта ҡарттар «Тәфтиләү»ҙе*
*ҡысҡырып йырларға ҡушмай.*

«Тәфтиләү» ҙә тигән ҡарғыш йырын
Йырламағыҙ берүк ҡысҡырып.
Йәберенән, башҡорт нәфрәтенән
Еребеҙ бит китер ысҡынып…

…Утҡа ырғытылған сабыйҙарҙың
Илауҙары килә алыҫтан.
Нисек инде ҡысҡырып йырламаһын
Ирмен тигән башҡорт-арыҫлан!

*(Ә. Үтәбай)*

## САЛАУАТ

*(Башҡорт халыҡ йыры)*

Салауат нисә йәшендә,
Йәшел ҡамсат бүрке башында.
Салауаттың йәшен һораһағыҙ,
Егерме лә ике йәшендә.

Аҡ ҡуянҡайҙарҙың балаһы,
Ҡолаҡ осҡайында ҡараһы,
Булғадир булған шул Салауат –
Данлы ғына Юлай балаһы.

Салауат менгән кир аттың
Күкрәк түшкәйҙәре киң икән.
Яуҙарға әйҙәп сапҡан осҡор –
Салауат та тигән ир икән.

Йүгереп тә мендем тауҙарға,
Аҡ кейеккәйҙәрҙе ауларға.
Юлай улы батыр, ай, Салауат
Ҡаршы сапты килгән яуҙарға.

Салауаттың менгән кир аты
Батыр ғәскәрҙәргә юл башлай.
Кир ат өҫтөндәге Салауат,
Яуға дәртләндереп, йыр башлай.

1. Һүҙлек ярҙамында текстағы таныш булмаған һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен асыҡлағыҙ. Улар менән бер нисә һөйләм төҙөгөҙ, һөйләмдәрегеҙҙе руссаға тәржемә итегеҙ. Был һүҙҙәрҙең әлеге ваҡытта ҡулланылыу-ҡулланылмауын тикшерегеҙ.
2. Йырҙа халыҡтың Салауатҡа белдергән мөнәсәбәтен асыҡлағыҙ. Ул ниндәй һүҙҙәрҙә күренә?
3. Йырҙың тексынан сығып, батырҙы нисек күҙ алдына килтерҙегеҙ?
4. Йырҙың фонояҙмаһын тыңлағыҙ, көйөн өйрәнегеҙ. Тәүге куплетты ятлап, йырлағыҙ.

**33-сө күнегеү.** Текстан *кем?* һәм *нимә?* һорауҙарына яуап биргән икешәр һүҙ табығыҙ.

## УРТАҠЛЫҠ ҺӘМ ЯҢҒЫҘЛЫҠ ИСЕМДӘР

Башҡорт телендә лә, рус телендәге кеүек, **яңғыҙлыҡ исемдәр (собственные имена существительные)** һәм **уртаҡлыҡ исемдәр (нарицательные имена существительные)** бар. Яңғыҙлыҡ исемдәр һәр ваҡыт баш хәреф менән яҙыла.

**34-се күнегеү.** Тексты уҡығыҙ, унан яңғыҙлыҡ исемдәрҙе генә яҙып алығыҙ.

Беҙ Олойылға буйлап үргә күтәреләбеҙ. Һул яҡта – текә тауҙар, улар өҫкә ҡоларҙай булып торалар. Баштары – ҡуйы урманлыҡ, ара-тирә һерәйеп таштар сығып торалар. Шул бейек тауҙарҙы ярып, йылғанаҡтар төшәләр, тағы ла һикәлтә тау һырты китә, урманлыҡ, ташлыҡ… Һәр бер бүлексәнең үҙенә күрә исеме бар. Биргетау, Уртатау, Йыланлытау, Тирмәнтау тип йөрөтәләр уларҙы. Ә уң яғыбыҙҙа – әлеге Оло-

йылға. Ул яҫы таштар өҫтөнән бөҙрәләнеп-бөҙрәләнеп, тәпәшәк кенә ярҙарына бәрелә-һуғыла ашҡынып аға. Бер туҡтауһыҙ сылтырай. Әллә ниндәй күңелле, дәртле моң сығарғандай була уның тауышы. Олойылғаның аръяғынан тағы ла тауҙар теҙелешеп китәләр. Уларҙың биттәре уҫаҡлыҡ менән ҡапланған. Ләкин өҫтө – һул яҡтағы кеүек урманлыҡ түгел, ә һары хәтфә кеүек йәйелеп киткән игенлек.

*(Н. Ҡәрип)*

**35-се күнегеү.** Башҡорт халыҡ йыры «Салауат»та осраған һүҙҙәрҙең аңлатмалары менән танышығыҙ. Уларҙы иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ.

**Ҡамсат** – диңгеҙ ҡамаһы (калан). Камчатка ярымутрауының исеме ошо йәнлектең исеменән алынған.

**Булғадир** – дәрәжә: *бригадир*, генерал чинына тап килә.

**Кир** – ат төҫө (һарғылт туры).

**36-сы күнегеү.** Һорауҙарға яуап бирегеҙ.

1. Беҙ йәшәгән республика нисек атала?
2. Башҡортостанда ниндәй ҡалалар бар?
3. Республикабыҙҙың ниндәй йылғаларын беләһең?
4. Өфө ҡалаһы янында ниндәй йылғалар аға?
5. Ағиҙел йылғаһы буйында тағы ла ниндәй ҡалалар бар?
6. Башҡортостандағы ниндәй бейек тауҙарҙы беләһең?

**37-се күнегеү.** Шиғырҙы яттан яҙығыҙ.

## ЙӨРӘГЕМ

Йөрәгем –
ҡәберлек минең,
Унда үткәндәр илай.
Йөрәгем –
сәңгелдәк минең,
Унда киләсәк тулай!..

*(Р. Ғарипов)*

Шиғыр йөкмәткеһе буйынса уҡылған ҡайһы текстҡа тап килә?

*Мирас ИҘЕЛБАЕВ*

## ХУШЛАШЫУ

*(«Юлай улы Салауат» китабынан)*

«Император»ҙың саҡырыуын Салауатҡа Кинйә Арыҫланов еткерҙе. Бригадир Тулва һыуы яры буйлап саҡрымдарға һуҙылған лагерҙа яугирҙары араһында йөрөй ине. Ул Пугачев штабы яғына китеп барған Кинйәне шунда уҡ таныны. Атына етеҙ генә атланып, әле ныҡлап тапалырға өлгөрмәгән ҡуйы үләнле туғай буйлап уға ҡаршы сапты. Осрашҡас, икеһе лә аттарынан төштөләр, ҡул бирешеп күрештеләр.

– Күрәм, ниндәйҙер яңы хәбәр бар, Кинйә ағай.

– Бар шул. Петр Федорович батша һөйләшергә теләй һинең менән, Салауат.

– Ни хаҡында икән?

– Уныһын әйтә алмайым. Батшабыҙҙың башында ниҙәр барын ҡайҙан белеп бөтәһең? Бар әле батшабыҙ янына, ни әйтерен тыңла. Беҙ һинең менән аҙаҡ та өлгөрөрбөҙ.

Пугачёв менән һөйләшер һүҙ Салауатты артыҡ борсоманы: көн һайын осрашып, алдағы хәлдәрҙе ентекләп тикшереп, үлсәп сығалар. Ҡайһы саҡта тиктомалға ла саҡыртып, гәпләшеп ала «император». Кинйәнең йонсоу йөҙөнә иғтибар итте Салауат. Аҡыллы һоро күҙҙәре төпкә батҡан, яңаҡтары һурыла төшкән, һаҡалы саллана башлаған.

«Арыған... – тип уйланы егет. – Эйе, оло кешегә бында майлы бутҡа түгел. Үлемдән ҡурҡмаҫһың, ә шарттар тәкәтеңде ҡоротор. Эйәреңдән айырылыу юҡ. Көндөҙ – аҫтыңда, төнөн – башың аҫтында. Хәйер, йәштән шуға күнегеп үҫкән ир-атҡа – моңмо ни ул? Бәлки, арыуҙан түгелдер? Икенсе сәбәп барҙыр, бәлки? Иркенләп һөйләшергә ине Кинйә менән. Уның бит һәр һүҙе алтын...»

Салауаттың килеүе хәбәр ителгәс, Пугачёв свитаһын «император» сатырынан сығарып ебәрҙе лә бригадирға инергә бойорҙо. Үҙе Салауаттың сатыр ишеге төбөндә күренгәнен шәйләмәне лә. «Батша»ның сырайы ҡараңғы ине.

«Быларға ни булған? – тип ғәжәпләнде Салауат. – Ысынлап та, ниндәйҙер сәбәп бармы әллә?..»

Салауатты күргәс, Пугачёвтың йөҙөнә йәнлелек йүгерҙе.

– Һуғышабыҙмы, егет? – Ул, йылмайғанын белдереп, һул күҙен ҡыҫа биреп иҫәнләште лә түргә үтергә саҡырҙы.

– Һуғышыу – беҙҙең булмыш, император ғали йәнәптәре.

– Булмыш! Ә Усаны ала алмайбыҙ.

– Әле бит Уса өсөн һуғышманыҡ. Асылда, өгөтләү менән булдыҡ. Унан былайыраҡтарын алдыҡ бит. Уса ла беҙҙеке буласаҡ.

Эргәһенә килеп баҫҡан Салауатҡа һынаулы ҡарап, Пугачёв баш сайҡап ҡуйҙы.

– Һиңә нисә йәш әле, бригадир?

– Яңыраҡ ҡына егерме тулды.

– Егерме?!

«Император», тәүгә күргәндәй, көрәштәшенә тағы ла баштан-аяҡ күҙ йөрөттө. Егерме йәш. Эй, балаҡай! Быңдамы ни һинең урының? Улай тиһәң, үҙе лә тап ошондай дәүерен Пруссия һуғышы яланында үткәрҙе лә баһа. Ни ғәжәбе бар? Бер уйлаһаң, бар шул. Унда Емелька ябай һуғышсы ине. Ни бойорһалар, шуны эшләй, ҡайҙа ҡушһалар, шунда йүгерә. Ә был башҡорт егете тотош ил халҡын үҙенә ҡаратып тота. Хәрби оҫталығы бар ғүмерен һуғышҡа арнаған Михельсон тәжрибәһенән кәм түгел. Емелька теге саҡта бары ҡарға балаһы ғына булған. Ә был – ыласын. Ошо йәшендә... Берәй ун йылдан күрергә ине үҙен...

– Егерме... – тип ҡабатланы Пугачёв. – Д-а-а, күҙгә аҡ-ҡара күренмәй. Тын алырлыҡ әмәл юҡ. Ҡайҙа инде һинең менән бер иркенләп ултырып һөйләшеү! Яңыраҡ тулды, тиһең, ә? Әйтер инең, билдәләгән булыр инек...

Салауат ирекһеҙҙән көлөмһөрәп ҡуйҙы.

– Үҙем дә онотҡанмын, император ғали йәнәптәре. Бына бөгөн иҫкә төшөрҙөгөҙ. Тыуған көндө хәтерҙә тоторлоҡмо? Уратып алған донъя күҙгә салынмай. Яңы ғына сатнама һыуыҡ ине. Әле һеҙгә килгәндә абайланым – йәйҙең иң матур сағы икән дә.

Ингәндән бирле янында аяҡ үрә торған Салауатҡа Пугачёв ҡаршылағы ултырғысҡа ултырырға ымланы.

– Уныһы хаҡ. Нимәләрҙе иҫтән сығарабыҙ! Мин дә Пётр һәм Павел байрамын онота яҙғанмын. Ярай иҫкәрттеләр. Олатайымдың, улымдың исеме менән бәйле, ни тиһәң дә...

– Пётр Федорович ғали йәнәптәре...

Салауат ниндәй йомош буйынса саҡыртылыуын һорарға иткәйне. Пугачёв уның уйын аңланы, ҡалҡына биреп ҡуйған егеткә «ашыҡма» тигәнде аңлатып, ҡуҙғалмаҫҡа ишараланы. Үҙе әлеге һөйләшеүҙең осон һис көтмәгәнсә төйнәп ҡуйҙы:

– Йәл һин миңә, балаҡай. Бик йәл!

Салауат былдай һүҙҙе башына ла килтермәгәйне. Ниндәй мәғәнәлә әйтелгәнен һис төшөнә алманы.

– Нишләп улай тиһегеҙ, император ғали йәнәптәре?

Яуап урынына «император» ҡапыл ғына төп хәбәргә күсте:

– Бына нимә. Усаға Ҡазандан секунд-майор Скрипицын етәкселегендәге команда килде...

«Беләм» тигәнде аңлатып, Салауат баш ҡаҡты.

– ...Өҫтәүенә, коллежский асессор Башмаков ярҙам ебәргән. Хәҙер инде өгөтләүҙәр бөттө. Иван Наумовичтың тәҡдимен беләһеңме?

– Беҙ ул тәҡдимде бергәләп эшләнек.

– Бигерәк һәйбәт. Әҙерләнегеҙ, хуплайым. Нығытмаға башлап ташланыр өсөн, удар көс кәрәк. Кемдең командаһын ебәрәбеҙ?

– Уныһын да уйлаштыҡ. Ике команда тупланыҡ. Береһе – Иван Наумович Белобородовтыҡы. Икенсеһен мин алып инәм.

«Император», Салауаттан үткер ҡарашын алмайынса, бер аҙға ғына уйға ҡалды.

– Үҙеңдең урыныңа бүтән берәйһен тапманығыҙмы ни? – тип тынлыҡты боҙҙо ул.

«Нисек – тапманығыҙмы? Эҙләнекме һуң әле беҙ? Эҙләргә кәрәкмәй ҙә ине был осраҡта!..»

– Шулай кәрәк тип таптыҡ, император ғали йәнәптәре.

«Ә ниңә, дөрөҫ. Кәрәк саҡта мин үҙем дә иң яуаплы урында булам да баһа. Ҡалһын шулай. Хоҙай ярҙам итеп, уттан имен-аман сыҡһын инде был егет...»

– Ярай, хуплайым. Әҙерләнегеҙ. Булды, китергә мөмкин, балаҡай.

Пугачёв хушлашырға ҡулын һуҙғас, Салауат баянан бирле күңелен өйкәгән нәмәне һорарға батырсылыҡ итте.

– Әйтмәнегеҙ бит, император ғали йәнәптәре – ни өсөн «йәл» тинегеҙ әле?

Пугачёв, үтә етди хәлдә иҫенә төшөргәндәй, Салауатты ҡарашы менән аҙға ғына туҡтатты.

– Әйтмәнең, тиһең? Ярар, был һүҙгә мотлаҡ кире ҡайтырбыҙ. Бына, Усаны алайыҡ та... Хуш!..

Салауат, сығып барышлай «император» сатыры һаҡсылары менән дә хушлашып, яҡында ғына бәйле торған аты яғына ыңғайланы.

Кинйә һаман Салауат яугирҙары янында ине. Егетте ошонда көтөп алырға уйлаған, ахырыһы, – шуға оҡшаған. Улар һүҙһеҙ генә аңлашып, отрядтың поход канцелярияһы яғына атланылар.

Әңгәмә оҙаҡҡа һуҙылды. Штабтағы ваҡ-төйәк яңылыҡтарҙан башлап, яугир башҡорттарҙың кәйефенә, хәленә, ҡоралдарҙың, кейемдәрҙең, һуғыш кәрәк-яраҡтарының торошона күстеләр. Үткәндәр хәтергә алынды, киләсәккә байҡау яһанылар, уй-кисерештәрҙә тыуған яҡтарға ҡайтып уранылар.

– Бер нәмә минең күңелде ҡыра, – тине Кинйә, ауыр һулап. – Башҡортостандағы яуҙы үҙ ағышына ҡуйҙыҡ, юлбашсыһыҙ ҡалдырҙыҡ. Пётр Фёдорович хәҙрәттәре лә, һин дә бында, һиңә, Салауат, унда булырға кәрәк.

– Үҙем дә шулай уйлайым да, Кинйә ағай. Батшабыҙ янында ҡалыуымды теләне бит. Уның бойороғонан нисек сыҡмаҡ кәрәк?

– Сығырға кәрәкмәй. Теләһәң, былай ҙа хәл ителер. Мин уға әйтә биреп ҡуйғайным. Ҡаршы түгеллеге һиҙелә.

– Бәлки, икебеҙгә лә ҡайтырға кәрәктер, Кинйә ағай? Пётр Фёдорович янында яҡындары етерлек. Һине лә ебәрер, бәлки?

– Юҡ, Салауат. Минең урын бында. Беренсенән, күреп тораһың, башҡорттар, мосолмандар уның ғәскәрендә етерлек. Штабта төрки телендәге ҡағыҙҙар менән генә лә минең эш муйындан. Икенсенән...

Кинйә, юҡҡа башламаныммы тигәндәй, уйсан ғына тынып ҡалды. Егет һораулы ҡараш менән етди хәбәр көттө. Өлкән кәңәшсе, Салауаттан йәшереүҙең мәғәнәһе юҡлығын күреп, дауам итте:

– ...Икенсенән, батшабыҙҙың әле һин әйткән яҡындары араһында ла ышанысһыҙ кешеләр барға оҡшай. Күҙ-колаҡ кәрәк. Миңә уны ҡалдырырға ярамай, Салауат. Аҙаҡҡаса.

«Аҙаҡкаса»? Ниҙе күҙ уңында тота? Еңеүҙеме, әллә...

Кинйә Салауаттың уйын һиҙенде. Быныһын да сер итеп ҡалдырырға теләмәне.

– Эйе. Әшебеҙ аҙағына етеп килә. Йылға яҡын алышабыҙ – осо күренмәй. Мәскәү, Петербург алыҫ. Ваҡытты ҡулдан ысҡындырҙыҡ. Беҙгә ҡаршы – иҫәпһеҙ-хисапһыҙ ғәскәр. Батшабыҙ хәҙер инде Рәсәй тәхетенә ултыра алмаҫ. Һис юғында, Башҡортостанды ҡайғыртайыҡ. Унда ла эш сыҡмаҫтай булһа, башты һаҡлау яғын ҡарарға кәрәк, Салауат. Ҡаҙаҡтар яғында минең ышаныслы кешеләр бар. Унда йәшенеү мөмкинлеге табылыр. Һин дә шул хаҡта уйлана тор. Һиңә һис кенә лә дошман ҡулына эләгергә ярамай. Йәп-йәшһең әле. Беҙ тигәнсә килеп сыҡмаһа, берәй ун-ун биш йылдан, хәлләнеп, яңынан ҡуҙғалырға кәрәкмәҫме?..

Салауат уйға батып тыңланы. Кинйә Арыҫланов һүҙен бөтөрөп тынып ҡалғас, ашыҡмай ғына яуапланы:

– Ул хаҡта хәбәрләшергә иртәрәк, Кинйә ағай. Батшабыҙ ризалыҡ бирһә, Башҡортостанға ҡайтырмын. Әлегә яҡшыға өмөтләнеп алышырлыҡ көс бар. – Ул яугирҙар лагеры яғына ымланы. – Бындай кәйефте бүтәндәргә таратмай торайыҡ, ағай. Бөгөнгө маҡсат – ана, Уса нығытмаһы!

Кинйә көрһөнөп, һин нимә, әлбиттә, таратмайбыҙ, тигән сырай менән өндәште:

– Һис юғында, бер һүҙемә ҡолаҡ һал, Салауат. Һин Башҡортостандың өмөтө, киләсәге!..

* * *

Уса нығытмаһы өсөн өс көн һуғыш барҙы. Ҡала хакимиәте менән һөйләшеүҙәр туҡтатылды. Ундағы «ҡара» халыҡтың күпселеге баш күтәреүселәр яғына сыҡты, байтаҡ өлөшө нығытманан ситкә таралышты.

Егерменсе июндә кистән Салауат, Белобородовты саҡыртып алып, тиҙ-тиҙ генә күрһәтмәләр бирҙе.

– Ваҡыт етте, Иван Наумович, – тине ул. – Беҙҙең тәҡдим иткән планды тормошҡа ашырыр мәл етте. Теге ун биш йөк бесәнде ҡаланы ҡайһы тирәнән уратып урынлаштырырға икәнлеген беләләр. Бөгөн төндә алып барырҙар. Ә беҙ һинең менән таңға авангардта һөжүм башлайбыҙ. Батшабыҙ ғәскәре хәл иткес сәғәтте көтөп торасаҡ. Ҡояш ҡалҡыуға, Скрипицын үҙ өлөшөн алырға тейеш.

Эйәрендә килешле итеп ултырған һыңар аяҡлы Белобородов яғымлы баш ҡаҡты:

– С богом, Салават.

Егерме беренсе июнь төнөндәй дәһшәтлеһен пугачевсыларҙың күптән ойоштороғаны юҡ ине. Таң һыҙылыр алдынан, һөжүм итеүселәргә ҡуҙғалырға ишаралап, нығытманы ун биш урындан ут стенаһы уратып алды. Шуларҙың аралыҡтарынан Салауат һәм Белобородов отрядтары ҡала эсенә ынтылды. Нығытма аръяғында Скрипицын һалдаттары, һуңғы сәғәттәре етеүен һиҙеп, ярһып һуғышты: нығытма эсенә ташланған пугачевсыларға пуля, йәҙрә яуҙырҙылар, таштар, бүрәнәләр тәгәрләттеләр, ҡайнар ыҫмала ҡойҙолар. Һөжүм итеүселәр ҙә, сафтарының һирәгәйеүенә ҡарамай, юғарылағыларҙың әленән-әле тынып ҡалыуҙарынан файҙаланып, нығытмаға яҡынайғандан-яҡынайҙылар. Салауат ошо ҡыҙыу алыштың уртаһында ҡайнаны.

– Бирешмә, Иван Наумович! – тип ҡысҡырҙы ул йәнәш сапҡан Белобородовҡа. – Скрипицындың өс пушкаһы беҙҙеке! Тағы бер ынтылһаҡ, Уса ла беҙҙеке буласаҡ!..

– Ишеттем, Салауат. Тағы бер яңылыҡ – уның йәҙрәләре лә бөтөп бара. Яңы ғына беҙҙең яҡҡа ҡасып сыҡҡан казак хәбәр итте. Шуны еткерергә ашығам һиңә.

– Улайһа, тыңла, Иван Наумович! Ана, күрәһеңме, беҙ үртәгән бесән өйөмдәренең береһенән имән стенаға ут ҡапты. Усаға ҡапҡа асыла! Үҙемдекеләр менән шунда ҡарай сабам, һин – минең арттан!..

Салауат менән Белобородов авангарды утлы ҡапҡа аша нығытма эсенә ағылды. Арттараҡ Пугачёвтың төп көстәре, һуғыш яланын ҡара болоттай ҡаплап, авангард артынан эйәрҙе. Дошмандың ҡалған барлы-юҡлы ғәскәре ҡала үҙәгенә ҡыҫырыҡланды. Ҡоттары осҡан хәрбиҙәр, һаман сигенә барып, үҙҙәренә ҡарай уҡ кеүек атылған һыбайлыларға ҡаршы ҡаса-боҫа тәртипһеҙ атыша. Ә туптары бөтөнләй тынды.

Иң алда елеп барған Салауат уларҙы ап-асыҡ күрҙе. Бына бер уҡ атымы ғына ара ҡалды. Һыбайлылар уларҙы күҙ асып йомғансы тапап-иҙеп китәсәк...

Ҡапыл тубығындағы көслө ауыртыуҙан Салауаттың күҙ алдары ҡараңғыланды. Бөтә тәнен үҙәккә үтерлек әрнеү солғап алды. Үҙе, һис ни күрмәй, алға, ҡараңғы донъяға, елеүен дауам итте.

Арттағы яугирҙар бригадирҙың атының бер яҡҡа ҡырынлап, үҙ алдына бик тә сәйер сабыуын тиҙ абайланы. Кемдеңдер ҡолаҡты ярырлыҡ әсе тауышы бөтә ҡала үҙәгенә яңғыраны:

– Егеттәр, Салауатты аттылар! Ярҙамға! Тиҙ булығыҙ!..

Ныҡ ауыртыу эйәрҙә түҙеп ултырырға ирек бирмәйәсәген аңлағас, егет, атының сабышын әкренәйтеп, туҡтарға мәжбүр булды. Сабышып килеп еткән яугирҙарҙың дүрт-бишәүһе уға атынан төшөргә ярҙамлашты. Яраланған уң аяғы ергә тейгәс, Салауат әрнеүле тауыш менән яуҙаштарына өндәште:

– Ах, үкенесле! Ниндәй мәлдә!..

– Тыныслан, Салауат! – тип йыуатты уны дуҫтары. – Уса беҙҙеке!..

Ҡояш байыр алдынан бригадирҙың поход канцелярияһына Салауат янына «император» үҙе килде. Һаҡсыларын тышта ҡалдырып, тирмәгә оҡшаш итеп ҡоролған сатыр ишеге япмаһын хужаларса етеҙ асып, туҡтап та тормай, ҙур кәүҙәһен туп-тура тотоп, эре аҙымдар менән шәп-шәп атлап, түрҙә яңғыҙ уйланып ултырған Салауат янына үтте.

– Молодец, Салауат! Скрипицынды тубыҡландырҙың! Икмәк-тоҙ, икона менән ҡаршы алды ул мине.

Һаулашыу урынына әйтелде был һүҙҙәр. Ултырышып, хәл-әхүәл һорашҡас, Пугачёв эйәге менән егеттең аяғына ҡарай ымланы.

– Пулянанмы?

– Пуля ғына. Ул ваҡытҡа, ярай әле, йәҙрәләре бөткәйне.

– Йәл!.. Йәҙрәләре бөтөүе йәл түгел. Һинең яраланыуың йәл... – Пугачёв хәйләкәр көләмһерәне.

Салауат уның етди хәбәр башлаясағына төшөндө. Ҡабат ҡуҙғалған ауыртыуға иғтибар итмәй, аяҡ үрә баҫып, кәүҙәһен турайтты.

– ...Беренсенән, яраланыуың йәл. Но, әлбиттә, мин күҙ уңында уны тотмағайным. Шулай ҙа ниҙер һиҙенгәйнем: үтә тәүәккәлһең, башыңды һаҡламайһың. Ярай әле йәрәхәт менән генә ҡотолғанһың. Бынан һуң һалҡын ҡан менән генә һуғыш. Юлбашсы яу яланында ятып ҡалған алышта еңеү юҡ!

«Әйтеүе анһат – «һалҡын ҡан менән...» Үҙе шулай һуғыша, тиерһең. Күргән бар бит инде. Ул да донъяһын онота. Баш һаҡлау ҡайғыһымы ни... Ә аҙаҡҡы һүҙе хаҡ. Юлбашсыһыҙ яу – яу түгел. Яраландым, тип наҙланып ятыу юҡ. Тиҙерәк яугирҙар араһына сығырға!..» Һүҙҙәре ситкә китмәгәнен,

Салауаттың иғтибар менән тыңлағанын тойоп, «император» йәнләнә төштө.

– Йәл шул, Салауат, йәл. Һинең кеүек аҫыл ирҙәребеҙ баш һала күрмәһен. Алдағы көндәрҙә бик кәрәк буласаҡһығыҙ. Бына, тәхетте ҡабат үҙ ҡулыбыҙға алайыҡ әле. Беләһеңме, кем итеп ҡуясаҡмын мин һине!

Салауат тәхет хаҡындағы сираттағы уйынан түгел, ә ысын күңелдән ҡыҙыҡһынып, ҡалҡынып ҡуйҙы.

– Кем итеп?

–Рәсәйҙә йәшәгән бөтә халыҡтар араһында татыулыҡ урынлаштырыу башлығы итеп. Кемдән-кемдән, ә һинең ҡулыңдан килер ине ул эш.

Салауат, шул вазифа ысынлап тәҡдим ителгәндәй, уйланып һорап ҡуйҙы:

– Кәрәк булыр инеме икән, император ғали йәнәптәре, ундай башлыҡ? Яңы тәртип урынлаштырһаҡ, халыҡтар үҙҙәре үк татыу йәшәмәҫтәрме?

– Бөтәһе лә, һин тигәнсә, тиҙ генә эшләнмәй. Халыҡты яңы тәртипкә күнектерергә лә кәрәк буласаҡ.

– Беҙ теләгән яңы тәртип урынлашһа, урындарҙа заводсыларҙан, иҙеүсе килмешәк хакимдарҙан арынһаҡ, Рәсәй халыҡтары айырым-айырым үҙ аллы йәшәмәҫтәрме? Ҡасандыр Башҡортостан йәшәгән кеүек. Уны бит рус хакимдары мәкер менән әкрен-әкрен яулап барып, үҙ дәүләтенең бер өлөшөнә әйләндергән. Електе күп һурҙылар. Халыҡтың тамам үҙәгенә үтте. Артабан да ошо хәлдә ҡала алмаясаҡбыҙ. Ҡайҙа нисектер, беҙҙә тулы үҙаллылыҡ алмайынса, халыҡ тынысланмаясаҡ. Ә тынысланғас инде – күршеләр менән башлыҡһыҙ ҙа татыу йәшәргә була. Һеҙҙеңсә нисек, император ғали йәнәптәре?

Инде Пугачёв уйға батты. Ҡуңыр йөҙө ҡарағусҡыллана төшөп, ҡара һаҡал-мыйығы түҫөнә яҡынайҙы. Күҙендә зәһәрле осҡондар балҡыны.

– Тәхет ҡабат үҙебеҙҙең ҡулға ҡайтһын әле, күҙ күрер, – тине ҡәтғи генә. Шунан, тамағын ҡырып, тауышын йомшарта бирҙе. – Әйе, алдағыһын күҙ күрер, Салауат. Бөгөнгә ҡайтайыҡ әле. Хушлашырға индем мин һинең менән.

– Хушлашырға?!

– Шуныһы йәл тағы ла – айырылышабыҙ. Мин иртәгәләрҙә ары ҡуҙғалам. Ҡазан, Мәскәү яғына. Ә һин ҡайт. –

Ул йәнә егеттең яралы аяғына ымланы. – Бер юлы тыуған яғыңда хәл алып, төҙәлерһең. Унан һуң... Үҙ ереңдә ирек дауларһың, һине өйрәтергә кәрәкмәй. Башың – яурыныңда.

«Тимәк, Кинйә ағай менән һөйләшкәндәр, һүҙе үтә рәхмәт төшкөрө ҡартластың!»

– Иртәгә үк юлғамы ни?

– Ашығырға кәрәк. Инде ваҡытты күп һуҙҙыҡ. Рәсәй үҙәгендәге крәҫтиәндәр мине күптән көтә. Болалары ла сығып тора, тигән хәбәрҙәр алам. Көҙгө һыуыҡтар башланғансы, Мәскәүҙе алмаҫмынмы, тигән уй ҙа бар. Йәл, һине ҡалдырам. Миңә һәр ваҡыт һинең кеүек кеше етмәйәсәк. Ярай, яҙған булһа, осрашырбыҙ. Эҙләп табырмын мин һине, Салауат.

«Император»ҙың тел төбөндә ятҡан теләген аңлап, Салауат уны тынысландырғандай тауыш менән хушлашты:

– Аллаға шөкөр, яра түҙерлек. Эйәрҙә ултыра алам. Тыуған яҡ саҡ ҡына көтөп торор. Уса тирәһендә аҙна-ун көн булырмын әле. Һеҙгә бит үҙәккә ҡарай көс менән ыңғайларға кәрәк. Ғәскәр йыйып, ошо көндәрҙә артығыҙҙан оҙатҡыларымын. Үҙемдең отрядты ла тулыландыраһы бар. Башҡортостанға, моғайын, июль баштарында ғына ҡайтырмын.

Пугачёв, һөйләшеү бөткәнен белдереп, урынынан торҙо ла Салауатҡа ҡул һуҙҙы:

– Рәхмәт, бригадир. Мин һиңә ышанам. Осрашырға яҙһын. Хуш!

Уның күҙҙәре ғәҙәттәгенән нығыраҡ ялтлап китте – әллә тулҡынланыуҙан, әллә сыланыуҙан...

Салауат, бар түҙемлеге менән ауыртыуҙы еңеп, аяҡ үрә баҫып оҙатып ҡалды:

– Хуш, император ғали йәнәптәре!..

1. Текста осраған яңы һүҙҙәрҙе яҙып алығыҙ, уларҙың унда ҡулланылыуына иғтибар итегеҙ. Мәғәнәләрен асыҡлап, улар менән үҙегеҙ ҙә һөйләмдәр төҙөгөҙ, һөйләмдәрегеҙҙе руссаға тәржемә итегеҙ.
2. Текста рус теленән ингән һүҙҙәрҙе табығыҙ, уларҙың башҡортса ҡулланылышына иғтибар итегеҙ.
3. Император, батша һүҙҙәре текста бер нисә урында ҡулланыла. Үҙ исеменән һөйләгәндә, автор уларҙы тырнаҡ эсенә ала, ә геройҙарҙан, мәҫәлән, Салауаттан, әйттергәндә тырнаҡтар юҡ. Ни өсөн икән?

4. Кинйә тураһында Салауат *һәр һүҙе алтын* тип уйлай. Ул быға ниндәй мәғәнә һалды икән? Был төшөнсәне русса ниндәй һүҙҙәр менән бирәләр?
5. *Тел асылыу, һалҡын ҡан менән һуғышыу, һүҙҙе елгә ташламау, уҡ кеүек атылыу, үҙәккә үтерлек әрнеү* һүҙбәйләнештәренең мәғәнәләренә төшөнөп, уларҙы икенсе һүҙҙәр менән әйтеп бирегеҙ, синонимдарын табығыҙ. Был һүҙбәйләнештәр булған һөйләмдәрҙе текстан табып, руссаға тәржемә итегеҙ.
6. *Эш майлы бутҡа түгел; Күҙгә аҡ-ҡара күренмәй; Тын алырлыҡ әмәл юҡ; Күҙ-ҡолаҡ кәрәк; Ваҡытты ҡулдан ысҡындырҙыҡ; Електе күп һурҙылар; Күҙендә зәһәрле осҡондар балҡыны* һөйләмдәрен текстан табығыҙ, уларҙың һәр береһенә һалынған мәғәнәне ентекләп аңлатығыҙ. Һөйләмдәрҙе руссаға тәржемә итегеҙ.
7. *Өлөшөн алды (кәрәген алды)* тип ҡасан, кемгә һәм ниндәй маҡсатта әйтәләр? Ошоға оҡшаш һүҙбәйләнештәр табығыҙ, уларҙы руссаға тәржемә итеп, бер нисә һөйләм төҙөп яҙығыҙ.
8. *Күҙ асып йомғансы, бер уҡ атымы ара* тибындағы ваҡыт, ара үлсәмдәрен табығыҙ, уларҙың рус телендә нисек әйтелеүенә иғтибар итегеҙ.
9. *Салауат ҡыҙыу алыштың уртаһында ҡайнаны* һөйләмен руссаға тәржемә итегеҙ.
10. Һеҙ нисек уйлайһығыҙ, Пугачёв, Салауат Юлаев нимә өсөн һуғыша? Был ваҡиғалар тураһында һеҙ нимәләр беләһегеҙ? Шул турала ҙур булмаған белешмә-хикәйә төҙөгөҙ.
11. Кемдәр улар Емельян Пугачёв, Салауат Юлаев, Кинйә Арыҫлановтар? Улар тураһында бәләкәй белешмә төҙөп яҙығыҙ, уларҙың исемдәрен йөрөткән географик атамаларҙы (ҡала, район, урам һ. б. исемдәрен) табығыҙ.
12. Пугачёв, Салауат, Кинйә тураһында тағы ниндәй әҙәби әҫәрҙәр ижад ителгән? Һеҙ уларҙың ҡайһыларын уҡығанығыҙ бар? Шуларҙың берәйһе буйынса фекер алышыу ойоштороғоҙ.
13. Салауат Юлаевҡа арналған спектаклдәр, кинолар ҡарағанығыҙ, уның портретын, берәй рәссамдың картинаһын, уға ҡуйылған һәйкәлдәрҙе күргәнегеҙ бармы? Уларҙың авторҙары кемдәр? Үҙегеҙ күҙ алдына килтергәнсә, Салауат Юлаевтың һүрәтен төшөрөгөҙ.
14. Салауатҡа арналған йыр, риүәйәт кеүек халыҡ ижады әҫәрҙәрен табығыҙ. Улар буйынса әңгәмә ойоштороғоҙ.

**15.** Текстың йөкмәткеһе буйынса план төҙөп, һөйләү күнекмәләре эшләгеҙ.

**16.** Салауат менән һөйләшкәндә Пугачёв *Пётр һәм Павел байрамы* тураһында телгә ала. Был ниндәй байрам? Рус халҡының тағы ниндәй байрамдары бар? Уларҙың ҡайһыларын рустар үҙҙәре генә байрам итә, ә ҡайһыларын башҡа халыҡтар ҙа үҙҙәренеке тип иҫәпләй? Ни өсөн? Был турала, ололарҙан һорашып, китаптарҙан ҡарап, *«Рус халҡының байрамдары»* тигән белешмә төҙөп яҙығыҙ.

**17.** Текстың тәүге абзацын диктант итеп яҙығыҙ. Бер-берегеҙҙең эшен тикшереп, баһалағыҙ.

**18.** Текстың йөкмәткеһен ҡыҫҡаса үҙ һүҙҙәрегеҙ менән һөйләгеҙ.

*Рауил БИКБАЕВ*

## САЛАУАТ ҠЫЛЫСЫ

Салауат нисә йәшендә? –
Ил ҡайғыһы уның башында.
Әйләнеп тә ҡайтты ҡылысы
Ике йөҙ ҙә нисә йәшендә.

Ҡулға алдым Салауат ҡылысын,
Тутыҡмаған уның ҡоросо.
Ялтлаған ул күпме йәшен булып,
Даулап илдең бәхет-ырыҫын.

Бер Уралды түгел, бар Рәсәйҙе
Дер һелкеткән булыр был ҡылыс.
Был ҡылыстан батшаларҙың башы
Саҡ-саҡ осмай ҡалған ҡырҡылып.

Ил нәфрәте уны утта ҡойған,
Ил йәштәре уны һуғарған.
Ҡарарға ине батыр күҙҙәренә,
Ҡылысын ул ҡындан һурғанда.

Әйҙәгәндә яуға, ҡарашында
Дөрләгәндер ниндәй ут-ялҡын.

Телгә килһә, ни һөйләмәҫ ине
Устарымда ятҡан ҡомартҡы.

Был ҡоросҡа уйып кемдең ҡулы
Аманаттар итеп эҙ һалған?
Улының ҡулына ҡылысы күсмәһә лә,
Телдән телгә күсер һүҙ ҡалған.

Башҡынайын алып киткәндәр,
Ҡатындарын алып киткәндәр,
Балаларын алып киткәндәр,
Исемен әйтһәң, телде киҫкәндәр.

Был ғүмерҙең иң аяныс мәле –
Батыр ҡулынан ҡылыс төшкәне,
Батырҙарҙан батырҙарға күсмәй
Дошманының ҡулына күскәне.

«Ҡулдарымда батыр ҡылысы!» – тип
Һикергәндер дошман шатлыҡтан.
Һелтәй алмаҫ Салауаттың ҡылысын,
Күпме тырышмаһын, һатлыҡ йән.

Ҡылысын тотҡан саҡта һатлыҡ йәндәр,
Эй янғандыр батыр яраһы…
Салауаттың һүҙен берәй яуыз
Телебеҙҙән йолҡоп ҡараһын!

1. Һүҙлек эше башҡарығыҙ: яңы һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен асыҡлап, улар менән һөйләмдәр төҙөгөҙ.
2. Һеҙҙең Салауат ҡылысы тураһында ишеткәнегеҙ бармы? Ул әле ҡайҙа һаҡлана? Уның тураһында белгәндәрегеҙҙе һөйләгеҙ.
3. *«Был ғүмерҙең иң аяныс мәле – Батыр ҡулынан ҡылыс төшкәне»* тигән юлдарҙың мәғәнәһен аңлатып ҡарағыҙ.
4. *«Исемен әйтһәң, телде киҫкәндәр»*, тип шағир ни әйтергә теләгән? Шул турала әңгәмә ойоштороғоҙ.
5. Шиғырҙы тасуири итеп уҡығыҙ, ятлағыҙ (ҡыҫҡартып алырға мөмкин).

## ИСЕМДӘРҘЕҢ ҺАН ҺӘМ ЗАТ МЕНӘН ҮҘГӘРЕҮЕ

Башҡорт телендә исемдәр **һан (число)** һәм **эйәлек заты** менән дә үҙгәрә. Һан предметтың берәүме әллә күпме икәнен белдерә: *алма – алмалар*. Эйәлек заты берәй заттың предметҡа эйә икәнен белдерә: *ҡәләм – ҡәләмем* (мин эйә), *ҡәләмең* (һин ҡәләмгә эйә), *ҡәләме* (ул эйә), *ҡәләмебеҙ* (беҙ эйә), *ҡәләмегеҙ* (һеҙ эйә). Рус телендә исемдәрҙең бындай формалары юҡ.

**38-се күнегеү.** Тексты уҡығыҙ. Исемдәрҙе үҙгәреше буйынса һайлап алығыҙ.

Яңы баш ҡоҫҡан аҡһыл йәшел бойҙай диңгеҙе өҫтөндә тулҡын артынан тулҡын йүгерә, һәм бына шул диңгеҙ эсендә ҙур булмаған бер утрау асыҡ булып күренә. Тик ул утрау «диңгеҙҙән» ҡалҡынып тормай. Баҫыу уға табан һәр яҡлап иңкеүләп килә лә уртала талдар шырлығы ҡаплаған ҡаҙан хасил итә.

Бойҙай араһына тар һуҡмаҡ инеп китә. Шул һуҡмаҡтан атлайым. Атлаған һайын яланғас балтырҙы, ҡул һыртын йәш башаҡтар һыҙыра.

Бына күл сите. Тик күлдең үҙен тиҙ генә күрермен, тимә. Үҫкән тал ҡыуаҡтары уны дәррәү уратып, һаҡҡа баҫҡан...

Күлде «Һандуғас күле» тип атаһаң да, һис хата булмаҫ ине. Йәйге кистәрҙә һәм таңдарҙа унда аҫыл ҡоштар өҙҙөрөп һайрай, һандуғастарҙың үҙҙәрен генә һис күреп булмай. Юл тыҡрығындағы ояларҙы, көҙгө япраҡтар тамам ҡойолоп бөткәс кенә, күреп була. Улар инде киләһе яҙға тиклем буш ҡалған, көҙгө ыжғыр елдәргә бәүелеп ултыра.

*(Ф. Иҫәнғолов)*

Һәр төргә икешәр миҫал табығыҙ.

Ө л г ө: *эйәлек заты –*
*күплек –*
*берлек –*

**39-сы күнегеү.** Шиғырҙы башҡорт теленә тәржемә итегеҙ.

Уж небо осенью дышало,
Уж реже солнышко блистало,

Короче становился день,
Лесов таинственная сень
С печальным шумом обнажалась,
Ложился на поля туман…

*(А. Пушкин)*

Шиғыр формаһында тәржемә итеп ҡарағыҙ.

**40-сы күнегеү.** Башҡорт телендәге күплек мәғәнәләренә иғтибар итегеҙ.

1. Апайымдар урмандан ҡайтты.
   Атайҙар һуғыштан ҡайтты.
2. Күп нәмәгә ағайҙарҙан өйрәнәбеҙ.
   Был китапты ағайымдарҙан алдым.
3. Беҙҙең класта Русландар өсәү.
   Төштән һуң Русландарға барҙым.

Ошо һөйләмдәрҙе телдән рус теленә тәржемә итегеҙ.

*Степан ЗЛОБИН*

## САЛАУАТ ЮЛАЕВ

*(Романдан өҙөк)*

Ямғырлы, йонсоу көн ине. Салауат тирмәһе эсендә яңғыҙы ҡурай уйнай. Моңло көй уның бармаҡ аҫтарында һыҙылып-һыҙылып сыңлай. Шул саҡ тирмә алдына бер сапҡынсы килеп туҡтаны.

Ат тояҡтарының шомло тупылдауынан Салауат ниндәйҙер күңелһеҙ хәл булғанын аңланы һәм, ҡурайын ситкә ташлап, ултырған мендәренән һикереп торҙо.

Лыс һыу булған сапҡынсы тирмәгә килеп инде лә, бүрке эсенән ҙур-ҙур мисәтле пакет алып, Салауатҡа һондо.

– Государҙанмы?! – тип ҡысҡырып ебәрҙе Салауат. Уның күҙҙәре шатлыҡтан йылтыраны, йөрәге дарҫлап типте.

Билдәһеҙлек һәр ваҡыт алама хәбәрҙәр тыуҙыра, һуңғы аҙналарҙа кешеләр государҙың ғәскәре ҡыйратылған, ә үҙе яуыздар ҡулына эләккән, имеш, тигән хәбәрҙәр тараҡҡайны.

Унан пакет килеү былдай хәбәрҙәрҙең ялған булыуын күрһәтә ине. Тимәк, ул еңелмәгән, ихтимал, ул инде Петербургта йә Мәскәүҙә тәхеттә ултыралыр, һәм тотош Рәсәйҙә подданныйҙар уға ант итәләрҙер, христиан сиркәүҙәрендә байрам ҡыңғырауҙары тантана менән сыңлайҙарҙыр, батша һарайы алдындағы дар ағастарында дворяндар, сауҙагәр-заводчиктар, ришүәтсе-чиновниктар бер рәттән аҫылынып тораларҙыр.

Салауат пакетты маңлайына һәм йөрәге тапҡырына ҡуйып алды ла түҙемһеҙлек менән мисәттәрен ватты...

Хат, аңлашылмай ҡалмаһын өсөндөр инде, ике телдә – рус һәм төрки телдәрендә яҙылғайны:

«Башҡорт старшинаһы Салауат Юлаевҡа...»

Салауат батшаның уны ни өсөн бригадир тип түгел, ә ябай старшина тип атауы тураһында уйламаны.

«...Тәрән үкенес менән һиңә хәбәр итәм: ошо сәғәткә тиклем һин һуҡырлыҡ һәм яуызлыҡ йоғонтоһонда, бөтә кешегә билдәле яуыз хыянатсы һәм самозванец Пугачёвтың алдаштырыуҙарына ышанып йәшәйһең...»

Ошо һүҙҙәрҙе бер тында уҡып сыҡҡас ҡына, Салауат хатты уға государь түгел, ә ниндәйҙер икенсе кеше яҙғанлығын аңлап алды. Сәмреғошло ҙур ҡыҙыл мисәттәрҙең күплеге хатты дошман яғындағы ниндәйҙер ҙур түрәнең яҙғанлығын аңлатты. Шуға ла Салауат артабан, үҙенән нимә теләгәнлектәрен аңларға тырышып, һағайып, тыныс ҡына уҡыны:

«...Пугачёвтың алдаштырыуҙарына ышанып йәшәйһең, ә ул хәҙер үҙенең бөтә ярҙамсылары менән бергә ҡулға эләкте һәм, үҙе эшләгән бөтә яуыҙлыҡтары өсөн яза көтөп, тимер бығау аҫтында ултыра...»

– Тотолған... бығаулы... Тиҙҙән язалап үлтереләсәк... – тип ҡабатланы үҙ алдына Салауат.

Тимәк, хәбәрҙәр ялған булмаған... Тимәк, ғәйрәтле государь, ирек һөйөүсән, батыр һуғышсы эләккән... Һәм ул үлтереләсәк!

Пугачёвтың яҡты ҡарашы, ялҡынлы һүҙҙәре, ағымлы тауышы күҙ алдына килде Салауаттың. Ул ауыр ҡайғыға батты... Ни өсөн ул Ҡазан яғына Пугачёв менән бергә барманы икән?.. Бәлки, ошо һуңғы һуғыштарҙа Пугач батшаға уның өсөн ғүмерен ҡорбан итергә әҙер торған ҡыйыу дуҫ етмәгәндер!..

Салауат тирмә эсенә күҙ йүгертеп сыҡты. Был яман хәбәрле пакетты килтергән сапҡынсыны тәү тапҡыр күргән кеүек, уға текләп ҡараны.

– Насар хәбәрме, бригадир түрә? – тине хәбәр килтереүсе. – Төҫөң ҡасты һинең, шул саҡлы ағарындың...

– Усаҡҡа яҡын ултыр, сисен, йылын, – тине уға Салауат. Ул тағы ла хатты уҡырға тотондо:

«...Һәм шуға күрә, ысын күңелдән ҡыҙғанғанлығымдан, мин һиңә ошо хат аша һуңғы һүҙемде әйтәм – тәүбә ит, ғәйебеңде танып, баш эй...»

Тәүбә итергәме?! Баш эйергәме?!. Бындай хаттарҙы Салауатҡа беренсе тапҡыр ғына яҙмайҙар инде. Салауат уларҙы, уҡып та тормайынса, аяҡ аҫтына һалып тапай торғайны. Шулай булғас, ни өсөн быныһына ла ҡолаҡ һалырға тейеш әле ул?..

«...Мин, әбей батша ғали йәнәптәре тарафынан ышаныс белдереп ебәрелгән вәкил булараҡ, һиңә шуны әйтәм: шунда уҡ ғәфү ителәсәкһең. Әгәр ҙә инде был юлы ла буйһоноуҙан баш тартһаң, һис бер төрлө мәрхәмәт көтмә...»

Йәшерен экспедиция начальнигы генерал Потёмкин тарафынан яҙылған был хәсрәт ҡағыҙын уҡып та бөтмәҫ элек, ҡалтыранған бармаҡтары менән йомарлай, иҙә башлағанын Салауат үҙе лә һиҙмәне.

– Алдаҡсы! Ялған! Улар минән хыянатсы яһарға маташалар... Салауатмы – хыянатсы?! – тип асыуланып ҡысҡырҙы ул.

Салауат был ҡағыҙға ышанманы. Уның һәр бер һүҙе ялған сәсеп тора... Әгәр ҙә государь ысынлап та дошман ҡулына эләккән булһа, улар Салауатты үҙҙәренә баш эйеп килергә өндәмәҫтәр ине. Улар уға ҡаршы үҙҙәренең генералдарын, полковниктарын, һалдаттарын ташларҙар ине...

– Ошо пакет менән килгән кеше һинән хат көтә, – тине хәбәр килтереүсе. – Ул ҡағыҙҙы һинең үҙ ҡулыңа тапшырырға теләгәйне, ләкин беҙ, торған урыныбыҙҙы күрмәһен тип, уны тегендә тотоп ҡалдыҡ. Ни әйтергә уға?

– Әйт: эт өрөр, ялған хәбәр ташып, ел йөрөр. Салауат эт өрөүенә ҡолаҡ һалмаҫ. Үҙен ебәргән кешегә ул ана шулай яуап ҡайтарһын. Минең был ерәндергес ҡағыҙҙы, йыртып, бысраҡҡа һалып тапағанымды ла әйт...

1. Текстың йөкмәткеһенән сығып, ҡайһы осор тураһында һүҙ барғанын асыҡлағыҙ. Фекерегеҙҙе миҫалдар менән нығытығыҙ.
2. Кем ул *әбей батша*? Башҡорттар кемде шулай атағандар?

3. Степан Злобиндың «Салауат Юлаев» романын оригиналында (рус телендә) уҡып сығығыҙ. Унан үҙегеҙгә оҡшаған бер өҙөктө башҡортсаға тәржемә итегеҙ.
4. Салауат Юлаев тураһында яҙылған башҡа әҫәрҙәрҙе иҫегеҙгә төшөрөгөҙ. Уларҙа Салауат образының нисек бирелеүенә иғтибар итегеҙ. Уларҙың ҡайһыһы һеҙгә нығыраҡ оҡшаны? Ни өсөн? Салауат тураһында әҫәр яҙһағыҙ, һеҙ уны нисек итеп һүрәтләр инегеҙ?
5. «Салауат Юлаев» тигән хикәйә төҙөп яҙығыҙ.
6. Текстағы иң һуңғы абзацты (Салауаттың һүҙҙәрен) диктант итеп яҙығыҙ.

**41-се күнегеү.** Түбәндәге һүҙҙәрҙең тамырҙарын табығыҙ.

Сапҡынсы, яуызлыҡ, ярҙамсы, һуғышсы, алдаҡсы.

## ИСЕМДӘРҘЕҢ ЯҺАЛЫШЫ

Башҡорт телендә исемдәр төрлөсә яһала: тамыр исемдәр, яһалма исемдәр, ҡушма исемдәр. Яһалма исемдәр ялғауҙар ярҙамында, ә ҡушма исемдәр ике һүҙҙе бергә ҡушыу юлы менән яһала. Мәҫәлән, *ул-тыр-ғыс, ҡап-ҡа, кө-төү-се* – яһалма исемдәр; *аҡҡош, терегөмөш, малтыуар* – ҡушма исемдәр.

**42-се күнегеү.** Һүҙҙәрҙе башҡорт теленә тәржемә итегеҙ. Рус һәм башҡорт телдәрендә исемдәрҙең яһалыу юлдарын сағыштырығыҙ.

Игрушка, стойка, метёлка, дневник, остановка, учитель, ученик, земляк, односельчанин, пастух.

*Ғәли ИБРАҺИМОВ*

## САПҠЫН

*(«Кинйә» романы буйынса)*

Бер көндө алыҫтан сапҡын килде. Атының бауырынан аҡ күбектәр ағып, ауыҙынан шайыктары ҡойолоп тора. Үҙе лә аһылдап бөткән, нисек итеп һүҙ башларға белмәй. Тау-урман аша, көндө төнгә ҡушып, туҡтамай елгәндер, ахырыһы.

Арыҫлан уға ҡымыҙ ҡойҙо.

– Эсеп ал әле.

Егет тәгәсте бер тында күтәреп, яҡ-яғына ҡаранды ла, үҙенең ҡайҙан, нисек килеүен һөйләй башланы. Ләкин Арыҫлан:

– Улары кәрәкмәй, – тине, ҡулын һелтәп. – Ни хәлдәр Бөрйәндә?

– Яу ҡупты, олатай…

– Беләм. Кем ебәрҙе?..

– Байбул старшина.

– Һөйлә… Ни ҡушты?

Үҙенә ирек ҡуйылғас, сапҡын баштан башлап теҙеп һөйләргә кереште. Уның һүҙҙәре Ирәндек буйындағы хәлдәр хаҡында Арыҫландың элек ишеткәндәренә тоташып ялғанды.

Былтыр действительный тайный советник Черкасов Петербургтың таштар оҫтаһы Брагинды Ирәндек буйына ебәргәйне. Ул алтын-көмөш эҙләгәнме, кварц ятыштары, ҡиммәтле таштар ҡарағанмы – төрлөсә һөйләнеләр. Ҡайһыһы дөрөҫтөр, әммә ул, таштарҙы тикшереүҙән бигерәк, үҙенең кәйеф-сафаһын күтәреүгә иҫәп тотоп, килеү менән үк яуызлығын күрһәтә башланы. Халыҡтың малдарын таланы, күҙенә салынған ҡыҙҙарҙың, һылыу ҡатындарҙың кемдеке икәнлеген дә һорап тормайынса, үҙенә алдыртты. Ҡаршы тороу ҡыйын ине. Үҙе ҡораллы, янында һалдаттар. Унан ҡурҡып, ҡырын һүҙ әйтмәйенсә, йә начальник, йә янарал тип кенә өндәшеп, яҡшылыҡ менән ҡотолорға тырыштылар. Ләкин халыҡтың түҙеме тиҙ бөттө. Уның өҫтөнән губернаторға, Тәвкилевкә ялыу итергә барып ҡаранылар. Улар был яуыз әҙәмгә һис бер төрлө сара күрмәне. Киреһенсә, ялыу менән барған кешеләрҙе бик ҡаты әрләп ҡайтарғандар, саҡ-саҡ ҡына ябып ҡуймағандар.

– Ай, ҡанһыҙ түрә булды шул, – тине сапҡын. – Янаралдар һымаҡ яуыз. Кеше шундай ҙа оятһыҙ була икән. Берәй бисәне мәсхәрә итә лә, арбаға егелеп тартырға ҡуша торғайны. Үҙе лә Талҡаҫ төбөндә ята хәҙер.

Әле яңыраҡ ҡына уның үлтерелеүен ишеткәйнеләр. Шуның өсөндөрмө, Арыҫлан был хаҡта һорашырға ашыҡманы.

– Әмин батырға ҡаныҡманымы?

– Уны ул башта уҡ яфалай башланы.

– Ҡыҙы бармы әле уның?

– Бар. Алмабикә.

– Уға нисек?

– Әллә. Ул саҡлыһын белмәйем. Әмин батыр Брагин түрәгә

таш киҫә торған әллә ни саҡлы балта сүкеп биргән. Шул ҡыҙын һаҡлап ҡалырға теләгән, тиҙәр. Балталарҙы алғас, Брагин түрә Талҡаҫ күле буйындағы Иҫәнбәт ауылына күсте. Унда таш ҡаҙыта ине. Ул һиҙеп ҡалғансы тип, Байбул старшина ҡыҙын кейәүгә бирергә булды. Брагин һиҙмәй буламы? Күл буйына минең өсөн аҡ тирмә ҡор, туй алдынан ҡыҙыңды шунда килтерерһең, ти икән. Байбул старшина бик ҡурҡты. Үҙ янына батырҙарҙы, аҡһаҡалдарҙы йыйҙы. Сураш Мәргән, Исмәғил сотский, Йылан Этҡол, Хоҙайбирҙе мулла, Бикбулат... Шулар, бергәләп кәңәш-төңәш итеп, Брагин залимдан ҡотолорға булғандар.

Арыҫлан батыр, әллә тыңлап, әллә тыңламайынса, ситкә ҡарап ултыра ине.

– Ыҙа-яфалары сиктән ашҡан шул, – тип йөпләне ул сапҡындың һүҙен. – Әммә бына иртәрәк ҡуҙғалғандар.

– Тәкәт тотҡоһоҙ булды бит. Унан ни, бәлки, Брагиндың үҙенең тәҡдире лә еткән булғандыр. Ул төш күргән икән дә, йоҡлап торғас, Әмин батырға барып һөйләгән, ти. Күрше ауыл бит. «Төшөмдә күлдәгем бөтөнләй ҡанға мансылған ине, бик ҡурҡтым, нимә булыр икән, юрап бир әле», – тип һораған. Әмин батыр уға: «Һин, түрә-нәшәлник, ҡурҡма, ҡанлы күлдәк – балыҡ ул, ҡанһыҙ йән эйәһе. Ҙур йылым ал да Талҡаҫҡа төш, балыҡтарҙың ҙурҙары эләгер», – тигән.

Төш хаҡындағы был имеш-мимештең әллә дөрөҫ, әллә ялған булыуын да онотоп:

– Төшөндә үҙ ҡанын күргән инде ул, яуыз, – тип ҡуйҙы Арыҫлан. – Иртәгеһенә үк аттылармы ни үҙенә?

– Эйе, ана шул кәңәш-төңәштән һуң. Беҙгә аттарҙы әҙерләргә ҡуштылар. Ҡоралдарыбыҙҙы барлап ҡуйҙыҡ. Төндә Талҡаҫты уратып алдыҡ. Бөтәбеҙҙең дә ҡоно бар ине Брагинда. Ул иртәнсәк үҙенең кешеләре менән балыҡҡа төштө. Беҙ уҡтарҙы янға ҡуйып, талдар араһында боҫҡонда ятабыҙ. Ә Сураш Мәргән түрә янында күл буйында ултыра. Бер мәлде ул: «Йә, нәшәлник, алышмы, атышмы?» – тип ҡысҡырып ебәрҙе. Брагин бик яман ҡурҡты, буғай, һалдаттар менән кәмәгә ултырҙы ла, утрауға табан йөҙөп китте. Уның артынса Сураш Мәргән уҡ сорғотто. Кәмәне тишергә тейеш ине ул. Тиште. Шунан сират Әмин батырҙыҡы икән. Уның яны бик ҡаты, уғы яҙлыҡмай. Көтәбеҙ. Ә ул икеләнгән, ахырыһы. Атмай тик тора. Шунан ни, Сураш Мәргән, уның уғын тартып

алды ла, Брагинды үҙе ҡолатты. Беҙ ҙә ата башланыҡ. Береһе лә иҫән ҡалманы.

– Шунан? – тип тағы нимәлер көттө Арыҫлан.

– Шунан ни, башланып китте инде. Яугирлыҡты атҡарҙыҡ...

Шул көндө Ирәндек буйҙарындағы йәйләүҙәрҙә усаҡтар һүнде. Малдарҙы ҡыуалап, бала-сағаларҙы, ҡатын-ҡыҙҙарҙы, ҡарт-ҡороларҙы урман эсенә күсерҙеләр. Ир-егеттәр атҡа атланды. Бөтә тирә-йүнгә, юлдарға күҙәтселәр ҡуйылды. Губернатор менән заводтар араһында хәбәрләшеү туҡталһын тип, почта йөрөтә торған Сапсал ямын туҙҙырҙылар. Башҡорттар ям сабыу [ике почта бүлексәһе, йәғни ямы араһы] өсөн ылау биреүҙән баш тартҡас, Ырымбур менән Исәт өйәҙе араһындағы оло юл һүнеп ҡалды. Үҙҙәренә ярҙам һорап, Бөрйәндән төрлө ырыуҙарға сапҡындар елде.

Сапҡындың бына ошолар хаҡында һөйләүе мөһим ине. Сапҡынды ашыҡтырмай ғына, Арыҫлан ошо иң кәрәк һүҙҙәрҙе көттө. Сөнки һәр хәбәрҙең бисмиллаһы була, уны тапшырыуҙың да, тыңлауҙың да үҙ тәртибе бар.

– Байбул старшина әйтә, ярҙамға ҡуҙғалһындар, ти.

– Эйе, кәрәк, бик кәрәк.

Сапҡынды оҙатҡас, тирә-йүнгә Арыҫландың атсабарҙары елде. Ул үҙе лә ҡайҙалыр йөрөп ҡайтты. Ишеткәндәре лә, уға килгән хәбәрҙәр ҙә күңелһеҙ ине. Неплюев йоҡлап ята буламы? Бөрйәндәр ҡуҙғалып, өс көн үтеүгә, йәғни 18 майҙа, уның әмере буйынса подполковник Исаковтың атлы отряды шул яҡтарға киткән. Биш көндән ул Ирәндек тауҙарына ла барып еткән. Яусылар урманға ҡасҡан. Бөрйән илендә Исаковтың карателдәре ҡыҙырып йөрөй, тиҙәр. Бикбулат, Алҡаш старшиналарҙы бығаулап, Ырымбурға оҙатҡандар. Осраған бер кешене эләктереп, үлтереп торалар икән. Брагиндың ҡатыны шулай талап итә, ти. Уның һорауы буйынса подполковник Исаков Әмин батырҙы, бик күп йәш егеттәрҙе тотоп алған да: «Был алмас уҡ кемдеке?» – тип, уҡтың хужаһын таптыра, ти. Бер кем бер нәмә әйтмәй икән. Шунан бөтә тотҡан егеттәрҙе аҫырға ҡушҡандар. Харап итә бит былярҙы, тип үҙ-ара кәңәшләшкәндәр ҙә, аҡһаҡалдар теге ҡатын менән Исаковтың ҡаршыларына барғандар.

– Теймәгеҙ, йәштәргә йәшәргә кәрәк әле. Улар бөткәс, Рәсәйҙе кем һаҡлар? Батшаға яһаҡ кем түләр? Йылҡы

өйөрҙәрен кем көтөр? Брагин түрәне улар үлтермәне. Уны беҙ дүртәү үлтерҙек, – тигән икән былар.

Подполковник Исаков быға ышана төшһә лә, Брагиндың яуыз ҡатыны яҡын да килмәй, ти. Оҙаҡ-оҙаҡ һорау алғандар был ҡарттарҙан. Уларҙы ни саҡлы ғына язалаһалар ҙа, бары-бер үҙ һүҙҙәрендә торғандар. Шунан был дүрт аҡһаҡалды Талҡаҫ буйындағы дүрт ҡарағасҡа аҫҡандар.

Икенсе сапҡын бөрйәндәрҙең, тамам еңелеүҙән һаҡланыу өсөн, артҡа һаҡлауғыс көс ҡалдыра-ҡалдыра, Яйыҡ аръяғына ыңғайлап, Ҡәнифә юлына төшөүҙәре тураһында һөйләне.

Арыҫлан бик ныҡ борсолдо.

Уны, бер яҡтан, Неплюев менән Тәвкилевтең ҡот осҡос мәкерҙәр ҡороуы, икенсенән, илдә күтәрелгән ҡырғын борсоно. Яу утының яңынан-яңы урындарҙа ҡабыныуы бер-бер артлы ишетелеп тора. Әле яңыраҡ ҡына һалына башлаған Йылайыр ҡәлғәһенә һөжүм иткәндәр. Ғәйнә иле бына-быначуҙғалырға тора, тиҙәр. Эргәләге Ҡыпсаҡ, Тамъян ерҙәрендә лә тыныс түгел. Улар бөгөндән үк бөрйәндәргә ярҙамға ҡуҙғалырҙар ине. Алдан һүҙ ҡуйышҡан көнөн генә көтәләрҙер. Бөтә хәлде күреп-белеп торған Неплюев та тик ятмайҙыр, әлбиттә. Ул Таймаҫ тархан ерендәге Үрге Яйыҡ ҡәлғәһен бик ашығыс рәүештә нығыттыра башланы. Төрлө губерналарҙан ярҙамға тип әллә нисәмә полк юлға сыҡҡан.

Кarателдәрҙең йәйләүҙәрҙе тапап, халыҡты ҡырып йөрөүенә ни бары ун биш йылдар самаһы ғына үткәйне бит әле. Тирмәләр яңынан ҡоролдо, өйҙәр һалынды, имгәнеп ҡороған ағастар урынына йәштәре үҫте, ләкин янған ауылдарҙың көл-күмерҙәре һаман юғалып бөтмәгән.

Йөрәк әрней. Йөрәк һыҡрай. Ул үткән яфаларҙы онота алмай. Бөгөнгөһөн күтәреүе ҡыйын.

Сабырлыҡ бөттө.
Асыу йылға булып таша.
Йөрәк ярһый, даулаша, ашҡына…

Күк йөҙөндә бер тапҡыр, ни бары бер генә ҡат йәшен ялтлап, күк күкрәү булһын – тағы ҡойон ҡубыр, урмандар ҡалтырар, һыуҙар ҡайнап ташыр… Утлы уҡтар осор, һөңгөләр ҡанланыр, илде үс ялҡыны ҡаплар…

1. Һүҙлек эше башҡарығыҙ: текстан таныш булмаған һүҙҙәрҙе яҙып алығыҙ, уларҙы дөрөҫ итеп әйтергә, үҙ телмәрегеҙҙә дөрөҫ итеп ҡулланырға өйрәнегеҙ. Улар менән бер нисә һөйләм төҙөп, һөйләмдәрегеҙҙе руссаға тәржемә итегеҙ.
2. *Төш юрау* һүҙбәйләнешенең мәғәнәһенә төшөнөгөҙ. Русса ул нисек әйтелә? Бер-берегеҙҙең төшөн юрап ҡарағыҙ. Өйҙә ата-әсәләрегеҙҙең, ололарҙың төш юрауға ниндәй ҡараште булыуын һорап белегеҙ, төш юрау ғәҙәтенең ҡайҙан килеп сыҡҡанлығын асыҡлағыҙ.
3. Текста ниндәй ырыу исемдәре телгә алына? Уларҙы күсереп алығыҙ. Быларҙан тыш һеҙ тағы ниндәй башҡорт ырыуҙарын беләһегеҙ? Уларҙың башҡортса һәм русса исемлеген төҙөгөҙ.
4. Текста ваҡиғалар Талҡаҫ күле буйында бара. Ҡайҙа ул? Уның тураһында белгәндәрегеҙҙе һөйләгеҙ, шуға нигеҙләнеп, ваҡиғалар барышын күҙ алдына баҫтырырға тырышығыҙ.
5. Ниндәй юл ул *Ҡәнифә юлы?* Ни өсөн баш күтәргән бөрйәндәр шул юл буйлап ҡасҡандар? Фекер алышығыҙ.
6. *Һәр хәбәрҙең бисмиллаһы була* тигәнде нисек аңлайһығыҙ? Текстан шул һөйләм булған урынды табып уҡығыҙ, әйтелгән фекерҙең айышына төшөнөгөҙ, уға үҙегеҙҙең ҡарашығыҙҙы белдерегеҙ.
7. Һуңғы абзацтың мәғәнәһен асыҡлағыҙ. Автор унда нимәне күҙ алдына килтерергә тырышҡан? Фекер алышығыҙ.

**43-сө күнегеү.** Бирелгән мәҡәлдең мәғәнәһен аңлатығыҙ.

Башлай белһәң, бөтөрә бел; ала белһәң, килтерә бел.

**44-се күнегеү.** Текстан ҡушылып яҙылған дүрт ҡушма һүҙ һәм һыҙыҡса аша яҙылған дүрт ҡушма һүҙ яҙып алығыҙ.

Өлгө: а) *олатай, ...*
б) *тау-урман, ...*

**45-се күнегеү.** Бирелгән һүҙҙәргә төрлө ялғауҙар өҫтәп, яңы исемдәр яһағыҙ.

Балыҡ, юл, бесән, йәшел, йылы, буя, өс, тырыш, бер, күрә, ур, ал, уйын, йыр.

Өлгө: *юл – юлсы, юлдаш.*

**46-сы күнегеү.** Нөктәләр урынына тейешле ялғауҙар өҫтәп, һөйләмдәрҙе яҙығыҙ. Ҡалын хәреф менән бирелгән һүҙҙәрҙе рус теленә тәржемә итегеҙ.

1. Таһир менән мин бер **район**... . Ул минең **яҡ**... . 2. Күрә... ал да ҡарҙы **күрә**. 3. Минең атайым – **һунар**... . 4. Ҡояш байыр алдынан ауылға көт... **ҡайтты**.

**47-се күнегеү.** Исемдәр нисек яһалғандар, асыҡлағыҙ. Рус теленә тәржемә итегеҙ.

Хәбәрсе, йыуғыс, киҫәк, киҫкес, ишкәк, йәштәш, белем, белгес, елкән, иләк, бысҡы, унлыҡ, ҡайынлыҡ, һыныҡ.

**48-се күнегеү.** Тасуири уҡығыҙ.

Тик үҙеңде наҙлап йәшәгәндә,
Ҡояш һүнә, күк һәм ер үлә.
Саҡ ҡына һин елләп, йәшнәгәндә,
Бөтә донъя балҡып терелә.

*(Р. Ғарипов)*

Ер көйгәндә, таш ярығы арыҡ булмаҫ,
Сабатаның ҡайышы ла сарыҡ булмаҫ,
Йыуашы ла эттең бары уҫалланыр –
Тик ҡойроғон ҡырҡҡан менән һарыҡ булмаҫ.
Дуҫым китте. Ҡуштан килде, дошман килде –
Йәрәхәткә ҡунған туҙан һауыҡтырмаҫ.

*(Р. Бикбаев)*

# Төньяҡ амурҙары

Яныбай ХАММАТОВ

## ТӨНЬЯҠ АМУРҘАРЫ

*(Романдан өҙөк)*

...Рус ғәскәренең Можайскиға табан сигенеүе тураһында ишеткәс, Наполеон шатланып бөтә алманы.

– Беҙ еңдек. Кутузов ҡаса. Тағы бер тапҡыр хәл иткес һуғыш булһа, ул үҙен еңелеүсе итеп танырға мәжбүр буласаҡ, ә император Александр үҙ ғүмерендә иң мәсхәрәле солохҡа ҡул ҡуясаҡ, – тип маҡтанды ул һәм маршал Мюрат командалығындағы кавалеристар корпусына сигенеүсе рус ғәскәрҙәрен эҙәрлекләргә ҡушты...

Беренсе башҡорт полкы рус ғәскәрҙәренең арьергардында ине. Яраланған майор Лачин урынына ваҡытлыса полк командиры вазифаһын башҡарыусы Буранбай, Мюрат ғәскәре яҡынлашыуын күреп:

– Егеттәр, уҡтарығыҙҙы әҙерләгеҙ, тоҫҡамайынса атмаҫҡа! – тип ҡысҡырҙы.

Һыбайлы французлар, аттарын ашыҡтырып ҡамсылай-ҡамсылай, бик тиҙ яҡынлаштылар. Иң алдағыһы берәй түрәлер, ахырыһы. Ул, әлдән-әле артына боролоп, һыбайлы һалдаттарға ниҙер ҡысҡыра.

Башҡорт егеттәре французлдарҙы ҡаршы алырға әҙерләнде.

Атына атланған Буранбай, өҙәңгегә баҫып, эйәренә менеп ултырғас, әкрен генә янын алды. Дошман кавалеристары уҡ атымы ергә килеп еткәс, осло тимер башағына ағыу һөртөлгән

уғын янының керешенә һалды ла кирелеп кереште тартты. Кереште ысҡындырған ыңғайына:

– Егеттәр, атығыҙ! – тип ҡысҡырҙы.

Французлар өҫтөнә уҡтар ямғыр булып яуҙы. Ағыулы уҡ тейеүҙән ҡурҡҡан дошман кавалеристары: «Амурҙар! Амурҙар!» – тип ҡысҡырынып, эйәр өҫтөндә борғолана башланылар. Икенселәре, үлемесле яраланып, ергә тәкмәсләне, ҡалғандары яңынан алға ташланды.

Һыбайлы французлар ныҡ яҡынайып, уҡ атыу мөмкинлеге ҡалмағас, башҡорттар ҡылыстарын, һөңгөләрен эшкә ҡуштылар. Уларҙың көслө ҡыҫымына французлар түҙмәне, артабан Можайскиға инергә маташыуҙың мәғәнәһеҙлеген күреп, кире боролоп саптылар.

Ҡараңғы төшкәс, Йәнтүрә әлеге һуғышта атҡан уҡтарын йыйып килергә рөхсәт һораны. Башҡа һуғышсылар ҙа шул уҡ теләкте белдергәс, Буранбай асыуланды:

– Французлар ҡанына буялған уҡтар өсөн үҙегеҙ харап булғығыҙ киләме?

– Иртәгә лә атыш булһа, уҡтарыбыҙ әҙ ҡалды, – тип ныҡышты башҡорт егеттәре.

Яралы һул ҡулын күкрәгенә ҡыҫҡан майор Лачин күренде. Буранбай:

– Мин бер нәмә лә белмәйем. Ана, полк командирынан һорағыҙ, – тине.

Майор Лачин егеттәрҙең теләгенә ҡаршы булманы.

– Уҡтары бөткәс, ҡалайтаһың инде. Барһындар. Тик һаҡ йөрөһөндәр. Мәйеттәр араһында ятыусы французларҙан һаҡ булығыҙ.

Полк командирынан рөхсәт алғас та, һәр йөҙ башлығы тарафынан билдәләнгән махсус кешеләр яңыраҡ ҡына көслө һуғыш булып үткән ергә киттеләр.

Уҡ йыйырға барыусылар оҙаҡ йөрөмәне. Ҡыҙыу итеп яғылған усаҡ тирәләп ултырған һуғышсыларға нимәләр һөйләп торған полк командиры, һүҙенән бүленеп:

– Йә, барығыҙ ҙа иҫән-һау әйләнеп ҡайттымы? – тип һораны.

– Ҡайттыҡ, майор әфәнде. Үҙебеҙ менән бергә яралы хрансуздарҙы ла алып ҡайттыҡ, – тине уҡ эҙләргә ебәрелгәндәрҙең башлығы.

– Бында, яҡтығараҡ, алып килегеҙ әле. Берәй офицерҙары юҡмы икән? – тине майор Лачин.

– Бар, офицерҙары ла бар, – тип шаулаштылар егеттәр.

Яралы француздар араһында торған дошман подполковнигын этә-төртә алға сығарҙылар. Уның йоҙроҡ тиклем булып шешенгән танауын тишеп сыҡҡан уҡтың бер яҡка һалынып торғанын күргәс, полк командиры көлөп ебәрҙе.

– Ҡайҙан эләктерҙегеҙ уны?

Егеттәр ҙә хахылдашып, көлөшә-көлөшә яуап ҡайтарҙы:

– Быныһы үле ат аҫтынан сыға алмай ята ине!

– Ҡалғандарын да үлеләр араһынан таптыҡ!..

Полк командиры әсирҙәрҙе берәм-берәм ҡарап сыҡты ла:

– Подполковниктың, бәлки, кәрәге булыр. Уны генерал Милорадович ҡарамағына оҙатырға, – тине.

– Дөрөҫ! – Буранбай шатланды. – Генералдарға ла бер мәрәкә булһын өсөн, уның танауындағы уғын алмайынса апарырға!

Буранбайҙың һүҙен майор Лачин оҡшатманы:

– Дошман тигәс тә, унан көлөү килешмәҫ. Яралыларға тейешле ярҙам күрһәтергә кәрәк. Ә подполковниктың танауына ҡаҙалған уҡты киҫеп алығыҙ!

– Беҙ эләкһәк, улар беҙҙе иркәләр инеме икән?

Полк командиры тарафынан саҡыртылған лекарь француз офицеры танауына ҡаҙалған уҡты бысып алырға әҙерләнә башлағас, Йәнтүрә ҡатынына асыуланып ниҙер әйтте лә бәләкәй генә бысҡы тотҡан лекарҙың ҡулына барып йәбеште.

– Уҡты быстыртмайым!

Лекарь күҙлеге аша Йәнтүрәгә ғәжәпләнеп ҡараны.

– Ниңә минең эшкә ҡыҫылаһығыҙ?

– Ул уҡ минеке, минеке! – тип ҡысҡырҙы Йәнтүрә. – Дошман эфисәренең бер танауы өсөн ошондай уҡты әрәм итергә һинең хаҡың юҡ! Быстыртмайым тигәс, быстыртмайым!

– Үҙеңдеке икәнен ҡайҙан беләһең?

– Беләм, беләм! Үҙем яһаған уҡты нисек белмәҫкә ти! Бына, күр, кисә генә алыштырып ҡуйған бөркөт ҡауырһыны ла шул көйөнсә! – тип, уҡты тартып алырға ынтылған Йәнтүрәнең ҡулы тейгәс тә, танауы һыҙлауға былай ҙа көскә түҙеп тороусы француз подполковнигы аҡырып ебәрҙе:

– А-а-а!

Егеттәр ҡысҡырып көлөштө. Лекарь, ни эшләргә белмәйенсә, бер Йәнтүрәгә, бер дошман подполковнигына ҡараны.

– Бысмайынса нисек алырға һуң уҡты?

– Бер яҡ осонан тарт та сығар, – тип Йәнтүрә ҡыбырлау менән, уның һәр хәрәкәтен һағайып күҙәткән дошман офицеры тағы ла аҡырып ебәрҙе һәм, ялынып-ялбарып, полк командирына үҙенсә нимәлер аңлатты. Лачин французға ниҙер әйтте лә Йәнтүрәне тынысландырырға тырышты:

– Уҡ хаҡын түләйем, ти подполковник.

– Нимәгә кәрәк миңә уның аҡсаһы! – Йәнтүрә полк командирын да тыңларға теләмәне.

– Уҡты тартып сығарыу мөмкин түгел. Уҡты осонан тотоп тартҡанда ла, уның ике яҡ башындағы тупаҡ французның танауын аҡтарасаҡ!

– Аҡтарһын! Уның суҡыш танауы өсөн ошондай һәйбәт уҡты әрәм иттерергә ни... – тип Йәнтүрә тағы уғына йәбеште. – Быстыртмайым тигәс, быстыртмайым!..

Полк командиры ҡушыуы буйынса бер төркөм егеттәр Йәнтүрәне меҫкен подполковник янынан ситкә алып киткәс тә, ул оҙаҡ ҡысҡырҙы:

– Уның танауына ҡаҙалған уҡтың үҙемдеке икәнлеген юлда белһәмсе!.. Хрансуздың суҡыш танауы өсөн ниндәй һәйбәт уҡ әрәм була бит!..

Ҡысҡырышҡан тауышты ишетеп, бер төркөм юғары дәрәжәле офицерҙарҙы эйәртеп килгән генерал Милорадовичты күргәс кенә, Йәнтүрә тынысланды.

1. Тексты өлөшләп, тасуири итеп уҡып сығығыҙ. Аңлашылмаған һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәрҙең мәғәнәһен асыҡлағыҙ.
2. Текстағы ваҡиғалар ниндәй һуғыш осоронда бара? Был һуғыш тураһында һеҙ нимәләр ишеткәнегеҙ, уҡығанығыҙ бар?
3. Текста байтаҡ ҡына тарихи шәхестәрҙең исемдәре телгә алынған. Кемдәр улар? Һеҙ улар тураһында нимәләр беләһегеҙ?
4. Шул тарихи шәхестәрҙең үҙегеҙгә иң оҡшағаны тураһында белешмә төҙөгөҙ. Белешмәгеҙҙе русаға тәржемә итегеҙ.
5. Текста Буранбайҙың исеме телгә алына. Кем ул? Уның шәхесенә бәйле мәғлүмәттәр эҙләгеҙ.
6. Француз кавалеристарының, башҡорт яугирҙарын күргәс, «Амурҙар! Амурҙар!» тип ҡурҡып ҡысҡырыныуҙарына аңлатма бирегеҙ.

7. Уғын быстыртмаҫҡа тырышҡан Йәнтүрәнең образына характеристика бирегеҙ. Башланғыс кластарҙа өйрәнгән «Йәнтүрә хикәйәһе»н иҫегеҙгә төшөрөгөҙ. Уның ҡатынының һуғышта ни эшләп йөрөүен аңлатып ҡарағыҙ.
8. Өҙөктөң йөкмәткеһен үҙ һүҙҙәрегеҙ менән һөйләгеҙ.
9. Яныбай Хамматовтың тормош юлы тураһында кескәй белешмә төҙөгөҙ.

**49-сы күнегеү.** Тасуири уҡығыҙ.

## ЕЛ

Ел һуғалыр, дауыллатып торалыр,
Ҡойон булып, көслө буран ҡылалыр.
Ҡай саҡ буран, ҡай саҡ дауыл-ғәрәсәт,
Ҡай саҡ аҡрын, яй булалыр, тыналыр.

*(Аҡмулла)*

**50-се күнегеү.** Фонетик күнегеүҙәрҙе дөрөҫ уҡығыҙ.

| | | | |
|---|---|---|---|
| боҙҙоң | боҙҙо | боҙҙа | боҙҙан |
| ҡағыҙҙың | ҡағыҙҙы | ҡағыҙҙа | ҡағыҙҙан |
| мөгөҙҙөң | мөгөҙҙө | мөгөҙҙә | мөгөҙҙән |
| һүҙҙең | һүҙҙе | һүҙҙә | һүҙҙән |

| | | |
|---|---|---|
| көтөүсе | ҡоролоҡ | ҡоролош |
| болонлоҡ | һөтсөлөк | көйөнөс |
| боролош | көтөүлек | солоҡсолоҡ |

| | | |
|---|---|---|
| әүрәү | йыйылыу | ауырыуы |
| көйләү | юйылыу | ауыуы |
| әүәләү | йәйләү | яйлауы |
| эйелеү | өйөлөү | йыуылыуы |

| | | |
|---|---|---|
| ҡарағас | Ҡарабай | Аҡтырнаҡ |
| ҡарағош | Ҡараяҡуп | Аҡтүш |
| Ҡариҙел | аҡҡош | аҡһаҡал |
| ҡарағойроҡ | Ағиҙел | Аҡкүл |

**51-се күнегеү.** Текста Йәнтүрә французды *хрансуз* тип атай. Ниңә икән?

**52-се күнегеү.** Шиғырҙы яттан яҙығыҙ.

Бер ҡараһаң, ишелеп-ишелеп,
Болоттар ергә ауа;
Бер ҡараһаң, үс иткәндәй,
Ямғыр ҡатыш ҡар яуа.

*(Т. Йософов)*

**53-сө күнегеү.** Һүҙҙәрҙе башҡорт теленә тәржемә итегеҙ.

Север, юг, запад, восток, головоломка, ледокол, треугольник, полуостров, двухстволка, чайная ложка, яблоня, подсолнечник, жаворонок.

**54-се күнегеү.** Һөйләмдәрҙе тәртипкә килтерегеҙ.

1. Бик тиҙ яҡынлаштылар французлар һыбайлы.
2. Йәнтүрәне егеттәр бер төркөм подполковник меҫкен янынан алып киттеләр ситкә.
3. Париж ҡалаһы уратып алынған ҡоймалар бейек менән.

## КУТУЗОВ

*(Башҡорт халыҡ йыры)*

Полководец батыр ир Кутузов
Уттар, һыуҙар кисте, ҡурҡманы,
Һай, Кутузов,
Полководец икән Кутузов.
Наполеондың баҫҡынсы яуҙарын
Көтөү кеүек әйҙәп туҡманы,
Һай, Кутузов,
Полководец икән Кутузов.

Рәсәй ҙә генә иле, һай, киң икән,
Донъяла иң гүзәл ер икән,
Һай, Кутузов,
Полководец икән Кутузов.

Ирҙәре лә батыр ирҙәр икән,
Ил дошманын яуҙа еңә икән,
Һай, Кутузов,
Полководец икән Кутузов.

1. Тексты тасуири итеп ҡысҡырып уҡығыҙ. Шиғри юлдарҙың рифмалашыу үҙенсәлектәренә иғтибар итегеҙ.
2. *Утты, һыуҙы кисте* һүҙбәйләнешен русаға тәржемә итегеҙ. Русса һәм башҡортса һөйләм төҙөп яҙығыҙ.
3. Текста ҡабатланған *һай* һүҙенә иғтибар итегеҙ. Ул ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарай? Йырҙа ниндәй функция үтәй? Башҡорт халыҡ йырҙарында ошондай уҡ маҡсатта ҡулланылған тағы ниндәй һүҙҙәр беләһегеҙ? Рус халыҡ йырҙарында бындай һүҙҙәр бармы?
4. Кем ул Кутузов? Ни өсөн башҡорттар уның тураһында йыр сығарғандар?
5. Йырҙың тәүге ике куплетын ятлағыҙ. Фонояҙмаға эйәреп, уны йырлап өйрәнегеҙ.

## ҠАҺЫМ ТҮРӘ

*(Риүәйәт)*

Бер заман француз батшаһы Наполеон, Рәсәйгә ҡаршы һуғыш асып, рус батшаһы Александрҙы Мәскәүҙән ҡыуып сығарған. Александр батша, үҙ ғәскәрҙәре менән Мәскәүҙе кире ҡайтарып алырға ни тиклем тырышһа ла, һис булдыра алмаған. Көн уйлаған, төн уйлаған был. Уйлай торғас, шундай фекергә килде, ти:

– Минең ҡул аҫтымда башҡорт тигән халыҡ бар бит әле. Шуларҙан ғәскәр һорап ҡараһам, нисек булыр икән?

Уның ярҙамсылары ла:

– Дөрөҫ әйтәһең, батша, был эште булдырһа, шулар ғына булдырыр, – тигәндәр.

Шулай кәңәшләшкәс, башҡорт иленә илсе ебәргәндәр. Батшанан хәбәр алғас, башҡорттарҙың аҡһаҡалдары, йыйылышып, кәңәш-төңәш иткәндәр.

– Барайыҡ, туҡмайыҡ шул дошмандарҙы, күрһәтәйек батырлығыбыҙҙы, – тигәндәр. Тирә-яҡҡа һөрән һалғандар, дошманға ҡаршы һуғышырға теләгән кешеләрҙе, ҡоралдарын алып, атҡа менергә саҡырғандар.

Күҙ асып йомғансы бик күп ғәскәр йыйылған. Уларға башлыҡ итеп Ҡаһым түрәне һайлағандар. Юлға сыҡҡандар шулай. Ашамағандар, эсмәгәндәр, ун көн, ун төн барғандар.

Шулай бара торғас, Мәскәүгә барып еткәндәр. Башҡорттарҙы күреү менән, Наполеон Мәскәүгә ут төрткән дә ғәскәрен алып ҡаса башлаған. Быны күргәс, башҡорттар, дәртләнешеп китеп, Наполеондың артынан баҫтыра башлағандар. Ун көн, ун төн баҫтырғандар. Наполеондың ғәскәрен туҡмай-туҡмай, рус батшаһы еренән бөтөнләй сығарып ташлағандар.

Шунан һуң Ҡаһым түрә бер алдына ҡараған, бер артына ҡараған, тик сит батша еренә инергә баҙнат итмәгән. Ғәскәрен эйәртеп, кире Мәскәүгә килгән. Килһә, Александр батша, дошмандар китте инде тип иркенләп, тәхетендә йәйрәп тик ултыра, ти. Ҡаһым түрә быных былай ултырыуын оҡшатмаған. Батшаға ҡарап:

– Йә, ниңә былай вайымһыҙ ултыраһығыҙ, батшам? Ул мәлғүн французд арҙы былай ғына ҡалдырмайыҡ, үҙҙәренең ҡылыҡтарын үҙҙәренә күрһәтәйек: улар Мәскәүҙе алһалар, беҙ Парижды алайыҡ! Миңә сит батша еренә сығырға рөхсәт итегеҙ, мин ғәскәрем менән китәм, – тигән.

Бик оҙаҡ уйлағас, батша:

– Рөхсәт бирәм, әйҙә барығыҙ! – тигән.

Шулай рөхсәт алғас, башҡорт ғәскәрҙәре киренән французд арҙы ҡыуа киткән. Улар артынан рус һалдаттары эйәргән. Башҡорттар:

Бәһлеүән башҡорт халҡын дан итеп,
Батша хәҙрәт алды ҡашына,
Һай, илкәйем, нәҙек билкәйем.
Атабыҙҙан ҡалған уҡ-һаҙаҡты
Яуҙырайыҡ дошман башына,
Һай, илкәйем, нәҙек билкәйем! –

тип йырлап барғандар. Урал тауы ла уларҙы:

Ишетмәйҙәрме икән сит илдәрҙә
Урал улдарының, һай, данын.
Ниндәй яуға ҡаршы барһалар ҙа,
Һис күрмәнем еңмәй ҡайтҡанын! –

тип дәртләндереп торҙо, ти. Быны ишеткән башҡорттар тағы ла батырланыбыраҡ алға елдерҙе, ти.

Юлда быларға Австрия тигән батшалыҡтан аша үтергә тура килгән. Австрия халҡы, быларҙы күреп:

– Һеҙ ниндәй халыҡ? – тип һорағандар.

– Беҙ – башҡорттар, – тигәндәр былар. Австрия халҡы башҡорттарҙы электән үк ишетеп белә икән:

– Ә, теге йылҡы ите ашай торған халыҡ икән, – тигәндәр.

Австрия ерен үтеп, башҡорттар француз еренә килеп еткәндәр. Французлар быларҙы күргәс, тырым-тыраҡай ҡаса башлағандар. Башҡорттар, дошмандың ҡасҡанын күреп, уларҙы ҡыуа төшкән. Дошманды ҡыуа-ҡыуа, бер заман Парижға ла барып еткәндәр. Барып етһәләр, ни күҙҙәре менән күрһендәр – Париж ҡалаһы бейек ҡоймалар менән уратып алынған, ти. Наполеондың бөтә ғәскәре шунда инеп бикләнгән, ти. Ҡойманың мылтыҡ ҡуйып ата торған тишектәре лә бар, ти. Французлар шул тишектәрҙән генә мылтыҡ менән атып яталар, ти.

Быны күреп, Ҡаһым түрә:

– Мылтыҡҡа – мылтыҡ! – тип, рус ғәскәренең алға сығыуын һораған. Рус ғәскәрҙәре бер көн, бер төн мылтыҡтарҙан атҡандар. Ә башҡорттар уҡтарын һауаға ҡарап ата башлағандар. Үргә атылған уҡтар, кире әйләнеп, ҡойма артында боҫоп ултырған французларға төшөп ҡаҙала башлаған. Быны күреп, французлар түҙмәгән, ҡойма янынан ҡаса башлаған. Уларҙың ҡасҡанын күреп, беҙҙең ғәскәрҙәр ҡапҡа янына сабышып килеп еткәндәр ҙә шул ыңғайға ҡапҡанан бәреп инеп тә киткәндәр ҡалаға. Париж ҡалаһының бөтә урамдарын ҡаплап алғандар, ти.

Беҙҙекеләр, Парижды алып, уның батшаһын баш һалдырғас, унда бер нисә көн байрам иткәндәр. Унан һуң Александр батша әйткән:

– Әйҙәгеҙ, Мәскәүгә ҡайтабыҙ, шунда барығыҙға ла бүләк бирермен, – тигән.

Бөтә ғәскәрҙәр Мәскәүгә ҡайтып киткәндәр. Ҡайтҡан саҡта башҡорттар ошо йырҙы йырлағандар:

Урал тауҡайҙары сағыллы,  
Урал тауы беҙҙе һағынды,  
Һай, илкәйем, нәҙек билкәйем.  
Бөгөн үлһәбеҙ ҙә, үкенмәйбеҙ,  
Дошман еңелеп, маҡсат табылды,  
Һай, илкәйем, нәҙек билкәйем.

Бөтә ғәскәрҙәр Мәскәүгә йыйылғас, Александр батша һуғышта батырлыҡ күрһәткән кешеләрҙе үҙ тирәһенә саҡырып алған да:

– Йә, батырлығығыҙ өсөн ни һорайһығыҙ? – тигән. Башҡалар мал, миҙал, түрәлек һорағандар. Батша уларға һорағандарын биргән. Шунан һуң башҡорттарҙан һораған:

– Һеҙ бик күп батырлыҡ күрһәттегеҙ. Йә, һеҙгә ни кәрәк?

Ҡаһым түрә уға шулай тип яуап биргән:

– Беҙ ярҙамға ғына килдек. Бер нәмә лә һорамайбыҙ.

Батша бындай яуаптан бик аптырап ҡалған, ти. Оҙаҡ уйлағандан һуң, ул былай тине, ти:

– Мин һеҙҙең теләгегеҙҙе ишетмәнем. Улайһа, мин һеҙгә теләгән тиклем ер бирәм, һине, Ҡаһым түрә, генерал-майор итәм. Сәйфетдин, Мортаза, Насир исемле батырҙарығыҙҙы есаул итәм, Әбүбәкер, Ярулла тигән батырҙарығыҙға хорунжийлыҡ бирәм, – тигән.

Шунан һуң башҡорттар үҙ ерҙәренә – Уралға ҡайтып киткәндәр.

1. Текстан үҙегеҙ тәүгә осратҡан һүҙҙәрҙе күсереп алып, мәғәнәләрен асыҡлағыҙ, руссаға тәржемә итегеҙ.
2. Риүәйәтте ҡысҡырып, интонация менән уҡып сығығыҙ. Һүҙҙәрҙең дөрөҫ әйтелешенә иғтибар итегеҙ.
3. Риүәйәттең йөкмәткеһен һөйләгеҙ. Телмәрегеҙҙә яңы һүҙҙәрҙе ҡулланырға тырышығыҙ.
4. 1812 йылғы Ватан һуғышында башҡорт ғәскәрҙәренең ҡатнашыуы тураһында белгәндәрегеҙҙе иҫегеҙгә төшөрөгөҙ. Был ваҡиғаларҙың риүәйәттә нисек һүрәтләнеүенә иғтибар итегеҙ, ундағы әкиәткә хас урындарҙы табып уҡығыҙ.
5. Парижды алыу ваҡиғаһын тасуирлаған урынды бәләкәй генә изложение итеп яҙығыҙ.

## ИСЕМДӘРҘЕҢ КИЛЕШ МЕНӘН ҮҘГӘРЕҮЕ

Башҡорт телендә исемдәр килеш менән үҙгәрә. Рус телендәге кеүек, башҡорт телендә лә алты килеш бар. Башҡорт телендә килеш формаларының мәғәнәһе күп түгел, нигеҙҙә, бер, ике генә.

Рус телендә иһә бер килеш формаһының мәғәнәһе предлогтар ярҙамында әллә нисә төрлө була. Мәҫәлән, башҡорт

телендә төшөм килештең мәғәнәһе бирәү генә – эштең объекты, йәғни эш төшә (килештең исеме лә шуға күрә төшөм бит). Ә рус телендә уға тап килгән винительный падеж объектты ла (книгу), урынды ла (за стол, под стол), урын менән объектты ла бергә (об стол) белдерә.

**55-се күнегеү.** Башҡорт телендәге килештәрҙең исемдәрен, уларҙың һорауҙарын уҡығыҙ, мәғәнәләренә иғтибар итегеҙ.

**Төп** килеш – *кем? нимә?* (кто? что?)

**Эйәлек** килеш – *кемдең? нимәнең?* (кого? чего?) – Предметтың нимәгәлер эйә булыуын белдерә.

**Төбәү** килеш – *кемгә? нимәгә? ҡайҙа?* (кому? чему? куда?) – Эштең кемгә, нимәгә төбәлгән булыуын йәиһә эштең йүнәлешен белдерә.

**Төшөм** килеш – *кемде? нимәне?* (кого? что?) – Эш төшә торған объектты белдерә.

**Урын-ваҡыт** килеш – *кемдә? нимәлә? ҡайҙа?* – Эштең урынын йәиһә ваҡытын белдерә.

**Сығанаҡ** килеш – *кемдән? нимәнән? ҡайҙан?* – Эштең башланыу урынын йә башланыу объектын белдерә.

**56-сы күнегеү.** Килеш формаларындағы исемдәрҙең мәғәнәүи айырмаларын билдәләгеҙ.

**Төп** килеш – Малай, китап.
**Эйәлек** килеш – Малай**ҙың** тубы, китап**тың** тышы.
**Төбәү** килеш – Малай**ға** әйттем, китап**ҡа** яҙма.
**Төшөм** килеш – Малай**ҙы** күрҙем, китап**ты** алды.
**Урын-ваҡыт** килеш – Малай**ҙа** бар, китап**та** яҙылған.
**Сығанаҡ** килеш – Малай**ҙан** ал, китап**тан** өйрән.

Килеш исемдәрен һәм уларҙың һорауҙарын ятлағыҙ.

Башҡорт телендә бөтә исемдәр ҙә килеш менән үҙгәрә ала, һәм уларға яңғырауы буйынса ғына айырылған оҡшаш ялғауҙар ҡушыла. Мәҫәлән, эйәлек килештең оҡшаш 16 ялғауы бар:

-ҙың, -ҙең, -ҙоң, -ҙөң;
-тың, -тең, -тоң, -төң;

-ның, -нең, -ноң, -нөң;

-дың, -дең, -доң, -дөң.

Ә рус телендә килеш ялғауҙары, күп булһалар ҙа, бер төрлө булмайҙар. Мәҫәлән, эйәлек килештең ялғауҙары (окончания родительного падежа): *у рек-**и**, сад-**а**, вод-**ы**, мат(ь)-**ери**, воробь-**я**, рабоч-**его*** һ. б.

Башҡорт телендә килеш ялғауҙарының ниндәйен һайлау түбәндәгеләргә ҡарай:

– һүҙ ниндәй хәрефкә бөтә;

– ҡалын һүҙме, әллә нәҙек һүҙме;

– һуңғы ижектә ***о*** йәки ***ө*** бармы?

Рус телендә иһә күплек ялғауын да, килеш ялғауын да алмай торған байтаҡ һүҙ бар: *кино, метро, кофе* һ. б.

**Килеш һәм күплек ялғауҙары таблицаһы**

| Һүҙ бөткән хәреф | Килештәрҙең ялғауҙары | | | | | Күплек ялғауҙары |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | Эйәлек килеш | Төбәү килеш | Төшөм килеш | Урын-ваҡыт килеш | Сығанаҡ килеш | |
| а, ы, о, я, ю, е, и, ә, ө | -ның, -нең, -ноң, -нөң | -ға, -гә | -ны, -не, -но, -нө | -ла, -лә | -нан, -нән | -лар, -ләр |
| л, м, н, ң, з, ж | -дың, -дең, -доң, -дөң | -ға, -гә | -ды, -де, -до, -дө | -да, -дә | -дан, -дән | -дар, -дәр |
| р, й, ҙ, у, ү | -ҙың, -ҙең, -ҙоң, -ҙөң | -ға, -гә | -ҙы, -ҙе, -ҙо, -ҙө | -ҙа, -ҙә | -ҙан, -ҙән | -ҙар, -ҙәр |
| к, ҡ, п, с, ҫ, т, ф, х, һ, ц, ч, щ, б, в, г, д, ш | -тың, -тең, -тоң, -төң | -ҡа, -кә | -ты, -те, -то, -тө | -та, -тә | -тан, -тән | -тар, -тәр |

**57-се күнегеү.** Һүҙҙәрҙе рус теленә тәржемә итегеҙ.

| *ҡайҙа?* (где?) | *ҡайҙа?* (куда?) |
|---|---|
| урманда | урманға |
| ауылда | ауылға |
| өйҙә | өйгә |
| клубта | клубҡа |
| катокта | катокка |
| ҡалала | ҡалаға |

**58-се күнегеү.** Бирелгән һүҙҙәрҙе килеш менән үҙгәртегеҙ. Ялғауҙарҙың төрлөлөгөнә иғтибар итегеҙ.

Бала, кәмә, тау, һүҙ, тыш, һөт, моң, тән.

**59-сы күнегеү.** Түбәндәге ялғауҙарҙың нимә аңлатҡанын билдәләгеҙ. Нөктәләр урынына тейешле исемдәр ҡуйып яҙығыҙ.

...дың, ...ҡа, ...нән, ...ҙар, ...гә, ...һы, ...ем, ...та.

**60-сы күнегеү.** Еләк-емеш исемдәрен русса варианты менән тап килтерегеҙ.

| | |
|---|---|
| еләк | черника |
| ҡайын еләге | смородина |
| ер еләге | ягода |
| ҡурай еләге | калина |
| бөрлөгән | брусника |
| ҡара көртмәле | рябина |
| ҡыҙыл көртмәле | костяника |
| ҡарағат | малина |
| балан | земляника |
| мышар (миләш) | клубника |

**61-се күнегеү.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.

Ике һүҙҙең береһендә – ят тел һүҙе,
Ҡолағымды ярып бара, бөттө түҙем.
Ҡыйналғанмы, ҡыйланғанмы башҡорт теле?
Кем ғәйепле? – Заманыммы? Әллә үҙем?

*(Ҡ. Аралбай)*

1. Шиғыр нимә тураһында?
2. *Ҡолағымды ярып бара* һүҙбәйләнеше нимә аңлата?
3. *Ҡыйналғанмы, ҡыйланғанмы* һүҙҙәренең синонимдарын табығыҙ.
4. Ошо шиғыр буйынса бер-берегеҙҙән интервью алығыҙ.

## РУС-ФРАНЦУЗ ҺУҒЫШЫ БӘЙЕТЕ

Наполеонға тәхет кәрәк, үҙ еренә һыймаған,
Беҙ Мәскәүгә кергәстен, ул да үҙен һынаған.

Французлар, бында кергәс, танынылар үҙҙәрен;
Уңда башҡорт, һулда типтәр – таба алмайҙар эҙҙәрен.

Французның күпере, тимер икән селтәре,
Башҡорт, типтәр тыуған икән французлан элгәре.

Французларҙың аттары ҡырын ерҙә тулайҙыр,
Башҡорт менән типтәрҙәр французды турайҙыр.

Башҡорт, типтәр уҡтары, тура бара күптәре,
Беҙ һуғышта күргәндәр әле бында бөтмәне.

Французның илдәре, түңәрәк тиҙәр күлдәре,
Французларҙы ҡыуған саҡта, үттек беҙ күп илдәрҙе.

Мәскәүгә лә керҙек беҙ, Наполеонды күрҙек беҙ,
Французды еңгәндә, ер емереп йөрөнөк беҙ.

Французды ҡыуҙыҡ беҙ, үҙ иленә һөрҙөк беҙ,
Французды ҡыуғанда, күп һыуҙарҙа йөҙҙөк беҙ.

Наполеондың эшләпәһе ҡанға тапланған ине,
Беҙ һуғыштан ҡайтҡанда, илдәр шатланған ине.

1. Бәйеттә ниндәй һуғыш тураһында һүҙ барғанын асыҡлағыҙ.
2. Был һуғышта башҡорттарҙың ҡатнашыуы тураһында белгәндәрегеҙгә таянып, әңгәмә ойоштороғоҙ.
3. Бәйетте тасуири итеп, бәйет стилендә дөрөҫ итеп уҡыу күнекмәләре үткәрегеҙ.

## БӘЙЕТ ТУРАҺЫНДА ТӨШӨНСӘ

**Бәйет** – ауыҙ-тел ижадының бик үҙенсәлекле жанры. Ул ауыҙ-тел ижады менән яҙма әҙәбиәт араһындараҡ тора: яҙып та, телдән дә ижад ителә.

Бәйет, ғәҙәттә, берәй ваҡиғаны хикәйәләүгә ҡорола. Шуға уны шиғри хикәйә тип атарға мөмкин. Ниндәй ваҡиғаны хикәйәләүенә ҡарап, уларҙы **тарихи бәйеттәргә** һәм **тормош-көнкүреш бәйеттәренә** бүлеп йөрөтәләр. Тарихи бәйеттәр төрлө тарихи ваҡиғаларҙы (һуғыш, ихтилал һ. б.), ә тормош-көнкүреш бәйеттәре кешеләрҙең көндәлек тормошонда булған ваҡиғаларҙы хикәйәләй, һуңғыларында һүҙ күбеһенсә кемдеңдер берәй бәхетһеҙлеккә осрауы (һыуға батып, янып үлеүе һ. б.) тураһында бара. Улар араһында өгөт-нәсихәткә ҡоролғандары («Ололарҙың йәштәргә бер нәсихәте»), сатирик йөкмәткелеләре лә («Хәйлә тураһында бәйет») осрай.

Бәйеттәр көйләп башҡарыла.

**62-се күнегеү.** Мәҡәлдәрҙе уҡығыҙ. Мәғәнәләрен аңлатығыҙ.

1. Баҫымсаҡты баҫмалатҡан күп булыр.
2. Ир булған ир егерме биштә баш булыр, ир булмаған ир иллелә лә йәш булыр.
3. Айыуҙан ҡурҡҡан бүрегә тарыған, дошмандан ҡурҡҡан үлемгә тарыған.
4. Ҡуҙҙы ҡуҙғатма – ҡулың бешер.
5. Ҡурҡаҡ ҡуй башынан да ҡурҡыр.

**63-сө күнегеү.** Йомаҡтарҙы уҡығыҙ.

1. Уны туҡмайҙар, һуғалар,
   Ул иламай, һикерә генә.

2. Шыма табанлы сана
   Атһыҙ алға саба,
   Етеҙ булһа аяҡтар,
   Ҡулда булһа таяҡтар.

3. Үҙе үҫемлек, унан да моңло нәмә юҡ.

4. Йәнле йәнһеҙҙе ҡыйнай, йәнһеҙ ҡысҡырып илай.

Яуаптары: *ҡурай, туп, барабан, саңғы.*

# Утлы йылдар ауазы

*Шәйехзада БАБИЧ*

## БАШҠОРТ ХАЛҠЫНА КӨЙЛӨ ХИТАП

*(Өҙөк)*

Башҡорт халҡы, һиңә бер һүҙ әйтәм,
Минең әйткән һүҙҙе тыңлаһаң,
Зәки һеҙҙе һатҡан, тигән һүҙгә
Ышанмаҫһың, алйот булмаһаң.
Уйыңа ла алма, башҡорт булһаң,
Әхмәтзәки беҙҙе һатыр, тип!
Ҡөрьән үбеп, Зәки ант иткән,
Уйлай күрмә, антын тапар, тип.
Башҡорттағы намыҫ, иман менән
Ярһып тибә Зәки йөрәге,
Ҡолаҡ асма дошман ҡотҡоһона!
Зәки – Башҡортостан терәге.
Башын һалып Зәки эшкә кергән
Етем Башҡортостан бәхетенә,
Валлаһи, ул һатмаҫ Тыуған илен
Донъя аҡсаһына, тәхетенә.
Ышан, ышанғандай бер Аллаңа,
Зәки һинең тоғро уғылың!
Утҡа бешер Зәки, һыуға төшөр,
Әммә һатмаҫ намыҫ-күңелен…
Беҙ ҡушылдыҡ ҡыҙыл тарафына,
Ҡыҙыл беҙҙең яҡлы булғанға.
Азат Башҡортостан йөмһүриәтен
Таныйым тип хуплап торғанға...

Большевиктар әйтә: был донъяла
Ярлы халыҡ хөкөмө йөрөһөн, тип.
Ярлы, эшселәрҙең хас дошманы
Буржуйҙарҙың тамыры ҡороһон, тип.
Дутов, Колчак әйтә: эш башына
Алтын тажлы батша менһен, тип.
Батша менеп, һаман Николайҙай,
Ярлыларҙың ҡанын имһен, тип.
Большевиктар әйтә: ҡоллоҡ бөтһөн,
Ярлы халыҡ рәхәт йәшәһен,
Ирек көнө тыуып, был донъяла
Тигеҙ, яҡты көндәр яһаһын...

1. Һүҙлек эше башҡарығыҙ. Тексты иғтибар менән уҡып, таныш булмаған һүҙҙәрҙе яҙып алығыҙ, мәғәнәләрен асыҡлағыҙ. Улар араһынан иҫкергән һүҙҙәрҙе табып, мәғәнәләренә төшөнөгөҙ, хәҙерге ваҡытта ни өсөн ҡулланылмауын йәки бик һирәк ҡулланылыуын аңлатығыҙ. Бындай һүҙҙәрҙе нимә тип атайҙар?
2. Текста һеҙгә аңлашылмаған тағы ниндәй һүҙҙәр осраны? Күмәкләп уларҙың мәғәнәләрен асыҡлағыҙ.
3. *Утҡа бешер Зәки, һыуға төшөр* тигәнде һеҙ нисек аңлайһығыҙ? Һөйләмде руссаға тәржемә итеп яҙығыҙ. Кемдең тәржемәһе яҡшыраҡ? Ни өсөн?
4. Әҫәрҙә һүҙ кем тураһында бара? Һеҙ уның шәхесе, эшмәкәрлеге тураһында нимәләр ишеткәнегеҙ, уҡығанығыҙ бар? Автор уны ни өсөн яҡлаша? Улар араһында ниндәй уртаҡлыҡ бар?
5. Шиғырҙа ҡайһы осор тураһында һүҙ бара? Ул заман тураһында һеҙҙең тағы ниндәй әҫәрҙәр уҡығанығыҙ, кинолар ҡарағанығыҙ бар? Белгәндәрегеҙҙе һөйләгеҙ.
6. Һеҙ Ш. Бабичтың тағы ниндәй әҫәрҙәрен беләһегеҙ? Уның руссаға тәржемә ителгән берәй әҫәрен табып уҡығыҙ, уны башҡортсаһы менән сағыштырығыҙ. Һеҙҙеңсә, уларҙың ҡайһыһы яҡшыраҡ? Ни өсөн?

**64-се күнегеү**. Ҡалын хәрефтәр менән бирелгән һүҙҙәргә баҫым төшөрөп, һөйләмдәрҙе дөрөҫ уҡығыҙ.

1. Беҙ бөгөн саңғыла **йөрөнөк.**
2. Беҙ бөгөн **саңғыла** йөрөнөк.
3. Беҙ **бөгөн** саңғыла йөрөнөк.
4. **Беҙ** бөгөн саңғыла йөрөнөк.

## ИСЕМДӘРҘЕҢ ЭЙӘЛЕК ЗАТЫ МЕНӘН ҮҘГӘРЕҮЕ

Башҡорт телендәге исемдәргә уларҙың ниндәйҙер бер заттыҡы (I, II, III) икәнен белдереүсе ялғауҙар ҡушыла ала: *(минең) ҡәләм-ем, (һинең) ручка-ң, (уның) ҡусты-һы, (беҙҙең) атай-ыбыҙ, (һеҙҙең) өй-өгөҙ.*

Был ялғауҙар рус телендәге *мой, твой, его, наш, ваш, их* һүҙҙәренә тура килә. Мәҫәлән, *мой пенал – пеналым.*

Ә III заттың ялғауы йыш ҡына эйәлекте белдермәй, бер һүҙҙе икенсеһенә бәйләп кенә килә. Мәҫәлән, *Өфө ҡала-һы, Урал тау-ы, Салауат Юлаев проспект-ы, Бирҙегол ауыл-ы.*

**65-се күнегеү**. Һүҙбәйләнештәрҙе башҡорт теленә тәржемә итегеҙ.

Моя рубашка, твой карандаш, наш дом, его сумка, наш сад, их улица, мой город, их город, твоё пальто, его велосипед.

**66-сы күнегеү.** Йәйә эсендәге һүҙҙәрҙе кәрәкле формаға ҡуйып, һөйләмдәрҙе күсереп яҙығыҙ.

1. Таштуғай ҙа, һинең (йылғаҡай)
   Тоноп ҡына аҡҡан һыу икән.
2. Илкәйемә лә шул ҡайтыр инем,
   (Аяҡтар) талһа, имгәкләп.
3. Ерән ҡашҡа (атҡай) да, башын сайҡай (малҡай).
   Алдарында (һоло) бөтһә, һыҙыла йөрәк (майҡай).
4. Табаҡ та ғына табаҡ, ай, аҡ ҡағыҙ –
   Буранбайҙың яҙған да (хаттар).
5. Беҙ һуғышҡа ингәндә, бәхилләштек барыбыҙ.
   Беҙ һуғыштан сыҡҡанда, алдан сыҡты (дан).

*(Башҡорт халыҡ йырҙарынан)*

**67-се күнегеү**. Бирелгән хәрефтәр араһына ҡалған хәрефтәрҙе алфавит тәртибендә яҙығыҙ.

1. Н, … Ф.
2. Е, … М.

**68-се күнегеү.** Бирелгән һүҙбәйләнештәрҙе рус теленә тәржемә итегеҙ. Айырмаға иғтибар итегеҙ.

минең ҡәләм – ҡәләм минеке
беҙҙең ат – ат беҙҙеке
һинең дәфтәр – дәфтәр һинеке

**69-сы күнегеү.** Түбәндәге һүҙҙәргә эйәлек заты ялғауҙары өҫтәп яҙығыҙ.

Апай, ағай, атай, әсәй, олатай, өләсәй.

Өлгө: *атайым, атайың, атаһы, атайыбыҙ, атайығыҙ, атаһы.*

**70-се күнегеү.** Шиғырҙы яттан яҙығыҙ.

Әйҙә, бейе, бабушка,
Бейе, беҙҙән ҡалышма;
Спасибо, кергәнһең,
Дөбөрләгән тауышҡа!
*(Ш. Бабич)*

Башҡорт телендә туғанлыҡты белдереүсе һүҙҙәр, ғәҙәттә, эйәлек заты формаһында ҡулланыла. Сағыштырығыҙ:
Рус телендә: *Папа приехал. Иду к дедушке.*
Башҡортса: *Атайым ҡайтты. Олатайым (ҡартатайым) янына барам.*

*Рәшит СОЛТАНГӘРӘЕВ*

## ОСТО БӨРКӨТ...

*(Повестан өҙөк)*

Таңғы сәғәт дүрттә башҡорт бригадаһы частары, казак корпусының төп көстәре торған урындарҙы уратып алып, позицияға сыҡҡайны һәм фарман ғына көтә ине. Бөтәһе лә алдан уйланғанса барҙы. Ибраһимов ҡарамағындағы йәйәүле дивизион, ҡараңғынан һәм казактарҙың ғәмһеҙлегенән файҙаланып, һиҙҙермәй генә ерҙән шыуышып барҙы ла,

дошман позицияһына йөҙ сажин самаһы ҡалғас, ҡуйы үлән араһына йәшеренеп ятты. Тауыш сығармаҫ өсөн, окоп ҡаҙырға рөхсәт ителмәне, һөйләшеү, тәмәке тартыу тыйылды. Хәйер, башҡорт бригадаһында тартыусылар юҡ та ине.

Разведка күрһәтеүенсә, казактар ныҡлы позиция ала алмаған, нығытмалар ҙа яһалмаған – был яҡ тыл иҫәпләнә, башҡорттарға һөжүм башлау уңайлы буласаҡ.

Төп көс иҫәпләнгән Йәнбулатов полкы Берёзовканы уратып үтте лә, Яйыҡты кисеп, урманға йәшеренде. Икенсе полк уң яҡтан урын алды – ул казактарҙың сигенеү юлын бикләргә тейеш. Мортазин үҙе ошо полкка яҡын торорға булды. Тау башындағы ҡарт имән башына күҙәтеү пункты эшләтте, шунда телефон һуҙырға бойорҙо. Һөжүм итеүсе ғәскәрҙәр бынан ус төбөндәге кеүек күренәсәк.

Сәғәт теүәл дүрт тулғас, ул элемтәселәргә үҙен корпус командиры менән тоташтырырға ҡушты. Генерал йоҡлап ятҡандыр, ахыры, телефонға көттөрөп кенә килде. Асыулы тауыш менән:

– Генерал Бакич тыңлай! – тине.

– Генерал әфәнде, комбриг Мортазин һөйләй! Вәғәҙәмде үтәнем: мин килдем! – Муса быны бер кинәйә менән әйтте.

Көтөлмәгән тауыштан генерал бер аҙға юғалып ҡалды шикелле, ни әйтергә лә белмәне. Әммә бер аҙҙан үҙен ҡулға алды һәм командирға хас тауыш менән:

– Мортазин әфәнде?! Комбриг, әле һеҙ ҡайҙа? – тип һораны.

– Алыҫ түгел! Оҙаҡламай осрашырбыҙ! – Муса трубканы һалды ла икенсе телефондан фарман бирҙе:

– Аҡ казактар позицияһына – фугас снарядтары менән!

Августың һалҡынса аяҙ төнө уртаға ярылды – тау итәгенән атылған снаряд, әсе һыҙғырып, казактарҙың тылына барып төштө. Күккә ут ялҡындары, ҡыҙғылт төтөн, тупраҡ урғылды. Шунан икенсеһе, өсөнсөһө… Артынса йәйәүлеләр атакаға күтәрелде, үҙҙәре күренмәй, тик башҡортса һөрәнләгәндәре генә ишетелә. Күп ғәскәр килә, тип уйлаһындар өсөн ата-ата, аҡыра-аҡыра киләләр.

Йоҡлап ятҡан казактар таң һарыһынан ҡупҡан ғәрәсәттән ҡаушап ҡалды. Байтаҡ ваҡыт улар яғынан бер ниндәй ҙә яуап булманы. Бер аҙҙан ғына пушка, пулемёттары телгә килде. Тик казактар, кемдең ҡайҙа икәнлегенең айышына төшөнә

алмайынса, бушлыкты дөмбәҫләй, уныһы ла үҙҙәренең рухын күтәреү өсөн генә ине.

Бер аҙҙан команда биргән, һөрәнләгән тауыштар ишетелә башланы. Казактар Ибраһимов дивизионына ҡаршы китте. Улар алданды, әммә егеттәрҙең дә хәле мөшкөл: оҙаҡламай башҡорт һалдаттары өҫтөндә казак ҡылыстары уйнай башлаясаҡ.

Мортазин телефондан фарман бирҙе:

– Йәнбулатов, башла! – Фарманды башҡортса биреп торҙо ла русса өҫтәне. – Лавой!

Казактар, ғөмүмән, кавалерия, үҙ өҫтөнлөгөнә, атаканың уңышлы тамамланырына ныҡлы ышанған сағында, «лава», йәғни «ташҡын» тигән тактиканы ҡуллана. Хәтәр күренеш! Бейек тауҙар араһында күпсеп ятҡан даръяның ҡапыл быуаһы бүҫелеп китеп, һыу ташҡыны тау аҫтына ишеләме ни! Ҡара яу булып торған һыбайлылар, ҡылыстарын ҡындарынан һурып, бер юлы күтәрелә һәм ҡатлы-ҡатлы булып елә. Ҡалын стена, уны мылтыҡ менән дә, туп менән дә тишерлек түгел – алда килгән һыбайлылар тәгәрәй икән, улар урынын шунда уҡ арттағылары ала – стеналағы ярыҡ үҙенән-үҙе ямала тора. Ысын ташҡын – уны бер ниндәй көс тә туҡтата алмай. Һыу ташҡыны юлындағы бөтә нәмәне ватып, ҡырып, һепереп алып китһә, кавалерия ташҡыны донъяны ут, ҡан, тупраҡ менән бутап үтә. Тик, был тактиканы ҡулланғанда, дошманды бер һелтәүҙә тәгәрәтергә тейешһең. Бер һелтәүҙә йыға һуҡмаһаң, ул үҙе, ҡайҙалыр йәшереп тотҡан көсөн килтереп сығарып, иң йомшаҡ ереңә һуғыуы һәм үҙеңде туңкәреп һалыуы бар. Мортазин менән Йәнбулатов үҙ көстәренә ышана ине, шуға ла ошо тактиканы һайланылар. Башҡорттарҙың кәйеф шәп, позиция уңайлы, ҡорал, боеприпас етерлек.

Һуғыш ҡыҙғандан-ҡыҙҙы. Казактарҙың ҡасып ҡотолорға самалауын күргән башҡорттар тағы ла ярһыбыраҡ саба башланы: ҡамарға ла ошонда ҡырып бөтөрөргә! Ах, ҡәһәр! Ҡайҙандыр, пулемёт һөйрәп, өс казак килеп сыҡты ла тау итәгендә сурайып сығып торған таш артына барып ятты. Пулемёт – кавалерияның ҡан дошманы.

Пулемёт тыҡылдай ҙа башланы – бер нисә кавалерист аттары менән сәсрәп барып төштө. Шунан тағы бер нисәү. Тегеләрҙең күңел үҫте, пулемёттары йәпле урында, атып ҡына алырлыҡ түгел, ә артиллерия ҡуҙғалғылағансы, бар ғәскәрең-

де түшәп һаласаҡ. Казактарҙың пулемёты оҙон-оҙон итеп һиптерә. Күберәк аттарға ата – әлеге хәлдә шулай яҡшыраҡ улар өсөн. Атһыҙ кавалерия – ғәскәр түгел! Казактарҙың күңел үҫте – ҡасыуҙы онотоп, үҙҙәре башҡорттарҙы уратырға самалай башланы. Уратып алып тураҡларға ла пулемёт ышығында ысҡынырға! Эш хөрт! Муса бер ниндәй ҙә ҡарарға килә алмай. Артиллеристар тураға төҙәп ата алмаясаҡ – пулемётты күрмәйҙәр!

Шул саҡ башҡорт һыбайлылары араһынан берәү айырылып сыҡты ла уң яҡтан урата биребирәк тауға килеп менде һәм туп-тура пулемётҡа ҡарап сапты. Пулемётсылар быны әллә күрмәйерәк ҡалды, әллә күрһәләр ҙә, һарыҡ көтөүен боғаҙлаған бүре шикелле, ҡаныгып, ғәскәргә атыуын дауам итте. Ә һыбайлыһы бер дыуамалдыр инде – пулемётты бороп, үҙенә бер һиптереү генә етә бит!.. Ғүмерен генә әрәм итәсәк! Кәүҙәһе менән атының муйынына һылашҡан да саба ғына!

Муса күҙен биноклдән алмайынса тора. Кем булды һуң был дыуамал? Бригадаһындағы егеттәрҙе яҡшы белә бит. Әллә ят кавалерисмы? Туҡта, был теге Заһиҙулла бит! Әйе, шул! Икенсе полктың беренсе эскадронынан. Көйөргәҙе буйындағы Таймаҫ тигән ауылдан. Бригада Тор йылғаһы буйында торғанда, килеп ҡушылғайны уларға. Пулемётсылар һыбайлыны күреп ҡалды. Әммә бер кеше өсөн пулемёттарын бороп, ваҡыттарын әрәм итеп маташманылар. Береһе, аяҡ үрә тороп баҫты ла, төҙәп тә тормайынса, атып та ебәрҙе. Оҫта атыусылыр – кавалерист елгә осҡан ише генә булды. Харап иттеләр егетте!

Әммә сәйер ине: кешеһе юҡ булды, ә ат пулемётсыларға табан сабыуын дауам итте! Бәй! Тегеләргә ике-өс сажин ғына ҡалғайны, «үле» кавалерист ҡапыл эйәренә менеп ултырҙы, шул ыңғайға бар ғәйрәте менән ҡылысын һелтәне. Пулемёт ҡапыл тамағына торғандай тонсоҡто – яланды һыбайлы башҡорттарҙың һөрәнләүе баҫты. Ә Заһиҙулла, атын ҡапыл туҡтата алмайынса, ары сапты.

– Молодец, Заһиҙулла! – Муса ҡысҡырып ебәрҙе. – Вот циркач!

Алдаған был казакты, үлгән булып ҡыланған бит! Өҙәңгегә бер аяғы менән генә аҫылынып барған да кире менеп ултырған.

Заһиҙулла быны менән генә хушһынманы, пулемёт янында ҡалған ике казакты ла бөтөрөргә уйланы. Аһ, өлгөрә алманы, аттылар! Пистолеттан аттылар! Офицерҙар булған-

дыр. Зaһиҙулла аҡрын ғына ергә ҡоланы. Быныһы инде уйын түгел ине.

– Сволочтар! – Муса йоҙроғон йомарланы. Бындай егеттәр йыш тыумай донъяға! Пулемётсыларҙы тереләй эләктерергә!

Йәшен тиҙлегендә Тор йылғаһы буйындағы бер хәл күҙ алдына килде.

...Манежда яңы килгән һалдаттарҙы уйнаталар. Бының менән полк командирының урынбаҫары шөғөлләнһә лә, ул көндө манежға комбриг үҙе лә сыҡҡайны.

Манеж тигәс тә, кавалерия ғәскәрҙәрен өйрәтеү өсөн бөтә шарттарына килтереп эшләнгән манеж түгел инде. Йылға буйындағы бер ҙур тигеҙлектә кәртәләр, соҡорҙар яһап, сабыу өсөн тал сыбыҡтары ҡаҙап сыҡтылар, хәлдән килгәненсә шартына килтерергә тырыштылар. Ошонда төрлө яҡтарҙан йыйылған башҡорт егеттәрен ҡылыс сәнғәтенә өйрәтеү бара.

Муса, һөнәре буйынса артиллерист булһа ла, үҙен кавалерист итеп тә иҫәпләй һәм уға хаҡлы ла ине. Атта оҫта йөрөй, ҡылыс менән оҫта саба. Был көндә ул һалдаттарҙы үҙе өйрәтергә булды. Атына атланып, манеж уртаһына сыҡты ла ҡылысты нисек тоторға, дошманға яҡынайғас, өҙәңгегә нисегерәк баҫырға – кәүҙәнең ауырлығын саба торған ҡул яғына күсерергә лә, беләкте бөкмәйенсә, бар көс менән һелтәргә кәрәклеген аңлатырға тотондо.

– Ҡайһы берәүҙәр, эфестан дөрөҫ тотмағанға, сапҡанда ҡулының быуынын сығарып ҡуя, ә бешмәгәнерәктәре атының ҡолағын, хатта үҙенең ҡулын, аяғын саба... Һелтәгәндә, тәнеңдә ниндәй көс бар, шуның менән һелтәргә кәрәк: таш тура килә икән – таш, баш тура килә икән – баш уртаға ярылырлыҡ булһын...

Һүҙен тамамлағас, күҙҙәрен баҙлатып ҡарап торған һалдатты янына саҡырҙы. Дыуамаллығы йөҙөнә сыҡҡан, баҡыр шикелле ерән сәсле егет күп уйлап торманы:

– Иптәш командир, кәрәк икән, мин һинең үҙеңде өйрәтә алам! – тип һалдырҙы. Һалдаттың ҡыйыулығы комбригка оҡшаны, шуға ла дорфалығына иғтибар итмәне:

– Әйҙә, өйрәт! – тине. Сыҡһа, бына ошондайҙарҙан сыға инде!

Егет фарман биргәнде көтмәне, әллә үҙенә, әллә арғымағына дәрт бирер өсөн, яман итеп һөрәнләне лә сабып сығып китте. Бының аты ла үҙе кеүегерәктер, бер ынтылыуҙан уҡ

йәҙрә кеүек атылды, һалдаттар һағайҙы, юҡҡа ғына тәүәккәлләмәгән был еҙ баш, бер ғилләһе бар. Эйәрҙә ултырыуҙары уҡ икенсе бит.

Ерән һыбайлы сапҡан ыңғайына ҡылысын һурып сығарҙы, уныһы ла бик матур, оҫта килеп сыҡты. Сығарҙы ла, йөҙөн ҡояшта ялтлатып, юлдың ике яғына теҙелгән «лоза»ларҙы киҫергә тотондо. Оҫта! Шундай саба – киҫелгән тал ергә туп-тура ҡаҙалып ҡына төшә. Был инде кавалерияла хеҙмәт итеүселәрҙең ирешә алмаҫ хыялы. Егеттәр ауыҙҙарын асҡандар ҙа үҙ-үҙҙәрен онотоп күҙәтәләр, һәр эш, ситтән ҡарағанда ғына еңел күренә, ҡайһылай ауыр икәнен башына төшкән кеше үҙе генә белә.

Сыбыҡтарҙы сабып бөткәс, Заһиҙулла арҡаһынан аҫыулы карабинын алды. Программала мылтыҡтан атыу ҡаралмағайны. Сәп юҡ. Шуға ул, сабып барған килеш, алыҫтағы ағас башына төҙәп атып ебәрҙе. Былай күрһәтер өсөн генә атты. Ағастан ҡарғалар күтәрелде, береһе ергә ҡолап төштө. Моғайын, яңылыштан эләккәндер, әммә бик хәтәр күренеш булды. Манеж геү итеп ҡалды.

Халыҡтың таң ҡалыуы быны дәртен генә арттырҙы. Заһиҙулла карабинын аҫып ҡуйҙы ла ат өҫтөндә егетлектәр күрһәтергә тотондо. Баш кейемен ырғытып ебәрә лә, кире әйләнеп килеп, шуны ерҙән эйелеп ала, сабып барған килеш ат бауыры аҫтынан әйләнеп сығып, кире эйәренә менеп ултыра. Ҡыланмағаны ҡалманы.

Һөнәрен күрһәтте-күрһәтте лә, шулай итәләр ул, ҡустыларым, тигән ҡиәфәт менән, атын яй ғына атлатып, сафҡа килеп торҙо.

Мортазин егеткә нык һоҡланды, шунда уҡ янына саҡыртты.

– Кем өйрәтте быны һиңә? – тип һораны унан.

– Кем өйрәтһен, үҙем! Мин бит башҡорт! – Хәҙер ул бөтөнләй ҡыйыуланғайны.

– Башҡорт булғас, ниңә ерәнһең? – Мортазин уйынлыысынлы һораны.

– Уныһын инде, Мортазин ағай, атайымдан һора!

Комбригка һалдаттың ҡыйыулығы оҡшаны:

– Рәхмәт, башҡорт! – Ул, һоҡланыуын йәшермәйенсә, тегегә ҡарап торҙо ла ҡосаҡлап алды. Шунан билендәге ҡылысын уҡ сисеп бирҙе.

– Башҡортҡа хеҙмәт итәм! – Заһиҙулланың яуабы шулай булды.

Көйөргәҙе егетен харап иттеләр, ахырыһы…

Мортазин телефонға икенсе полк командирын саҡырҙы:

– Хәҙер һиндә булам!

Ул килеп еткәндә, полк егеттәре, аттарына атланып, һуғышсан сафҡа теҙелгән һәм фарман ғына көтә ине. Комбриг күренеү менән, йөҙәрләгән күҙ уға текәлде, һалдаттар ситтә һуғыш, ҡырылыш барғанын күрә һәм казактар менән һуғышҡа атлыға ине.

Бригада командиры сабып килгән ыңғайға ҡылысын ҡынынан һурып сығарҙы, ыңғайына һөрәнләп ебәрҙе:

– По-о-олк!

Командирҙың тауышынан һыбайлылар ғына түгел, аттар ҙа тертләп ҡуйғандай итте. Ғәскәр, тартылған керешкә ҡуйылып, шыйлап осоп китергә әҙер уҡ кеүек тора. Ҡуш ҡына!

– Башҡорт еренең азатлығы өсөн! Минең арттан!

Кереш ысҡынды – йөҙәрләгән уҡ туп-тура алға атылды. Иртәнге һауаны тағы ат тояҡтары тауышы ҡапланы. Йөҙәрләгән тамаҡтан сыҡҡан оран бөтә тауышты күмде. Башҡорт егеттәре атакаға китте, ерҙә тағы бер мәхшәр ҡупты, һыбайлылар, дошманына ҡурҡыу һалыу, үҙҙәренә ғәйрәт биреү, арғымаҡтарына дәрт биреү өсөн, бар көсөнә ҡысҡыра, һөрәнләй, әллә ҡайҙағы казактарҙы яман һүҙҙәр менән һүгә.

Бригада командиры атакаға йөрөргә тейеш түгел, һәр хәлдә, әле ярамай. Ошондай хәл иткес мәлдә бригада яҙмышын, үҙ ғүмерен бизмәнгә һалырға хаҡы юҡ уның. Командир, хәүефһеҙ урында тороп, алышҡа етәкселек итергә тейеш. Әммә Мортазин – Мортазин инде, әллә Заһиҙулланың бөтә ғәскәрҙе таң ҡалдырған ҡыйыулығы, әллә башҡорттарҙың ҡысҡыра-ҡысҡыра казактарҙы ҡыуыуы ярһытты ла ебәрҙе. Муса ғәскәренең алдында килә. Һуғышсыларына дәрт өҫтәр өсөн генә түгел, ә кинәнес өсөн ҡылыс менән сабышырға әҙерләнә.

Көтмәгәндә резерв килтереп сығарып, шуның менән дошманды атакалау – һәр армияға ла таныш хәйлә. Уны күптән ҡулланғандар һәм ҡулланалар. Әммә күпме генә таныш тактика булмаһын, көтөлмәгәндә яңы ғәскәр килеп сығыуы дошманға шаңҡытҡыс тәьҫир итә. Әле лә, уйламаған ерҙән атакаға ташланған башҡорт егеттәрен күргәс, казактар ҡаушап ҡалды. Үҙ-ара һөрәнләргә тотондолар:

– Башкиры окружают! Спасайся!

– К обозам!..

Казактар аттарын кире яҡҡа бора башланы. Ух, был ҡәбәхәт Мортазин!

Был ни?! Нәҙек тояҡлы Дон арғымағына атланған казак сабыулашҡан һыбайлылар араһынан сыҡты ла тура Мортазинға ташланды. Япа-яңғыҙы! Ни эшләргә уйлай был?! Уның ҡыйыулығы яу яланындағы бөтә кешене аптыратты, хатта башҡорттар ҙа баҙап ҡалғандай булды.

Һыбайлы казак туп-тура Мортазинға табан килә, үҙе йылмая, әйтерһең, күптәнге дуҫын осратҡан:

– А-а, Муртазин, попался! Я тебя давно искал! – Ҡыҙыл тирәсле фуражкаһынан ҡара бөҙрә сәстәре өлтәйеп сығып торған һылыу офицер тигеҙ аҡ тештәрен йылтыратып йылмая.

Мәсьәлә асыҡланды: казак офицеры башҡорт атлы бригадаһы командирын күҙмә-күҙ ҡылыс һуғышына саҡыра. Икәүҙән-икәү генә! Бөтә ғәскәр алдында егетлек күрһәтергә – башҡорттарҙың атаҡлы командирын тураҡлап ырғытырға дәртләнә. Казак өсөн шунан да ҙурыраҡ дан юҡ!

Көсөнә, таһыллығына таянған, үҙенең өҫтөн сығырына саҡ ҡына ла шикләнмәгән был һыбайлы ат өҫтөндә оҫта йөрөүе, мылтыҡтан тура атыуы, ҡылыс һуғышында бер кемгә лә ал бирмәүе менән генә түгел, хатта һылыулығы, ыҫпайлығы менән дә бөтә Урал казактары араһында дан тотҡан егерме дүрт йәшлек сотня командиры есаул Калюжный ине. Кем ул Мортазин Калюжный өсөн?! Йөк аты, пушкарь! Ул ҡылысын бер һелтәгәнсе, есаул ун мәртәбә уйнатып аласаҡ! Ошо оҫталыҡтары өсөн войсковой атамандан көмөш һаплы ҡылыс менән бүләкләнгән кеше лә ул!

Калюжный тәүҙә, сысҡанды уйнатҡан бесәй шикелле, Мортазинды албырғатып йөрөтәсәк. Үҙе лә һуҡмаясаҡ, тегене лә һуҡтырмаясаҡ, йәнен ашаясаҡ был башҡорттоң. Уңайлы мәле еткәс, шундай һелтәйәсәк – башы гильотинала киҫелгән кеүек кенә буласаҡ. Ҡылысының оҫталығы шунда: сабылған баш, ағасынан өҙөлгән алма шикелле, ергә туп-тура төшөргә тейеш. Сәнғәт!

Әлбиттә, башҡорттар уны ғәфү итмәйәсәк. Йә башын киҫәсәктәр, йә арҡанлап алып китәсәктәр. Уның ҡарауы, даны бөтә Урал казактары араһына таралаcаҡ: есаул Калюжный Мортазиндың башын өҙгән!

Төрлө яҡҡа сабыулаған казактар эште һиҙеп алды ла аттарын яйлатты, былар яғына ҡарап аҡырыша башланы:

– А-а, Калюжный, покажи этому басурману его же голову!

Алыш, үлтереш онотолғандай булды, бөтәһенең күҙе ошо икәүҙә. Командирҙарының хәүефле хәлдә ҡалғанын башҡорттар аңламай түгел, бер нисә һыбайлы шунда уҡ былар яғына уҡталды. Мортазинды әрсәләп алырға иттеләр.

– Иптәш Мортазин! Муса ағай! Былай килегеҙ! – Береһе хатта уның атының теҙгененә ынтылды.

– Кит! – Мортазин ҡот осорлоҡ тауыш менән екерҙе лә атын шпорланы. Хәҙер сигенергә урын юҡ. Ошонда казактан ҡурҡҡаныңды белдерҙеңме, ғәскәреңде ташла ла кит! Мусаның әле бер ҡасан да әлеге шикелле сәмләнгәне булмағандыр. Арғымаҡ атылып алға сыҡты, һағауылдар артта ҡалды.

Мортазин есаулдың үҙенән күпкә өҫтөн икәнен белә; әгәр ҙә көсөнә ышанмаһа, алышҡа сығып та тормаҫ ине. Казак – казак инде, уны тыуғандан алып кеше үлтерергә өйрәткәндәр. Муса ҡылысты үҙе лә насар белмәй, әммә есаулға еткерә алмайҙыр. Ул икенсегә – беләгенә таяна. Комбригтағы көстө әле берәү ҙә белеп етмәй – ул бит бер һелтәүҙә аттың муйынын өҙә саба, кешене ҡап урталай яра ала. Көс хәтәр унда!

Һыбайлылар араһы яҡыная, икеһенең дә беләктәре бөгөлмәҫ ҡылыс шикелле ҡатҡан. Мөләйем казактың һылыулығы юғалды, ул бер йыртҡыс рәүешенә инде. Ә Мусаға ҡарауы ҡурҡыныс!

Һыбайлылар икеһе лә уң яҡ өҙәңгеләренә тороп баҫты, кәүҙәләрен шул яҡҡа ҡыйшайтты. Кем кемде?! Әгәр есаул комбригтың башын киҫһә, ҡасырға йыйынған казактар, кире боролоп, башҡорттар өҫтөнә ябырыласаҡ! Ә инде комбриг Калюжныйҙы сәсрәтә икән, тегеләрҙең береһе лә имен ҡалмаясаҡ!

Бына тиңләштеләр. Ҡылыстар ялтланы... Әммә бөтә кеше көткән йән өшөткөс алыш килеп сыҡманы: казак офицеры ҡылысын уйнаҡлатып өлгөрмәне, ялт итеп ергә ҡоланы. Ни булғанын берәү ҙә аңғарманы. Муса бер генә һелтәне – тегенең шашкаһына шундай килтереп һуҡты, махсус ҡойолған таҙа ҡорос та түҙмәне, шартлап һынды. Муса нисек һуғырға белә ине – эфестан саҡ ҡына юғарыраҡ бәрергә! Башта һыныҡ ҡылыс төштө, артынса есаул ҡоланы. Кавалеристар белә: бындай хәл бик һирәк була һуғышта.

– Алығыҙ! – Муса һағауылдарына ҡысҡырҙы ла ары сапты. Ерҙә ятҡан кавалерист – кеше түгел!

Башҡорт бригадаһының казак корпусы менән алышы оҙаҡҡа барманы. Казактарҙың иҫән ҡалғандары Верхнеуральск яғына ҡасты, йөҙгә яҡыны әсиргә төштө. Уларҙан тыш, бригадаға «максим» системаһындағы өс пулемёт, өс гаубица, әллә күпме патрон, снарядтар, аҙыҡ-түлек, кейем эләкте. Мортазин мораҙына иреште – ҡыҙылдарға башын юғары тотоп сығасаҡ.

Алыш тамамланғас, ул Калюжныйҙы штабҡа килтереүҙәрен талап итте. Яҡындан күргеһе килә ине был ҡаһарманды.

Ике һалдат эре генә ҡиәфәттә казакты төрткөләп индерҙе. Әле генә бер-береһен үлтерергә йыйынған был ике кеше күҙҙәрен бер-береһенә текләне. Есаул үҙен нимә көткәнен аңлай, әлбиттә, әммә тәкәббер кешенең күҙендә ҡурҡыу ҙа, ялбарыу ҙа күренмәй ине. Ул яҫы битле башҡортҡа һауалы ҡиәфәттә ҡарап тора.

Муса һалдаттарға әсирҙең ҡулын сисергә, үҙҙәренә сығып китергә бойорҙо. Улар сығып киткәс, ике стаканға тултырып араҡы һалды ла береһен казакка һондо, икенсеһен үҙенә алды. Бер ни аңламаған һылыу казак офицеры ғорур тора һәм ни эшләргә лә белмәй.

– Тот, есаул! Һинең ҡыйыулығың өсөн!

Ҡурҡыныс Мортазиндың был һүҙҙәре казакка тәьҫир итте шикелле. Әммә һаман ышанмай тора бирҙе.

– Мин һине тотмайым, ебәрәм! – Муса, эс, тигән шикелле генә ымланы. Ул үҙе араҡыны яратмай ине, әммә алдындағы казак әллә ни уйламаһын өсөн эсеп ебәрҙе. Казактың күҙе йәшләнгәндәй булды, ҡурҡыныс бәндәнән кире һылыу егеткә әйләнде. Өндәшмәй генә эсте лә кире аҫҡа ҡараны. Муса һағауылды саҡыртты ла әсиргә теймәҫкә, бригада торған ерҙән имен сығарып ебәрергә бойорҙо.

Казак офицеры сыҡты. Муса тәҙрәгә боролманы. Хәрби хәрбиҙе аңлай, бындай хәлдең һәр кемгә килеүе бар. Есаул йәл ине уға.

1. Тексты өлөшләп ҡысҡырып уҡып сығығыҙ. Унда таныш булмаған һүҙҙәрҙе табып, уларҙың ниндәй мәғәнәлә ҡулланылғанын асыҡлағыҙ.

2. Текста осраған хәрби териминдарҙы яҙып алығыҙ, уларҙың нимә аңлатҡанлығын асыҡлағыҙ.

3. *Ус төбөндәге кеүек, һарыҡ көтөүен боғаҙлаған бүре шикелле, елгә осҡан ише, баҡыр шикелле ерән сәсле, йәҙрә кеүек атылды, осоп китергә әҙер уҡ кеүек* һүҙбәйләнештәрен текстан табып, мәғәнәләрен асыҡлағыҙ, уларҙы тәржемә итегеҙ.

4. *Пулемёттар телгә килде; Баш осондағы ҡылыстар уйнай; Күңел үҫте; Пулемёт оҙон-оҙон итеп һиптерә; Пулемёт тамағына торғандай тонсоҡто* һөйләмдәрен руссаға тәржемә итегеҙ, һөйләмдәрегеҙҙең хәбәрен икенсе һүҙҙәр менән алыштырығыҙ.

5. Башҡорт һыбайлыларын тасуирлағыҙ. Улар нимә өсөн һуғышҡандар? Белгәндәрегеҙгә таянып, ошо турала үҙ-ара әңгәмә ойоштороғоҙ.

6. Башҡорт һыбайлыһы Заһиҙулланың казак пулемётсылары менән алышын тасуирлаған өлөштө бер нисә тапҡыр уҡып, иҫегеҙҙә ҡалғандарға үҙегеҙҙең дә фантазияны өҫтәп, кескәй хикәйә төҙөгөҙ.

7. Комбриг Муса Мортазинды һеҙ нисек итеп күҙ алдына килтерҙегеҙ? Уға хас сифаттарҙы яҙып алып, тәржемә итегеҙ.

8. Муса Мортазиндың Калюжный менән алышын тасуирлап һөйләгеҙ.

9. Нисек уйлайһығыҙ, Мортазин казактар атаманын иреккә ебәреп, дөрөҫ эшләгәнме?

10. Текстың йөкмәткеһен һөйләгеҙ. Телмәрегеҙҙә 3-сө, 4-се эштәрҙә бирелгән һүҙбәйләнештәрҙе һәм һөйләмдәрҙе ҡулланырға тырышығыҙ.

11. «Осто бөркөт» повесынан алынған был өҙөктә тасуирланған ваҡиға тураһында Муса Мортазиндың «Башҡортостан һәм башҡорт ғәскәрҙәре граждандар һуғышында» тигән китабынан ентеклерәк мәғлүмәт табырға мөмкин.

12. «Комбриг Муса Мортазин» тигән белешмә яҙығыҙ.

**71-се күнегеү.** Башҡортостандың иң бейек тауы, иң ҙур күле, иң ҙур ҡалаһы, иң ҙур районы, иң оҙон йылғаһы исемдәрен уҡығыҙ ҙа уларҙы русса яҙығыҙ.

Ямантау, Асылыкүл, Өфө, Белорет, Ағиҙел.

Өлгө: *Ағиҙел – Агидель.*

**72-се күнегеү.** Башҡорт фамилияларының һәм исемдәренең башҡортса һәм русса яҙылышын сағыштырығыҙ.

| | |
|---|---|
| Бикмухаметов – Бикмөхәмәтов | Расуль – Рәсүл |
| Каримов – Кәримов | Ильдар – Илдар |
| Гадельшин – Ғәҙелшин | Тагир – Таһир |
| Кульчурин – Ҡолсурин | Гульдар – Гөлдәр |
| Уметбаев – Өмөтбаев | Зульфия – Зөлфиә |
| Наиль – Наил | Джамиля – Йәмилә |

**73-сө күнегеү.** Үҙегеҙҙең кластағы уҡыусыларҙың исем һәм фамилияларын башҡортса яҙығыҙ.

**74-се күнегеү.** Башҡортостандың 20 географик атамаһын башҡортса һәм русса парлап яҙығыҙ.

Өлгө: *село Ново-Белокатаево – Яңы Балаҡатай ауылы.*

**75-се күнегеү.** Ҡайһы бер географик атамаларҙың мәғәнәһе русса тәржемәлә боҙолған йә бөтөнләй икенсе мәғәнә алған.

Сағыштырығыҙ:

Төйәләҫ (йылға) – Худолаз, Малаяҙ (ауыл) – Малояз, Ейәнсура (район) – Зианчура, Күгәрсен (ауыл) – Кугарчи, Асы (ауыл) – Ассы, Ҡуянтау (ауыл) – Куянтаево, Арғужа (күл) – Аргази.

Был исемдәрҙе русса ҡайһылай яҙыу дөрөҫөрәк?

**76-сы күнегеү.** Башҡортса яңғырашы бик матур булған түбәндәге исемдәрҙе русса нисек яҙырһығыҙ?

Гәүһәр, Йәүһәриә, Гөлсәсәк, Йыһаниә, Көнһылыу.

**77-се күнегеү.** 75-се күнегеүҙәге атамаларҙы түбәндәгесә яҙып йөрөтөү дөрөҫ булыр ине.

Төйәләҫ – Туяляс (хәҙер Баймаҡ, Сибай ҡалаларында шулай тип яҙалар ҙа)

Ейәнсура – Еянсура
Малаяҙ – Малаяз

Күгәрсен – Кугарсин, Кугарсен
Асы – Асы
Ҡуянтау – Куянтау
Арғужа – Аргужа

## ХИТАП ТУРАҺЫНДА ТӨШӨНСӘ

**Хитап** – халыҡҡа йәки айырым шәхескә поэтик мөрәжәғәт. Был жанр боронғо сәсәндәрҙән килә: ил, халыҡ алдында уның яҙмышы, киләсәге өсөн ҡурҡыныслы хәл килеп тыуғанда, улар, халыҡты берҙәмлеккә, үҙ бәхете өсөн көрәшкә саҡырып, шиғри һүҙ менән мөрәжәғәт иткәндәр. Шуға ла хитаптарҙың күпләп ижад ителеүе халыҡ тарихындағы һынылышлы мәлдәргә тура килә. XIX быуатта был жанрға М. Аҡмулла («Башҡорттарым, уҡыу кәрәк!»), XX быуат башында Ш. Бабич, Д. Юлтый, Ғ. Хоҙаяров һ. б. шағирҙар мөрәжәғәт итә. Бөйөк Ватан һуғышы осоронда ла поэтик өндәмә формаһындағы хитаптар осрай. Р. Ниғмәтиҙең «Үлтер, улым, фашисты!» әҫәре быға миҫал.

# Уралып ятҡан Уралтау

*Диҡҡәт БУРАҠАЕВ*

## УРАЛ ТАУҘАРЫ

Урал – мөһабәт тауҙар, текә ҡаялар, көмөштәй саф һыулы йылғалар иле.

Урал – ҡара урмандары, сал ҡылғанлы битләүҙәре, күкрәп үҫкән үләндәре, хуш еҫле сәскәләре, күп төрлө кейектәре һәм балыҡтары булған бай ер.

Урал – ер аҫтында һанһыҙ күп хазиналар һаҡлаған тауҙар теҙмәһе.

Урал – ике ҙур континентты – Европа менән Азияны бүлеп ятҡан ғәйәт оҙон сик һыҙаты.

Шуға ла Урал тауҙары бөтә донъяға билдәле.

Ғәжәп оҙон тауҙар теҙмәһе – ул Урал. Был тауҙар теҙмәһенең оҙонлоғо ике мең километрҙан ашыу. Урал Төньяҡ Боҙло океан ярынан башлана, көньяҡта Ҡаҙағстандың алыҫ далаларына барып тоташа. Ә шул бик оҙон тау теҙмәһенең иңе әллә ни ҙур түгел. Поляр, Төньяҡ һәм Урта Уралда уның киңлеге һикһән-йөҙ километрҙан артмай, ә ҡайһы бер ерҙә егерме-утыҙ километрға тиклем тарая. Ә бына Көньяҡ Уралда иһә, беҙҙең республикабыҙ территорияһында, тауҙарҙың иңе ҡырҡа арта – йөҙ илле километрға тиклем етә. «Ҡанат йәйгән самаһыҙ ҙур ҡошҡа оҡшай Урал тауы», – тип яҙа Мостай Кәрим.

Көньяҡ Уралдың тәбиғәте айырыуса бай һәм матур. Бында тиҫтәләгән һәм йөҙәрләгән километрҙарға һуҙылған бейек һырттар ҙа, шулар араһында күккә артылып ҡалҡып торған гигант түбәләр ҙә күп.

Көньяҡ Уралдың тәбиғәте бик матур. Бында ылыҫлы һәм киң япраҡлы ағастарҙан торған ҡалын урмандар ҙа, мул үләнле үҙәндәр ҙә, сал ҡылғанлы битләүҙәр ҙә, текә ҡаялар ҙа, тәрән мәмерйәләр ҙә, тау баштарында яланғас таштарҙың ҙур өйөмдәре лә осрай.

Көньяҡ Уралдың матурлығы борон-борондан халыҡ күңелендә илһамланыу тыуҙырған. Сәсәндәр, тауҙарҙы маҡтап, һанһыҙ күп йырҙар, ялҡынлы шиғырҙар, гүзәл ҡобайырҙар сығарған.

1. Текстан географик атамаларҙы яҙып алығыҙ. Уларҙың русса һәм башҡортса яҙылышын сағыштырығыҙ.
2. Мостай Кәрим Уралды нимәгә оҡшата? Картанан Уралды табып, быны дөрөҫлөгөн тикшерегеҙ. Һеҙ уны, бәлки, икенсе нәмәгә оҡшатаһығыҙҙыр?
3. Уралдың байлығын һанап сығығыҙ. Ул байлыҡтар әле лә бармы?
4. Һеҙ Уралдың ҡайһы ерендә йәшәйһегеҙ? Картанан үҙегеҙ йәшәгән урынды табығыҙ, уның тәбиғәтен тасуирлағыҙ.
5. Уралға арналған ниндәй әҫәрҙәр беләһегеҙ? Бер әҫәрҙе башҡарып (йырлап, һөйләп) күрһәтегеҙ.
6. Тәүге өс һөйләмде диктант итеп яҙығыҙ. Бер-берегеҙҙең эштәрен тикшереп, баһа бирегеҙ.
7. Ололарҙан, ата-әсәләрегеҙҙән һорап, үҙегеҙ йәшәгән төбәктәге берәй тау тураһында йыр, риүәйәт йәки бүтән жанрға ҡараған халыҡ ижады әҫәрҙәренең булыу-булмауын асыҡлап ҡарағыҙ.
8. Тыуған төйәк тураһында үҙегеҙ әҫәр (шиғыр, йыр, хикәйә, нәҫер) яҙығыҙ.
9. «Минең тыуған төйәгем» тигән дөйөм класс альбомын булдырығыҙ, халыҡ араһынан тапҡан һәм үҙегеҙ ижад иткән әҫәрҙәрҙе шунда туплағыҙ. Альбомығыҙҙы фото, рәсемдәр менән дә даими рәүештә тултыра барығыҙ.

**78-се күнегеү**. Шиғырҙы ятлағыҙ.

Туған телем тыуған еремдә  
Яңғыраһа мәңге йыр булып,  
Һис үкенмәҫ инем, гүремдә  
Ятҡанда ла ҡара ер булып.

*(Р. Ғарипов)*

**79-сы күнегеү.** Һөйләмдәрҙе дөрөҫ интонация менән уҡығыҙ.

1. Был йортта **кем** йәшәй?
   Был йортта **Наил** йәшәй.
   Наил **ҡайҙа** йәшәй?

2. Бөгөн дүшәмбе.
   Бөгөн шәмбеме?
   Иртәгә йәкшәмбе!

**80-се күнегеү.** Аҫҡалағы көн исемдәрен башҡортса яҙығыҙ.

## УРАЛ

*(Башҡорт халыҡ йыры)*

Күгәрепкәй ятҡан Урал тауы –
Атай-олатайҙарҙың да төйәге.
Ерен-һыуын һаҡлап ҡорбан булған
Шунда ята батырҙар һөйәге.

Ай, Уралым, һинән ҡырҡып алһам,
Ат ҡыуырҙай яңғыҙ ҙа талдарың,
Тамып та ғына ҡала, ҡырҡҡан саҡта,
Яуҙа үлгән батыр ҙа ҡандары.

Уралҡайҙан бейек, ай, тау булмаҫ,
Уралҡайҙы һөймәҫ тә йән булмаҫ.
Үҙ илкәйе өсөн ҡорбан булған
Ир-егеттең ғүмере йәл булмаҫ...

Яҡшы атҡа менеп, ҡулына алған
Уҡ-һаҙаҡҡай тигән ҡоралын,
Аямаған йәнен, түккән ҡанын,
Һис бирмәгән башҡорт Уралын.

1. Йыр тексын иғтибар менән уҡып сығығыҙ. Аңлашылмаған һүҙҙәрҙе табып, уларҙың мәғәнәһен асыҡлағыҙ.
2. Текста осраған ҡушма һүҙҙәрҙе күсереп алып, уларҙың яҙылышын аңлатығыҙ.

3. Ҡурайсы йәки йырсы башҡарыуында йырҙы (көйҙө) тыңлағыҙ. Ул ҡыҫҡа йырҙарҙан нимәһе менән айырыла?
4. «Урал» йырын башҡорт халҡының милли гимны тип йөрөтәләр. Ни өсөн икән, һеҙ нисек уйлайһығыҙ?
5. Йырҙың тексын ятлағыҙ, һуңғы куплетты яттан яҙып, бер-берегеҙҙең эшен тикшерегеҙ, баһа ҡуйығыҙ.
6. Һеҙҙең тағы ниндәй оҙон йырҙар тыңлағанығыҙ бар? Берәйһен йырлап (тексын яттан һөйләп) күрһәтегеҙ.

**81-се күнегеү**. Тасуири уҡығыҙ.

Этҡара ла тигән тау башында
Ятып ҡалды уйнаған таштарым.
Ете менән туғыҙ араһында
Аҙашты ла минең баштарым.

Һаҡмар һыуы аға ҡибла табан,
Урал тауы буйлап, көн битләп.
Илкәйемә лә шул ҡайтыр инем,
Аяҡтарым талһа, имгәкләп.

*(Башҡорт халыҡ йыры «Ғилмияза»)*

Башҡорт телендә бөтә исемдәргә лә тип әйтерлек күплек ялғауын ҡушып була. Күплек формаһы ҡайһы саҡта күплекте белдермәй. Ул һүҙгә биҙәк бирер өсөн ҡулланыла. Мәҫәлән, *«Ағиҙелкәй**ҙәрҙең**, ай, буйҙары...»*, *«Өфө**ләргә** барған саҡта...»* (халыҡ йырҙарынан).

Ауыл, ҡала, район исемдәренә күплек ялғауы ҡушылһа, был форма шул ерҙә йәшәгән халыҡты белдерә. Мәҫәлән, ***баймаҡтар, учалылар, инйәрҙәр, өфөләр*** (өфөләләр, сибайлылар тип һөйләү – хата).

*Рауил БИКБАЕВ*

## УРАЛЫМА

Таш һыныңды, Урал, оҡшатамын
Ҡандан ҡынға кергән ҡылысҡа –
Ҡулдарына һине алмаҡ булып
Күпме дошман ерҙә тырышҡан.

Ил баҫырға килгән һәр килмешәк
Был ҡылыстан ауған туралып.
Күпме генә һиңә ҡараһам да,
Күҙем тала белмәй, Уралым.

Шишмәләрең минең йөрәк аша
Сылтыр-сылтыр ағып үтәләр.
Йөрәгемә, гүйә, ҡаным түгел,
Шул шишмәләр йәшәү илтәләр…

Һиңә баҡһам, күңелем күтәренке,
Киләсәгем шат та, тыныс та,
Сөнки беләм:
Иңдәрендә илдең
Урал тигән һынмаҫ ҡылыс бар.

1. Таныш булмаған һүҙҙәр булһа, мәғәнәләрен асыҡлағыҙ, улар менән һөйләмдәр төҙөгөҙ.
2. Уралды шағир нимә менән сағыштыра? Һеҙ уның менән килешәһегеҙме?
3. Һуңғы строфаның мәғәнәһен аңлатығыҙ. Шағирҙың ни өсөн күңеле тыныс?
4. Уралды һеҙ нимәгә оҡшатаһығыҙ? Уның тураһында шиғыр яҙһағыҙ, нимә менән сағыштырыр инегеҙ?
5. Шиғырҙы тасуири уҡыу күнекмәләре үткәрегеҙ.

*Янызбай ХАММАТОВ*

## САМОРОДОК

*(«Бөртөкләп йыйыла алтын» романы буйынса)*

Бигерәк тә йәмле шул был тирә! Ҡарайһың – күреп танһығың ҡанмай. Тыңлайһың – тыңлап туя алмайһың. Ниҙәр генә юҡ был яҡтарҙа! Йәшел шәлгә бөркәнгән ағас ботаҡтарына ҡунған ҡоштар сутылдаша. Ниңәлер зарығып кәкүк саҡыра. Саҡ ҡына ят тауыш сыҡтымы, ҡоштар шунда уҡ пыр туҙышып, урындарын алмаштыралар ҙа, һәр ҡайһыһы үҙ йырын дауам итә. Ҡара башлы тумыртҡа ҡыйҡылдап ағастан ағасҡа осто, ботаҡтан ботаҡҡа һикерҙе, үҙенә кәрәкле

аҙыҡ таба алмағас, осоп барып, ялан уртаһында торған ҡыу ҡарағайға аҫылынды. Тырнағы аҫтындағы ҡайыр киҫәктәре ергә ҡойолдо. Тумыртҡа, башын бороп, ергә ҡараны. Ҡурҡырлыҡ нәмә һиҙелмәгәс, ҡыйҡ-ҡыйҡ тип, оҙон суҡышы менән ағас ботағын ары-бире туҡылдатты ла ҡыйҡылдап һайыҫҡандар көтөүе яғына осто.

Ер өҫтө байрамса биҙәлгән. Ҡуйы йәшел япраҡлы ағас ботаҡтары араһынан саҡ беленер-беленмәҫ үткән яҡтыға үлән өҫтөндәге ысыҡ тамсылары ялтырай. Сәскәләр еҫе аңҡый. Иңкеш, бал ҡорттары һәм тағы ла әллә нисәмә төрлө бөжәктәр геүләшә. Аҙыҡ эҙләп, сәскәнән сәскәгә күсәләр. Үтәнәнүтә күренгән күм-күк һауа тағы ла юғарыраҡ күтәрелгәндәй тойола.

Тәбиғәттең ошо күренешенә мауығып, быҙауҙар көтөүе артынан улын эйәртеп килгән Хәйретдин ҡапыл туҡтаны. Кәпәсен сисеп, тирле таҡыр башын еңосо менән һыпырҙы ла алда йәшел бәрхәт һымаҡ йәйелеп ятҡан киң яланға күрһәтте.

– Һин, улым, быҙауҙарҙы ошонда көт. Бик аулаҡ урын. Мин кисә башлаған тыransамды ярып бөтөрөп ҡуяйым.

Атаһынан айырым ҡалып өйрәнмәгән Ғәйзулла күңелһеҙләнеп:

– Тыранса ярған урын алыҫмы? – тип һораны.

– Юҡ. Балта тауышы һиңә ишетелеп торор. Төшкө сәйгә килерһең.

– Быҙауҙарҙы унда көтөргә ярамаймы ни?

– Унда малға ярамаған аҡһырғаҡ, ҡаҙаяҡ үләне күп шул. Һыуға ла алыҫыраҡ. Бында йылға эргәһендә. Эсермәй көтһәң, Хажисолтан бай, быҙауҙары өсөн әрләп, теңкәгә тейәсәк. Аңдып ҡына йөрөй.

– Атай, быҙауҙарҙы төшкө сәйҙән һуң эсерһәм, ярамаймы ни?

– Ярауын ярай ҙа ул, улым. Мин эшләгән урында малға ярарлыҡ үлән юҡ, тинем бит инде. Шыр урман. Әллә ҡурҡаһыңмы?

– Эйе.

– Эй, алйот, кем тейһен һиңә? – Хәйретдин иркәләп, улының башынан һыйпап, арҡаһынан һөйҙө. – Мин эргәңдә генә бит. Ҡурҡма. Иптәшкә быҙауҙарың бар.

Билбау аҫтына балтаһын ҡыҫтырып, урман араһына инеп киткән атаһы күҙҙән юғалғас та, Ғәйзулла, сыбыртҡыһын шартлата-шартлата, быҙауҙарын йылға буйына ҡыуаланы.

Быҙауҙар туйғансы һыу эстеләр ҙә, ярға сығып, рәхәтләнеп үлән ашай башланылар. Ғәйзулла нисек ваҡыт үткәрергә белмәне. Оҙаҡ ҡына һыуға ҡарап, ярға яҡын ғына йөҙөп йөрөгән ваҡ балыҡтарҙы күҙәтеп ултырҙы. Йоҡа ғына таштарҙы һыу өҫтөнән кәйкәләтте. Йәйелгән түңәрәктәр ни тиклем һыуҙа күберәк күренһә, Ғәйзулла ла шул ҡәҙәр нығыраҡ ҡыуанды һәм, мауығып, таш артынан таш ырғытты.

Үҙенә кәрәкле таш эҙләп йөрөгәндә, Ғәйзулланың күҙҙәре ҡырсын өҫтөндә ятҡан йоҙроҡ ҙурлығындай ялтырауыҡлы һары ташҡа төбәлде. Уны ҡулына алды. Бик ауыр һәм мауыҡтырғыс күренде был таш. Усында өйрөлттө. Ныҡлабыраҡ ҡарай торғас, уны мөгөҙлө кәзә тәкәһенә оҡшатты. Юрамал берәйһе эшләп ташлап киткәнме ни? Бер яғы мөгөҙ һымағыраҡ ослайған, аҡ таш ҡатнашҡан урыны һаҡалға оҡшаған. Ҡойроҡ һымаҡ күтәрелгән киҫәген онтарға теләп, таш менән һуғып ҡараны. Онталманы. Таш менән тейгән урыны еңел генә йәмшәйеп, яп-ялтыр булып ҡалды. Быға ғәжәпләнгән Ғәйзулла уны тешләп ҡараны. Был юлы ла онталманы. Теш тейгән урыны еҙ самауыр һымаҡ ялтыраны. Нимә булырға мөмкин? Әллә самородок тигәндәре ошоноң һымаҡ буламы икән? Улай тиһәң, уны шахтанан ҡаҙып сығаралар, тиҙәр. Был турала алтын приискыһында эшләгән Хисмәтулланың үҙенән әллә нисәмә ишеткәне бар. Алтындың тутыҡмауын һәм йәмшәйеүен дә ул әйткәйне. Бәлки, был ҙур самородоктыр? Шулай булһа, ниңә эшләмәйҙәр һуң бында? Ниңә алтын йыумайҙар? Әллә Юрғашты йылғаһының өҫ яғында алтын барын белмәйме икән? Моғайын, шулайҙыр. Әгәр ҙә ҡулындағы киҫәк алтын булһа, ни эшләр ине икән? Әсәһенә күлдәк, атаһына күлдәк, апайҙарына елән, үҙенә Хажисолтан бай малайыныҡы һымаҡ бумазый ыштан алыр ҙа ҡалғанын кәнфиткә алыштырыр ине. Ул, баш бармаҡ ҙурлығындай алтынға һыйыр һатып алып була, имеш, тигән һүҙҙе иҫенә төшөрҙө. Әгәр ҙә шул дөрөҫ булһа, был ысын-ысындан байлыҡ бит. Әҙәм ишетмәгән, зат-ырыуына теймәгән байлыҡ! Ошо самородок булһа, алтын приискыһының хужаһы Ғәлиәхмәт һәм Хажисолтан бай ни эшләрҙәр ине икән?

Оҙаҡ хыяллана торғас, Ғәйзулла самородок табыуы тураһында үҙен үҙе нисек ышандырғанын һиҙмәй ҙә ҡалды һәм уйланыуҙан тирләне, хәле бөттө. Уйҙары тарҡалды. Асығыуы һәм арыуы һиҙелмәне. Биҙгәк тотҡан кеше һымаҡ

ҡалтыранды. Йөрәге дөпөлдәп типте. Төҫө ҡасты. Ҡулындағы һәлмәк металды күкрәгенә ҡыҫҡан һайын, шатланырға ла, ҡысҡырып көлөргә лә белмәне. Ҡайһы саҡта был күренеш төш һымаҡ күренде. Уяу икәнлегенә ышанмай, үҙен үҙе семтеп ҡараны. Семтелгән беләге күгәреп сыҡты. Унда ла ышанманы.

– Ғәй-зул-ла-а-ау! Әйҙә сәй эсергә-ә!

Ғәйзулла тертләне. Атаһы ҡысҡырған яҡҡа ҡараны. Төш етеүен дә һиҙмәй ҡалған. Таралышҡан быҙауҙарына иғтибар итмәйенсә, әләгә-йығыла төтөн сыҡҡан яҡҡа йүгерҙе. Күлдәге һәм ыштанының балаҡтары ағас ботаҡтарына эләгеп йыртылды. Яланғас аяҡтары түңгәктәргә төкөлдө. Ағастан ағасҡа һуҙылған үрмәксе ауы әленән-әле көнгә янған битенә бәрелеп өҙөлдө. Ә ул, һаман хәл йыймайынса, йүгерҙе лә йүгерҙе. Ҡарттарҙың һүҙҙәрен иҫенә төшөрөп, аҙым һайын:

– Хазина, ха-хаз-зина... таптым, ха-зина, – тип бышылданы.

Төтөнгә сирылып, сәйгүндә сәй бешереп маташҡан Хәйретдин, мыш та мыш килгән улына ҡарамайынса:

– Ниңә шул тиклем йүгерәһең? Йөрәгеңә ҡыйын була бит. Быҙауҙарыңды алып килмәнеңме? – тип һораны.

Ғәйзулла яуап ҡайтарманы. Сабышҡан ат һымаҡ, көскә тын алып, бер һүҙ ҙә өндәшмәйенсә, ҡулындағы ташты атаһына һондо.

– Нимә ул?

– Алтын шикелле. Ҡара әле, атай?

Хәйретдин ҡапыл тертләне. Ҡулынан төшөп киткән сәйгүндәге сәйе түгелде. Йәшел сәйгүн эргәһендәге үлән араһынан боҫ күтәрелде.

Үҙен ҡулға алырға өлгөргән Хәйретдин, улы алдында тыныс күренергә тырышып, һорауын ҡабатланы:

– Нимә ул? – Ҡалтыранған тауышы хәйләһен белдертте. – Ҡайҙан таптың?

– Әллә алтын түгелме?

– Алтын.

– Шулай булғас, нимә көтәбеҙ һуң? Әйҙә тиҙерәк китәйек. Мин, мин беләм...

– Сеү! – Хәйретдиндең ҡобараһы осто, яҡ-яғына әйләнеп ҡараны ла, тауышын түбәнәйтеберәк: – Ҡысҡырма, – тине.

Ул менән ата һүҙһеҙ ҡалдылар.

1. Һүҙлек эше башҡарығыҙ: таныш булмаған һүҙҙәрҙе күсереп алып, мәғәнәләрен асыҡлағыҙ, ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарағанын билдәләгеҙ, уларҙы ҡулланып һөйләмдәр төҙөгөҙ.
2. Тексты иғтибар менән тасуири итеп уҡып сығығыҙ, үҙ һүҙҙәрегеҙ менән йөкмәткеһен һөйләгеҙ.
3. Текстың тәүге ике абзацына иғтибар итегеҙ – автор йәйге тәбиғәтте нисек тасуирлай? Шуға оҡшатып һеҙ ҡышҡы (яҙғы, көҙгө) тәбиғәтте тасуирлап ҡарағыҙ. Тасуирламағыҙҙа сағыштырыуҙар, синонимдар ҡулланырға тырышығыҙ.
4. Ғәйзулланың атаһы Хәйретдин улының самородок табыуына ҡыуанмай, киреһенсә, ҡурҡып китә. Сәбәбен белгегеҙ килһә, романды алып уҡығыҙ.
5. Текст аҙағында Ғәйзулланың атаһы менән һөйләшеүен ролдәргә бүлеп уҡығыҙ. Өсөнсө кеше автор һүҙҙәрен уҡыһын.
6. Башҡорт телендә *ат башындай алтын* тигән төшөнсә бар. Уны, ғәҙәттә, бик ҙур байлыҡ тураһында һүҙ йөрөткәндә ҡулланалар. Был төшөнсә халыҡ ижадында ла, мәҫәлән, әкиәттәрҙә осрай. Старателдәр, йәғни алтын йыуыусылар уның кеүек ҙур киҫәкле алтынды самородок тип атай. Һәр старатель шундай самородок табырға хыяллана. Сөнки уны тапҡан кешегә самородок етеш тормош, байлыҡ, бәхет алып килергә тейеш кеүек. Әңгәмәләшегеҙ.
7. Самородок таптым, тип хис итегеҙ. Ни эшләр инегеҙ? Хыялдарығыҙ менән уртаҡлашығыҙ, уны кескәй инша итеп яҙығыҙ.
8. Самородок һәм, ғөмүмән, алтын йыуыу эше тураһында күберәк белгегеҙ килһә, әҫәрҙе тулыһынса уҡып сығығыҙ. Был турала Мәжит Ғафуриҙың «Шағирҙың алтын приискыһында» тигән повесында ла бай мәғлүмәт бар.
9. Иҫегеҙгә төшөрөгөҙ: нимә ул **антоним**? Текстан бер нисә антоним табып яҙығыҙ.

**82-се күнегеү.** Текстан алынған тәүге алты һөйләмде рус теленә тәржемә итегеҙ.

Бигерәк тә йәмле шул был тирә! Ҡарайһың – күреп танһығың ҡанмай. Тыңлайһың – тыңлап туя алмайһың. Ниҙәр генә юҡ был яҡтарҙа! Йәшел шәлгә бөркәнгән ағас ботаҡтарына ҡунған ҡоштар сутылдаша. Ниңәлер зарығып кәкүк саҡыра.

**83-сө күнегеү.** Нөктәләр урынына кәрәкле исемдәрҙе ҡуйып, һөйләмдәрҙе тултырып әйтегеҙ.

Олатаһы ... атҡа ултыра. Әсәһе ... аш һалып бирә. Уҡытыусы ... дәрес аңлата. Малай ... тубын биреп тора. Айнур ... ҡайтып килә. Әмир ... менән урамда уйнай. Беҙ класс менән ... барҙыҡ.

**84-се күнегеү.** Тасуири уҡығыҙ.

Ағастарҙы япраҡ биҙәй,
Сәскә биҙәй аҡланды,
Төндәрҙе көмөш ай биҙәй,
Сулпан биҙәй ал таңды!

Йылғаны тулҡын матурлай,
Ҡояш нурлай көндәрҙе...
Минең дә гөл иткем килә
Тыуып үҫкән ерҙәрҙе.

*(А. Игебаев)*

**Һүҙ күрке – мәҡәл**

Тауҙың күрке – таш, әҙәм күрке – баш.

Торған ил – яҡын, тыуған ил – алтын.

# Ағиҙелкәй алҡын, һыуы һалҡын

## БАШҠОРТОСТАН ЙЫЛҒАЛАРЫ

Башҡортостанда 13 меңгә яҡын йылға бар. Уларҙың күбеһе Волга йылғаһының бассейнына ҡарай. Тик республиканың көньяғындағы һәм Урал арты райондарындағы йылғалар ғына Урал йылғаһына ҡоялар.

Иң ҙур йылға – Ағиҙел. Уның оҙонлоғо 1430 километр. Ул Учалы районында башланып, Белорет, Бөрйән райондары аша тәүҙә көньяҡҡа аға, шунан, Көйөргәҙе районының Бөгөлсән ауылы янында ҡырҡа боролоп, төньяҡҡа юл ала. Төньяҡ-көнбайыштағы Краснокама районында Кама йылғаһына ҡоя.

Ағиҙел йылғаһы буйында Белорет, Мәләүез, Салауат, Ишембай, Стәрлетамаҡ, Өфө, Благовещен, Бөрө, Дүртөйлө, Ағиҙел ҡалалары, бик күп ауылдар, ҡасабалар урынлашҡан. Йылға унда йәшәгән кешеләрҙе, завод-фабрикаларҙы һыу менән тәьмин итә.

Ағиҙелдең иң ҙур ҡушылдығы – Өфө (Ҡариҙел) йылғаһы. Уның оҙонлоғо 918 километр. Ағиҙелгә һәм Өфөгә ҡушылған Дим, Нөгөш, Егән, Еҙем, Эҫем, Танып, Әй, Йүрүҙән йылғалары ла бик матур. Ағиҙел менән Өфө йылғаларында теплоходтар йөрөй.

Башҡортостан йылғаларында Павловка, Нөгөш, Иштуған, Ҡарман, Таналыҡ кеүек ҙур һыуһаҡлағыстар төҙөлгән. Йылға буйҙары йәй көндәрендә бик күп туристар, сәйәхәтселәр өсөн ял итеү урынына әйләнә.

Ауыҙ-тел ижадында, әҙәбиәттә, Башҡортостан йылғаларына арнап, бик күп әҫәрҙәр ижад ителгән.

1. Үрҙә телгә алынған йылғаларҙы Башҡортостан картаһынан табығыҙ. Һеҙ улар тураһында тағы нимәләр беләһегеҙ, ниндәй әҫәрҙәр уҡығанығыҙ бар? Шул турала фекер алышығыҙ.
2. Һеҙ йәшәгән ерҙә ниндәй йылғалар бар?
3. «Беҙҙең яҡ йылғалары» тигән белешмә төҙөгөҙ.

## ЙӘМЛЕ АҒИҘЕЛ БУЙҘАРЫ

*(Башҡорт халыҡ йыры)*

Ағиҙелкәй ҡайҙа, ай, туғайҙа?
Ағиҙелкәй кеүек һыу ҡайҙа?
Ағиҙелкәйҙәрҙең, ай, һауаһы
Йәнгә рәхәт, тәнгә ҙур файҙа.

Ҡушымта:

Йәмле Ағиҙел буйҙары ла
Бөтөрәлер хәсрәтле уйҙарҙы, шул,
Бөтөрәлер хәсрәтле уйҙарҙы.

Ағиҙелкәйҙәрҙең, ай, буйында
Һандуғастар һайрай муйылда.
Иҙел һыуын эскән ир-егеттәр
Яман теләк йөрөтмәҫ уйында.

Ҡушымта.

Ағиҙелкәй һыуы, ай, тын икән,
Яр ситтәре бигерәк ҡомло икән.
Ағиҙелдә үҫкән, ай, ҡыҙҙарҙың
Тауыштары бигерәк моңло икән.

Ҡушымта.

1. Йырҙа Ағиҙелдең нисек маҡталғанына иғтибар итегеҙ. Унда уның ниндәй сифаттары һанала? Уларҙы яҙып алығыҙ. Был сифаттар Ағиҙел йылғаһына әле лә хасмы?
2. Йырҙың беренсе куплетын ятлағыҙ, фонояҙмаһын тыңлап, йырлап өйрәнегеҙ.

## СИФАТ

Башҡорт телендә лә **сифат (имя прилагательное)**, рус телендәге кеүек үк, әйберҙәрҙең, предметтарҙың билдәһен белдерә. Тик башҡорт телендәге сифат исем алдында торғанда бер нисек тә үҙгәрмәй. Исем үҙгәрә, ә сифат үҙгәрмәй. Мәҫәлән, *красное* яблоко – *ҡыҙыл* алма; *красная* рябина – *ҡыҙыл* мышар; *красные* карандаши – *ҡыҙыл* ҡәләмдәр; *красному* карандашу – *ҡыҙыл* ҡәләмгә.

**85-се күнегеү.** Тексты уҡығыҙ, сифаттарҙы үҙҙәре бәйләнеп килгән исемдәре менән яҙып алығыҙ.

Тышта ғинуар бураны ҡоторона, һалҡын, ҡотһоҙ өйҙә Емеш яңғыҙы ғына ултыра. Емеш бәләкәс яҡтың ҡараңғы мөйөшөндә оҙаҡ ҡына йөн тетеп ултырҙы. Уның кескәй, нәҙек бармаҡтары талып, һыҙлап бөттө.

Оҙаҡламай, үҙенән ҙур күнәктәр күтәреп, Йәнеш һыуҙан ҡайтып килде. Уның яланғас үксәләре буҙарып күренгән тишек итегенең ҡыйыш үксәләренә боҙ ҡатҡан. Алама яулыҡ аҫтынан сығып торған сәстәре ҡырауытҡан, бейәләйһеҙ яланғас ҡулдары туңып бөткән.

Аяғына өр-яңы ҡара бийма кейгән, елкәһенә ҡуйы сәсәкле дебет шәл һалған Сәрбиямал, ҙур һандыҡҡа ултырып, ғәҙәте буйынса, Йәнеш менән Емеште әрләргә, ҡарғарға тотондо.

*(З. Биишева)*

**86-сы күнегеү**. Миҫалдарға ҡарап, рус һәм башҡорт телдәрендә сифаттарҙың айырмаларын әйтегеҙ.

голубой цвет – зәңгәр төҫ
голубое небо – зәңгәр күк
голубая лента – зәңгәр таҫма
голубые карандаши – зәңгәр ҡәләмдәр
у голубой ленты – зәңгәр таҫманың
в голубом небе – зәңгәр күктә
голубыми карандашами – зәңгәр ҡәләмдәр менән

Рус телендә сифат **һан, килеш, род** менән үҙгәрә, йәғни үҙе бәйләнеп килгән һүҙгә яраша. Башҡорт телендә сифат, исем менән бергә килгәндә, үҙ формаһында ҡала, үҙгәрмәй.

Ләкин исемдән башҡа килһә инде, исем ялғауҙарын ала ала. Мәҫәлән, *Беҙҙең баҡсала ал, һары, ҡыҙыл розалар үҫә.* ***Ҡыҙылдарын*** *бигерәк яратам.*

Ҡайһы бер сифаттар рус теленә төрлөсә тәржемә ителә. Шулай уҡ рус телендәге сифаттың ҡайһылары башҡорт телендә әллә нисә һүҙгә тап килә.

**87-се күнегеү.** Ике телдәге сифаттарҙы сағыштырығыҙ.

а) высокий рост – оҙон буй
высокий голос – нәҙек тауыш
высокое давление – юғары баҫым
высокая гора – бейек тау
высокий лоб – киң маңлай
высокая должность – ҙур вазифа
высокий гость – дәрәжәле ҡунаҡ

б) ҡалын урман – густой лес
... – низкий голос
... – жирная буква
... – толстое одеяло
... – твердые гласные

*Рауил БИКБАЕВ*

## ҺЫУҺАНЫМ, ҺЫУҘАР БИРЕГЕҘ!

*(Поэманан өҙөк)*

Ағиҙелкәй!
Күпме бөгөлөңдә
Матурлыҡтан күҙем сағылды.
Ҡаяларҙың ап-аҡ таштарына
Йән серҙәшем күреп ҡағылдым.
Саңҡып осҡан бөркөттәрең менән
Күктәреңә ҡанат ҡағындым.

Тик тағы ла хафаларым артты:
– Һауаларҙан ергә төш, туған!

Урал күкрәгендә бер шеш тыуа –
Һыҙлана бит бөгөн Иштуған.

Бушбоғаҙҙар бында ер яҙмышын
Һәләкәткә илтеп терәне.
Ҡолағымды түгел,
Йөрәгемде
Ярып бара ҡотҡо-һөрәне:

Һайығайып барған Ағиҙелде
Көслө ҡулдар беҙҙең быуасаҡ!
Юҡ-бар диңгеҙеңдән былайыраҡ
Һыуһаҡлағыс бында буласаҡ!

Ерҙең йөҙөн яңынан ҡорабыҙ, тип,
Кәпәренеп ниҙәр әйтмәнек…
Бер ҡәләмдәш, Иштуғанға арнап
Йыр яҙам, тип ҡайтты дәртләнеп.

Ә үҙенең тыуған нигеҙе ҡалған
Нөгөш диңгеҙенең төбөндә…
Ниңә һуң беҙ шулай һәр һөрәнгә
Йыр яҙырға әҙер бөгөндән?. .

Нөгөш, Ҡариҙелдең быуаларын
Ауыҙ һыуыбыҙ ҡороп маҡтаныҡ.
Уйламаныҡ:
Таш диуарға һуғылып,
Бәгерҙәрҙе өҙә бағрыларым,
Юлы өҙөлөп тулай ҡыҙыл балыҡ,
Көнө киҫелеп илай аҡ балыҡ.
Уйламаныҡ быуа төптәренә
Ҡатлам-ҡатлам ағас ятҡанын.
Ҡыуғын килгән, ҡыуғын килер,
Ҡыуғын килмәҫ – ҡырғын килер.
Һыу төбөнә батҡан ағас –
Ағыулы бер мина һымаҡ –
Йылғалағы тереклекте
Шартлатасаҡ.

Балыҡтар тонсоҡҡан һыуҙа
Ылымыҡ сәскә атасаҡ.

Шулмы кәрәк һиңә, кеше?
Ошоғамы ирешер өсөн
Барлыҡ эшең?
Яңы һыуһаҡлағыс төҙөйбөҙ, тип,
Төҙөйбөҙ бит ағыу һаҡлағыс.
Иштуғанға ҡушылып,
Күпме ауыл
Күҙгә ҡарай бөгөн, саң ҡағып.

Төрән һуға ҡутарылыр нигеҙ,
Оран һала өнһөҙ зыярат.
Мең һауаптар менән аҡланмаҫлыҡ
Зыяратҡа ҡылған хыянат.

Ут-дауылдар үткән ауылдарҙы,
Һинең тарих тамам, күс бынан, тип,
Тамырынан йолҡоп ҡыуабыҙ.
Ағиҙелде генә быумайбыҙ бит,
Үҙебеҙҙе үҙебеҙ быуабыҙ.

Ни яҙһаң да һыуҙа эҙ ҡалмаҫ, тип,
Тере һыуҙы ғәмһеҙ талайбыҙ.
Ағиҙелгә элмәк һалмайбыҙ бит,
Үҙебеҙгә элмәк һалабыҙ.

Тамсы даръя яһай.
Иҙел-һылыу
Тамсы-тамсы сәселеп һулырмы?
Ағиҙелең – илең булмағанда,
Айың-көнөң имен булырмы?..

* * *

Ғүмеремдә нисәмә ҡат баҫты
Күҙ алдыма Рәшит Ниғмәти.
Урал менән Ағиҙелде данлап,
Быңдай һүҙҙе тағы кем әйтер?

«Урал!
Үҙе боҙ диңгеҙҙең һыуын эсә,
Ә ҡойроғо ҡойона Аралда.
Быуаттарҙың баш өҫтөнән ҡарап,
Мәғрур тора бында ҡаялар.
Шул Уралдың гранит итәктәрен,
Ҡара ҡаяларын иретеп,
Ағиҙелкәй һыҙылып ағып сыға,
Һалҡын терегөмөш шикелле».

Ағиҙелгә терегөмөш ағып,
Ағыулауын күрһә Ниғмәти,
Ниндәй оран һалыр ине шағир,
Әйтер ине бөгөн нимә тип?
Башҡаса шул хәҙер заман хәле,
Башҡаса шул шағир уйҙары,
Йәмлеме Ағиҙел буйҙары,
Тәмлеме Ағиҙел һыуҙары?
Күпме ваҡыт, күпме зиһен китә,
Кисәгенең төҙәтеп хатаһын.
Был донъяға хайран булып ҡына
Бер ҡарарға ине хафаһыҙ!
Тик барыбер хыялдарҙан айырып,
Хафа тынғы бирмәй аҡылға.
Йәмләнерме тағы Аҡ йылға,
Тәмләнерме тағы Аҡ йылға?

Ҡотҡарырға ерҙә матурлыкты
Һуң түгелдер әле, һуң түгел...
Сафланырмы тағы был күңел,
Сафланырмы тағы был күңел?

1. Яңы һүҙҙәрҙе үҙләштерегеҙ: уларҙы яҙып алып, дөрөҫ итеп әйтергә өйрәнегеҙ, мәғәнәләрен асыҡлағыҙ, ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарағанлығын (ниндәй һорауға яуап биргәнлеген) билдәләгеҙ. Уларҙы файҙаланып, үҙ-ара диалог ойоштороғоҙ.
2. Өҙөктә Башҡортостандағы ниндәй һыуһаҡлағыстар телгә алына? Уларҙы картанан табығыҙ, ниндәй райондар территорияһында урынлашҡанлыҡтарын билдәләгеҙ.
3. Автор ни өсөн бындай һыуһаҡлағыстар төҙөүгә ҡаршы сыға? Быға һеҙҙең ҡарашығыҙ нисек?

4. Һеҙ йәшәгән ауыл (ҡасаба, ҡала) янында ниндәй йылға (күл) бар? Уның таҙалығын, тирә-яғының матурлығын һаҡлау өсөн нимәләр эшләнә? Һеҙ был эштә ҡатнашаһығыҙмы?
5. Рәшит Ниғмәтиҙең «Йәмле Ағиҙел буйҙары» поэмаһын иҫегеҙгә төшөрөгөҙ. Ике әҫәрҙе сағыштырып, шағирҙарҙы борсоған мәсьәләләрҙе асыҡлағыҙ.
6. Һыуһаҡлағыстарҙан ниндәй файҙа? Әңгәмә үткәрегеҙ.
7. Башҡортостан йылғаларының исемдәренән кроссворд төҙөп ҡарағыҙ.

**88-се күнегеү.** Йомаҡтар.

1. Ҡара ерҙең өҫтөнә
   Ҡаҙ мамығы кем һипкән?
   Аҡ юрғанды кем теккән?
   Ап-аҡ ондо кем түккән?

2. Аҡ ҡына,
   Семетеп ала саҡ ҡына.
   Ята шым ғына,
   Китер сағы еттениһә –
   Илап ала тын ғына.

## СИФАТ ДӘРӘЖӘЛӘРЕ

Сифаттар предметтың билдәһен төрлө кимәлдә белдерә ала. Билдә бик артыҡ йә аҙ булырға мөмкин. Билдәләре бер тигеҙ булмаған предметтарҙы белдергәндә, сағыштырыу дәрәжәһе ҡулланыла. Предметта билдәнең ғәҙәттәгенән артыҡ икәнен күрһәтергә кәрәк булғанда, артыҡлыҡ дәрәжәһе яһала. Ҡайһы бер сифаттарҙың (мәҫәлән, төҫтө, тәмде белдереүсе) аҙһытыу дәрәжәһе формаһы бар. Исеменән күренеүенсә, билдә был осраҡта әҙерәк була.

Дәрәжә формалары ялғауҙар ярҙамында йәиһә һүҙҙең тәүге өлөшөнә, *-п, -м* өндәре (хәрефтәре) өҫтәлеп, ҡабатланыу юлы менән яһала. Мәҫәлән,

**зәңгәр-ерәк** – сағыштырыу дәрәжәһе
**зәңгәр-һыу** – аҙһытыу дәрәжәһе
**зәп-зәңгәр** – артыҡлыҡ дәрәжәһе

**89-сы күнегеү.** Өлгөгә ҡарап, бирелгән сифаттарҙың дәрәжә формаларын яҙығыҙ.

Өлгө: *ҡыҙыл – ҡып-ҡыҙыл, ҡыҙылыраҡ.*

Зәңгәр, һары, йәшел, оҙон, ҡара, аҡ, һоро, ҡыҫҡа.

**90-сы күнегеү.** Бирелгән сифаттарҙы рус теленә тәржемә итегеҙ.

Аҡһыл, ҡып-ҡыҙыл, йәшелерәк, һоп-һоро, һорғолт, ҡараraҡ, ҡап-ҡара, оҙонораҡ, туп-тура, зәңгәрһыу.

**91-се күнегеү.** Бирелгән сифаттарҙың төрлө дәрәжә формаларын яһағыҙ.

Бәләкәй, ҙур, ҡыҫҡа, еңел, йыуан, түңәрәк, ҡалын, сыбар, үткер.

Башҡорт телендә бер нисә сифаттың, билдәнең ғәҙәттәгенән әҙерәк булыуын күрһәтә торған формаһы була. Был форманы **аҙһытыу дәрәжәһе** тип йөрөтәләр.

**92-се күнегеү.** Уҡып сығығыҙ, рус теленә тәржемә итегеҙ.

Аҡһыл, зәңгәрһыу, ҡарағусҡыл, көрәнһыу, ҡыҙғылт, йәшкелт, һарғылт, сөскөлт, күкһел, әскелт, алһыу.

Шулай итеп, нигеҙҙә ошо сифаттарҙың ғына аҙһытыу дәрәжә формаһы була. Күренеүенсә, улар төҫтө һәм тәмде белдерә торған сифаттар.

**93-сө күнегеү.** Икенсе бағаналағы һүҙҙәрҙе тәүге бағаналағы һүҙҙәрҙең формаһына ҡуйығыҙ.

| | |
|---|---|
| йәшкелтерәгенә | аҡ |
| матурыраҡтарҙа | һылыу |
| зәңгәрһыуыраҡтарынан | ҡыҙыл |
| ҡап-ҡараларына | ҡараңғы |

**94-се күнегеү.** Баҫымдарҙы дөрөҫ ҡуйып уҡығыҙ.

Уҡы́майһығыҙмы?
Уҡыма́ҫһығыҙмы?
Уҡымаҫта́рмы?
Уҡымаҫлыҡта́рмы?

**95-се күнегеү.** Һәр төркөмдә бер хата бар. Шуны табығыҙ. Аңлатығыҙ.

1. Матур йыр, йәшел япраҡ, һулыған япраҡ, яңы күлдәк, төрлө тауыш.
2. Ауыр мәсьәлә, ауыр юл, ауыр йөк, ауыр һүҙ, ауыр һулай, ауыр хәл.
3. Йәш ағас, йәш егет, йәш ҡоя, йәш уҡытыусы.

## ЙӘМЛЕ ДИМ БУЙЫ

*(Башҡорт халыҡ йыры)*

Димдә тыуҙым, Димдә үҫтем,
Еләк йыйҙым туғайҙа.
Эй, йәмле Дим буйы,
Бик һағындым был юлы.
Матур һыуҙар бик күп булыр,
Димдәй матур һыу ҡайҙа?
Эй, йәмле Дим буйы,
Бик һағындым был юлы.

Димдә үҫтем, һыуын эстем,
Бесән саптым сабында.
Эй, матур Дим буйы,
Бик һағындым был юлы.
Ожмахтарың – бер яғында
Димдә йөрөгән сағыңда.
Эй, матур Дим буйы,
Бик һағындым был юлы.

**1.** Йырҙың тәүге куплетын ятлағыҙ. Фонограммаһын тыңлап, йырлап өйрәнегеҙ.
**2.** Картанан табып, Дим йылғаһының ҡайһы районлар аша аҡҡанын ҡарағыҙ.
**3.** Һеҙҙең яҡта ниндәй йылға аға? Уға арналған йыр бармы? Булмаһа, башҡорт халыҡ йырҙары традицияларын ҡулланып, үҙегеҙ йыр сығарығыҙ.
**4.** Быға тиклем өйрәнгән йырҙарығыҙҙы иҫегеҙгә төшөрөгөҙ, уларҙың исемлеген төҙөгөҙ, һәр береһен ҡабатлап йырлағыҙ.

**96-сы күнегеү.** Тексты башҡорт теленә тәржемә итегеҙ.

Над глубокими, свежими снегами – синее огромное и удивительно нежное небо. Такие яркие, радостные краски бывают у нас только по утрам в январские морозы. И особенно хороши они сегодня над свежим и зелёным бором.

*(И. Бунин)*

**97-се күнегеү.** Һорауҙарға яуап бирегеҙ. Ғаилә ағзаларының исемдәрен дәфтәрҙәрегеҙгә яҙығыҙ.

Һеҙҙең ғаиләлә нисә кеше бар? Һинең олатайың (өләсәйең) бармы? Улар кем менән һәм ҡайҙа йәшәй? Һинең апайың (ағайың) бармы? Уға нисә йәш? Һинең нисә һеңлең (ҡустың) бар? Һеҙҙең ғаиләлә нисә бала? Һеҙҙең тағы ниндәй туғандарығыҙ бар? Улар ҡайҙа йәшәй?

**98-се күнегеү.** Яңы йыл менән ҡотлап, туғандарығыҙға башҡорт телендә открытка яҙығыҙ.

**99-сы күнегеү.** 76-сы күнегеүҙәге исемдәрҙең башҡортса яңғырашын бик боҙмайынса, рус телендә яҙыу өлгөләрен ҡарағыҙ.

Гәүһәр – Гяухяр, Гаухяр, ...
Йәүһәриә – Яухария, Яухярия, ...
Гөлсәсәк – Гюльсясяк, Гюльсасак, Гульсасяк, ...
Көнһылыу – Кюнхылу, ...

## АҒИҘЕЛ МЕНӘН ЯЙЫҠ

*(Риүәйәт)*

Яйыҡ, Һаҡмар, Ағиҙел, Ҡариҙел, Нөгөш, Эйек – бөтәһе лә бер яҡтаныраҡ сыҡҡандар. Борон улар һөйләшә лә белгән, ти. Бер ваҡыт былар һүҙ ҡуйышҡандар:

– Бөтәбеҙ ҙә бер яҡҡа ағып барайыҡ. Төшлөккә табан ағып китһәк, берәй ерҙә осрашырбыҙ.

Киткәндәр, ти, былар Урал буйлап.

Яйыҡ яй төшөп киткән. Яй барһа ла, юлында ҡаршылыҡ осрамағас, үҙе бер яҡҡа юл ярып, байтаҡ ер киткән, ти.

Эйек менән Һаҡмарҙың юлында арҡыры ятҡан тауҙар осраған. Шулай ҙа былар, тау-таштарҙы үтеп, ялан ергә килеп сыҡҡандар һәм, күп тә бармай, бергә килеп ҡушылғандар, ти.

Ағиҙел менән Ҡариҙелдең юлында текә-текә тауҙар, ҡая-таштар бик күп осрау сәбәпле, улар, урау-урау юл үтеп, һуңғараҡ ҡалғандар. Артта ҡалғас, Ағиҙел тегеләргә ҡысҡыра икән:

– Эй, һеҙ ҡайһы яҡҡа киттегеҙ?

Эйек менән Һаҡмар уға тауыш бирергә итеп ҡараһалар ҙа, Яйыҡ уларҙы тыйған:

– Өндәшмәгеҙ, өндәшмәгеҙ. Беҙгә ҡушылмаһын. Китһен әйҙә үҙ юлы менән.

Ағиҙелгә тау-таш араһында бик күп йылғалар ҡушылған. Шуға уның һыуы ишәйгән, көсө күбәйгән. Яйыҡ шунан ҡурҡҡан да инде. Был маҡтаныр, үҙ исемен тағыр, тип уйлаған.

Ағиҙел һаман киткән. Былар өндәшмәгәс, ул, Көнгәк тауы эргәһенән ҡапыл боролоп, икенсе яҡҡа юл алған. Юлында осраған башҡа бик күп йылғаларҙы үҙенә ҡуша барған. Барған һайын көсәйеп, Ҡариҙелде лә юлдаш итеп алып, Камаға барып юлыҡҡан, унан тағы ла көслөрәк Иҙелгә ҡушылып, Каспийға барып төшкән. Шул ваҡыт әйләнеп ҡараһалар, Иҙелдең бик ҙур икәнлеген, ә шунда уҡ килеп ҡойған Яйыҡтың бәләкәй генә булыуын күргәндәр.

Шулай итеп, көнләшеү арҡаһында Яйыҡ һай булып ҡалған. Унда караптар ҙа йөрөй алмаған. Ә Ағиҙелдә, Ағиҙелгә ҡушылған Ҡариҙелдә пароходтар йөрөп тора. Улар йырҙарҙа ла гел маҡталып ҡына йырлана. Боронғолар, ошо риүәйәтте һөйләй ҙә, көнләшергә ярамай, ти торғайнылар.

1. Әҫәрҙең ҡыҫҡаса йөкмәткеһен һөйләгеҙ.
2. *Һүҙ ҡуйышыу, тауыш биреү* һүҙбәйләнештәрен текстан табығыҙ, мәғәнәләрен асыҡлағыҙ. Бүтән осраҡтарҙа был һүҙбәйләнештәр тағы ниндәй мәғәнәлә ҡулланыла? Фекерегеҙҙең дөрөҫлөгөн миҫалдар менән дәлилләгеҙ.
3. Текста телгә алынған Яйыҡ, Иҙел, Ҡариҙел йылғаларының хәҙерге исемдәрен белегеҙ.
4. Риүәйәттә телгә алынған бөтә топонимик атамаларҙы күсереп алығыҙ, русса нисек аталыуҙарын асыҡлағыҙ. Уларҙың берәйһенә ҡағылышлы риүәйәт эҙләгеҙ.

5. «Минең ауылымдың (ҡасабамдың, ҡаламдың) фольклоры» тигән класс альбомы булдырығыҙ. Унда үҙегеҙҙең төбәктә табылған йыр, бәйет, риүәйәт һ. б. әҫәрҙәрҙе теркәп барығыҙ.
6. Башҡортостандағы иң ҙур биш йылғаға характеристика бирегеҙ: оҙонлоғон, ниндәй тауҙар араһынан, ниндәй үҙәндәр буйлап, ниндәй районлар аша ағыуын билдәләгеҙ, уларҙың буйында ниндәй ауылдар, ҡалалар урынлашыуын күрһәтегеҙ. Булдыра алған тиклем, был йылғаларҙың исемдәренең килеп сығышы тураһында ла фекер йөрөтөп ҡарағыҙ.
7. Башҡортостан йылғаларының экологик хәле тураһында фекер алышығыҙ.

**100-сө күнегеү.** Тексты уҡығыҙ, сифаттарҙы табығыҙ. Уларҙы телдән рус теленә тәржемә итегеҙ.

Был киң, тын туғайҙың ҡап уртаһындағы кескәй түбәләстә, ҡеүәтле ботаҡтарын ғорур япрайтып, ҡарт тирәк ултыра... Әйләнә-тирәлә йылҡы кешнәгән, өйөр айғыры уҡтаған, ҡолонсаҡ сырылдаған тауыштан башҡа бер нәмә лә ишетелмәй. Йәмшек ай ҙа, диңгеҙ төбөнә ырғытылған аҡ һуйырташ шикелле, күктең иң тәрән төпкөлөнән тын ғына ҡарап тора. Көньяҡтан иҫкән йылы, йүгерек ел, эре, йылтыр ысыҡ тамсылары ҡунған ҡурпы үләндәрҙең ҡытыршы биттәрен һыйпай-һыйпай, туғай буйлап шаярып йөрөй.

*(З. Биишева)*

**101-се күнегеү.** Бирелгән темалар буйынса һөйләшегеҙ.

Иртәнге, төшкө һәм киске аш ваҡытында һеҙ нимәләр ашайһығыҙ?

Һеҙ ҡайҙа сумка (портфель, альбом, салбар һ. б.) һатып алдығыҙ?

Башҡортостанда ниндәй йорт хайуандары һәм ҡыр йәнлектәре йәшәй?

## ХАЛЫҠ ХИКӘЙӘЛӘРЕ ТУРАҺЫНДА ТӨШӨНСӘ

Халыҡ хикәйәләре ауыҙ-тел ижадының ҙур бер өлөшөн алып тора. Тәбиғәте менән улар экиәттәргә яҡын тора. Экиәттәрҙә булған ваҡиғалар ҙа булмаған һымаҡ хикәйәләнә (барған, ти, килгән, ти, тип). Йәғни уларға шаһитһыҙлыҡ хас.

Ә халыҡ хикәйәләрендә, киреһенсә, хатта кеше ышанмаҫлыҡ нәмәләрҙе лә хикәйәләүсе **үҙем күрҙем,** йә, **шул кеше күргән,** тип, **булған хәл һымаҡ** итеп һөйләй. Йәғни ул һүҙ барған ваҡиғаларҙың шаһиты булып сығыш яһай.

Халыҡ хикәйәләрен **легендаларға** һәм **риүәйәттәргә** бүлеп йөрөтәләр. Легендалар әкиәттәргә бигерәк тә яҡын – уларҙың нигеҙендә уйҙырма, мөғжизәле ваҡиғалар, фантастика ята. Риүәйәттәрҙә хикәйәләү йә берәй тарихи ваҡиға, теге йәки был йылға, күл, тау исемдәренең килеп сығышы тураһында бара. Шуға ҡарап, уларҙы тарихи риүәйәттәргә һәм топонимик риүәйәттәргә бүлеп ҡарайҙар.

«Ағиҙел менән Яйыҡ» риүәйәтенең төрөн билдәләгеҙ.

*Әнүр ВАХИТОВ*

## ИР ҠАНАТЫ

*(Әҫәрҙән өҙөк)*

Ир ҡанаты ат була.
*Боронғо мәҡәл*

### I

Мөхәмәтулла бабай ғүмер баҡый ат ҡараған. Йәшлегендә ҡустылыҡта тороп ҡараған, олоғая башлағас, колхоз аттарына хужа булған... Аттарҙы ни тиклем генә яратмаһын, барыбер уның бер йомшаҡлығы бар ине: ерән аттарҙы айырым бер ҡомарлыҡ менән тәрбиәләй. Абдрахман батырҙың француз яуынан әйләнеп ҡайтҡан атының нәҫеле, ти торғайны ул ерән аттарҙы. Кем белә, бәлки, киң күкрәкле, лапағыраҡ кәүҙәле, һонолоп сапҡанда ал бирмәй торған был аттарҙың берәүһенең, ысынлап та, исеме быуат ярым буйы яҡташтары теленән төшмәгән шул данлы Абдрахмандың батырлығына ҡыҫылышы барҙыр. Халыҡ юҡты һөйләмәҫ...

Мөхәмәтулла бабай менән ныҡлап танышыуым да һуғыш ваҡытында ошо ерән аттарҙың береһе арҡаһында булды. Мин һәр ваҡыт Мөхәмәтулла бабай янында була торғайным. Уға

ярҙам итергә тырышам. Йомошона йүгерәм. Шуға ла мин уның нимә уйлағанын, нимә әйтерен, ниҙә ҡайғырыуын да белеп бөткәйнем. Йәшем саҡ унға ғына сыҡһа ла, мин тора-бара ысын ат ҡараусыға әйләнеп киттем. Мәктәптән сығам да йүгерәм. Ә бер йылды күрше ауыл мәктәбенә йөрөргә булғас, уҡыуҙы бөтөнләй ташланым.

Мөхәмәтулла бабайҙың уйы-иҫәбе менән генә янып йәшәнем. Уның ҡанаты йылы ине минең кеүеккә, теле йомшаҡ ине...

Ул телгә бик оҫта ине. Беҙҙең яҡта телдәр кешеләрҙе бик һөйһөнөп етмәйҙәр. Әммә һүҙ ҡәҙерен беләләр. Шуға ла икегә бүлеп йөрөтә халыҡ телдәрҙәрҙе. Берәүҙәрҙе – шепшә, ти. Шепшә – иҫәр, бәйләнсек һүҙле, тел ҡәҙерен белмәй, тел осона ни килһә – шуны һөйләп, юҡты бушҡа ауҙарып йөрөй. Улар һөйләгән һүҙҙең бото һуҡыр тин, тиҙәр. Ә бына шырмыйҙарҙың һүҙе – һүҙ генә! Шепшә – кешенең йәнен көйҙөрә, шырмый – күңелде күтәрә. Улар тел төбө менән, бер хикмәт сығарып һөйләйҙәр. Мөхәмәтулла бабайҙы һүҙҙе еткереп һөйләгәне, һамаҡлап та ебәргәне өсөн, шырмый тиҙәр ине.

Беҙҙең өй ат һарайына яҡын. Унда ни булғаны, Мөхәмәтулла бабайҙың ни эшләп йөрөгәне тәҙрәнән күренеп тора. Бер көндө Мөхәмәтулла бабай, ни эшләптер, аҙбарҙан бик оҙаҡ сыҡманы. Үҙенең йән кеүек күргән Саптарын, ауыҙ эсенән генә ниҙер һөйләнә-һөйләнә, ҡырғыслап алды. Шунан атты етәкләп, ҡапҡаға ҡарай китте. Мин, Мөхәмәтулла бабай Саптарҙы егеп берәй ергә барырға итәлер, тип, йүгереп сыҡтым. Әммә ҡарт, атын етәкләп, Еҙем юлына төшөп китте. Мин улар артынан саптым.

– Мөхәмәтулла бабай, ҡана үҙем эсерәм Саптарҙы, «һә» тигәнсе килермен...

– Юҡ, улым, үҙем апарам, бөгөн ул бит һуғышҡа китә, – тине ҡарт шым ғына.

– Һуғышҡа?!

Был мине үтә ғәжәпләндерҙе: аттар ҙа китә икән дә һуғышҡа, бахырҡайҙар...

Еҙемгә еткәс, Мөхәмәтулла бабай, ҡатаһын да һалып тормайынса, ҡатыраҡ аҡҡан ергә тиклем барҙы ла, Саптарҙы һыҙғыра-һыҙғыра эсерҙе. Уны яҡшылап йыуҙы. Шунан яр башындағы сиҙәмгә сыҡты ла, атының түшен һөйә-һөйә,

үләнгә ҡушты. Үҙе уның ялын тарап уйланып торҙо ла шым ғына һөйләнергә тотондо. Саптарҙың алдына иң матур үләндәрҙе йолҡоп һала-һала, мин ҡарттың һүҙенә иғтибар итә ҡуйҙым.

Мөхәмәтулла бабай, үҙе әйтмешләй, шырмыйлана – ҡобайыр һөйләй ине.

Ай, ат икән, ат икән,
Ир ҡанаты – ат икән.
Ҡанатлы иргә ҡаушау, ҡурҡыу,
Артҡа сигеү ят икән.
Ил ҡанаты – ир икән,
Ир ҡанаты – ат икән.
Ай Саптар ат, Саптар ат,
Саптар тигән толпар ат,
Гөлөм күреп үҫтергән,
Болан һыртлы Саптар ат,
Арыҫлан һынлы Саптар ат,
Ялҡын йөрәк Саптар ат.
Ир аҡыллы Саптар ат,
Ай, Саптар ат, Саптар ат,
Әйтеп ҡалайым һүҙемде,
Яуҙа бул, тим, түҙемле…
Хуш, Саптарҡай, иҫән бул,
Һап-һау йөрөп ҡайт илгә!
Ашар аштай кәрәкле
Еңеү алып ҡайт илгә!
Эскән һыуҙай ҡәҙерле
Еңеү булып ҡайт илгә!
Ҡояш кеүек әйләнеп
Ҡайт, Саптарҡай, ҡайт илгә!

Шул көндө беҙ Саптарҙы һуғышҡа оҙаттыҡ. Уның көлтәләй ҡойроғон болғай-болғай киткәнен күҙ яҙғансы ҡарап торҙоҡ.

Ошонан һуң Мөхәмәтулла бабай бик бойоғоп йөрөнө. Үҙе миңә аттар тураһында бик күп тарихтар һөйләне. Мин бөтөнләйгә уның ярҙамсыһы булып киттем.

## II

Һуғыштың өсөнсө ҡышы ине булһа кәрәк. Ауылға бер ир килеп төштө. Әллә ниндәй ҡыпыш ҡына тун кейгән. Һыңар аяғына һылтыҡлап атлай. Ул сумкаһынан блокнот алып, ниҙер яҙғылап, фермаларҙы, келәттәрҙе ҡарап йөрөнө. Аҙаҡ аттар янына барҙы. Тиҙәк түгеп йөрөгән Мөхәмәтулла бабайға:

– Күрһәт тартыу көсөңдө, – тине.

– Бик арыубыҙ, бик иҫәнбеҙ әле, – тип күҙҙәрен ҡыҫып уҡ ҡараны бабай. Теге кеше сирылып ҡуйҙы. Өндәшмәй генә барып һарайҙы асып ебәрҙе.

– Бөтә тартыу көсө ошонда тупланғанмы?

– Эйе, бөтә аттар ошонда, – тине Мөхәмәтулла бабай, – ә һеҙ, мырҙам, кем булаһығыҙ?

– Мин – предколхоза.

– Председатель?! Ә Ғәрифулла ҡорҙашҡа ни булған?

– Уныһын райондан һора.

– Һы.

Баяғы һылтыҡлауын онотоп, теге кеше хужаларса ныҡ баҫып, һарай эсенә үтеп, керт-керт утлап, теҙелеп торған аттарҙы арттан ғына ҡарап сыҡты ла, башҡаларҙан нимәһе менәндер айырылып торған Саптарҙы, бынан ике йыл элек һуғышҡа оҙатылған саптар бейәнең балаһын, күрһәтеп:

– Миңә шуны егерһегеҙ, – тине.

– Нимә?!

Теге кеше ҡырт ҡына боролдо.

– Беҙҙә кешеһенә күрә аты егелә, мырҙам, – тине бабай.

– Шулай булғас, ниңә телеңде оҙайтып тораһың? Әйткәс, ек. Унан һуң, бынан кире һин сүбәк һаҡалыңды йыйыбыраҡ өндәш миңә, яраймы, – тине лә, эш тә, һүҙ ҙә бөтөүен аңлатып, һылтыҡлап ҡапҡаға йүнәлде. Был, ысынлап та, ауылға яңы килгән буласаҡ председатель Ҡотлогилде Ғәлиәхмәтов ине. Бына ошо тәүге осрашыуҙағы аңлашыу уларҙың артабанғы мөнәсәбәттәрен билдәләне. Һүҙен һүҙ итте яңы председатель: Саптар менән Ерән бейәнән башҡа атҡа ултырманы. Күпме генә инәлеп ҡараманы Мөхәмәтулла бабай – тыңламаны уны Ҡотлогилде. Әллә ниндәй бер йылтын күҙ, ҡыу йөрәк булып сыҡты ул.

Февраль инеме, март башымы, асыҡ ҡына хәтерҙә ҡалмаған, Мөхәмәтулла бабай менән яланға бесән кәбәне аҡтарырға барҙыҡ. Кәбәнде көрт баҫҡан. Уны көрәргә кәрәк булды.

Етмәһә, туңы күп сыҡты, һәнәк менән ҡуптарыу түгел, балта менән сапҡылап саҡ-саҡ астыҡ. Мөхәмәтулла бабай арып-талып бер генә юлланы ла кискә ҡарай, аттарына туң бесән таратып, бер аҙ һарайҙа йөрөнө. Көтә ине ул. Ерән бейәне ни эшләптер һаман килтермәйҙәр. Ана уның урыны һаман буш тора. Мөхәмәтулла бабай уның утлығына туңһыҙыраҡ бесән һалды.

– Оҙаҡ йөрөй, тағы өшәндерер инде…

Шул саҡ урам осонда йән-фарман сабыусы егеүле ат күренде.

– У-ух, йөҙө ҡара, тағы саба, – тине Мөхәмәтулла бабай, – өйгә еткәс, атты һыуындыра йүнле әҙәм…

Бына ат мәктәп эргәһенән былай табан боролдо. Юҡ, келәт яғына икән. Мөхәмәтулла бабай түҙмәне, шул яҡҡа юрғаланы. Келәт янында ярһыған ат саҡ туҡтаны. Бөтә тәнен ҡалтыратып, ул ауыҙлыҡтарын сәйнәй. Мөхәмәтулла бабай юрғалап килеп уның теҙгененән алды.

– Ах, дуңғыҙ, ҡара йөҙ, бөтөрәһең бит атты! – Ул санаға ҡараны. Унан кемгәлер оҡшатырға тырышып, ҡыланып, ун ике-ун өс йәштәрҙәге бер малай төштө. Бәй, Ҡотлогилденең Рәүфиле, имеш. Танымай ҙа торам. Яңы көпө кейгәс ни…

– Һин кем тағы? – тип һораны унан Мөхәмәтулла бабай.

– Председатель малайы.

– Ниңә шул ҡәҙәре ҡыуаң атты? Яндыраң бит.

– Атайым ашығырға ҡушты. Ул хәҙер Ҡыҙарҙыға бара. Келәттән әйбер генә алырға килдем.

– Ниндәй Ҡыҙарҙы тағы? Әле ҡайҙа барҙы һуң?

– Әле ул Ҡаҡташҡа Һәби ағайға барҙы. Ә Ҡыҙарҙыға ҡунаҡҡа саҡырғандар…

Малай келәткә инеп китте. Мөхәмәтулла бабай, сананан бесән алып, аттың тирен, күперектәрен һыпырғыланы. Унан ҡулын һелтәне лә, атты етәкләп, һарайға йүнәлде.

Рәүфил, үсегеп, атаһы менән ҡурҡытып, ҡайтып китте.

Күп тә үтмәне, Мөхәмәтулла бабайҙы кәнсәләргә саҡырттылар. Ул нимәгә саҡырыуҙарын белә ине, шуға ашыҡмай ғына ҡуҙғалды. Күрәһең, нимә әйтерен уйлап баралыр. Тик унан бер кем бер нәмә һораманы. Председатель урынына ултырған Ҡотлогилде уға ҡарамай ғына:

– Ҡарт, Ерән бейәне кашовкаға ек тә бында килтер, тиҙ бул! – тине. Уның тауышында ярһыу ҙа, ҡурҡытыу ҙа бар ине.

– Һуң уны әле генә арманһыҙ итеп өшәндереп килтереп ташланығыҙ бит. Ниндәй төнө менән ашығыс эш тағы? – Ҡарт ишеккә йүнәлде. – Мин әллә былар йүнле хәбәр әйтерҙәрме тиһәм...

Ул ишеккә барып етә алманы, Ҡотлогилде, һылтыҡлауын да онотоп, бер һикереүҙә Мөхәмәтулла бабайҙың алдына сыҡты.

– Һин ипләп әйткәнде аңлайһыңмы-юҡмы? Сүбәк һаҡалыңды минең эшкә ҡыҫтырма, тип тәүҙә үк әйттем түгелме?

– Алъюҫыҡҡа ат ҡыуа торған саҡмы ни, председатель ҡустым? Бары-юғы ай ярымдан һабанға төшөргә торабыҙ. Бесән бөтөп килә. Ана, тәүҙә егеп йөрөгән Саптарҙы әллә яндырғанһың инде, мандымай. Аптыраҡ...

Мин, яндырайланып киткән Ҡотлогилденән ҡурҡып, алданыраҡ тайғайным. Ишек төбөндә көтөп торам. Бына Ҡотлогилде ниҙер ҡысҡырҙы. Мөхәмәтулла бабай уға ниҙер һөйләй башланы, тик ҡарт һүҙен әйтеп бөтөрә алманы, Ҡотлогилде уны елтерәтеп ишектән сығарып ебәрҙе. Мөхәмәтулла бабайҙың хәлһеҙ аяҡтары тәнтерәкләп китте. Ул ишек алдының ҡаҡ боҙона йығылды. Ауыртыныуҙан бигерәк ғәрләнеүҙән ыңғырашып, тешһеҙ ауыҙын ҡымтыны. Мин уға килеп тотондом. Мөхәмәтулла бабай тәнтерәкләп ҡайтты ла йығылды. Оҙаҡ ятты ул хәрәкәтһеҙ, оҙаҡ уйланды. Моғайын, уның уйы, йүгәнһеҙ бер ярһыу булып, гел Ҡотлогилде эргәһендә уралғандыр. Ул ваҡыт-ваҡыт:

– Эх, Ҡотлогилде, Ҡотлогилде, – тип көрһөнә ине. Уның колхоз малын туҙҙырыуы, кешеләрҙе һанға һуҡмауы, кәмһетеүе, инде бына кешегә ҡул күтәреүгә тиклем шашыуы тураһында уйлағандыр...

Иртәгеһенә мин аттар янына барғанда, ул һарайҙа ине инде. Мин иң тәүҙә Ерән бейәнең урынына күҙ һалдым. Юҡ.

– Ҡарайһыңмы?

– Эйе...

– Ҡайтмағандар. Бик ҡурҡҡайным. Хәҙер әҙерәк тынысландым. Төндә ҡайтһалар, ҡыуып арманһыҙ итерҙәр ине. Әлдә ҡуна ҡалғандар икән.

Ҡарт, ғәҙәтенсә, ҡулын һелтәп ҡуйҙы. Шунан тағы көрәгенә тотондо.

– Һай, был беләге, бөгөн, үс иткәндәй, ныҡ һыҙлай... Анау көндө кәнсәләр ишек алды ташына нығыраҡ йығылдым шул...

Мөхәмәтулла бабай бүртәгә бесән ташланы ла һиҫкәнеп киткән йәш, ҡайнар ҡанлы айғырҙың тынысланып керт-керт ашана башлауын күҙәтеп торҙо. Тағы һөйләп китте. Ғөмүмән, ул һуңғы ваҡытта күп һөйләй башланы был хаҡта:

– Йәшәмәнем түгел, йәшәнем. Бына бүртә менән ерән аттарҙың да бит әллә унынсы быуынын күрәм. Ә бөгөн килеп ошо өйөр ҡото – бүртәгә Ҡотлогилде ҡамыт һалырға ҡуша. Ә үҙе бер-ике айҙа Саптарҙың башына етергә лә өлгөрҙө. Хәҙер Ерән бейә. Уныһы ғыжылдай, тип, хәҙер, ана, бүртәгә ҡул һуҙа. Ниндәй бәндә булып сыҡты был Ҡотлогилде, бәй-бәй... Ярар, улым, булмаһа, ашап, нығынып киләйек. Әтеү бер ҙә кәр юҡ бөгөн. Төн буйы серем итеп булманы шул, бынау Саптарҙы, Ерән бейәне ҡайғыртып. Аб-ба, һаман ҡайтып етмәй бит әле был...

Беҙ урамға сыҡтыҡ. Бөгәсә төндә артыҡ буранламай ғына ябалаҡлап ҡар яуғайны. Мөхәмәтулла бабай тирә-яҡты ҡарап торҙо ла, ҡулын артына һалып, алға бөгөлә төшөп, ҡайтып китте.

Бер аҙ киткәс, әйләнеп:

– Ерән бейә ҡайтһа, ышыҡҡа индереп, септә ябырһың. Мин килеп етмәһәм, йәшелен генә һайлап, бесән һалырһың. Эсереүен – һуңынаныраҡ, – тип ҡысҡырҙы. Мин «ярар», тинем дә ялан аҙбарҙың ябылмайыраҡ торған ҡапҡа ауыҙын сапҡыларға тотондом. Шул ваҡыт Мөхәмәтулла бабайҙың ҡаты тауышы ишетелде:

– Нимә?!

Мин күтәрелеп ҡараным. Әлеге Рәүфил ҡайһы араларҙыр тағы йүгереп килеп еткән дә Мөхәмәтулла бабайға ниҙер аңлатып тора. Бына Мөхәмәтулла бабай йүгергәндәй итеп атлап китте. Рәүфил уның әле уң, әле һул яғына сығып ниҙер һөйләй. Күрәһең, насар хәбәрҙер. Ҡарт малайға ҡаты итеп ниҙер әйткәйне, тегеһе артта ҡалды. Шунан тағы ҡыуып етте. Ҡапҡа ауыҙын таҙартып бөтөрөп, нығытып яптым да мин дә улар артынан йүгерҙем. Мин барып еткәндә, Рәүфилдәрҙең урамында өс-дүрт кеше Ерән бейәне аяғына баҫтырырға тырыша ине. Мөхәмәтулла бабай аттың әле бер, әле икенсе яғына сыға. Күрәм, ул ни эшләргә лә белмәй, бәлтерәп ҡалған. Ерән бейә, аяҡтарын һуҙып, быялаланған хәрәкәтһеҙ күҙҙәрен бер урынға теклəп тик ята.

– Янған шул мал. Шәп ҡыуғандар.

– Бәй, төндә ҡайтҡандар. Ҡайтҡас та ауған. Берәүгә лә

хәбәр итеү юҡ, кергәндәр ҙә ятҡандар. Ә Рәүфиле атты торғоҙа алмаған, – тип һөйләнде кемдер.

– Өс-дүрт сәғәт буйы ятҡан.

– Мал булмаç был.

– Андыҙ табырға кәрәк. Андыҙ барҙа ат үлмәç, тиҙәр бит.

Ерән бейәне киң төплө санаға һалып ат һарайына килтерҙек. Уңарса булмай, күрше ауылдан ветсанитар Зәйнулла ҡарт килеп етте. Ике-өс көн буйы Мөхәмәтулла бабай Ерән бейә янынан китмәне. Өсөнсө көндө төш ваҡытында ғына ул аттар янына инде. Һүҙһеҙ генә кәртәләр араһынан йөрөп сыҡты. Ҡапҡа төбөндәге ширлеккә ултырҙы ла ауыр, бик ауыр итеп көрһөндө ул. Мин шым ғына уның янына килдем. Мөхәмәтулла бабай оҙаҡ ҡына ултырҙы. Ахырҙа ул:

– Мал булмаç, ахыры, Ерән бейә, – тине лә башын устарына һалды, – яңғыҙ ғына ҡалғайны. Абдрахман батырҙың француз яуынан әйләнеп ҡайтҡан атының нәçеле бит ул. Шуны һаҡлап булманы. Шуны аңлатып булманы анау ерҙән һөйрәлеүсе Ҡотлогилдегә...

III

Ерән бейә, ысынлап та, мандыманы. Ҡолон һалды. Быуындары әллә нисек төҙәймәне, кәкре булып ҡалды.

– Бына шулай, улым, Ерән бейәнең дә нәçеле ҡороно. Ә ниндәй ат ине бит, ниндәй мал! Абдрахман батыр атының нәçеле. Бөтә Аурупаны әйләнеп ҡайтҡан ат нәçеле. Һай, юрғаларҙың юрғаһы булды үҙҙәре! Мин әле уларҙың ун беренсе быуынын күрер инем, бына ун беренсеһе үле тыуҙы, һаҡлай алманым…

Ҡарт тынып ҡалды. Күктә яҙғы ҡояш ҡыҙҙыра. Ялан аҙбарҙа арыҡ аттар ҡарама кимерә. Беҙҙең тирәлә йыла юҡ. Яҙ булдымы, шуға йә ҡарама, йә тирәк, ҡайһы саҡта өйәңке ҡырҡабыҙ. Наҡыç бесәнгә иш янына ҡуш булһын, тигән булабыҙ. Аттар, шуға алданып, яҙғы ҡояшта ҡыҙына.

– Һаҡлап булманы, – ҡарт һүҙен ялғап китте, – миңә был нәçелдең тарихын олатайым һөйләгәйне. Уларҙы халыҡ элек-электән һаҡлап тотҡан, нәçелен ҡоротмаçҡа тырышҡан. Колхозға ул Сәлимгәрәй кулак аҙбарынан килеп кергәйне. Мин үҙем ул Сәлимгәрәйҙә бик күп йылдар ҡустылыҡта

торҙом, һәйбәт ҡарарға тырыштым мин ерән, саптар аттарҙы. Сәлимгәрәйгә күпме атһөйәр, һат, тип килә торғайны уларҙы, һаттырманым. Был дан аттарҙан байҙың үҙенең дә яҙғыһы килмәне инде. Ә бына хәҙер килеп, шул аттарҙың нәҫеле ҡороно... Миңә тиклем күпме кеше һаҡлап тотҡан ул аттарҙы, ҡоротмаған, минең ҡулда ҡороно...

Иртәгәһен Мөхәмәтулла бабай һуңлап ҡына килде. Уның йөҙө яҡтырып киткәйне. Күҙҙәрендә йылылыҡ артҡан. Йөрөшө лә етеҙәйгән. Ниңә шулай икәнен мин аҙаҡ ҡына белдем. Ул бөгәсә төндә Һыбай ауылына барған икән. Беҙҙең ауылда партойошма юҡ ине. Ауылда ни бары ике коммунист – Ғарифулла бабай ҙа Ҡотлогилде генә. Шуға улар Һыбай партойошмаһында иҫәптә торалар ине. Мөхәмәтулла бабай ана шул партойошмаға барған да инде. Барған да тиргән дә һалған. Ҡотлогилдене алмаһағыҙ, колхозды тамам әлһерәтәсәк, тигән. Килгәненә ике ай ҙа юҡ, инде өсөнсө аттың башына етте. Һорап алған кешебеҙ түгел, алығыҙ шул Алла бәндәһен беҙҙең өҫтән, беҙҙең үҙебеҙҙең Ғарифулла аҡһаҡалыбыҙ бына тигән етәксе лә, тернәксе лә, тигән.

Шунан китте эштәр. Райондан да килеп еттеләр. Ҡотлогилде майлаған кеүек йөрөп ҡараны ла бит, һуң ине шул. Мөхәмәтулла бабай һыртын ҡуйып торҙо. Китте Ҡотлогилде ҡайҙалыр, юғалды.

– Ана бара юлы, – тип ҡуйҙы, ул киткәс, Мөхәмәтулла бабай ҡулын һелтәп.

Ҡыш үтте. Һуғыш бөттө. Тереләр һуғыштан ҡайтты. Ауыл йәмләнеп кенә түгел, йәнләнеп киткәндәй булды. Әммә Мөхәмәтулла бабайҙың иң ҙур шатлығы һуғыштан Ерән бейәнең ҡолоно – ҡуйы аҡ яллы Саптар бейәнең бер яраһыҙ көйө ҡайтып төшөүе булғандыр. Сөнки Ерән бейә имгәнеү сәбәпле ҡолонламаҫ булып ҡалғайны.

Мин мәктәптә инем. «Саптарығыҙ һуғыштан иҫән-һау ҡайтып төштө, Өфөнән барып алығыҙ», – тигән хәбәр алынғас, Мөхәмәтулла бабай, сабый һымаҡ, ихлас итеп бер ултырып иланы, тиҙәр. Шунан ул хәлһеҙләнеп ҡайтып тәгәрәгән. Ә атты кем барып ала, тигән һүҙ сыҡҡас, Мөхәмәтулла бабай түҙмәгән – үҙе киткән. Ике-өс көндән Өфө һынлы ерҙән Саптарҙы менеп ҡайтып төштө был. Атты күрергә бөтә ауыл йыйылды. Хатта күрше ауылдарҙан да килгәндәр. Ә Мөхәмәтулла бабай

ҡояш һымаҡ йөрөп ята. Әйтерһең, Саптар түгел, ул үҙе фронтта йөрөп, дан алып ҡайтҡан. Кискә тиклем халыҡ өҙөлмәне. Ҡояш ҡабаҡ һыртына ултырғас, Мөхәмәтулла бабай ялан аҙбарҙың ҡапҡа төбөнә ҡуйылған ширлеккә ултырҙы ла ҡурайын ҡулына алды. Ул һуңғы йылдарҙа ҡурайҙы бөтөнләй ташлағайны. Йәштәр һорағанда ла, теш юҡ, тип кенә ҡуя ине. Ә бөгөн бөтә кешеләрҙе аптыратып, ҡурайын еүешләне, деңгелдәтеп өрөп алды ла ниндәйҙер бер ят көйгә тартып ебәрҙе. Бер аҙ яңғыҙ уйнап туҡтағас, уның янына Ғарифулла бабай килеп баҫты. Ул да ошондай көн өсөн тип күптән үк бер ҡурай һаҡлай ине. Әле Мөхәмәтулла бабайҙың ниәтен һиҙгәс тә ул бер малайҙы өйөнә йүгертеп ҡурайын килтерткәйне. Ҡарттар, йәштәре һикһәнгә еткән, тиң ҡартайған мөһабәт ошо ике бабай, ауылдың аҡһаҡалдары ғына түгел, аталары, үҙҙәре төҙөгән, үҙҙәре ғүмер итеп ҡартайған ауыл алдында, уның миһырбанлы, ғәжәп һере күңелле кешеләре алдында йәнәшәләп баҫып, ҡушарлап ҡурай тартып ебәрҙеләр. Оҙон дүрт йыл буйы был ауыл аталары күңеленә ни генә йыйылмаған да ни генә килеп ҡағылмаған, тиһең...

1. Тексты иғтибар менән уҡып сығығыҙ, яңы һүҙҙәрҙе күсереп алығыҙ, мәғәнәләрен асыҡлағыҙ.
2. Тексттың йөкмәткеһен һөйләгеҙ. Телмәрегеҙҙә яңы һүҙҙәрҙе файҙаланырға тырышығыҙ.
3. Түбәндәге һүҙбәйләнештәрҙең мәғәнәләрен асыҡлағыҙ: *юкты бушҡа ауҙарыу, һөйһөнөп етмәү, тел ҡәҙерен белеү, йән көйҙөрөү, күңел күтәреү, һүҙ оҙайтыу, арманһыҙ булыу, иплән әйтеү, һабанға төшөү, һанға һуҡмау, серем итеү, тиреп һалыу, майлаған кеүек йөрөү, һырт ҡуйыу.* Текстан улар осраған урынды табып, авторҙың уларҙы ниндәй маҡсатта файҙаланғанын асыҡларға тырышығыҙ. Уларҙы файҙаланып, үҙегеҙ ҙә һөйләмдәр төҙөп яҙығыҙ.
4. *Йылтын күҙ, ҡыу йөрәк, йөҙө ҡара* һүҙбәйләнештәре нимә аңлата? Ҡотлогилде тураһында һөйләгәндә, Мөхәмәтулла бабай ни өсөн нәҡ ошо һүҙҙәрҙе ҡуллана икән? Һеҙ үҙегеҙгә шулай тип әйткәндәрен теләр инегеҙме?
5. Мөхәмәтулла бабай йәш сағында Сәлимгәрәй байҙа *ҡустылыҡта* торған. Атай-әсәйҙәрегеҙҙән, өлкән быуын кешеләренән һорап, уның нимә аңлатҡанлығын асыҡларға тырышығыҙ.

**6.** Мөхәмәтулла бабай Ҡотлогилдене *ерҙән һөйрәлеүсе* тип атай, шуға аңлатма бирегеҙ. Биология дәреслегенән *һөйрәлеүселәрҙең* ниндәй йән эйәләре икәнлеген ҡарағыҙ.
**7.** Нимә ул *аттың яныуы?* Күмәкләп асыҡларға тырышығыҙ.
**8.** Хикәйәлә ҡайһы осор ваҡиғалары тасуирлана? Үҙегеҙҙең фекерҙе текстан миҫалдар менән дәлилләгеҙ.
**9.** Мөхәмәтулла бабай менән Ҡотлогилде образдарына характеристика бирегеҙ.
**10.** Үҙегеҙгә оҡшаған берәй абзацты диктант итеп яҙығыҙ.

**102-се күнегеү.** Һүҙбәйләнештәрҙе рус теленә тәржемә итегеҙ.

Ауыр кәүҙәле ир, иҫ киткес матур яулыҡ, асыҡ йөҙлө хужа, бөҙрә сәсле малай, алты тәҙрәле өй, ҙур-ҙур сумаҙанлы пассажирҙар, күп балалы әсә, көрәк һаҡаллы бабай.

**103-сө күнегеү.** Һүҙ формаларын дөрөҫ яһағыҙ.

барырһығыҙ (*иҫкәрмә:* барырығыҙ түгел)
килерһегеҙ
йөрөрһөгөҙ
барaһыңмы (*иҫкәрмә:* бараңмы түгел)
киләһеңме
йөрөйһөңмө

**104-се күнегеү.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.

Булыр бала бишектән,
Илгә сығыр ишектән.
Булырҙайға бер әйт тә,
Булмаҫтайға мең әйтмә.

Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы –
Таш сүлмәкте киңәйтмә.

Киңәйтергә кирге юҡ –
Арғы яҡта бирге юҡ –
Табалмабыҙ барһаҡ та,
Тигеҙ түгел бармаҡ та…

*(Р. Ғарипов)*

## ХАРАКТЕРИСТИКА ТУРАҺЫНДА ТӨШӨНСӘ

Әҫәр геройын тулыраҡ күҙ алдына килтереү өсөн, яҙыусылар уның тышҡы ҡиәфәтен, сәстәренең, күҙҙәренең, танауының һ. б. нисек булыуын, кейемен, ғәҙәттәрен, донъяға ҡараштарын һ. б. тасуирлай. Ошо тасуирлама **характеристика** тип атала.

С. Агиштың «Ҡунаҡ һәм намыҫ» хикәйәһендә, мәҫәлән, Тимербулат ҡартҡа шундай характеристика бирелә: «Күрер күҙгә артыҡ ҙур булмаған, уртасанан олораҡ кәүҙәле, һөйәктәре сығып торған был ҡарттың оҫта хәрәкәте, һәләтлеге мине һоҡландырҙы». Ә Вәли Абуталипов тигән геройын былайыраҡ күҙ алдына баҫтыра: «Йәш сағында йыйнаҡ ҡына кәүҙәле, урта буйлы матур ғына егет ине. Һуңғы осрашыуҙа ул бөтөнләй үҙгәргән, таҙарған, елкәләре ҡалынайған, ҡорһаҡ та байтаҡ үҫкән, хәрәкәте лә әүәлге кеүек етеҙ түгел, ауыр ҡуҙғала. Хатта һөйләшеүендә лә ниндәйҙер һүлпәнлек һиҙелә. Әйтер һүҙен иң элек уйлап ала ла, ҡыҙыҡ итеп үҙе өсөн генә көйләп ҡуйғас, унан һуң ғына башлап китә».

1. Үҙегеҙҙең бер класташығыҙға характеристика яҙығыҙ. Класташығыҙҙы әҙәби герой итеп күҙ алдына килтерергә тырышығыҙ.
2. Характеристикаларығыҙҙы уҡып, күмәкләп баһа бирегеҙ.

### Һүҙ күрке – мәҡәл

Ирҙең юлдашы ла – ат, моңдашы ла – ат.

Аттың ҡоно (бында: көсө, мөмкинлеге) тауҙа һынала, егеттең ҡоно яуҙа һынала.

# Тау башында балҡый бер ҡала

## ӨФӨ

Өфө – Башҡортостан Республикаһының баш ҡалаһы.

Өфө республикабыҙҙың урта өлөшөндә, Өфө, Дим йылғалары Ағиҙелгә килеп ҡушылған ерҙә, урынлашҡан. Йәше дүрт быуаттан ашып китһә лә, ул һаман үҫә, йәшәрә, матурлана бара. 1980 йылда уның халҡы бер миллиондан артып китте.

Ҡаланың урамдары һәм майҙандары – үҙе бер тарих. Уларҙа халыҡтың үткәне, бәхет, ирек өсөн көрәше сағылған. Уларҙың байтағы халыҡ азатлығы өсөн көрәшкән батырҙарҙың, Ватанды һаҡлап, яуҙа башын һалған геройҙарҙың, атаҡлы фән һәм мәҙәниәт эшмәкәрҙәренең исемен йөрөтә. Боронғо майҙандарҙың береһендә Башҡортостандың Рәсәйгә ҡушылыуы хөрмәтенә мөһабәт монумент ҡуйылған. Ә Ағиҙелдең текә ярында, ярһыу арғымаҡҡа атланып, Емельян Пугачёвтың тоғро юлдашы, башҡорт халҡының милли геройы, шағир-импровизатор Салауат Юлаев баҫып тора. Халыҡтың күренекле улдарының иҫтәлеген мәңгеләштергән бындай һәйкәлдәр байтаҡ Өфөлә.

Баш ҡалала Салауат Юлаев, Мәжит Ғафури, Мостай Кәрим, Һәҙиә Дәүләтшина, Дауыт Юлтый, Баязит Бикбай, Сәғит Агиш, Жәлил Кейекбаев кеүек әҙиптәрҙең исемдәрен йөрөткән урамдар бар. Милли йәштәр театрына халыҡ шағиры Мостай Кәримдең, «Китап» нәшриәтенә халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишеваның, Республика милли китапханаһына күренекле ғалим һәм дәүләт эшмәкәре Әхмәтзәки Вәлиди

Туғандың, Башҡорт дәүләт педагогия университетына мәғрифәтсе шағир Мифтахетдин Аҡмулланың, Өфө дәүләт сәнғәт академияһына күренекле композитор Заһир Исмәғилевтың исеме бирелде.

Өфө – юғары үҫешкән индустрия үҙәге, машина эшләүселәр һәм нефть эшкәртеүселәр, химиктар һәм энергетиктар, төҙөүселәр һәм транспортсылар ҡалаһы. Ул шулай уҡ фән һәм мәҙәниәт үҙәге лә. Унда педагогика, медицина, авиация-техник, нефть-техник, аграр университеттары, Башҡорт дәүләт университеты, сәнғәт академияһы, тиҫтәләгән ғилми-тикшеренеү институттары, бик күп мәҙәниәт һарайҙары, театрҙар, техникумдар, училищелар, йөҙҙән ашыу дөйөм белем биреү мәктәптәре, гимназиялар, лицейҙар эшләй.

Өфөлә йыл һайын яңы заводтар, яңы урамдар ҡалҡып сыға, яңы йорттар, мәктәптәр, баҡсалар, больницалар, мәҙәниәт һарайҙары һалына.

Баш ҡалабыҙҙың матурлығы, унда йәшәгән кешеләрҙең һаулығы, бәхетле киләсәге – беҙҙең ҡулда. Бының өсөн беҙ заманса белемгә эйә булырға һәм ул белемебеҙҙе ватандаштарыбыҙҙың сәләмәт тормошон тәьмин итеүгә йүнәлтергә, үҙебеҙҙе ата-бабаларыбыҙҙың гүзәл традицияларында камил шәхес итеп тәрбиәләргә бурыслыбыҙ.

1. Текстан аңлашылмаған һүҙҙәрҙе табып, мәғәнәләрен асыҡлағыҙ.
2. Тексты йөкмәткеһен үҙегеҙ белгән башҡа мәғлүмәттәр менән тулыландырығыҙ.
3. Өфөләге үҙегеҙ белгән урамдарҙың, кинотеатрҙарҙың, юғары уҡыу йорттарының, завод-фабрикаларҙың исемдәрен яҙып сығығыҙ. Был исемдәрҙең ниндәй уңай менән бирелгәнен асыҡларға тырышығыҙ.
4. Өфө тураһында һуңғы йылдарҙа гәзит һәм журналдарҙа яҙылған материалдарға таянып, баш ҡалабыҙ алдында торған проблемаларҙы билдәләгеҙ, уларҙы хәл итеү юлдарын күрһәтегеҙ.
5. Өфөнөң берәй музейына экскурсия яһағыҙ, алған тәьҫораттарығыҙ буйынса кескәй хикәйә төҙөп яҙығыҙ.
6. Өфө тураһында материал туплап, «Өфөм – баш ҡалам» тигән альбом төҙөгөҙ.

**105-се күнегеү**. Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.

Айырғылап, айырылғанды айыу ашай!
Бүлгеләп, бүленгәнде бүре ашай!
Бәйләмендә батыр еңмәҫ һеперткене
Сыбығайһа, бер балаң да онтап ташлай!

*(Әбүс)*

*Сыбығайыу* – айырым сыбыҡтарға таралыу.

**106-сы күнегеү.** Тел көрмәлдергестәрҙе дөрөҫ итеп уҡығыҙ, йомаҡтарҙы сисегеҙ.

I. 1. Ҡанаттарын ҡаға-ҡаға, аҡ ағуна ҡарға сума.
2. Ҡарағура ҡарағусҡылланмаған.

II. 1. Шыйыҡ булһа ла, һыу түгел, аҡ булһа ла, ҡар түгел.
2. Еҙнәм атын менеп булмай, еҙ ҡамсыһын тотоп булмай.
3. Бейек-бейек тауҙарҙа, икһеҙ-сикһеҙ ҡырҙарҙа йүгерә-йөрөй аҡ сәкмән.

Яуаптары: *һарыҡ, һөт, айыу менән йылан.*

## ТӨП ҺӘМ ШАРТЛЫ СИФАТТАР

Башҡорт телендә бик күп исемдәр, икенсе бер исем алдында килеп, **сифат** мәғәнәһен ала. Бындай һүҙҙәр, күп осраҡта, теге йәки был предметтың ниндәй материалдан булыуын белдерә. Мәҫәлән, *алтын* балдаҡ – *золотое* кольцо, *тимер* көрәк – *железная* лопата, *ағас* баҫма – *деревянный* мостик.

Бындай һүҙҙәр, күренеп тора, ошондай осраҡта ғына сифат була алалар. Уларҙы **шартлы** сифат тип атайҙар, йәғни улар билдәле бер шартта ғына сифат ролен үтәйҙәр. Рус телендә бындай сифаттар **относительные прилагательные** тип атала. Относительный, йәғни мөнәсәбәтле сифат. Ул предметтың билдәһен ваҡытҡа, урынға, материалына мөнәсәбәттә күрһәтә.

Ә **төп** сифаттар (качественные прилагательные) предметтың үҙенең билдәһен (төҫөн, формаһын, тәмен һ. б.) белдерә.

Төп сифатты шартлы сифаттан айырыуҙың ябай ғына юлы бар. Сифатты сағыштырыу дәрәжәһенә ҡуйып ҡарарға кәрәк. Төп сифаттарҙың барыһының да сағыштырыу дәрәжәһе формаһы була. Ә шартлы сифаттың ундай формаһы юҡ.

**107-се күнегеү.** Беренсе бағаналағы исемдәрҙе сифат урынында ҡулланып, икенсе бағаналағы тейешле исемдәр менән парлап яҙығыҙ. Һүҙбәйләнештәрҙең 3-һө менән һөйләм төҙөгөҙ.

| | |
|---|---|
| еҙ | юл |
| тимер | ҡалаҡ |
| ағас | күмер |
| таш | сыбыҡ |
| кирбес | ҡомған |
| асфальт | стена |

Ҡайһы бер сифаттарҙың артыҡлыҡ дәрәжә яһай торған ярҙамсы һүҙҙәре була. Был ярҙамсы һүҙҙәр тәғәйен сифаттарға ғына ҡушыла ала.

**108-се күнегеү.** Беренсе бағаналағы ярҙамсы һүҙҙәр, икенсе бағаналағы сифаттарҙың береһе менән бергә килеп, артыҡлыҡ дәрәжәһе яһай. Шуларҙы тап килтерегеҙ.

| | |
|---|---|
| шар | һуҡыр |
| салт | ҡараңғы |
| дөм | яңғыҙ |
| тома | яланғас |
| шыр | аяҙ |
| япа | асыҡ |

**109-сы күнегеү.** Мәҡәлдәрҙең йөкмәткеһен аңлатығыҙ.

1. Үҙ йортон яманлаған кеше йортонда әрләнер. 2. Батырмын, тип кем әйтмәй – яу килгәндә, йүне юҡ; сәсәнмен, тип кем әйтмәй – дау килгәндә, өнө юҡ. 3. Бахыр алдында батыр, батыр алдында үҙе бахыр. 4. Һуғыштан һуң йоҙроҡ төймәйҙәр. 5. Дошмандан илең һаҡла, ярамһаҡтан сереӊ һаҡла.

## ГҮЗӘЛ ӨФӨМ – БАШ ҠАЛАМ

*Рәғиҙә ЯНБУЛАТОВА шиғыры*
*Хөсәйен ӘХМӘТОВ көйө*

Тау башында балҡый бер ҡала,
Был ҡала Өфө тип атала.
Яҡтыраҡ яна йондоҙҙары,
Матурҙар егет һәм ҡыҙҙары.

Алмалары бешә алланып,
Ағиҙел аға бормаланып.
Уға ҡушыла йәмле Диме,
Ах, Өфөм, өҙөлөп һөйәм һине!

Хуш еҫ бөрккән айлы кистәре
Тирбәлдерә йөрәк хистәрен.
Баҡсаһында иркен тын алам,
Ах, Өфөм, минең гүзәл ҡалам!

Урамдары көҙгөләй асфальт,
Эшсән халҡы күңелле һәм шат.
Күргән һайын һине шатланам,
Ах, Өфөм, гүзәл һин, баш ҡалам!

Һиндә үҫтем, эстем һыуҙарың,
Тыңланым йыр, ҡурай моңдарын.
Ҡайҙа барһам, һиңә ашҡынам,
Ах, Өфөм, һин минең баш ҡалам!

1. Өфөнөң гүзәллеген шағирә нимәлә күрә? Баш ҡалабыҙ бөгөн дә шулай гүзәлме? «Өфө кисә, бөгөн һәм иртәгә» тигән темаға әңгәмә ойоштороғоҙ.
2. Шиғырҙы ятлағыҙ. Уға яҙылған көйҙө өйрәнеп, йырлап ҡарағыҙ.
3. Өфө тураһында тағы ниндәй йырҙар бар? Иҫегеҙгә төшөрөгөҙ.
4. Өфө урамдары исемдәренән кроссворд төҙөгөҙ.

*Азат КАМАЛОВ*

## БОРОНҒО БАШҠОРТ ҠАЛАЛАРЫ

Башҡортостанда хәҙер ике тиҫтәнән артыҡ ҡала бар. Халыҡ һаны яғынан уларҙың иң ҙуры булған Өфө 1586 йылда уҡ ҡала дәрәжәһен ала. Унан элегерәк төҙөлгән ҡала булып Бөрө иҫәпләнә, уға 1555 йылда нигеҙ һалынған. Ә бынан да элегерәк Башҡортостанда ҡалалар булғанмы һуң?

А. Б. Булатов исемле ғалим, урта быуаттарҙа ғәрәп телендә яҙылған сығанаҡтарҙы өйрәнгән сағында, 1375 йылда төҙөлгән Каталон атласында һәм 1459 йылда эшләнгән бер картала Башҡортостандың дүрт ҡалаһын таба. Был ҡалалар Ҡараҡыя, Минжан, Мазира һәм Ҡазира тип аталған. Шул уҡ сығанаҡтарҙы өйрәнгән рус ғалимы Ф. К. Брун Башҡортостандың көньяҡ-көнбайыш өлөшөндә Башкерт исемле бер ҡала булыуын асыҡлай. Был ҡала хәҙерге Һарытау өлкәһе территорияһында, Волганың һул яғында урынлашҡан булған. Уны Рәсәйҙең тарихи-географик атласын эшләү өсөн сығарылған карталарҙа табырға мөмкин.

Әлбиттә, боронғо ҡалалар төҙөлгән урыны, ҙурлығы менән хәҙерге ҡалаларҙан ныҡ айырылған, сөнки улар иң тәүҙә нығытма (крепость) бурысын үтәгәндәр. Улар, ғәҙәттә, тирәяғы текә булған бейек тау баштарына, яр морондарына урынлашҡан, ә һөҙәк яҡтан ер стеналар һәм тәрән, киң соҡорҙар (урҙар) менән уратып алынған булған. Йәғни улар дошман керә алмаҫлыҡ булған.

Хәҙерге көндә был ҡалаларҙың береһе лә юҡ. Уларҙың ҡасандыр булғанлығын телдә һаҡланып ҡалған һүҙҙәрҙән, географик атамаларҙан ғына белеп була.

Рус яҙма сығанаҡтарында боронғо ҡалаларҙан ҡалған урындарҙы «чертово городище», «чудское городище», «ногайский вал» тип йөрөтәләр. Төрки сығанаҡтарҙа ундай урындар «тура», «ҡала», «шәһәр», «ҡәрйә» тип аталған. Тауҙа урынлашҡанға, боронғо нығытмалар урыны боронғо башҡорт телендә «ҡалатау», «туратау» тигән һүҙ менән белдерелгән. Ҡалалы тау, нығытмалы тау тигәнде аңлата был.

Башҡортостанда «ҡалатау» һүҙе менән яһалған егерменән артыҡ атама бар. Уларҙың күбеһендә йә боронғо ҡаласыҡ

(русса әйткәндә – городище), йә уба (русса – курган) асылған.

Илеш районының Йондоҙ ауылы эргәһендә, мәҫәлән, Ҡалатау исемле урын бар. Унда археологтар Йондоҙ ҡаласығы тапты. Ҡалтасы районының Иҫке Мошты ауылы янында ла Ҡыҙ-Ҡалатау исемле урын бар. Ошондай уҡ исемле урын Нуриман районында ла бар. Уларҙа ла археологтар ҡаласыҡ асты.

Археологик ҡомартҡы иҫәпләнгән ҡаласыҡ, уба табылмаған хәлдә лә, Ҡалатау исемле тауҙарҙы урындағы халыҡ, боронғо яу өсөн эшләнгән ҡоролма булған, тип аңлата. Мәҫәлән, Баҡалы районындағы Ҡуштирәк ауылында «Ҡала тауы» тигән урын бар. Был тау эргәһенән «Ҡала шишмәһе» тигән бәләкәй генә йылға ла ағып ята. Элек унда уҡ башаҡтары табылған. Был тау һуғыш маҡсатында файҙаланылған урын булған, тип һөйләй ауыл халҡы. Саҡмағош районындағы Иҫке Ҡалмаш ауылы эргәһендәге Ҡалатауҙа ла борон крепость булған, тиҙәр. Тимәк, «Ҡалатау» атамалары үҙенең мәғәнәһе менән дә, тарихи ысынбарлығы менән дә боронғо ҡала урынын күрһәтеп тора.

Ҡайһы бер урындарҙа боронғо нығытмалар, ҡаласыҡтар урынын «ханҡала» тип йөрөтәләр. Хәрби мәсьәләләрҙе хәл итеү өсөн тәғәйенләнгән бындай урындар ҙур түгел: уларҙа ғәскәр башлыҡтары, хандар ғына йәшәй алған. Ә ябай халыҡ, ғәскәр ҡала тирәһендәге ҡышлауҙарҙа һәм ауылдарҙа көн күргән.

Ханҡала исеме менән аталған урындар байтаҡ. Уларҙа ҡаласыҡ йә уба табылып тора. Мәҫәлән, Иглин районының Охлебинино ауылы янындағы Ханҡала тауында шундай ҡаласыҡ асылды. Унда борон Ҡара-абыз тип аталған культураға эйә булған ҡәбиләләр йәшәгән.

Баймаҡ районындағы Өмөтбай ауылында Ханҡала убаһы бар. Ул ерҙә лә археологик ҡомартҡы – уба табылды. Учалы районының Ташҡын ауылындағы Ҡантүбә ҡалҡыулығында ла убалар барлығы беленде.

«Туратау» һүҙе лә боронғо ҡалаларҙың урынына ишара яһай. Өфөнөң тәүге исеме, мәҫәлән, Туратау булған. Рус сығанаҡтарында ул «Чертово городище» тип теркәлгән. Өфө крепосы төҙөлөп, имән бағаналарҙан яһалған стена менән уратып алынғас, ул Имән ҡала тип аталған.

Аҙаҡ ҡына Өфө тип йөрөтөлә башлаған. Өфө ҡалаһы урынында борон ҙур ҡаласыҡ булған. Шундай ҡаласыҡ Стәрлетамаҡ эргәһендәге Торатауҙа ла асылды.

Был ҡалалар боронғо башҡорттарҙың цивилизация үҙәктәре булған.

**1.** Тексты иғтибар менән уҡып сығып, йөкмәткеһен һөйләгеҙ. Аңлашылмаған һүҙҙәрҙе яҙып алып, мәғәнәләренә төшөнөгөҙ. Үҙ телмәрегеҙҙә археологик терминдарҙы ҡулланырға тырышығыҙ.

**2.** Боронғо башҡорт ҡалаларының исемдәрен яҙып алығыҙ.

**3.** Текстан боронғо ҡалаларҙың тәғәйенләнешен, төҙөлөшөн аңлатҡан урынды табып уҡығыҙ. Бындай ҡаланы һеҙ нисек күҙ алдына килтерәһегеҙ?

**4.** Ҡайһы бер ер-һыу атамаларына ҡарап, боронғо ҡалалар урынлашҡан урынды төҫмөрләргә була, ти автор. Был атамаларҙы текстан күсереп алығыҙ. Ололарҙан һорап, үҙегеҙҙең ауыл (ҡасаба, ҡала) тирәһендә шундай атамалы урындар бармы-юҡмы икәнлеген асыҡлағыҙ.

**5.** Башҡортостан ҡалаларына арналған китаптар, альбомдар табып, ул ҡалаларҙың тарихы, бөгөнгө тормошо, киләсәге тураһында әңгәмә ойоштороғоҙ.

**6.** «Минең тыуған ҡалам» темаһына ҡыҫҡа ғына хикәйә яҙығыҙ.

**110-сы күнегеү.** Мәҡәлдәрҙе күсереп яҙығыҙ. Уларҙың береһенең мәғәнәһен асыҡлаусы кескәй хикәйә төҙөп яҙығыҙ.

1. Алйот дуҫтан аҡыллы дошман артыҡ.
2. Кейемдең яңыһы, дуҫтың иҫкеһе яҡшы.
3. Йөҙ һум аҡсаң булғансы, йөҙ дуҫың булһын.
4. Бер тарынан бутҡа булмаҫ.
5. Күмәкләгән – яу ҡайтарған.
6. Дуҫ-иштәрең ҡарға булһа, суҡығаның емтек булыр.
7. Дошманыңдан бер һаҡлан, яман дуҫтан мең һаҡлан.

**111-се күнегеү.** Кешене ыңғай яҡтан һүрәтләй торған сифаттарҙы өҫтәп табығыҙ.

Уңған, егәрле, ышаныслы…

**112-се күнегеү.** «Сыбай ҡашҡа» йырының өҙөгөн яттан яҙығыҙ.

Сыбай ҙа ғына ҡашҡа, баҫма ташҡа,
Юлһыҙ ғына ерҙән дә үткәндә.
Был донъяла ауыр яңғыҙ башҡа,
Дуҫ-иш кәрәк донъя ла көткәндә.

*Сыбай* – оҙон, теҙеп тигәнде аңлата; *сыбай ҡашҡа* – аттың маңлайынан моронона тиклем төшкән ҡашҡа шулай атала (сағыштырығыҙ: *йондоҙ ҡашҡа* – маңлайҙағы ғына ҡашҡа).

**113-сө күнегеү.** Башҡорт халыҡ йырҙарының һүҙҙәрендә йыш ебәрелә торған хаталарға иғтибар итегеҙ.

Ялан да ғына ерҙән болан килә,
Уйһыу ҙа ғына ерҙән түтә, тип.
*(«Зөлхизә»)*

*Түтә* – яҡын, тура тигәнде аңлата, ҡайһы бер йырсылар был һүҙҙе яңылыш *үтәм* тигән һүҙ менән алмаштыралар.

Йәйләүҙәргә барҙыҡ, бейәләр һауҙыҡ,
Башкүнәккәйҙәрҙе лә ҡулға элеп.
*(«Ерән ҡашҡа атҡайым»)*

*Башкүнәк* – ялан яҡтары башҡорттары бейә һауыу өсөн күнәкте (биҙрәне) аттың баш тиреһенән эшләгәндәр; ҡайһы бер йырсылар яңылыш *буш күнәк* тип йырлайҙар.

Йәшәнкә лә сана, зеңгер дуға
Ектерһәнә, Фатимам, тура атҡа...
*(«Сибай»)*

*Зеңгер* – бәләкәй ҡыңғырау, колокольчик. *Йәшәнкә сана* – кошевка сана. Әле байтаҡ йырсылар был һүҙ урынына *зәңгәр* һүҙен ҡуйып йырлайҙар. Йәнәһе, санаһы йәшел, ә дуғаһы *зәңгәр* икән. Тантаналы осраҡтарҙа хәлле башҡорттар сананы ҡыңғыраулы дуға менән егә торған булғандар.

Таштуғайҡай, һинең ҡамышыңды
Сор ҡурайҡай итеп тартайым.

*(«Таштуғай»)*

*Сор ҡурай* – ҡамыштан яһала торған музыка ҡоралы; был һүҙҙе яңылыш *еҙ ҡурай* тип йырлайҙар.

## Һүҙ күрке – мәҡәл

Арғымаҡ ат юл башлар, аҡыллы егет ил башлар.
Батыр егет яу башлар, сәсән егет дау башлар.

Батыр егет – яу күрке, сәсән егет – дау күрке.

Ебәк билбау – бил күрке, батыр егет – ил күрке.

Батыр тыуһа – ил бәхете, ямғыр яуһа – ер бәхете.

Батырҙың улы ла батыр.

Бөркөттөң ояһы бейек ҡаяла булыр.

Үҫер илдең балаһы бер-береһен, батыр, ти; бөлөр илдең балаһы бер-береһен, бахыр, ти.

Яуҙан һуң батыр күбәйер.

# Башҡорт йолалары

*Айрат ҠОБАҒОШОВ*

## ҠАРҒА БУТҠАҺЫ ТӘМЛЕМЕ?

Айгөлдө өләсәһе иртән иртүк уятты.

– Йәһәт ҡуҙғал, ҡыҙым, юғиһә ҡарға бутҡаһына һуңлайбыҙ, – тине.

Дөрөҫөн генә әйткәндә, Айгөл бутҡа яратмай. Шуға күрә өләсәһенең хәбәренә бик иҫе китмәне.

– Бутҡа ашағым килмәй, – тине лә күҙҙәрен йомдо.

– Балаҡайым, ҡарға бутҡаһы бит ул – ҙур байрам. Әле генә мин дә май, ярма биреп ебәрҙем. Ҡыҙҙар, малайҙар ауыл буйлап йыйып йөрөйҙәр, – тине өләсәһе.

Айгөл тороп ултырҙы.

– Һинең ул байрамды бер ҙә күргәнең юҡ бит әле, ҡыҙым.

Айгөл менән өләсәһе Ҡарағайлы тауына яҡынлашҡанда, унда әбей-бабайҙар йыйылғайны инде. Малайҙар, ҡыҙҙар ҙа күп килгән. Һабантуйҙағы кеүек. Ҙур ҡаҙанда бутҡа бешеп ултыра.

Ул арала балалар, түңәрәк ҡороп, бейергә төштө, йыр башланы. Тирә-яҡҡа ҡурай, ҡумыҙ моңо таралды. Ике әбей, йырлай-йырлай, бутҡа болғата.

Айгөл өләсәһенең итәгенән тартты.

– Өләсәй, ниңә ҡарағайҙарға тәңкәләр, таҫмалар таҡҡандар ул? Яңы йыл түгел дә инде.

– Бөтә хикмәт тә шунда шул, балаҡай. Боронғо заманда башҡорттарҙа Яңы йыл 1 мартта (хәҙергесә – 14 мартта) башланған. Был байрам хатта апрелдә лә дауам иткән. Шуға бөгөн ҡарағайҙарҙы байрамса биҙәгәндәр. Әле яңы ғына ҡурайсы ағайың уйнап бөткән матур көй «Йыл башы» тип атала. Ул да, байрамдың үҙе һымаҡ, борондан тороп ҡалған.

Ҡаҙандағы бутҡа бешеп сыҡҡас, уны бөтәһе лә тәмләп ҡараны. Айгөл дә ашап ҡараны. Ул саҡ телен йотманы. Бындай ҙа тәмле бутҡаны ашағаны юҡ ине әле уның.

Үҙҙәре ашап туйғас, ҡарағай баштарында сабыр ғына көтөп ултырған ҡарғаларҙы һыйланылар. Ҡарғалар, тәмле бутҡаны ашап алғас, кешеләргә рәхмәт әйткәндәй, ҡарҡылдаша-ҡарҡылдаша һауаға күтәрелде. Улар байрам хәбәрен тиҙерәк тирә-яҡҡа таратырға ашыҡты.

1. Текстағы таныш булмаған һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен асыҡлап, тасуири уҡыу күнекмәләре үткәрегеҙ.
2. Тексты уҡып, һеҙ Ҡарға бутҡаһы байрамын нисек күҙ алдына килтерҙегеҙ? Байрам күренештәрен һүрәт итеп төшөрөгөҙ.
3. Был байрамды нисек һәм ни өсөн үткәрәләр? Ул ни өсөн «Ҡарға бутҡаһы» тип атала?
4. Класығыҙ менән Ҡарға бутҡаһы байрамын үткәрегеҙ. Аҙаҡ шул байрам тураһында кескәй хикәйә төҙөп яҙығыҙ.
5. Ҡарға бутҡаһы байрамына ошо йырҙы өйрәнегеҙ.

## ҠАРҒА БУТҠАҺЫ

*(Башҡорт халыҡ йыры)*

Лыбыр-лыбыр бутҡаһы ла,
Етмеш йәшәр ҡортҡаһы.
Бутҡаһының майы юҡ,
Ашамаға яйы юҡ.
Ашамағыҙ бутҡаһын,
Тапамағыҙ бутҡаһын –
Бутҡа бешкән дан булып,
Хурламағыҙ ҡортҡаһын.
Ҡарғаларға ем булһын да,
Баҫыуҙа иген уңһын.
Бура иген менән тулһын,
Икмәгебеҙ күп булһын.

*Таңһылыу ҠАРАМЫШЕВА*

## КӘКҮК СӘЙЕ

Таң атып, ҡояш тау башына еткәс, Таңдысаны әсәһе арҡаһынан һөйөп уятты.

– Тор, ҡолонсағым. Бөтә донъя йоҡоһонан уянып бөттө бит инде. Ана, кәкүк тә саҡыра…

– Кемде саҡыра? Ҡайҙа саҡыра?

– Таңдысаны «кәкүк сәйе» эсергә алып килегеҙ, ти.

– Бәй, кәкүк тә сәй ҡайната beләме ни? Ә уның самауыры бармы? – Таңдыса һикереп торҙо. Тиҙ-тиҙ генә кейенде лә:

– Әсәй, кәкүк сәйҙе ҡайҙа эсерә? – тип һораны.

– Тауҙа, ҡыҙым. Йәшел үләндәр түшәлгән, ебәк шәлле ҡайындарҙың һәр ботағы һайын ҡоштар һайрап ултырған ерҙә.

– Әсәй, сәй эсергә кәкүк беҙҙе генә саҡырамы?

– Юҡ, ҡыҙым. Кәкүк шулай һәр йыл һайын йәй башында, ер-һыу һурыҡҡас, ауылыбыҙҙың бөтә инәйҙәрен, апайҙарын, ҡыҙҙарын тәбиғәттең иң матур бер урынына сәй эсергә саҡыра.

– Ә малайҙарҙы, атайҙарҙы, олатайҙарҙы саҡырмаймы?

– Уларҙы саҡырмай шул. Кәкүк бына һинең кеүек матурҡай ҡыҙҙарҙы ярата.

– Һе, ҡыҙыҡ икән. Моғайын, ул ҡыҙҙарҙы, инәйҙәрҙе тәтәй күлдәктәре, төҫлө таҫмалары, уҡалары, көмөш тәңкәләре, камзулдары өсөн яраталыр…

Таңдыса әсәһе менән тауға килеп еткәндә, унда бик күп инәйҙәр, апайҙар, ҡумыҙ сиртеп, йырлашып ултыралар ине.

– Кәкүк сәйе тәмле булһын! Миңә лә эсерегеҙ әле! – тине Таңдыса.

– Ай эттәгенәһе, кәкүк сәйен беҙ, һин йоҡлап ятҡан арала эсеп бөттөк бит әле, – тип шаяртты бер инәй. Үҙе Таңдысаның алдына оло сынаяҡ сәй яһап ултыртты, тәм-том ҡуйҙы.

– Юҡ, миңә кәкүк сәйе кәрәк, – тип иламһыраны Таңдыса.

– Таңдыса, был бит «кәкүк сәйе» тип аталған байрам ғына. Бәләкәс кенә ҡош нисек итеп һиңә самауыр ҡайнатһын? – тип йыуатты уны әсәһе. – Йәһәт кенә сәйеңде эс тә әхирәттәрең менән уйынға төш.

Шул саҡ яҡында ғына өҙҙөрөп кәкүк саҡыра башланы. Өлкәндәр, тын ҡалып, уның ҡысҡырғанын һананы.

– Таңдыса, ана, кәкүк һиңә ғүмер юрай, – тиеште улар, йылмайышып.

– Әйҙә, бергәләп һанайыҡ әле: бер, ике, өс, дүрт, биш!..

– Ә мин йөҙ йыл буйына ҡыҙыҡай булып ҡалырмынмы һуң? – тип ҡысҡырҙы Таңдыса.

Ә кәкүк, бер кемгә лә иғтибар итмәй, саҡырҙы ла саҡырҙы:

– Кәк-күк, кәк-күк, кәк-күк!..

Әллә ул кешеләрҙе ғүмер буйы матурлыҡҡа һоҡланырға, тәбиғәтте ярата белергә саҡырамы икән?

1. Тексты, ролдәргә бүлеп, тасуири итеп уҡып сығығыҙ. Унда осраған яңы һүҙҙәрҙе яҙып алып, мәғәнәләрен асыҡлағыҙ. Яңы һүҙҙәрҙе уларҙың синонимдары менән алыштырығыҙ һәм мәғәнәүи биҙәктәренең нисек үҙгәреүенә иғтибар итегеҙ.
2. *Һе, ҡыҙыҡ икән* һүҙҙәре менән башланған абзацты иғтибар менән уҡып сығығыҙ. Унда ниндәй кейем-һалым, биҙәнеү әйберҙәренең исемдәре бар? Һеҙҙең уларҙы күргәнегеҙ бармы? Күргәнегеҙ булмаһа, нисек күҙ алдына килтерәһегеҙ? Ололарҙан һорашып, һүрәттәрен төшөрөгөҙ.
3. Әсәһе Таңдысаны, *ҡолонсағым,* тип ярата. Әсәйҙәр, балаларын яратҡанда, түбәндәге һүҙҙәрҙең ҡайһыларын ҡулланалар, ҡайһыларын – юҡ? Ни өсөн икән?

| | |
|---|---|
| ҡолонсағым | ҡарғам |
| бәпкәм | бәрәскәйем |
| быҙауҡайым | бөркөтөм |
| һандуғасым | һайыҫҡаным |

4. Кәкүк сәйе – башҡорттарҙа борондан килгән байрам. Һеҙ уның мәғәнәһе нимәлә, тип уйлайһығыҙ?
5. Текстан ҡарап, кәкүк сәйе байрамының ниндәй ваҡытта үткәрелеүен билдәләгеҙ. Ошо осорҙоң тәбиғәт күренешен тасуирлағыҙ.

**114-се күнегеү.** Бөтә ҡоштар ҙа кәкүк кеүек саҡырамы? Ҡоштарҙың ни эшләгәнен икенсе бағананан һайлап яҙығыҙ.

Өлгө: *Кәкүк саҡыра.*

| | |
|---|---|
| һандуғас | ҡысҡыра |
| ҡоҙғон | сырҡылдай |
| ҡарға | ҡаңҡылдай |
| турғай | саңҡылдай |
| һайыҫҡан | ҡарҡылдай |
| торна | шыҡырыҡлай |
| бөркөт | ҡорҡолдай |
| тауыҡ | һайрай |
| ҡаҙ | торҡолдай |
| өйрәк | ҡытҡылдай |
| әтәс | ҡыжҡылдай |

**115-се күнегеү.** Тел көрмәлдергес.

Етегәндә ете ҡыҙ,
Ергә яҡын ул йондоҙ.
Ергә яҡын Етегәндә
Ете йондоҙ, ете ҡыҙ.

## СИФАТТАРҘЫҢ ЯҺАЛЫШЫ

**Сифаттар** яһалышы яғынан, исемдәр кеүек үк, тамыр, яһалма, ҡушма була. Яһалма сифаттар ялғауҙар ярҙамында, ҡушма сифаттар ике һүҙҙе ҡушыу юлы менән яһала.

**116-сы күнегеү.** Өлгөгә ҡарап, түбәндәге һүҙҙәрҙән ялғауҙар ярҙамында (а) һәм ике нигеҙҙе ҡушып (б) сифаттар яһағыҙ.

Өлгө: 1. *Көс – көслө; ҡыш – ҡышҡы.*
2. *Аҡ, ҡара – аҡлы-ҡаралы; ҙур – ҙур-ҙур.*

1. Ос, белем, күңел, тоҙ, тәм, көҙ, яҙ, төш, кис.
2. Ала, ҡола; оҙон; бейек; һылыу.

Яһалған сифаттар менән исемдәр парлап яҙығыҙ: *осло ҡәләм.*

**117-се күнегеү.** Һөйләмдәрҙе уҡығыҙ. Ҡушма сифаттарҙы үҙҙәре эйәреп килгән исемдәре менән бергә яҙып алығыҙ.

1. Емеш быйыл, буйға ап-арыу һуҙылып, еңел йомро һөйәкле, һылыу кәүҙәле ҡыҙ булып үҫеп китте. 2. Хисбулла

ағаһы уға бейек күтәрмәле, еҙ дағалы ҡара күн итек бүләк иткәйне. 3. Башына ябынған шау биҙәк зәңгәр кешмир яулығы, төрлө ебәк таҫмалар баҫып, билдән бөрөп, мул итеп тегелгән һары сатин күлдәге, уҡалы ҡыҙыл бәрхәт камзулы менән ул (Тайба әбей) хәҙер хужа ҡатынға түгел, ә ҡунаҡ ҡоҙағыйға оҡшап уҡ тора ине. *(З. Биишева)*

## БАШҠОРТ БАЙРАМЫ

*(Риүәйәт)*

Донъя барлыҡҡа килгәндән алып, кешеләр төрлө ерҙә ил ҡороп йәшәй башлағандар. Һәр илдең үҙенә бер тел бирелгән, үҙенсә кейем-һалым, аш-һыу тәғәйенләнгән.

Йәшәү өсөн кәрәк булған бөтә нәмәне өләшеп бөткәс, бер ваҡыт Хоҙай ер йөҙөндәге барлыҡ халыҡтарға хәбәр ебәрә: «Фәләнсә көндө байрам килеп алығыҙ».

Халыҡтар, иң уңған кешеләрен һайлап, байрам алып ҡайтырға ебәрәләр. Башҡорттан да берәү килә. Һәр халыҡҡа бишәр байрам эләгә. Алалар ҙа ҡайтырға сығалар.

Ҡайтып барғанда, башҡорттоң арбаһының күсәре һынып китә. Ни эшләргә? Байрамды ташлап китеп булмай бит инде. Башҡорт байрамдарын күршеләренә берәм-берәм тейәп ебәрә лә, үҙе һыбай ғына ҡайтып китә.

Бына бер ваҡыт бөтә ерҙә байрам башлана. Күңел асыу, уйын-көлкө китә. Башҡорт илендә генә тауыш-тын юҡ. Халыҡтың кәйефе юҡ. Ни өсөн тиһәң – байрамдары юҡ. Ни эшләргә? Аптырағас, теге кешене Хоҙайға тағы ебәрәләр.

Ул килгәндә, Хоҙай, эшем бөттө, тип тынысланып, йоҡларға ятҡан була. Әйләнеп тә ҡарамай, һораша башлай:

– Һин кем?

– Мин башҡорт иленән булам.

– Мин өләшәһе нәмәләрҙе өләшеп бөттөм. Тағы нимә кәрәк?

– Әй, Хоҙайым, – ти башҡорт. – Ҡайтҡанда арбам ватылды ла, байрамдарымды башҡаларға тейәп ебәрҙем. Илдә күңелһеҙ. Байрам кәрәк ине беҙгә лә...

Хоҙай шул саҡ һикереп тора ла әйтә:

– Миндә байрам бөттө, – ти. – Әгәр байрам кәрәк булһа, ҡунаҡ саҡырығыҙ. Килгән ҡунаҡ үҙе менән байрамын да алып килер.

Шул көндән башлап башҡортта ҡунаҡ саҡырыу ғәҙәте киң таралып киткән. Ҡунаҡ килдеме – илгә байрам килә.

Ана шунан ҡалған ул башҡорттоң ҡунаҡсыллығы!

1. Кейем-һалым, аш-һыу, уйын-көлкө һүҙҙәренең яһалышын аңлатығыҙ. Һыҙыҡсаны алып ташлап, һүҙҙәрҙе айырым-айырым ҡарағыҙ – мәғәнә үҙгәрҙеме? Фекерегеҙҙе был һүҙҙәр менән һөйләм төҙөп дәлилләгеҙ.
2. Нindәй кеше ул *уңған кеше?* Уға ниндәй сифаттар хас булырға тейеш? Уңған туғандарығыҙға характеристика бирегеҙ.
3. Хоҙайҙан алған байрамдарын башҡорт күршеләренә таратып биргән. Был, һеҙҙеңсә, ниндәй сифат – йомартлыҡмы, бер ҡатлылыҡмы, ихласлыҡмы, әллә алйотлоҡмо? Уның урынында һеҙ ни эшләр инегеҙ? Фекер алышығыҙ.
4. Риүәйәттә әйтелгәнсә, башҡорттоң ҡунаҡ саҡырыуҙан башҡа байрамы юҡ булып сыға. Шулаймы ул?
5. Әле беҙ байрам иткән байрамдарҙы барлап, уларҙы төркөмдәргә бүлегеҙ. Мәҫәлән:
   а) Миҙгел байрамдары – Яңы йыл; ...
   б) Хеҙмәт байрамдары – Һабантуй; ...
   в) Йола байрамдары – Ҡарға бутҡаһы; ...
   г) Тарихи байрамдар – Еңеү көнө; ...
   ғ) Шәхси байрамдар – Тыуған көн; ...

   Тағы ниндәй байрамдар бар – өҫтәгеҙ. Үҙегеҙгә иң ныҡ оҡшаған бер байрам тураһында белешмә (сценарий) төҙөгөҙ.
6. Рустарҙың, татарҙарҙың, сыуаштарҙың, мариҙарҙың, удмурттарҙың, мордваларҙың ниндәй байрамдарын беләһегеҙ? Улар башҡорт байрамдарына оҡшағанмы, әллә бөтәһе лә бер төрлөмө? Сәбәптәрен асыҡлағыҙ.
7. Байрам кешегә ни өсөн кәрәк? Шул темаға фекер алышығыҙ.

*Сәғит АГИШ*

## ҠУНАҠ ҺӘМ НАМЫҪ

*(Хикәйә)*

Минең Вәли Абуталипов тигән бик күптәнге иптәшем бар. Йәш сағында йыйнаҡ ҡына кәүҙәле, урта буйлы матур ғына егет ине. Һуңғы осрашыуҙа ул бөтөнләй үҙгәргән, таҙарған,

елкәләре ҡалынайған, ҡорһаҡ та байтаҡ үҫкән, хәрәкәте лә әүәлге кеүек етеҙ түгел, ауыр ҡуҙғала. Хатта һөйләшеүендә лә ниндәйҙер һүлпәнлек һиҙелә. Әйтер һүҙен иң элек уйлап ала ла, ҡыҙыҡ итеп үҙе өсөн генә көйләп ҡуйғас, унан һуң ғына башлап китә. Уның менән хәҙер йыш ҡына осрашабыҙ. Осрашҡан һайын, һалмаҡ ҡына итеп үҙ тормошонан бер ваҡиға һөйләп ташлай. Шуныһы ҡыҙыҡлы: ни өсөндөр элегерәк булған хәлде һөйләргә ярата. Күрәһең, уларҙы бер нисә урында һөйләгән, «шымартҡан» була. Мин уның күргән, белгәндәрен бер ваҡытта ла «бөгөн, кисә, уҙған аҙнала, былтыр» тип башлап киткәнен хәтерләмәйем.

Яңыраҡ ул райондарҙа йөрөп ҡайтты. Район хәлдәрен һөйләр, тип уйлағайным, минең һорауыма ҡыҫҡа-ҡыҫҡа ғына яуап биреп ултырҙы ла әллә ҡасан булған бер хәлгә төштө лә китте.

Һүҙ башҡорт халҡының ҡунаҡсыллығы тураһында сыҡҡайны, Абуталипов тиктомалдан көлөп ҡуйҙы һәм:

– Бик оҙонға китеп, ялҡытырлыҡ булмаһа, – тине, – мин һиңә беҙҙең халыҡтың ҡунаҡсыллығы һәм намыҫлылығы тураһында бер ваҡиға һөйләйем әле.

Мин бик һәйбәтләп тыңларға йыйындым, ултырғысты уға табан шылдырып ултырҙым да:

– Һөйлә! – тинем.

– 1935 йылда район мәғариф бүлегендә инспектор булып эшләй инем. Уҡыуҙар бөткәс, мәктәп балаларының йәйге эштәре менән танышыр өсөн, ауылдарға сығып киттем. Шуны ла әйтеп китәйем, был минең тыуған район түгел. Башҡортостандың тау яҡ райондарының береһе ине. Бер ауылға барып төштөм. Мәктәптең хәле менән таныштым. Төштән һуң мәктәп мөдире менән, һауа алыштырып ҡайтыу өсөн, урамға сығып киттем. Ғәҙәттәге эреле-ваҡлы өйҙәрҙән торған башҡорт ауылы ине был. Таҡта башлы бер өй тәңгәленән уҙып бара инек, ҡаршыбыҙға яурынына костюмын һалған, арыу ғына ҡыҙарған бер кеше килеп сыҡты һәм туп-тура килде лә беҙҙең менән күреште. Бер нисә һүҙ менән минең кемлегемде, ни өсөн килеүемде һорашҡас:

– Әйҙә, ҡымыҙ эсергә инегеҙ! – тип саҡырҙы.

– Ҡымыҙ эсергә? Ниндәй сәбәп менән улай байрам итеп ултыраһығыҙ әле? – тине минең уҡытыусы иптәшем. Ҡыҙыл кеше миңә ҡарап аңлатырға кереште:

– Бер сәбәп тә юҡ. Колхоз бейә бәйләне лә, бесәнгә төшкәнсе ҡарттарҙы йыйып, һыйлап алырға булдыҡ.

Өйгә индек. Был беҙҙе саҡырып индергән бригадирҙың өйө булып сыҡты. Балаҫ түшәлгән иҙәнгә унлап кеше ултырған. Арала, ап-аҡ һаҡаллы ҡарттар булған кеүек, ир уртаһы кешеләр, йәш-елкенсәк тә күренә. Мине, һис бер теләмәүемә ҡарамаҫтан, түргә ултырттылар. Етмәһә, аҫтыма мендәр ҙә һалдылар. Күптән аяҡ бөкләп тигеҙ ергә ултырмаған кешегә мендәр бигерәк тә яйһыҙ ине. Шаҡтай мәшәҡәт менән урын көйләнем, ә мендәрҙе, һиҙҙермәҫкә тырышып, арҡа менән стена араһындағы бушлыҡҡа тығыҙлап ҡуйҙым.

Ҡайҙан килеүемде, тыумышым менән ҡайһы яҡтыҡы булыуымды һораштылар.

– Улай булғас, тиҙәк яға торған яҡтың башҡорто булаһың инде, – тине бер ҡарт һәм шуның артынан уҡ, был һүҙҙең мине хурландырыуы мөмкин, тип уйланы, ахырыһы, төҙәтергә ашыҡҡан һымаҡ: – Иллә һеҙҙең яҡта, – тип алып китте, – туйҙы шәп яһайҙар. Ҡоҙаларҙың бүркен алырға ҡаршы сығыу был заманда ла бармы әле?

– Ғәҙәт тиҙ генә ташланмай инде ул.

– Һәйбәтен ташламаған яҡшы, – тине икенсе бер ҡарт.

Шунан ҡымыҙ туҫтаҡтары йөрөп китте. Колхоз, һунар тураһында һөйләшелде. Халыҡтың кәйефе арыу ғына күтәрелеп алды. Мин дә үҙләштем. Үҙебеҙҙең яҡтың ҡайһы бер күңелле ғәҙәт, йолаларын һөйләп ташланым. Байтаҡ ҡына ултырғас, йорт хужаһы баҫты ла:

– Әйҙәгеҙ, тын алып инәйек, – тине.

Беҙ бөтәбеҙ ҙә ишек алдына сыҡтыҡ. Көн кисләп бара, һауа ла бер тиклем еләҫләнгән. Кешеләр, өҫтәге һауаны еҫкәргә теләгән һымаҡ, баштарын үргәрәк күтәреп тын алдылар, ҡайһы берәүҙәр йөрөп әйләнделәр, ғөмүмән, кешеләрҙә хәрәкәтләнергә теләү һиҙелә ине, шул теләкте ҡуҙғытыу өсөн:

– Әйҙәгеҙ, көрәшеп алабыҙ, – тине йыуан ғына бер кеше.

Артыҡ ҡыҫтатыуҙы ла көтмәйенсә, ике кеше етеҙ генә уртаға сығып баҫты. Китте көрәш! Сәсенә сал инә башлаған Тимербулат тигән ҡарт бер нисә кешене йығып та ташланы. Күрер күҙгә артыҡ ҙур булмаған, уртасанан олораҡ кәүҙәле, һөйәктәре сығып торған был ҡарттың оҫта хәрәкәте, һәләтлеге мине һоҡландырҙы.

– Шәп көрәшә ҡартың, – тинем мин уҡытыусы иптәшкә. Иптәшем миңә бер төрлө лә яуап ҡайтарып өлгөрмәне, Тимербулат ҡарт:

– Әйҙә әле, ҡунаҡ, көс һынашып ҡарайыҡ, – тип миңә килеп йәбеште.

Минең, ғөмүмән, көрәшкәнем дә юҡ түгел ине. Мәктәптә уҡығанда ла, һуңынан да һирәк-һаяҡ ҡына көрәштергеләй торғайным. Маҡтанып әйтеү түгел, һирәк йығыла инем. Бер шулай, техникум бөтөргәс, студенттар, уҡытыусылар яланға сыҡҡайныҡ, ситтән дә күп кенә ҡунаҡтар саҡырылғайны. Шунда көрәшеп, батырға сығып, бик матур ғына альбом да алғайным, мәгәр үҙемде көрәшсе итеп уйламай инем. «Ни булһа булған, – тинем эстән генә, – йығылһам, ер күтәрер әле, самалап ҡарайым, булмаһа». Тоттом да уртаға сыҡтым. Халыҡ күтәрелеп китте. Уртаға сығып, таҫтамал баштарын ҡулға урап алғас, тирә-яҡты әйләнеп ҡараһам, әллә ҡайҙан бая күренмәгән яңы кешеләр, бала-саға тулып киткән. Ситән ашаһынан буласаҡ ҡыҙыҡты күрергә йыйылған ҡатын-ҡыҙ баштары күренә. Ҡаушау алды үҙемде. Ни эшләйһең, киҙәнгәс, һуғырға кәрәк бит инде, ҡарттың биленә ҡул һалдым. Ҡарттың минең күҙгә салынған эре һөйәктәре ҡулға тимер кеүек ҡаты булып тойолдо. Уртала әле ынтылып, әле алышмай ғына йөрөйбөҙ. Бер мәл ҡарт билдән ҡыҫып алды, һөйәктәр шытырлап киткәндәй булды. «Юҡ, элек үҙем ынтылайым», – тинем эстән генә һәм, уң аяҡты ергә ныҡ баҫып, ҡарттың билен ҡыҫтым, шул ыңғайҙан күтәреп тә ебәрҙем, ҡарт нисектер үҙе күтәрелеп киткәндәй булды. Ошо урында нимә уйлағанымды белмәйем, гөрҫ иткән тауышҡа күҙемде асып ебәрһәм, ҡарт үлән өҫтөндә аунап ята, мин үҙем дә йығылып киткәнмен, күлдәк салбарҙан сыҡҡан, галстук ҡыйшайып, уң яҡ яурынға погон булып ултырған, халыҡ тағы ла шаулашып китте:

– Һай, батыр икәнһең!

– Ҡалай күтәреп һалды ҡартты!

Эстән генә ғорурланып ҡуйҙым, ләкин тышҡа сығармаҫҡа тырыштым. Ҡабаттан ҡымыҙ эсергә индек.

Иртәгәһенә мин был ауылдан киттем. Шул йылды мине икенсе ауылға уҡытыу эшенә күсерҙеләр. Өс йылдан һуң минең эшләгән районда һабантуй үткәрелде. Һабантуйға төрлө райондарҙан йүгеректәр, көрәшселәр килделәр. Беҙ ҙә киттек

һабантуйға. Һабантуйҙы үҙең беләһең, сабыштырырға аттар ебәргәс, көрәш башланды. Беҙ иптәштәр менән бергә, үҙебеҙгә яйлыраҡ урын һайлап алып, көрәшселәрҙе күҙәтәбеҙ. Иплəберәк ҡараһам, майҙан уртаһында манма тиргә батҡан теге Тимербулат ҡарт йөрөй. Шул уҡ ҡарт – кәүҙәһендә лә, йөҙөндә лә бер ниндәй ҙә үҙгәреш юҡ тиерлек. Байтаҡ кешене йығып ташлаған бит был. Мин, диҡҡәт менән ҡарап торғас, янымдағы иптәштәргә:

– Мин ошо ҡартты йыҡҡаным бар, – тип әйтеп һалдым. Тегеләр быға бөтөнләй ышанырға ла теләмәнеләр, хатта көлкөгә, буш бер маҡтаныуға иҫәпләнеләр.

– Һөйләмә юҡты, һинән йығыла буламы һуң?

– Төшөңдә күргәнһеңдер.

Иптәштәрҙең был рәүешле көлөүҙәре мине яйһыҙ хәлгә ҡуйҙы, ысынлап аңлатырға керештем.

– Ысынлап йыҡҡаным бар, юҡты һөйләргә бала түгелмен дә баһа мин!

– Был ҡарт янында балаһың шул, – тиҙәр. Берәү бөтөнләй мыҫҡыл менән:

– Булғандыр, булғандыр, шул ҡарт һинең ҡулыңдан йығылып барып аунап ятҡандыр, – тине.

Намыҫҡа тейҙеләр. Ауыр хәлгә ҡуйҙылар. Был һүҙҙе ниңә башлағаныма үкендем. Ә мин үҙемдең йыҡҡанымды бик яҡшы беләм. Шуныһы ғәрлек, ошо урында шул хәҡиҡәтте иҫбат итергә хәл юҡ. Ул ваҡиғаға өс йыл үткән. Был өс йыл эсендә Тимербулат ҡарт бик аҙ ғына булһа ла ҡартайған. Ә минең йәштәге кешеләрҙең иң көслө сағы. Халыҡтың һынауы буйынса ла, утыҙ ике, утыҙ өс йәштәр көстөң тамам ултырып еткән сағы булырға тейеш.

– Теләйһегеҙме, – тинем мин ҡапыл үҙемә ышанған бер көс менән, – хәҙер майҙанға сығам да ҡарт менән көрәшәм!

Билдәле, бындай ваҡытта кем, теләмәйбеҙ, тип әйтер тиһең? Минең үҙемә тулы ышаныу менән әйтелгән был һүҙем иптәштәрҙең көлкөһөн ситкә осорҙо, бер тиклем шиккә лә төштөләр.

– Сыҡ әйҙә! – ти директор һәм йөҙөнән ысын күңелдән әйткәне һиҙелә. Ә янымда минең уңайһыҙ хәлдә ҡалыуыма яйһыҙланып торған ҡатыным шөрләп ҡуя:

– Маташма, әҙәм көлкөһө булырһың.

«Әҙәм көлкөһө булырһың!» Хәҙер майҙанға сыҡмаһам, алдаҡсы, ҡыуыҡ булып әҙәм көлкөһөнә ҡалам, сыҡһам, йығып ҡуйыуым бик ихтимал, быға минең ышанысым ҙурыраҡ та хатта.

– Һабантуйҙа йығылыусы ла кәрәк бит! – тип үҙемсә баҫалҡылыҡ күрһәтәм, ә эстә, күңелдә, ҡанымды ҡайнатып елкендергән өмөт осҡоно яна, башҡа эҫе йүгерә. «Тәүәккәлләгән – таш ярған», – тим дә майҙан уртаһына сығам. Көрәште ойоштороусы минең дуҫ ҡына кеше – Хәйрулла ағай эште тиҙ йәйләне, үҙе әллә ниҙәр һөйләп китте:

– Мәғариф эшселәренән Вәли вәкил. Был инде уҡытыусы кеше. Борон беҙҙе хәлфәгә илткәндә: «Ите һиңә, һөйәге миңә», – тип бирәләр ине. Шуның шикелле, ҡарт, итен теләһәң ни эшләт, тик һөйәген генә һындыра күрмә.

Халыҡ уҡымышлы кешегә ихтирам менән ҡарай бит ул. Гөжләп, тулҡынланып торған ҙур майҙан бер ни тиклем баҫылғандай булды. Районның миңә таныш булған яуаплы эшселәре лә алғараҡ ынтылдылар. Тимербулат ҡарт аҡрын ғына көлөп иҫәнләште, хәтеренә төшөрҙө, ахырыһы. Әлегәсә билдән алышҡас та, ҡолаҡҡа нимәлер шыбырланы. Мин ишетмәнем, дөрөҫөрәге, ярыш ваҡытында ҡайһы бер алдашыу, мутлашыу ҙа була торған, тип ҡолаҡ һалырға ла теләмәнем.

Киттек йөрөп. Өс-дүрт әйләнгәс, ҡарттың биленән алайым, тиһәм, кәүҙәһе таш кеүек ҡатты ла ҡуйҙы бит бының. Бер нисә минуттан кәүҙә тағы ла йомшарҙы. Алайым инде, тиһәм, был кәүҙәһен тағы ла ҡатырҙы. «Был ни?» – тип уйлап өлгөрмәнем, ҡарттың эре һөйәкле ҡаты ҡулдары билде шытырлатып ҡыҫып алды, минең аяҡтар ерҙән айырылды, күҙгә беҙҙе уратып алған халыҡтың баштары араһынан егеүле аттар, велосипедтар һәм күргәҙмәгә килтерелгән нәҫел үгеҙҙәре күренеп ҡалдылар ҙа шунда уҡ юҡ булдылар. Гөрҫ итеп ергә төштөм. Халыҡ йырылған быуа тауышы сығарып, гөрләп көлөп ебәрҙе. Мин тиҙ генә майҙан уртаһынан сығып ҡастым. Ни әйтергә лә белмәйем, үҙ ғәйебемде таныған рәүештә көлә-көлә, иптәштәрем янына барҙым, улар ҙа бөгөлөп-бөгөлөп көләләр.

– Аҡыллы ғына кеше инең, ни эшләп ахмаҡланып йөрөйһөң? – ти берәү. Ҡатындың төҫө үҙгәреп киткән. Ул арала ике ҡулына ҡыҙыл башлы таҫтамалды йәйеп тотҡан

Хәйрулла ағай килеп етте. Ул да көлә, тик шунда уҡ йыуатырға теләй, таҫтамал һуҙа:

– Йығылғаның өсөн түгел, йөрәгең етеп, майҙанға сыҡҡаның өсөн! – ти. Тәбиғи, таҫтамалды үҙем алманым. Бер уҡытыусы: «Үҙем өйөнә алып барып элермен, иҫтәлек булыр», – тип алып ҡалды.

Иптәштәр һаман мыҫҡыл итәләр:

– Был әллә һин йыҡҡан ҡарттың атаһы булып сыҡтымы? – тиҙәр.

Мин һаман да һүҙемде бирмәйем:

– Өсөнсө йыл ысынлап та йыҡҡайным, тик, бәхетһеҙлеккә ҡаршы, шаһит ҡына юҡ, – тип барам. Аранан бер иптәшем һис кем көтмәгән шаһитты табып бирҙе:

– Ни эшләп шаһит булмаһын, ҡарт – үҙе шаһит.

Аттар килгәс, һабантуй бер ни тиклем һүрелгәс, иптәштәрҙе йыйып алдым да:

– Әйҙәгеҙ, ҡарт янына киттек! – тинем.

Ҡартты осраттыҡ. Бер таҫтамалды биленә быуған, бер нисәһен яурынына һалған, биш-алтыһын тәртипһеҙ рәүештә ҡулына йомарлаған ҡарт мине боронғо дуҫтарса йылмайып ҡаршы алды һәм үҙе миңә табан атланы. Үҙен ғәйепле итеп һанағандай:

– Маташма, ҡустым, тип ҡолағыңа әйтеп ҡараным бит һиңә, – тине.

– Уны әйт тә быны әйт, Тимербулат ағай, бер ваҡыт мин һеҙҙе йыҡҡайным бит? – тинем.

Ҡарт яуабын миңә генә түгел, иптәштәргә лә аңлатырлыҡ итеп ҡайтарҙы:

– Унда бит һин ҡунаҡ инең, ҡалай булғанда ла, һинең күңелеңде күрергә кәрәк ине, үҙенә күрә бер хөрмәт ине ул, ә бында көрәш намыҫҡа бәйләнгән.

1. Ҡыҫҡырып, тасуири итеп уҡыу күнекмәләре үткәрегеҙ.
2. Яңы һүҙҙәрҙе күсереп алып, мәғәнәләрен асыҡлап, улар менән һөйләмдәр төҙөгөҙ. Һөйләмдәрегеҙҙе руссаға тәржемә итегеҙ.
3. *Һауа еҫкәү, тын алып инеү, һауа алыштырып йөрөү, көс һынашыу, намыҫҡа тейеү, шиккә төшөү, көлкөгә ҡалыу, ғәйепте таныу, төҫ үҙгәреп китеү, мыҫҡыл итеү, күңелен күреү, манма тиргә батыу, ҡолаҡ һалыу* һүҙбәйләнештәренең һәр береһенең мәғәнәһен ентекләп аңлатығыҙ. Шул уҡ мәғәнәне икенсе һүҙҙәр менән бирегеҙ.

4. Хикәйәнең ҡыҫҡаса йөкмәткеһен һөйләгеҙ, телмәрегеҙҙә яңы һүҙҙәрҙе, үрҙә килтерелгән һүҙбәйләнештәрҙе файҙаланырға тырышығыҙ.
5. Әҫәрҙә башҡорттарҙың ниндәй ғөрөф-ғәҙәттәре, йолалары телгә алына? Текстан шуларҙы табып, уларға аңлатма бирегеҙ.
6. Нимә ул *намыҫ һаҡлау?* Хикәйәнең ниңә шулай аталыуын асыҡлағыҙ.
7. Тимербулат ҡарт образына характеристика бирегеҙ.

**118-се күнегеү.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.

## ҺАУАЛАНМА

Һауаланма атаңдың байлығына,
Ололанма йөҙөңдөң айлығына.
Атаңдың байлығы – төшкән ҡырау тик,
Йөҙөңдөң айлығы – ялған буяу тик.

*(Аҡмулла)*

**119-сы күнегеү.** Сифаттарҙың артыҡлыҡ дәрәжәһен дөрөҫ яһағыҙ.

йәм-йәшел, йәп-йәшел (*иҫкәрмә:* икеһе лә дөрөҫ)
сөм ҡара
күм-күк, күп-күк
дөм ҡараңғы
тома һаңғырау (тома һуҡыр)
шыр наҙан (шыр тиле)
шар асыҡ
салт аяҙ

*Факиһа ТУҒЫҘБАЕВА*

## ҺЫУ ЮЛЫ

Ауыл осо – сауҡалыҡ,
Сауҡалыҡта – бар халыҡ.
Киленсәк һыу юлы башлай,
Хәйер-фатиха алып...

Шарлама ырғый ҡаянан,
Йүгерә уйһыулыҡтан.
Теште ҡамаштыра һыуы,
Көс алаһың һыуыҡтан.

Инәйҙәр шарлама һыуын
Тоталар сәйгә генә –
Мәтрүшкә сәйен эстеңме,
Йәшәйһең йәйҙә генә...

Һирпеп һыуҙар ала килен,
Талмаһын беләккәйе.
Беләгенә сыҙар ҙа ул,
Талмаһын йөрәккәйе!

Кейәүебеҙ бөркөт икән –
Эт-ҡош теймәҫ киленгә.
Кейәүебеҙ алып төштө
Кәләшкәйен бейергә.

Бейе, килен! Бейе, кейәү!
Таҡмаҡ әйтә еңгәләр.
Шарламаға ҡояш-айҙай
Алтын тәңкә һибәләр.

Бүләкһеҙ ҡалмай бер кем дә –
Һәр кемдең үҙ өлөшө,
Һәр кемдең үҙ алтыны ла,
Һәр кемдең үҙ көмөшө.

Ҡыҙҙарға – алтын тараҡ,
Йөрөһөн сәскә ҡаҙап.
Егеттәргә – һөлгөләр,
Һабантуйҙа еңһендәр.
Инәйҙәргә – шәльяулыҡ,
Теләп иҫәнлек-һаулыҡ.

Малайҙарға – башалтай,
Уны кейгән шәп атлай.
Алъяпҡыс – бикәстәргә,
Ипле көләкәстәргә...

Килен бүләктәр өләшә,
Эй яҡты йөҙгөнәһе!
Һоҡлана ил ағалары,
Һоҡлана ил инәһе!

Килен китте ваҡ-ваҡ атлап,
Ҡулбашында – көйәнтә.
Олатайҙар доға ҡыла,
Инәйҙәр теләк әйтә.

Юлына гөлдәр һибелә,
Йыр һибелә юлына.
Таш булып батһын киленсәк
Бер төшкән урынына.

Итәк тулы балалары
Тупылдап тыуып торһон,
Тупылдап үҫеп торһон да,
Үҙҙәре оя ҡорһон.

Ауыл осо – сауҡалыҡ,
Сауҡалыҡта – бар халыҡ,
Һөйөнсө ала малайҙар
Килендән алда сабып.

1. Яңы һүҙҙәрҙе табып үҙләштерегеҙ. Мәғәнәләрен асыҡлап, руссаға тәржемә итеп ҡуйығыҙ.
2. Килендең тараҡкан бүләктәренең исемдәрен яҙып алығыҙ. Һеҙҙең ул әйберҙәрҙе күргәнегеҙ, бүләк итеп алғанығыҙ бармы? Бүләктәрҙең исемдәрен руссаға тәржемә итеп яҙығыҙ.
3. Килендең кемгә нимә бүләк итеүенә иғтибар итегеҙ. Һәр бүләккә бында ниндәй мәғәнә һалына. Һеҙ нисек уйлайһығыҙ, бүләк биреүҙең берәй тәртибе бармы? Шул турала фекер алышығыҙ.

4. *Киленсәк төшкән урынына таш булып батһын,* ти, шағирә. Һеҙ быны нисек аңлайһығыҙ? Әңгәмә ойоштороғоҙ.
5. Һеҙҙең *һыу юлы башлау* йолаһында ҡатнашҡанығыҙ бармы? Хәҙер ул йола үтәләме? Ғөмүмән, ул йоланың мәғәнәһе нимәлә? Фекер алышығыҙ.
6. Шиғырҙа һыу юлы башлау ҡайһы осорҙа бара, уны ниндәй билдәләргә ҡарап белдегеҙ? Ошо осорҙоң тәбиғәтен тасуирлап күрһәтегеҙ.
7. Кәләш әйттереүгә, килен төшөрөүгә, туй үткәреүгә бәйле тағы ниндәй йолалар барлығын ишеткәнегеҙ йәки күргәнегеҙ бар? Берәй йола тураһында белешмә төҙөп яҙығыҙ.
8. Ғөмүмән, бындай йолалар ни өсөн кәрәк? Уларҙың тормоштағы урыны, әһәмиәте нимәлә?
9. Тормош өҙлөкһөҙ үҙгәреп тора. Шуға бәйле рәүештә, йолалар ҙа үҙгәрә – иҫкергәндәре онотола бара, улар урынына яңылары тыуа. Атай-әсәйҙәрегеҙҙән, ололарҙан һорап, хәҙерге ваҡытта ниндәй яңы йолалар барлығын асыҡлағыҙ, улар тураһында кескәй белешмәләр төҙөп яҙығыҙ.

## Һүҙ күрке – мәҡәл

Ҡунаҡсылдың табыны буш булмай.

Аштың бәрәкәте ҡунаҡ менән.

Бәхетленең ҡунағы бергә.

Ҡунаҡ ҡәҙерле булһа, ҡаҙан тиҙ ҡайнай.

Татлынан татлы – яҡшы һүҙ, затлынан затлы – яҡты йөҙ.

Берең өсөн барың тор, барың өсөн берең тор.

# Башҡорт аштары

## МИЛЛИ АШТАР

Башҡорттарҙың туҡланыу рационында һөт аҙыҡтары мөһим урын тотҡан, һөт менән сәй эсеү киң таралған. Ҡаймаҡ менән аш тәмләткәндәр, май бешкәндәр, һәр ерҙә ҡатыҡ, эремсек, ойотҡан эшләгәндәр. Оҙаҡ файҙаланыу өсөн, ҡайнатып киптерелгән ҡыҙыл эремсек (әжекәй), ҡорот әҙерләгәндәр. Йәй көндәре ҡымыҙ, һыуға ҡатыҡ йәки йәш ҡорот туҡып яһалған айран эскәндәр.

Башҡорт милли аштары араһында итле аштар ҙа күп. Бишбармаҡ, ҡуллама, өлөш, итле аш традицион һый иҫәпләнә. Был аҙыҡтарҙы йылҡы йәки һарыҡ итенән әҙерләгәндәр. Ҡунаҡ һыйлағанда, иткә ҡушып ҡаҡлаған ҡаҙы ултыртҡандар. Иттән һуң туҫтаҡ менән ҡоротло һурпа биргәндәр. Таулы-урманлы яҡтарҙа йәшәгән башҡорттар сел, ҡор, һуйыр, өйрәк кеүек ҡыр ҡоштарының, ҡыр кәзәһе, мышы кеүек ҡырағай хайуандарҙың итен дә киң файҙаланған.

Иген культураларынан башҡорттар ҡурмас ҡурғандар, талҡан яһағандар. Ҡамырҙан көлсә, табикмәк, бауырһаҡ, йыуаса, әсикмәк, төрлө бәлештәр бешергәндәр. Йәй көнө балтырған, йыуа, ҡуҙғалаҡ, мәтрүшкә, һары мәтрүшкә һ. б. үләндәрҙән өйрә бешергәндәр, уларҙы ашҡа тәмләткес итеп файҙаланғандар, сәй итеп бешереп эскәндәр.

Ҡайын еләгенән, ер еләгенән, ҡарағаттан, көртмәленән, ҡурай еләгенән ҡаҡ ҡойғандар, төрлө бәлештәр бешергәндә файҙаланғандар.

1. Тексты иғтибар менән уҡып сығығыҙ. Унда телгә алынған эсемлек, аш исемдәрен яҙып алығыҙ, уларҙың нисек эшләнеүе (бешерелеүе) менән ҡыҙыҡһынығыҙ. Ул эсемлектәрҙең, аштарҙың ҡайһылары һеҙгә таныш?
2. Был аштарҙың ҡайһылары әле лә беҙҙең рационда, ә ҡайһылары бик һирәк әҙерләнә, йәки бөтөнләй онотолған. Ни өсөн?
3. Әсәйҙәрегеҙҙән һорап, һөт, ит йәки ҡамыр аҙыҡтарынан берәй рецепт яҙып алығыҙ. Шул рецепт буйынса уны бешереп, ашап ҡарағыҙ, туҡлыҡлылығына, тәменә баһа бирегеҙ.
4. Ҡайһы ҡыр ҡоштарының һәм ҡырағай хайуандарҙың итен ашамайҙар? Ни өсөн? Фекер алышығыҙ.

## БАШҠОРТ ҠЫМЫҘЫ

*Ҡадир ДАЯН шиғыры*
*Заһир ИСМӘҒИЛЕВ көйө*

Кемдәр һауа бейәләрҙе,
Әллә Һаҡмар ҡыҙымы?
Көс тә бирә, дәрт тә бирә,
Һай, ҡымыҙы, ҡымыҙы!

Ҡушымта:

Эх, ҡымыҙы, ҡымыҙы ла,
Был ҡымыҙға ни етә!
Күңелдәрҙе елкендереп,
Йырлата ла бейетә.

Эсеп ебәр шул ҡымыҙҙы,
Һыуһындарың баҫылыр.
Күңелдәрең бойоҡ булһа,
Балҡып-балҡып асылыр.

Ҡушымта.

1. Йырҙың тексын ятлағыҙ.
2. Яҙмаһынан йырҙы тыңлап, үҙегеҙ ҙә ҡушылып йырлағыҙ.

3. Ҡушымтаның башҡарылышына иғтибар итегеҙ, йырҙа уның урынын, ролен билдәләргә тырышығыҙ.
4. Көйҙөң авторы Заһир Исмәғилев тураһында нимә беләһегеҙ? Кескәй генә белешмә төҙөп яҙығыҙ.

*Мөхәммәтсәлим ӨМӨТБАЕВ*

## БАШҠОРТ ҠОРОТО

Башҡорт ҡорото әсегән һөттән түбәндәгесә эшләнә.

Һөт өҫтөн алғандан һуң да әсемәгән булһа, унан сыр ҡайнаталар. Әсей башлаған ҡуйы һөт бары эремсек яһау өсөн китә. Ҡоротто иһә өҫтө алынған һәм әсегән һөттән, генә яһайҙар. Бының өсөн әсегән һөттө бер нисә көнәк һыйҙырышлы көбөгә, тәпәнгә йә башҡа төрлө ҙур һауытҡа йыялар, һуңынан уны ҙур ҡаҙанда йылыталар һәм яңынан шул уҡ көбө, тәпәндәргә ҡоялар. Унда әсеп, ҡатыҡҡа әйләнгән һөттө өҫтөнә һыуы ҡалҡып сыҡҡансы тоталар. Шунан был йәшкелт төҫтәге һыуҙы түгәләр. Был эш ике тапҡыр ҡабатлана. Ҡалған ҡатыҡтың өҫтөнә яңы әсегән һөттө өҫтәйҙәр. Бер нисә көндән һуң был ҡатыҡты ҙур ҡаҙанға һалып, талғын утта яйлап ҡына һорғолт төҫтәге шыйыҡсаға әйләнгәнсе ҡайнаталар. Әммә уны ҡыҙғылт төҫкә ингәнсе ҡайнатырға ярамай. Ҡайнап торған был шыйыҡсаны эркет тип атайҙар. Эркеттән ҡорот яһау өсөн, уны ҡулаша тип аталған ҡабыҡ һауытҡа ҡоялар. Унда эркеттең һыуы ағып бөтә һәм ярмаланып торған ҡорот ҡына тороп ҡала. Уны, тоҡҡа тултырып, бер нисә көнгә аҫып ҡуялар, һуңынан был ҡоротло тоҡто алып, иҙәнгә һалалар һәм ауыр әйбер менән баҫтырып ҡуялар. Уны шул килеш ҡороттоң һыуы бөтөнләй һарҡып бөткәнсе тоталар. Шулай итмәгәндә, еүеш ҡорот кипкәнсе үк боҙола башлай. Тоҡ өҫтөндәге ауырлыҡты алып ташлағандан һуң, ҡоротто яңынан ҡулашаға бушаталар һәм, яҡшы һаҡланһын өсөн, тоҙ менән бутап, ҡамыр кеүек ҡуйы массаға әйләнгәнсе баҫалар. Шунан һуң, уны йомғаҡлап, уларҙы алдан әҙерләп ҡуйылған ылашҡа теҙәләр. Ылаш сыра кеүек теленгән тыраналарҙан (ағастарҙан) рәшәткәләп эшләнә. Был ылаш аҫтындағы усаҡҡа башҡорттар, ғәҙәттә, ҡаҙан аҫалар һәм аш бешерәләр, эркет ҡайнаталар. Ә өҫтә, ылашта, усаҡтан сыҡҡан йылыла һәм төтөндә ҡорот кибә һәм ыҫлана…

1. Ололарҙан һорап, текста исемдәре телгә алынған һауыттарҙың нисек, нимәнән эшләнеүен, тәғәйенләнешен белегеҙ. Был һауыттарҙың хәҙерге заманда булыуын-булмауын асыҡлағыҙ.
2. Тексты иғтибар менән уҡығыҙ. Ҡорот яһау серҙәре менән танышығыҙ.
3. Башҡорттарҙың һөттән (һыйыр, бейә, кәзә һөтөнән) тағы ниндәй ашамлыҡтар, эсемлектәр әҙерләүен беләһегеҙ? Берәй ашамлыҡтың (йәки эсемлектең) нисек яһалыуын аңлатып яҙығыҙ.

**120-се күнегеү.** Текст менән танышығыҙ, үҙегеҙ бешереп ҡарағыҙ.

Таҙа итеп йыуып әҙерләнгән ҡаҙ итен ваҡ итеп турағыҙ.

Ярманы (дөгө, тары, ҡарабойҙай) әҙерәк йомшарғансы ҡайнатып алығыҙ һәм һыуын һарҡытығыҙ. Ҡамырҙан йәймә йәйегеҙ, уны табаға һалығыҙ. Йәймәгә йоҡа ғына бер ҡат ярма һалығыҙ. Уның өҫтөнә бер ҡат ҡаҙ ите, унан тағы ярма, тағы ҡаҙ ите, иң өҫтән тағы бер ҡат ярма һалығыҙ. Бәләкәйерәк йәймә менән табаның өҫтөн ҡаплағыҙ ҙа аҫтағы йәймәнең ситтәре менән бөрөп тоташтырып сығығыҙ. Бер бәлеш өсөн түбәндәге аҙыҡтар алына:

1,5 кг ҡаҙ ите, 500 г ярма, 2 – 3 баш һуған, тоҙ, борос, лавр япрағы.

*(Н. Сафин «Башҡорт аштары» китабынан)*

**121-се күнегеү.** Һөйләмдәрҙе дөрөҫ интонация менән уҡығыҙ. Баҫымды ҡалын хәрефле һүҙҙәргә төшөрөгөҙ.

Яҙғы каникул **мартта** башланамы? Мартта **яҙғы** каникул башланамы?

**122-се күнегеү.** Иң билдәле үләндәрҙең башҡортса исемдәрен русса тәржемәһе менән тап килтерегеҙ.

| | |
|---|---|
| әрем | щавель |
| һары мәтрүшкә | кислица |
| мәтрүшкә | борщевик |
| бәпкә (ҡаҙ) үләне | тысячелистник |
| балтырған | полынь |

| | |
|---|---|
| бысала (меңьяпраҡ) | зверобой |
| юл япрағы | дягиль |
| айыу көпшәһе | свербига |
| ҡымыҙлыҡ | душица |
| ҡуҙғалаҡ | подорожник |
| ҡаҡы | спорыш |

*Василий ВЛАСОВ*

## БАШҠОРТ БАЛЫ

*(Өҙөк)*

Көньяҡ Урал урмандарындағы умарталыҡтарҙан алынған й ү к ә  б а л ы үҙенең ғәжәп һәйбәт сифаттары менән дан тота. Үҙе тәмле, үҙе туҡлыҡлы, үҙе шифалы был тәбиғәт бүләген кеше бик боронғо замандарҙа уҡ юғары баһалаған, уның тураһында бик күп әҫәрҙәр ижад иткән.

Башҡортостан тәбиғәте умартасылыҡты үҫтерергә бик уңайлы. Беҙҙә бының өсөн баллы үҫемлектәр бик күп. Башҡортостан урмандарының яртыһынан күбеһен йүкә, саған, тал ағастары тәшкил итә. Быларҙан тыш, баҫыуҙарҙа ҡарабойҙай, көнбағыш үҫә. Ғөмүмән, сәскәле үҫемлектәрҙең күбеһе бал ҡорттары өсөн йәшәү сығанағы булып тора. Сәскәнән сәскәгә ҡунып, ҡорттар татлы һут, һеркә йыя. Улар һутты – балға, һеркәне һитәгә әйләндерә. Былар икеһе лә кеше өсөн ифрат файҙалы. Быларҙан тыш, ҡорт елеме (прополис), ҡорт һөтө (пчелиное молоко) лә кеше өсөн бик кәрәк – уларҙан дарыуҙар яһайҙар.

Балдың химик составы ҡатмарлы. Башҡорт балында, мәҫәлән, 18 процент һыу, 35 процент виноград шәкәре (глюкоза), 40 процент емеш шәкәре (фруктоза), 2 процент сахароза, 0,1 процент аҡһым бар. Балда шулай уҡ ферменттар, витаминдар, 20-ләп төрлө аминокислота, ароматлы матдәләр һәм буяу матдәләре бар. Балдың тәме, хуш еҫле булыуы ла шунан килә.

Балдың составы һәм сифаты уның ҡайһы үҫемлектән йыйылыуына, был үҫемлектең ҡайһы тупраҡта һәм ниндәй климат шарттарында үҫеүенә бәйле. Балға баһа биргәндә, уның өлгөрөүенә (ҡуйылығына), унда һыуҙың күпме булыуына,

ҡайһы үҫемлектәрҙән алыныуына, төҫөнә, тәменә һәм еҫенә иғтибар итәләр. Өлгөргән балдың удель ауырлығы (һауа температураһы плюс 15 градус булғанда) 1,429 килограмға тигеҙ.

Балда ауырыу таратыусы бактерияларҙы үлтереүсе йәки уларҙың таралыуын тотҡарлаусы матдәләр бар. Шуға ла бал менән күп кенә башҡа продукттарҙы консерваларға мөмкин.

Халыҡ араһында й ү к ә  б а л ы  айырыуса ҡиммәтле булып иҫәпләнә. Уның бер ни тиклем ҡырҡыуыраҡ, әммә татлы еҫен һәм тәмен, аҡһыл төҫөн һәм үтә күренмәлелеген белгестәр юғары баһалай.

Дала райондарындағы умарталыҡтарҙа  ҡ а р а б о й ҙ а й  б а л ы  алына. Ул ҡыҙғылтыраҡ төҫтә була. Шулай уҡ юғары сифатҡа эйә. Унда тимер, аҡһым башҡа төрлө балдарға ҡарағанда күберәк була. Туғай үҫемлектәренән, ҡарабойҙайҙан, көнбағыштан, ҡандала үләненән, йылҡы борсағынан алынған ҡатнаш бал да шифалы, тәмле.

Балды бөтәһе лә ярата. Ҡорт ныҡ саға, әммә уға үпкә юҡ, сөнки, медиктарҙың әйтеүенсә, ҡорттоң сағыуы, бал кеүек үк, бик файҙалы. Бал йыйыу осоронда умарталыҡта һауа ла шифалы кеүек. Унда бал, ҡорт елеме, сәскәләр еҫе аңҡый. Беҙҙең тоғро дуҫыбыҙ – бал ҡорто – ана шулай ғәжәп сифаттарға эйә.

Башҡорт балы бөтә донъяла билдәле. Бик тәмле юғары дауалау сифаттары өсөн ул төрлө халыҡ-ара күргәҙмәләрҙә өс алтын миҙал алды, ә ошо ғәжәп балды йыйыусы башҡорт ҡорто көмөш миҙалға лайыҡ булды.

1. Текстан бал биреүсе үҫемлектәрҙең исемдәрен яҙып алығыҙ. Был үҫемлектәр һеҙҙең яҡта үҫәме? Уларҙы күргәнегеҙ бармы?
2. Балдың төҫө, тәме һ. б. үҙенсәлектәре буйынса белешмә яҙығыҙ.
3. Ололарҙан һорашып, балдың ниндәй ауырыуҙарҙы дауалағанда ҡулланылыуын асыҡлағыҙ.
4. Башҡорт балы ни өсөн данлыҡлы? Уның ниндәй наградалары бар?
5. Башҡорт телендәге умартасылыҡҡа бәйле терминдарҙы яҙып сығығыҙ, уларҙы русса тәржемә итегеҙ.
6. Хәҙерге ваҡытта умартасылыҡты үҫтерергә нимә ҡамасаулай? *«Мин умартасы булһам...»* тигән темаға әңгәмә ойоштороғоҙ.

7. Һеҙҙең башҡорт балы тураһында ниндәй әҙәби әҫәр (шиғыр, хикәйә һ. б.) уҡығанығыҙ бар?
8. Башҡорт балы тураһында үҙегеҙ әҙәби әҫәр (шиғыр, хикәйә, нәҫер һ. б.) ижад итегеҙ. Әҫәрҙәрегеҙҙе күмәкләп тикшерегеҙ, фекер алышығыҙ. «Беҙҙең ижад» тигән альбом (йыйынтыҡ) булдырығыҙ, иң һәйбәт тип табылған әҫәрҙәрегеҙҙе шунда теркәп ҡуйығыҙ.

*Наил САФИН*

## БИШБАРМАҠ

Бишбармаҡ, ғәҙәттә, һарыҡ итенән бешерелә, һарыҡ ите булмаһа, һыйыр, йылҡы итенән дә бешерергә мөмкин.

Итте, эре киҫәкләп, әҙер булғансы бешерәләр. Бешеп сыҡҡас, уны һоҫоп алып, һыуынмаһын өсөн, йылы урынға ҡуйып торалар, һөҙлөгөн алып, һурпала һалма бешерәләр.

Һалма өсөн йомортҡа һытып, тоҙло һыуҙа сөсө ҡамыр баҫалар. Ҡамырҙан уҡлау менән бер миллиметр ҡалынлығында йәймә йәйелә. Йәймә әҙер булғас, уны сама менән 1,5×2 сантиметр ҙурлыҡтағы дүрткелдәр яһап турайҙар. Һалма ни тиклем вағыраҡ булһа, шул тиклем һәйбәтерәк иҫәпләнә.

Бешкән һалма һурпанан һоҫоп алына. Уны ваҡлап туралған ит менән ҡушып, өҫтөнә дүңгәләкләп туралған һуған һибеп, һөҙлөк һалып бирәләр. Ә һурпаны, ҡорот, ваҡ ҡына итеп туралған һуған, борос һалып, кәсә, бокал йәки сынаяҡ өҫтө кеүек һауыттарҙа айырым ҡуялар.

1. Бишбармаҡты бешереү тәртибен иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ, һөйләгеҙ.
2. Аш-һыу, һауыт-һаба исемдәрен яҙып алып, руссаға тәржемә итегеҙ. Ата-әсәләрегеҙҙең, ололарҙың һөйләшеүенә иғтибар итегеҙ – улар был һүҙҙәрҙе ҡулланалармы?
3. Өйөгөҙҙә, әсәйҙәрегеҙ менән бергәләп, бишбармаҡ бешереп ҡарағыҙ.
4. Бишбармаҡтың ни өсөн шулай аталғанын аңлата алаһығыҙмы?
5. Һеҙ тағы ниндәй башҡорт милли аштарын беләһегеҙ? Уларҙың исемдәрен яҙып сығығыҙ, нимәнән һәм нисек бешерелеүен әйтеп бирегеҙ.

**123-сө күнегеү.** Һүҙбәйләнештәрҙе дөрөҫ уҡығыҙ. Беренсе һүҙҙең аҙағындағы йә икенсе һүҙҙең башындағы [*к*], [*ҡ*] өндәренең [*г*], [*ғ*] өндәренә сиратлашыуына иғтибар итегеҙ.

ҡаҙ ҡанаты (ҡаҙғанаты)
ҡыр ҡаҙы
яҙ килә
ҡыҙыҡлы китап

ишек асылды
ҡыҙыҡ икән
аяҡ аҫты
серек ағас

**124-се күнегеү.** Башҡорт телендә [*а*] өнө иренләштереп әйтелмәй. Һүҙҙәрҙе дөрөҫ уҡығыҙ.

| | | |
|---|---|---|
| алма | тамсы | даға |
| ҡарағат | ҡала | ярғанат |
| балалар | һаҡал | мамыҡ |

**125-се күнегеү.** Әсәй, өләсәйҙәрегеҙҙән һорашып, берәй рецепт яҙып алығыҙ.

**Һүҙ күрке – мәҡәл**

Бал балсыҡ ашата, балан ҡамыр ашата.

Балан бал менән тәмле, бал баланһыҙ ҙа тәмле.

Бутҡа майҙан туймай.

Бәлеш булһа, белеш табыла.

# Әсәм теле – сәсән теле

## БАШҠОРТ ТЕЛЕ

Хәҙерге башҡорт теле – башҡорт халҡының милли теле. Ул төрлө ырыу-ҡәбилә телдәренең берләшеүе һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән.

Башҡорт теле **төрки телдәр** ғаиләһенең Урал – Волга буйы (йәки Көнбайыш ҡыпсаҡ) төркөмөнә инә. Грамматик төҙөлөшө, һүҙ байлығы буйынса ул *татар, ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, ҡарағалпаҡ, ҡумыҡ, нуғай, ҡарасай, балҡар, үзбәк* телдәренә яҡын **ҡәрҙәш** һанала. Башҡорт теле *әзербайжан, төрөк, төрөкмән, ҡараим, уйғыр, хакас, ойрот, тува, шор, ҡырым, ҡырым татарҙары, яҡут, сыуаш* телдәренә лә ҡәрҙәш, тик уларҙа, тәүге ҡәрҙәш телдәрҙәгегә ҡарағанда, айырмалы яҡтар күберәк.

Хәҙергесә милли тел булып өлгөргәнсе, башҡорт теле быуаттар һуҙымында бик ҙур үҙгәрештәр кисергән. Ләкин ул бик боронғо замандарҙан килгән үҙенсәлектәрҙе лә һаҡлап ҡалған. Был уның бик боронғо телдәрҙән булыуы тураһында һөйләй.

Башҡорт телендә өс диалект бар – көньяҡ, көнсығыш һәм төньяҡ-көнбайыш диалекттары. Был диалекттар үҙҙәре һөйләштәргә һәм һөйләшсәләргә бүленә.

**Көньяҡ диалект** Башҡортостандың үҙәк, көньяҡ һәм көньяҡ-көнбайыш райондарына, Ырымбур, Һарытау, Һамар өлкәләренә таралған. Был диалектҡа ҙур биш һөйләш инә: *урта һөйләш, Дим һөйләше, Эйек-Һаҡмар һөйләше, Өршәк һөйләше, Егән һөйләше.*

**Көнсығыш диалект** Башҡортостандың төньяҡ-көнсығыш, Урал арты райондарына, Силәбе, Ҡурған өлкәләренә таралған. Был диалект алты һөйләште үҙ эсенә ала: *Арғаяш, Салйоғот (Салйот), Әй, Мейәс, Асыуҙы, Ҡыҙыл һөйләштәре.*

**Төньяҡ-көнбайыш диалектына** Башҡортостандың төньяҡ-көнбайыш һәм көнбайыш райондарында, Пермь крайы, Свердловск өлкәһендә һәм Татарстанда йәшәгән башҡорттарҙың теле инә. Былар татар һөйләштәренең һәм әҙәби теленең йоғонтоһон кисергән һөйләштәр булып тора: фонетик яҡтан татар теленә тартым, ә лексик һәм грамматик йәһәттән башҡорт теленә нығыраҡ яҡын.

Октябрь революцияһына тиклем башҡорт халҡы ғәрәп графикаһына нигеҙләнгән төрки яҙма теле менән файҙаланды. Беҙҙең көндәргә ошо телдә яҙылған шәжәрәләр, төрлө тарихи документтар, эш ҡағыҙҙары, әҙәби әҫәрҙәр килеп еткән. Был яҙма тел халыҡтың йәнле һөйләү теленә нигеҙләнмәгән, унда ғәрәп, фарсы телдәренән ингән һүҙҙәр бик күп ҡулланылған, ябай халыҡҡа бигүк аңлайышлы булмаған, шуға ла ул, рәсми тел булараҡ, күбеһенсә уҡымышлы кешеләр араһында таралған булған. Салауат Юлаевтың шиғырҙары, бойороҡтары, мөрәжәғәттәре, мәҫәлән, ошо телдә яҙылған. Батша хөкүмәтенең әмерҙәре лә ошо телгә тәржемә ителер булған. XIX быуатта Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев, Мифтахетдин Аҡмулла һәм башҡа мәғрифәтсе әҙиптәр ҙә ошо телдә ижад иткәндәр. Халыҡтың бай ауыҙ-тел ижады йоғонтоһонда, сәсәндәрҙең, прогрессив ҡарашлы әҙиптәрҙең, ғалимдарҙың ижади эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә был тел аҡрынлап демократлаша, йәғни бөтә халыҡҡа аңлайышлы була бара.

Октябрь революцияһынан һуң бөтә илдә, әҙәби телдәрҙе халыҡтың йәнле һөйләү теленә нигеҙләп, яңы яҙма әҙәби телдәр булдырыу эше киң йәйелдерелә. Башҡорт әҙәби теле лә үҙгәртеп ҡорола – башҡорт теленең фонетик, грамматик нигеҙҙәрен сағылдырған, уның төп диалекттарына нигеҙләнеп ҡоролған яңы яҙмаһы ҡабул ителә. Был яҙма 1923 йылдан бирле ғәмәлгә ашырыла. Шуны әйтергә кәрәк: был яҙма әҙәби телдең нормаларын эшләгәндә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, көнбайыш диалекттың үҙенсәлектәре иҫәпкә алынмай. Шул арҡала был яҡ башҡорттары, башҡорт әҙәби теле йоғонтоһонан ситләшеп, татар әҙәби теле йоғонтоһона бирелделәр, мәктәптәрҙә уҡытыу ҙа татарса алып барылды һәм барыла. Телдәре татарсаға әйләнеп барған күп кешеләр үҙҙәренең милләтен дә татар тип иҫәпләй башланы.

Башҡорт әҙәби теле үҙ тарихында өс яҙма алмаштырҙы. Борон-борондан ҡулланылып килгән ғәрәп графикаһы 1928 – 1929 йылдарҙа латин яҙыуы менән алыштырыла, ә 1940 йылда рус графикаһына нигеҙләнгән алфавит төҙөлә.

Хәҙерге ваҡытта башҡорт теле иң ныҡ үҫешкән, камил формалашҡан милли әҙәби телдәрҙән иҫәпләнә. Был телдә әҙәби әҫәрҙәр ижад ителә, гәзиттәр, журналдар сыға, фәнни китаптар, төрлө һүҙлектәр баҫыла, ул театр сәхнәһендә, радио һәм телевидение буйынса яңғырай. Был телдә мәктәптәрҙә, колледждарҙа, юғары уҡыу йорттарында уҡыу-уҡытыу эштәре алып барыла.

1. Төрки телле халыҡтарҙың исемлеген төҙөп, улар араһында башҡорт теленә иң яҡындарын билдәләгеҙ.
2. Был төрки телдәрҙең ҡайһыһын аңлайһығыҙ, ә ҡайһыларын бөтөнләй аңламайһығыҙ? Быны сәбәбен аңлатығыҙ.
3. Башҡорт теленең ниндәй диалекттары бар? Ул диалекттарға ҡараған һөйләштәрҙе яҙып сығығыҙ.

**126-сы күнегеү.** Ҡайһы бер үҫемлектәрҙең төрлө урындарҙағы атамалары. Беренсе бағанала әҙәби телгә ингән вариант бирелгән.

| | |
|---|---|
| мышар | миләш |
| муйыл | шоморт |
| бәшмәк | мәшкәк, гөмбә |
| ҡурай еләге | әберсә, торна еләге |
| ҡарағат | ҡарлыған |
| әлморон | этморон, гөлйемеш |
| картуф | бәрәңге |

**127-се күнегеү.** Һүҙбәйләнештәрҙе дөрөҫ уҡығыҙ. Ике һүҙ араһындағы һуҙынҡыларҙың береһе, һүҙҙәр шәп әйтелгәндә, төшөп ҡала.

| | |
|---|---|
| килә ‿ алманы (киләлманы) | килде лә ‿ алды |
| бара ‿ ине | өйгә ‿ эш |
| атаһы ‿ алдында | сәскә ‿ ат |
| ала ‿ айғыр | арғы ‿ урам |

**128-се күнегеү**. Һүҙбәйләнештәрҙе дөрөҫ уҡығыҙ. Ике һүҙҙе бергә уҡығанда, ижек сиктәре күсә.

урман эсендә (ур-ма-не-сен-дә)
Инйәр ауылы
барыр инем

Сәлим ағай
ҡайын урманы
йыр ишетелә

*Зәйнәб БИИШЕВА*

**БАШҠОРТ ТЕЛЕ**

Моң шишмәһе һандуғастай йырсы ла һин,
Һығылма бил тал сыбыҡтай нәфис тә һин,
Аллы-гөллө гөл-сәскәләй наҙлы ла һин,
Эй, илһамлы, эй, хөрмәтле башҡорт теле.
Күгәреп ятҡан Уралыңдай бай, йомарт һин,
Серле ҡамыш ҡурайыңдай ҡарт, олпат һин,
Күпте күргән сәсәнеңдәй йор, зирәк һин,
Эй, һөйөклө, эй, ҡәҙерле башҡорт теле.
Диңгеҙҙәргә тиңләмәйем – тәрәнһең һин,
Айға-көнгә тиңләмәйем – гүзәлһең һин,
Ҡаяларға тиңләмәйем – бөйөкһөң һин,
Эй, хикмәтле, мәрхәмәтле башҡорт теле.
Күп быуаттар һин йырланың ҡурай моңон,
Күп быуаттар һин йырланың яугир юлын,
Инде азат. Шат. Йырлайһың еңеү йырын,
Эй, бәхетле, эй, ҡәҙерле башҡорт теле.
Иң тәү миңә һин күрһәттең дуҫлыҡ юлын,
Минең өсөн һин бит йәшәү, бәхет үҙең.
Мәңге йәшә, эй, һөйөклө башҡорт теле,
Атам теле, әсәм теле – минең телем.

1. Шиғырҙан башҡорт телен тасуирлаусы эпитеттарҙы яҙып алып, русаға тәржемә итегеҙ.
2. Күсереп алған эпитеттарығыҙға ҡарап, шағирәнең туған теленә мөнәсәбәтен билдәләгеҙ. Туған телегеҙгә ҡарата һеҙ ошо эпитеттарҙы ҡуллана алаһығыҙмы?
3. Шиғырҙы тасуири уҡып өйрәнегеҙ, ятлағыҙ.
4. Башҡорт теленә арналған әҫәрҙәрҙе иҫегеҙгә төшөрөгөҙ, исемдәрен яҙып ҡуйығыҙ.

5. Рус һ. б. телдәргә арналған шиғырҙар беләһегеҙме?
6. Зәйнәб Биишеваның тағы ниндәй әҫәрҙәрен беләһегеҙ, иҫегеҙгә төшөрөгөҙ.
7. Шиғырҙан күсереп алған эпитеттарҙы файҙаланып, кроссворд төҙөгөҙ.

*Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ*

## ӘСӘМ ТЕЛЕ – СӘСӘН ТЕЛЕ

*(«Донъя» китабынан)*

Донъяла һәр кемгә ҡәҙерлеһе – үҙ туған теле. Үҙ туған теле барҙың үҙ туған рухы бар.

Туған телгә күпме маҡтау һүҙҙәре яуҙырылған:

Әй туған тел, әй матур тел,
Атам-әсәмдең теле.
Донъяла күп нәмә белдем
Һин туған тел арҡылы, –

тип, Ғабдулла Туҡай һүҙҙәрен беҙ бала саҡтан ятлап көйләп үҫтек. Әсәм теле – сәсән теле, ти шағир Рәми Ғарипов туған башҡорт теле хаҡында.

Әсә телендә кеше донъяны, донъя матурлығын белә башлай. Уның шул телдә фекерләү мәҙәниәте, зауығы формалаша. Уй күрке – тел икән, тел күрке – һүҙ. Һүҙе яғымлының үҙе лә яғымлы, теле матурҙың күңеле лә матур.

Минең туған башҡорт телем – әсә һөтө менән ҡаныма һеңгән әсә телем – донъяны танытҡан, кешеләр менән аралаштырған, белем, ғилем биргән ғәзиз телем. Шул телем мине киң донъяға алып сыҡҡан, бүтән телдәрҙе белергә, рус телен икенсе туған телдәй өйрәнергә юл асҡан. Бөйөк рус теле мине бөтә кешелек ғилеменә, мәҙәниәт донъяһына алып инде, бүтән халыҡтар менән уртаҡ телдә аралашырға мөмкинлек бирҙе.

Үҙен аңлар һәм үҙе тураһында һөйләр өсөн халыҡ үҙ ул-ҡыҙҙарын – сәсәндәрен, йырсыларын, аҡыл эйәләрен, яҙыусыларын тыуҙыра. Һабрау йырау ҡобайырҙары менән ул хан замандарының ыҙа-яфаһын һөйләй.

Байыҡ сәсән Салауаттай ир-егеттәрҙең ирек яулар батырлыҡтарын ололай.

Салауат Юлаев үҙе халыҡтың батыры һәм сәсәне булып яуҙарға оран һала, батырлыҡ, дуҫлыҡ үрнәктәрен сағылдыра.

Париждарҙы урап ҡайтҡан Буранбай ише ҡурайсылар Рәсәй илен һаҡлаған улдарының дан азаматы һәм йырсыһы булып алға баҫа.

Өмөтбай, Аҡмулла үҙ шиғырҙары аша ғилем, мәғрифәт нуры сәсә.

Дауыт Юлтый заман поэзияһы булып революция һәм социалистик төҙөлөш фронттарын кисә.

Рәшит Ниғмәтиҙәр, Баязит Бикбайҙар булып илебеҙгә дан йырлай.

Мостай Кәримдең дуҫлыҡ, туғанлыҡ тауышы булып ил-ҡитғаларға шиғри моңон ишеттерә.

1. Автор байтаҡ күренекле әҙиптәрҙең исемдәрен телгә ала. Һеҙ уларҙың ҡайһыларын беләһегеҙ? Шуларҙың берәйһе тураһында белешмә төҙөп яҙығыҙ.
2. Нимә ул *ягымлы һүҙ?* Һүҙ тағы ниндәй була?
3. Яҙыусы, *Шул телем мине киң донъяға алып сыҡҡан,* ти. Ул нимәне күҙ уңында тотто икән?
4. *«Әсә телендә кеше донъяны...»* тип башланған абзацты ятлағыҙ.
5. *«Минең туған телем»* тигән кескәй белешмә төҙөгөҙ.

**129-сы күнегеү. Ҡара** сифаты менән төҙөлгән һүҙбәйләнештәрҙең мәғәнәләрен аңлатығыҙ һәм рус теленә тәржемә итегеҙ.

Ҡара төҫ, ҡара урман, ҡара хәбәр, ҡара йөрәк, ҡара мунса, ҡара яғыу, ҡара йөҙҙәр, ҡара көн, ҡара айғыр, ҡара халыҡ, ҡара аҡыл, ҡара көстәр, ҡара алтын, ҡара икмәк, ҡара тир.

Һәр бер тел һүҙҙәрҙе фонетик яҡтан бер аҙ үҙгәртеү юлы менән дә тел байлығын арттыра. Алдараҡ яңы һүҙҙәрҙең ялғау өҫтәү, ике тамырҙы ҡушыу юлы менән яһалыуын әйткәйнек инде. Инде хәҙер фонетик үҙгәрештәр нигеҙендә яһалған яңы һүҙҙәрҙе ҡарайыҡ. Мәҫәлән, *тары* (ярма) – *дары* (порох), *һеперә – һыпыра, туган* (тел) – *тыуган* (ил), *ыргый* (һикерә) – *ургый* (урғып ҡайнай).

**130-сы күнегеү.** Тексты уҡығыҙ. Сифаттарҙы үҙҙәре эйәреп килгән исемдәре менән яҙып алығыҙ ҙа рус теленә тәржемә итегеҙ.

Кискә табан ваҡ күҙле ямғыр быҫҡаҡлап торҙо. Еле лә әллә ни һалҡын түгел ине. Ә төн урталарында ҡапыл һалҡынайтты. Дымлы ер өҫтө шыҡырлап туңды. Төньяҡтан үҙәккә үтмәле көслө, һалҡын ел иҫте. Ул Алатау артынан ҡалын һоро болоттарҙы ҡыуалап килтерҙе лә ер өҫтөнә тәүге ҡар бөртөктәрен түңкәреп бәрергә тотондо. Ел көсәйгәндән-көсәйҙе. Тәүҙә әрбәк-һәрбәк кенә яуған ҡар таң алдынан көслө буранға әйләнде.

*(Н. Мусин)*

**131-се күнегеү.** Бирелгән һүҙбәйләнештәрҙән һөйләмдәр төҙөгөҙ.

Яғымлы һүҙ, мөһабәт ҡарағай, тоғро дуҫ, бына тигән китап, уңған ҡыҙ, һөлөктәй ат.

**132-се күнегеү.** Дөрөҫ уҡығыҙ.

| | |
|---|---|
| ауылда́ | беҙҙең уҡыусыбы́ҙ |
| ауы́л да | беҙ – уҡыусы́быҙ |
| ҡайтҡанда́ | йыя́һығыҙ |
| ҡайтҡа́н да | йыяла́р |

## ЯҠШЫ ҺҮҘ – ЙӘН АҘЫҒЫ

*(Башҡорт халыҡ әкиәте)*

Бер ярлы кеше, тимерсегә ялланып, егерме йыл буйына уға тырышып хеҙмәт иткән. Тәүҙә өйҙәгеләрен бик һағынған, торараҡ бындағы тормошҡа өйрәнеп киткән. Олоғая килә, үҙенең иҫәбе менән, ат алырлыҡ аҡса тупланғас, тыуған ауылына ҡайтырға булған да, тимерсегә килеп:

– Эш хаҡтарымды түлә инде. Тыуған еремә, балам, бисәм янына ҡайтайым, уларҙы күрмәгәнгә егерме йыл булды бит инде хәҙер, – тигән.

– Мин һине үҙ улым кеүек күреп яраттым, һиңә бик ныҡ өйрәнгәйнем бит әле. Тағы ла бер-ике йыл ғына эшлә инде, – тигән тимерсе.

– Юҡ, юҡ, башҡаса ҡала алмайым. Мин киткәндә, бисәм: «Һине теп-теүәл егерме йыл көтөрмөн», – тип ҡалғайны. Егерме йыл тулғас, ул минең йортомдо ташлап сығып китәсәк, – тигән, ти, ярлы.

– Улайһа, бер ни ҙә эшләп булмай инде, алырһың эш хаҡыңды, – тигән дә, ти, тимерсе, һандығынан өс алтын сығарып, ярлыға тотторған.

– Һинең хеҙмәтең өсөн күберәк тейеш тә бит, минең шунан артыҡ малым юҡ шул. Быны ла ҡара көнгә тип кенә һаҡлағайным. Аҙ булһа ла, ихлас күңелемдән бирәм. Кәрәк булһам, тағы килеп сыҡ. Асыҡ сырайым менән ҡаршы алырмын. Үҙем донъя ҡуйғанда, тимерлекте һиңә мираҫ итеп ҡалдырырмын, – тигән, ти, ул.

Ярлы шул өс алтынды алған да, тимерсе менән хушлашып, ҡайтырға сыҡҡан. Юлда ул өс юлсыны осратҡан. Уларҙың икәүһе йәш, береһе бик оло йәштә булған. Ярлы юл буйынса йәштәр менән һөйләшеп килгән, ә ҡарт ауыҙ асып бер һүҙ ҙә өндәшмәгән, һорауҙарға ла яуап бирмәгән. «Йә һаңғырау, йә телһеҙҙер был», – тип уйлаған ярлы. Кilә торғас, түҙмәгән, йәштәрҙән:

– Был ниндәй ҡарт? – тип һораған.

– Беҙҙең атай, – тигән егеттәр.

– Ниңә ул йә йылмая, йә бик моңһоу күренә?

– Сөнки ул ҡоштар телен аңлай. Бәлки, ана тегендә, урман эсендә, һайрашҡан ҡошсоҡтарҙың йырын тыңлайҙыр ҙа улар менән йә шатлана, йә ҡайғыра торғандыр.

– Ә ниңә ул бер һүҙ ҙә өндәшмәй, әллә һөйләшә белмәйме? – тип һораған ярлы.

– Ул бушҡа ғына ауыҙын асмай.

– Ауыҙын асып, берәй һүҙ әйтһен өсөн, уға күпме түләргә кәрәк һуң?

– Бер өндәшһен өсөн, бер алтын түләргә кәрәк.

Кеҫәһендә өс алтын тәңкә ятҡан ярлы: «Донъя тишеген былар менән генә томалап булмаҫ барыбер, бирәйем шул тәңкәнең береһен, исмаһам, бер яҡшы һүҙ ишетермен», – тип уйлаған да, бер тәңкәһен алып, ҡартҡа һуҙған. Ҡарт, аҡсаны алыу менән:

– Буръяҡ һыуға кермә! – тигән дә йәнә тынған.

Улар бергәләп юлдарын дауам иткәндәр. Ярлы, таяҡ таянып аҡрын ғына атлаған ҡартҡа ҡарап: «Ҡыҙыҡ ҡарт.

Ҡоштарҙың телен аңлай, үҙенең һәр һүҙе өсөн аҡса талап итә. Икенсе тәңкәмде лә бирһәм, ни тиер икән?» – тип уйланып килгән дә, мин бөлгәндән кем көлгән, тип, ҡартҡа икенсе тәңкәһен дә биргән. Ҡарт аҡсаны кеҫәһенә һалған да:

– Бөркөт һауалаған ерҙә ем булыр, – тигән дә йәнә тынған.

Ярлы, елкәһен тырнап: «Күпме тапҡыр бөркөттөң һауалағанын күргәнем бар, шул ерҙә ниндәй ем бар икәнен ҡарағаным юҡ. Берәй ҡарарға кәрәк әле», – тип уйлаған да һуңғы тәңкәһен дә ҡартҡа биргән.

– Ашыҡҡан – ашҡа бешкән, – тигән ҡарт.

Бер аҙ барғас, өс юл сатында айырылышҡандар, ти, былар: ҡарт улдары менән үҙ юлын дауам иткән, ярлы тыуған яҡтарына табан киткән. Бер аҙҙан ул бер йылға буйына килеп сыҡҡан, һыуы шундай буръяҡ икән, бик шәп аға, ти. Йылғаны кисеп сығайым тип, итеген сисә башлаған икән, теге ҡарттың «Буръяҡ һыуға кермә!» тигән һүҙҙәре иҫенә төшкән. «Туҡта, әҙерәк ашап, хәл йыйып алайым әле, шунан йә кисеү, йә берәй күпер эҙләп китермен», – тип уйлаған, ти, был һәм, тоҡсайынан икмәк сығарып, ашай ғына башлаған икән, эргәһенә бер һыбайлы сауҙагәр килеп сыҡҡан, ти.

– Эй, дуҫ кеше, – тип ҡысҡырған ул. – Ниңә аръяҡҡа сыҡмай ултыраһың?

– Буръяҡ һыуға кергем килмәй, – тип яуап биргән, ти, был.

«Бына аҡылһыҙ әҙәм», – тип уйлаған да сауҙагәр атын йылғаға табан ҡыуалаған. Көслө ағым һыбайлыны аты-ние менән әйләндереп-тулғандырып ағыҙып алып киткән, ти. Сауҙагәр батып үлгән, ә ат ярға йөҙөп килеп сыҡҡан. Теге ир уны йүгәненән эләктереп алған, ти. Ә бер аҙҙан ул йылға аша һалынған күперҙе лә эҙләп тапҡан, ти.

Батып үлгән сауҙагәрҙең атын меңеп ҡайтып килә, ти, был шулай. Килә торғас, Ирәндек тауы буйында һауалаған бөркөттө күреп ҡалған. Теге ҡарттың һүҙен хәтерләп: «Нимә бар икән унда, барып ҡарайым әле», – тип, барып ҡараһа, ни күҙе менән күрһен, унда ике мәйет ята, ә улар янында алтын тултырылған тоҡсай ята, ти. Төндә был ике юлбаҫар теге сауҙагәрҙе талағандар икән дә, табыш бүлешкәндә, еңешеп китеп, бер-береһен атҡандар ҙа үлтергәндәр, ти. Ярлы тоҡсайҙы алған да, тегеләрҙең пистолеттарын кеҫәһенә тығып, юлын дауам иткән.

Кискә табан ауылына ҡайтып еткән, ти, был. Емерелеп барған өйөнөң кескәй генә тәҙрәһенән килеп ҡараһа, өйҙә бының бисәһе бер йәш кенә егет менән әңгәмәләшеп ултыра, ти. «Алдаҡсы! Мине көтмәйенсә, кейәүгә сығып, нисек рәхәтләнеп ултыра!» – тип, ярлы асыуынан кеҫәһендәге пистолетын нисек тартып сығарғанын һиҙмәй ҙә ҡалған, ти. Шул саҡ йәнә теге ҡарттың һүҙҙәре иҫенә килеп төшкән. «Ашыҡҡан – ашҡа бешкән!» Шунан был: «Туҡта, тәүҙә нимә һөйләшкәндәрен тыңлайым әле», – тип, ҡолаҡ һалһа, теге егеттең: «Әсәй, иртәгә атайымды эҙләргә китәм, миңә юл кәрәк-яраҡтарын әҙерлә. Бик күп бит инде сығып киткәненә, һаман юҡ», – тигән һүҙҙәрен ишеткән. «Егерме йыл – аҙ ғүмер түгел инде, улым. Ул сығып киткәндә, һиңә ни бары өс кенә ай ине бит. Бәлки, иҫән дә түгелдер. Иҫән булһа, бер ҡайтыр ине», – тип бисәһе үкһей башлаған, ти. Быны ишеткән ярлы, ишекте шар асып, өйгә йүгереп килеп ингән, ти.

Шулай итеп, теге ҡарттан һатып алған өс ауыҙ һүҙ арҡаһында был кеше үлемдән ҡотолоп ҡалған, ҙур байлыҡҡа эйә булған һәм бисәһен, улын һәләк итеүҙән тыйылып ҡалған, ти. «Яҡшы һүҙ – йән аҙығы» тигәндәре ошолор инде.

1. Әкиәтте иғтибар менән уҡып сығығыҙ. Аңлашылмаған һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе күсереп алып, мәғәнәләрен асыҡлағыҙ.
2. Әкиәттең исеме ниндәй мәғәнәне аңлата? Уны русаға тәржемә итегеҙ.
3. Ҡарттың ярлыға әйткән өс һүҙен дә яҙып алығыҙ. Ярлы, уларҙы һуңғы аҡсаһына һатып алып, дөрөҫ эшләгәнме? Уның урынында һеҙ ни эшләр инегеҙ?
4. Нимә ул *асыҡ сырай менән ҡаршы алыу? Асыҡ сырай* һүҙбәйләнешенә синонимдар, антонимдар табығыҙ. Уларҙың барыһын да бер үк һөйләм контексына ҡуйып яҙығыҙ. Мәғәнә үҙгәрҙеме?
5. Нимә ул *ҡара көн?* Аҡ, ҡыҙыл, зәңгәр һ. б. көндәр ҙә буламы?
6. *Донъя ҡуйыу* һүҙбәйләнешенең синонимдарын табып, уларҙы русаға тәржемә итеп яҙығыҙ.
7. Ата-әсәләрегеҙҙең, ололарҙың үҙ-ара һөйләшеүҙәренә, һеҙгә әйткән һүҙҙәренә иғтибар итегеҙ. Уларҙың һеҙгә файҙаһы тейгән, фәһемле йәки ғибрәтле һүҙҙәрен дәфтәрегеҙгә яҙып барығыҙ.

**8.** Ололарҙан үҙегеҙ ишеткән берәй ғибрәтле һүҙгә әкиәт уйлап сығарығыҙ.

**9.** Мәҡәлдәрҙең мәғәнәләренә төшөнөгөҙ.

Уңған эшләшергә килер, ялҡау ашашырға килер.

Уңғандың яланын ҡар баҫыр, ялҡауҙың аранын ҡар баҫыр.

Ялҡауға эш өйрәтһәң, ул һиңә аҡыл өйрәтер.

Ҡалған эшкә ҡар яуа.

Эшле килер – эш арттырыр, эшһеҙ килер – эш ҡалдырыр.

Эше юҡтың ашы юҡ.

*Рәми ҒАРИПОВ*

## ТУҒАН ТЕЛ

Эй туған тел, эй матур тел,
Атам-әсәмдең теле!

*Ғ. Туҡай*

Мин халҡымдың сәскә күңеленән
Бал ҡортондай ынйы йыямын.
Йыямын да – йәнле ынйыларҙан
Хуш еҫле бер кәрәҙ ҡоямын.

Шуға ла мин беләм тел ҡәҙерен:
Бер телдән дә телем кәм түгел –
Көслө лә ул, бай ҙа, яғымлы ла,
Кәм күрер тик уны кәм күңел!..

Халҡым теле миңә – хаҡлыҡ теле, –
Унан башҡа минең илем юҡ;
Илен һөймәҫ кенә телен һөймәҫ,
Иле юҡтың ғына теле юҡ!

Әсәм теле миңә – сәсән теле –
Унан башҡа минең халҡым юҡ,
Йөрәгендә халҡы булмағандың
Кеше булырға ла хаҡы юҡ!

1. Таныш булмаған һүҙҙәрҙе табығыҙ, мәғәнәләренә төшөнөгөҙ, дөрөҫ әйтергә, үҙегеҙҙең телмәрегеҙҙә ҡулланырға өйрәнегеҙ. Был һүҙҙәр менән һүҙбәйләнештәр, һөйләмдәр төҙөп яҙығыҙ, һөйләмдәрегеҙҙе руссаға тәржемә итегеҙ.
2. *Сәскә күңел, йәнле ынйылар, кәм күңел* һүҙбәйләнештәренең мәғәнәләрен аңлатығыҙ, уларҙа шағирҙың нимәне күҙ уңында тотҡанлығына төшөнөгөҙ.
3. Туған телдең бөйөклөгө, уның кеше тормошондағы әһәмиәте ниндәй юлдарҙа асыҡ күренә?
4. Шиғырҙы башҡа шағирҙарҙың туған телгә арналған шиғырҙары менән сағыштырығыҙ, улар араһында оҡшаш һәм айырмалы яҡтарҙы табырға тырышығыҙ.
5. Туған телегеҙ тураһында шиғыр яҙығыҙ, унда туған телегеҙгә мөнәсәбәтегеҙҙе белдерергә тырышығыҙ.
6. Шиғырҙы ятлағыҙ.
7. *«Әсәм теле – сәсән теле»* тигән темаға ҡыҫҡа ғына инша яҙығыҙ.
8. Рәми Ғарипов тураһында белешмә төҙөп яҙығыҙ.

*Әнүр ВАХИТОВ*

## ҺҮҘ ХАҠЫНДА БАЛЛАДА

Беҙ тормошта шуға иғтибар итмәйбеҙ: кеше үҙ ғүмерендә күпме яҡшы эш эшләй, башҡаларҙы ҡыуандыра, хатта бәхетле итә – ул ниндәйҙер дәрәжәлә һүҙгә, беҙ һөйләгән хәбәргә, әйткән һүҙгә бәйләнгән. Әҙәм балаһы хата яһай икән, был да ҡайһы саҡта ул әйткән һүҙгә эйәреп сыға. Һүҙҙең ҡәҙере, көсө-ҡеүәте лә шундалыр, моғайын. *Кеше һүҙе кеше үлтерә,* тип юҡҡа әйтмәгәндәрҙер, күрәһең. Ә бит ысынында һүҙ кешене һәр яҡлап дауаларға, яҡшыға илтергә тейеш...

Әле мин бына Әхмәҙулла бабайҙан яҡты, бай күңелле кешеләр – көрәшселәр йәки ҡара эсле бәндәләр хаҡында күпме хикәйәт ишетһәм, уларҙың барыһы ла ана шул һүҙҙә, телебеҙҙә һаҡланған. Әхмәҙулла бабай уларҙың күбеһен боронғоларҙан аманат итеп ҡабул иткән һәм аманат итеп миңә тапшырҙы. Ә ҡайһы берҙәренә үҙе шаһит булған. Әммә кешегә йәшәй белеү нисек кәрәк булһа, һүҙҙе башҡаларға еткерә белеү ҙә шулай уҡ мөһим. Еңел-елпе һөйләшкән кешенең үҙен дә халыҡ юҡҡа ғына еңел аҡыллы тип атамайҙыр, моғайын. Тимәк, һүҙ әйтә белеү – үҙе аҡыллылыҡ билдәһе, боронғоларҙың тәжрибәһен күңелеңдә һаҡлай белеү оҫталығы икән. Был фекерем, Әхмәҙулла бабайҙың хикәйәттәрен тыңлағас, тағы ла нығынды. Китер саҡта ул миңә һүҙ көсө, һүҙ һөйләй белеү хаҡында тағы бер хикәйәләне. Мин уны **баллада** тип атаным...

* * *

Миңә китергә ваҡыт еткәйне инде. Хушлашырға тип барһам, Әхмәҙулла бабай ҡайҙалыр китергә тора.

– Һау бул, Әхмәҙулла бабай, – тинем мин, уның янына барып, – миңә китергә лә ваҡыт.

Бараһы ауылымды әйткәс, Әхмәҙулла бабай:

– Бәй, мин дә шул яҡҡараҡ барырға тип йыйынып торам бит. Әйҙә, улайһа, «Туғандар ҡәберлеге»нән тура юл өйрәтер ҙә ебәрермен, – тине.

Беҙ юлға сыҡтыҡ. Әхмәҙулла бабай һүҙһеҙ генә атлай. Бер аҙ барғас, ул, миңә ҡарап:

– Асыуланмаһаң, бер нәмә әйтәйем әле, улым, – тине.

– Йә, йә, әйт, бабай!

– Һеҙ, йәштәр, шулай ҙа һүҙҙең ҡайҙан килеп, ҡайҙа киткәнен онотоп ебәрәһегеҙ. Бына минең балаларым мәктәптә уҡыны, радио ла һөйләп тора, үҙем дә иҫкесә лә, яңыса ла һупалайым. Әммә бер нәмәгә эсем боша. Мәжит Ғафури хаҡында ла, Туҡай менән Бабич хаҡында ла күп яҙалар. Тик, әллә ни эшләп, Аҡмулла тураһында – ләм-мим. Эш ҡайҙан башлана, ҡайҙа бөтә – шуны онотҡанлыҡтан был. Аҡмулла һүҙен дауам иткән кеше ул Ғафури, белгең килһә. Башҡалары ла шул... Боронғолар үҙҙәренең ҡобайырында һүҙҙе бик ололағандар. Уны йәштәргә аманат итеп ҡалдырғандар, хыянат итмәҫкә васыят иткәндәр уға. Ә һеҙ хыянат итәһегеҙ...

Ҡарт, тынып, бер аҙ уйланып барҙы, тәрән итеп көрһендө лә мине аптырауға һалған һүҙен дауам итте:

– Бына мин дә, улым, һиңә боронғолар тураһында халыҡ һүҙҙәрен генә һөйләнем. Аманат итеп кенә тапшырҙым. Шуны әйткем килгәйне минең. Әгәр яҙып сыҡһаң, һүҙемде боҙма, һүҙ – ғәжәп нәмә ул. Шул хаҡта бер ғибрәт һөйләйем әле үҙеңә. Бәлки, фәһемен алырһың...

Революцияға тиклем беҙҙең ауылда кеше менән бик ҡатышмай, шым ғына йәшәп ятҡан бер ағай бар ине. Дәүләтбай исемле ине ул. Ғәҙәттә, ауыл кешеләренең ҡушаматы була торғайны элек. Әллә был, тәрән йылға кеүек, тын ғына кеше булғанға, уға ҡушамат бирмәгәйнеләр. Ул иртәнән ҡара кискә тиклем үҙ ояһында быстырлай, хатта төрлө йыйындарҙа, мир сходтарында да тауышланмай торғайны.

Бына революция булып китте. Ҡайҙандыр аҡтар килеп сыҡты, ауылдар буйлап әле аҡ, әле ҡыҙыл сабып йөрөнө. Замана ҡатмарланды, юлға сығыу – этлеккә, һүҙ әйтеү баш ашауға әйләнде.

Шулай, ун һигеҙенсе йыл ине. Яҙмы, көҙмө – асыҡ ҡына хәтерләмәйем. Әммә һалҡынсараҡ көн ине. Ҡайҙандыр ер һелкетеп, ауылға аҡтар килеп тулды. Тулдылар ҙа, өй беренсә йөрөп, халыҡты сходка ҡыуа башланылар. Ҡамсылар уйнап ҡына тора, ҡарышҡандарҙың баш осонда ҡылыстар ялтырай. Бына шулай халыҡты йыйҙылар ҙа үҙҙәре, йыйынға ҡаршы теҙелеп, яр һалдылар:

– Һеҙҙең ауылдың кешеләре беҙҙең походный штабты туҙҙырған. Шулар үҙҙәре баш һалһын.

Халыҡ өндәшмәй. Тәүҙә аптырап ҡалдылар. Йөҙҙәренән шикләнеү, шунан һуң икеләнеү шәүләһе йүгереп үтте. Күптәр, аҡтарҙың холҡон белгәнгә, сираттағы «батырлыҡтарын» күрһәтергә ҡулдары ҡысыйҙыр, тип уйлай.

Һүҙҙе тегеләрҙең ас күҙле, яшыҡ бер атамандары тағы ҡабатлай:

– Әгәр ҙә бандиттар шайкаһы үҙе теләп баш һалмай икән, бәлки, уларҙы белеүселәр барҙыр? – Шунан теге халыҡтың тыныслығы уның күңеленә тейҙе булһа кәрәк, ул аҡырып ебәрҙе: – Һеҙ барығыҙ ҙа бер сыбыҡтан ҡыуылғанһығыҙ!..

Халыҡ һаман тын. Кешеләрҙең йөҙөндә әллә яңы ҡабарып сыҡҡан болот ҡараңғылығы сағыла, әллә нахаҡҡа рәнйетел-

гән күңел шулай һөрөмөн ҡоя. Улар, тотош бер өйкөм булып, тотош бер стена булып торалар ҙа торалар.

Мулла түҙмәне:

– Йә, йәмәғәт, ауыҙығыҙға һыу уртламағанһығыҙҙыр бит, ғәйеплеләрҙе тотоп бирергә кәрәк, – тип тынлыҡты боҙҙо.

Мулланың һүҙен ҡеүәтләп, байҙар ҙа ҡуштанланды. Ә халыҡ тора бирә. Ул мулласа уйламай.

Халыҡ төркөмөнөң бер яҡ ситендә әлеге Дәүләтбай тора. Ул был фажиғәле минуттарҙы үҙенсә кисерә. Үҙенсә уйлай. Ҡуйы, бөркөт ҡанаты кеүек ҡаштары аҫтынан ул бер аҙ ҡыҫыҡ, үткер күҙҙәрен әле халыҡҡа, әле муллаларға күсерә, һалдаттарға һөҙөп ҡарап ала. Унығ да эсе яна.

«Һуң, был тиклем халыҡты ни эшләтә ала был бандиттар? Бер төптән булырға ла, бөтәбеҙ ҙә ҡатнаштыҡ, тиергә лә ҡуйырға ине... Моғайын, бөтөн халыҡҡа хаслыҡ ҡылырға намыҫтары етмәҫ ине», – тип уйлай Дәүләтбай ағай.

Сходта шулай өс төркөм тора, өс төркөм өс төрлө уйлай. Ә ваҡыт үтә. Аҡтар тынысһыҙлана бара.

– Һуңғы тапҡыр иҫкәртәм, – тип ҡысҡыра атаман, ҡылысын ҡынынан һурып, – һуңғы тапҡыр. Үкенерлек булмаһын!

Халыҡ тын тора. Атамандың һүҙҙәре, гүйә, уларға килеп етә лә кире ҡаҡлыға... Байҙар төркөмө ығы-зығылана, ә Дәүләтбай үҙен саҡ тыйып тора. Офицер һалдаттарға ниҙер әйтте. Мылтыҡтар шылтыраны. Кешеләрҙең йөҙө тертләгәндәй булды. Тик ҡуҙғалыусы булманы. Ә көбәктәр халыҡҡа ҡарай ине.

Мулла тағы:

– Йәмәғәт... – тип һүҙ башлағайны, унығ бисәләрҙеке кеүек нәҙек сыйылдауын, ер аҫтынан ишетелгәндәй, гөрләп сыҡҡан тауыш күмеп китте:

– Был эш обще эшләнде. Ғәйеплеләр юҡ!

Кешеләр быны кем әйткәнен абайларға ла өлгөрмәнеләр, атамандың уҫал шатлыҡтан ҡарлыҡҡан тауышы ишетелде:

– Әһ-һә, обще! Обще и үлегеҙ! Атырға!

Залп яңғыраны. Ыңғырашыу, йөҙҙәрсә кеше тауышынан сыҡҡан аһылдау тирә-яҡты тетрәтеп ебәрҙе. Ҡарғыш, һүгеш, шау-шыу, илаш, йүгереш – ғөмүмән, ҙур ығы-зығы башланды. Шуны ғына көткән кеүек, ямғыр яуа башланы. Аҡтар аттарына атландылар ҙа ҡайҙалыр саптырып китеп юғалдылар. Ерҙә үлектәр, яралы кәүҙәләр ятып ҡалды. Улар араһында

бирәү, аҡылынан шашҡан шикелле, сәстәрен йолҡколап, ерҙә аунай, үҙен үҙе белештермәй, үкереп илай. Был – Дәүләтбай ағай ине.

Бер аҙҙан майҙандан үлектәрҙе йыйып алдылар, яралыларҙы алып ҡайттылар.

Иртәгеһенә үлгәндәрҙе күмергә булғас, мулла уларҙы элекке зыяратҡа ерләргә рөхсәт итмәне. «Улар кафыр киттеләр»,– тине. Шуға халыҡ бына ошо имәнлекте яңы зыярат яһаны, – тип, Әхмәҙулла бабай бейек, матур имәнлеккә күрһәтте, – күмергә бөтә халыҡ килде. Яралы булыуына ҡарамаҫтан, Дәүләтбай ағай ҙа килгән. Бер көн эсендә ул шул тиклем үҙгәргәйне. Төҙ, ныҡ кәүҙәһе бөкрәйеп, йоҡарып киткән, кисә генә ҡара булған сәсе хатта һаҡал-мыйығына тиклем ап-аҡ булған. Элекке мөһабәт ирҙән олпат ҡартҡа әйләнгәйне ул. Һүҙһеҙ генә ярҙамлашып йөрөнө лә ул, ҡәбер тупрағына эйелеп, ерҙе үпте һәм, бөтә кешеләргә ишеттерерлек итеп:

– Мин һеҙҙең алдағы ғәйебемде ҡаным менән йыуырмын, туғанҡайҙар, – тине. Шунан аҙаҡ был ҡәберлекте «Туғандар ҡәберлеге» тип йөрөтә башланылар...

Әхмәҙулла бабай туҡтаны. Үҙе, тәрән уйға батҡан кеүек, тирә-яғына һөҙөп ҡараны.

Мин түҙмәй инем.

– Шунан, аҙаҡ ни булды? – тип һорағанымды һиҙмәй ҙә ҡалдым.

–Ни булһын? Дәүләтбай ағай аҡтарға күрмәгәндәрен күрһәтте. Йәшен булды ул уларға. Беҙҙең тирәлә Граждандар һуғышы осоронда орден алған кеше ул ғына булды. Тик үҙе ошо көндәрҙе күрә алманы...

–Ни эшләп?

–Донъя тынысланғас, ауылға бөтөнләйгә ҡайтып килгәндә, Ямас тигән урманда уға әллә ҡайҙан эҙәрләп килгән бандиттар һөжүм итә. Дәүләтбай ағай тыныс ҡына йырлап килә икән. Күп ер үтеп, аты ла талыҡҡан булған. Шул ваҡыт быны ҡаршыһына теге юлбаҫарҙар килеп сыҡмаһынмы! Бандала унлап кеше була, теге ваҡыттағы атаман да бар икән.

– Әһ-һә, – тип ҡысҡырған атаман, – «обще» абзый, күптән һағындырғайның, ҡулдарҙың ҡысыуын баҫырға була, былай булғас...

– Ах, аяҡлы имгәк, һин һаман тереме ни әле?! – тип тегенең үҙенән дә яман аҡырған Дәүләтбай ағай һәм ҡынынан ҡылысын һурған.

Һуйыш башланған. Шул тиклем ярһып һуғышҡан Дәүләтбай ағай – офицерҙы уртаға ярып төшөргән, тағы өс-дүрт бандитты дөмөктөргән. Шунан, уңайлы мәлде генә һайлап, атына ҡысҡырып ебәргән.

Ҡош булып осҡан улар. Тик бер пуля ҡыуып еткән уны. Тап күкрәгенә инеп ултырған. Ләкин туҡтамаған Дәүләтбай ағай. Үлерен белгән, шуға һуңғы тапҡыр тыуған ауылын күргеһе, «Туғандар ҡәберлеге»нә баш эйгеһе килгән уның.

Йәйге матур көн ине. Ауылға һуңғы сиккә етеп ярһыған атының ялына һуңғы көсө менән тотоноп елеүсе бер һыбайлы килеп инде. Атты кәнсәләр янында торған ирҙәр саҡ тотоп алды. Кешене эйәрҙән алһалар – Дәүләтбай ағай! Уның йөҙө сепрәк төҫлө ағарған, ҡан әҫәре юҡ. Арҡаһына ла, түшенә лә ҡан һарҡып сыҡҡан. Бер нисә көндән уға саҡ ҡына хәл керҙе, һәм ул «Туғандар ҡәберлеге»нә барып баш эйҙе.

– Әйткән иҫәр һүҙем менән тарыған оло ғәйебемде йыуып бөтөрә алмаған булһам, кисерерһегеҙ, туғандар. Инде үҙемә лә һеҙҙең янға... килергә ҡалды... – Ул, ҡәбергә ятып, тағы ла ерҙе үпте.

Иртәгеһенә уны ҙур хөрмәт менән «Туғандар ҡәберлеге »нә күмделәр...

Әхмәҙулла бабай һүҙен бөтөрҙө, һөйләгән ваҡиғалар тәьҫирендә бер аҙ тын ултырҙыҡ. Шунан ул, миңә ҡарап:

– Бына, ысын ир һүҙе шулай була, – тине. Ул ниңәлер моңһоу бер тантана менән йылмая ине. Бер аҙҙан тағы өҫтәп ҡуйҙы:

– Анау йүнһеҙ көтөүсе малай ҡәберлекте малынан тапатҡан. Шуға кәртәһен йүнәтергә килгәйнем.

Ул урынынан торҙо. Мин дә, уға рәхмәт әйтеп, юлымды дауам иттем.

1. Һүҙлек эше башҡарығыҙ: таныш булмаған һүҙҙәрҙе яҙып алығыҙ, уларҙың кемгә йәки нимәгә ҡарата ниндәй осраҡта ҡулланылғанын асыҡлағыҙ. Ата-әсәләрегеҙҙең, ололарҙың телмәренә иғтибар итегеҙ – улар был һүҙҙәрҙе ҡулланамы-юҡмы икәнен һәм уның сәбәбен асыҡлағыҙ.
2. Кемдәр ул *ҡара эсле бәндәләр?* Ҡыҙыл, йәшел, һары йәки зәңгәр эсле кешеләр ҙә буламы? *Ҡара* һүҙенең төрлө осраҡта төрлө мәғәнәлә ҡулланылыуына иғтибар итегеҙ, миҫалдар килтерегеҙ.

**3.** Нисек була ул *еңел-елпе һөйләшеү? Һөйләшеү* һүҙенә тағы ниндәй эпитеттар ҡушып була?

**4.** *Еңел аҡыллы* тигәндең мәғәнәһенә төшөнөгөҙ. Кешенең аҡыл кимәлен белдереүсе тағы ниндәй һүҙҙәр бар?

**5.** *Иҫкесә лә, яңыса ла һупалайым*, ти Әхмәҙулла бабай. Ул нимәне күҙ уңында тотҡан? Ниңә ул *таныйым (уҡыйым, яҙам)* тиер урынға *һупалайым* тип кенә әйтә?

**6.** *Юлға сығыу – этлеккә, һүҙ әйтеү – баш ашауға әйләнде* тигән һөйләмдең мәғәнәһен аңлатығыҙ. Ошонан сығып, шул заман тормошон тасуирлап ҡарағыҙ.

**7.** *Ҡулдары ҡысый; Бер сыбыҡтан ҡыуылғанһығыҙ; Ауыҙына һыу уртлаған; Һөҙөп ҡарай; Ғәйебемде ҡаным менән йыуырмын; Күрмәгәндәрен күрһәтте* һөйләмдәрен үҙегеҙсә үҙгәртеп, тултырып яҙығыҙ. Килеп сыҡҡан яҙмағыҙҙы руссаға тәржемә итегеҙ.

**8.** Әҫәрҙе автор ни өсөн *баллада* тип атаған? Һүҙлектән ҡарап, балладаның билдәләмәһен бирегеҙ.

**9.** Әхмәҙулла бабай авторға ҡайһы осор ваҡиғаларын һөйләй? Һеҙ быны нимәгә ҡарап белдегеҙ? Текстан үҙегеҙҙең фекерегеҙҙе дәлилләүсе миҫалдар килтерегеҙ.

**10.** Дәүләтбай ағай үҙен нимәлә ғәйепле һанай? Текстан ошо урындарҙы табып уҡығыҙ.

**11.** Дәүләтбай ағай образына тулы характеристика бирегеҙ. Уға хас сифаттарҙы дәфтәрегеҙгә яҙып, руссаға тәржемә итегеҙ. Был сифаттарҙың ҡайһыһы һеҙҙә бар, ҡайһыһы – юҡ?

**12.** Әхмәҙулла бабай авторға ниндәй үпкә белдерә? Текстан шул урынды табып уҡығыҙ. Нисек уйлайһығыҙ: ул һеҙгә лә шулай үпкәләр инеме икән?

**13.** *Абайламай әйткән – ауырымай үлгән* тигән әйтемдең мәғәнәһе нимәлә? Был әйтем беҙҙе нимәгә өйрәтә? Һөйләй белеү, һүҙ ҡәҙере, һүҙ баһаһы тураһында һеҙ үҙегеҙ ниндәй мәҡәлдәр, әйтемдәр беләһегеҙ? Китаптарҙан ҡарап, ололарҙан һорашып, дәфтәрегеҙгә ошондай мәҡәл, әйтемдәрҙе яҙығыҙ. Кемдеке күберәк булыр?

**14.** *Ысын ир һүҙе шулай була,* ти Әхмәҙулла бабай. Текстың йөкмәткеһенән сығып, быны асыҡлағыҙ.

**15.** Һүҙҙең тағы ниндәйҙәре була? Яҙығыҙ:

ир һүҙе
егет һүҙе
ололар һүҙе
... һүҙе

**16.** *Ҡош булып осҡан улар* тигәнде һеҙ нисек аңланығыҙ? Ошо абзацты диктант итеп яҙығыҙ. Эштәрегеҙҙе үҙегеҙ баһалағыҙ.

**17.** Әхмәҙулла бабай ниндәй шағирҙарҙың исемдәрен телгә ала? Улар тураһында белгәндәрегеҙҙе иҫегеҙгә төшөрөгөҙ.

**18.** Әнүр Вахитов Әхмәҙулла бабайҙан тағы бик күп хикәйәттәр яҙып алған. Һеҙҙә уларҙы ла уҡыу теләге уянһа, авторҙың «Яҡты күңел» китабы буйынса бергәләп уҡыу ойоштороғоҙ.

## Һүҙ күрке – мәҡәл

Ауыҙҙағы һүҙгә һин эйә, ауыҙҙан сыҡҡан һүҙ һиңә эйә.

Белгәнеңде һөйләмә, ни һөйләгәнеңде бел.

Көйҙөргән дә тел, һөйҙөргән дә тел, бөлдөргән дә тел, көлдөргән дә тел.

Туған телен ҡәҙерләгән халыҡ ҡәҙерле булыр.

Оҫта барҙа ҡулың тый, сәсән барҙа телең тый.

Телдәр белгән – илдәр белгән.

# Башҡорттар китте һуғышҡа

*Яныбай ХАММАТОВ*

## БАШҠОРТТАР КИТТЕ ҺУҒЫШҠА...

*(Өҙөк)*

Егерме икенсе ғинуарҙың төн уртаһы еткәс, лейтенант Атаев үҙ яугирҙары менән гитлерсылар ҡулындағы ҡалҡыулыҡты штурмлай башланы.

Был ҡышҡы төн үтә һалҡын һәм ҡараңғы ине.

Тирә-яҡ тып-тыныс. Бер-бер артлы барған яугирҙарҙың аяғы аҫтында ҡар ишетелер-ишетелмәҫ шығырлай.

Төньяҡ Донецтың йоҡа боҙо өҫтөнән һаҡлыҡ менән генә икенсе ярға сыҡҡас, Атаев:

– Бик һаҡ булығыҙ, иптәштәр. Минерҙар билдәләгән юлдан ғына барығыҙ, – тип иҫкәртте.

Яугирҙар, текә ярҙың һөҙәгерәк урынын ҡарап, тәрән көрткә бата-сума юғарыға ыңғайланы. Өс-дүрт километр самаһы араны уҙып, ҡалҡыулыҡ түбәһендәге дошмандың ут нөктәләренә яҡынлаша башлағас, лейтенант Атаев ерҙән шыуышып барырға ҡушты.

Взвод командирынан ҡалмаҫҡа, нисек тә булһа уға яҡынырaҡ барырға тырышып, Зәки Байдәүләтов тәгәрмәстәре ҡыҫҡа ғына саңғыға беркетелгән станоклы пулемётты ҡар өҫтөнән һөйрәтеп килтергән Мөхәммәтҡазы дуҫына ярҙамлашты.

Ҡуйы ҡараңғылыҡҡа сумған 79,9 ҡалҡыулығында һаман тыныс. Дошман ракеталары һауаға күтәрелгән ваҡытта дзоттарындағы пулемёттары ут бөркөп татылдай-татылдай ҙа йәнә тыныслана.

Яугирҙар, өс ҡатлы сәнскеле тимерсыбыҡты киҫеп, артабан шыуған саҡта, дошман дзотына яҡынлашыусы гитлерсыларҙың шәүләләре күренеп ҡалды. Унда смена алмашынырға тейешлеген аңлап алған взвод командиры Атаев, яугирҙарын эйәртеп, алға шыуышыуын белде. Ике дзот эсендәге гитлерсыларҙы хәнйәрҙәре менән сәнсеп үлтергәс, егеттәрҙең бер төркөмө траншеяларҙа бер-береһенә һыйынышып йоҡлап ятҡан дошман пулеметсыларын, ҡалғандары – блиндаждарҙа һәм землянкаларҙа ял итеүсе һалдаттарын ҡыйратырға тотондолар.

Блиндаждарҙың береһендә йыйылған немец офицерҙары тереләй бирелергә теләмәне. Быны күреп, Атаев:

– Гранаталар – яуға! – тип бойорҙо.

Ике сәғәткә һуҙылған аяуһыҙ ҡул һуғышынан һуң, яугирҙар ҡалҡыулыҡҡа хужа булды.

– Дуҫтарым, ҡалҡыулыҡ хәҙер беҙҙең ҡулда, – тине лейтенант Атаев. – Уны ҡулдан ысҡындырмай тотоуы бик ҡыйын буласаҡ. Ҡалҡыулыҡты ҡабат үҙ ҡулына төшөрөү өсөн, фашистар барлыҡ көсөн һаласаҡ. Әммә беҙҙең урын ошонда! Төп көсөбөҙ килеп еткәнсе, ошо урындан бер генә аҙым да сигенергә хаҡыбыҙ юҡ!

Яугирҙар, саҡ ҡына ла ял итмәйенсә, дошмандың ҡыйратылған нығытмаларын түңәрәк оборона өсөн әҙерләргә тотондо.

Таң беленгәндә ҡапыл көслө күк күкрәгәндәй булды. Шул уҡ минутта ҡалҡыулыҡ өҫтөнә бер-бер артлы снарядтар, миналар төшөп ярыла башланы. Тирә-яҡ ҡалтыранды, геүләне.

Тупҡа тотоу туҡталыу менән, Зәки Байдәүләтов йәшеренгән урынынан сыҡты.

– Әҙерләнергә! – тигән команда яңғыраны.

Күп тә үтмәне, ҡалҡыулыҡҡа күтәрелеүсе ике рота самаһы дошман һалдаты күренде. Улар, автоматтарынан атаата, өҫкә үрмәләй башланы. Уларҙы ҡул гранаталары ташларлыҡ яҡынлыҡҡа ебәрмәҫкә кәрәк ине. Байдәүләтов гашетҡаға баҫты. Пулемёт ярһып татылдарға тотондо. Уға ҡушылып, башҡа яуҙаштарының да ҡоралдары телгә килде.

Алдан килгән дошман һалдаттары сапҡан үлән һымаҡ ҡырыла торҙо, уларҙы арттағылары алмаштырҙы, бер-береһен ҡабаландырып, ҡысҡыраша-ҡысҡыраша килеүсе немецтарға егерме-егерме биш аҙымдар самаһы ҡалғас, улар

өҫтөнә гранаталар осто. Араларында үлеүселәр күбәйгән һайын, гитлерсылар ныҡыраҡ ҡоторондо. Улар һаман үрмәләнеләр, һәр метр ер өсөн өйөрө-өйөрө менән ҡырылдылар.

Дәһшәтле алыш бер генә минутҡа ла баҫылманы. Взводтағы кешеләр кәмегәндән-кәмей барҙы. Михаил Олейник бер үҙе ун ике гитлерсының башына етте, ун өсөнсөһө менән бергә үҙе лә ҡоланы. Улар артынса Әмир Баджанов, Исмаил Азаматов, Фуат Бәшәров, Мәхмүт Кәримов, Рәхмәт Әзимов, Малик Атаханов, Сәфәр Зыяев, Дәүләт Талағанов, Алексей Молчанов, Юлай Ситдиҡов һәләк булды. Ләкин алыш туҡталманы. Тере ҡалған яугирҙар тағы ла аяуһыҙыраҡ һуғышты.

Ике сәғәткә һуҙылған алышта гитлерсылар, лейтенант Атаев взводы тотҡан рубежды һуғышып ала алмайынса, кире сигенде. Яңыраҡ ҡына утлы өйөрмә уйнаған ҡалҡыулыҡта тып-тын булып ҡалды.

Әммә дошман оҙаҡ көттөрмәне. Күп тә үтмәй, ҡалҡыулыҡҡа үрмәләүсе уҡсылар батальоны күренде...

Гитлерсылар, һөмһөҙләнеп, бер туҡтауһыҙ атакаға килә торҙо, атаевсылар уларҙы шундай уҡ ныҡышмалылыҡ менән кире ҡаға торҙо. Ҡалҡыулыҡ бите немецтарҙың үләкһәләре менән тулды. Ләкин, күпме генә тырышһалар ҙа, дошмандар лейтенант Атаев взводынан ҡалған бәләкәй генә төркөм һаҡлаған рубежды ала алманылар. Уларҙың өҙлөкһөҙ атакалары, ҡараңғы төшә башлағас ҡына, туҡталды.

Иртәгеһенә, 24 ғинуар көндө, гитлерсылар таң менән тағы атакаға күтәрелде. Атаевсылар был атаканы ла кире ҡаҡты. Дошман көслө артиллерия уты асты. Бер-бер артлы төшөп ярылған снарядтар ерҙең аҫтын-өҫкә килтереп аҡтарҙы. Ҡалҡыулыҡтағы бөтә дзоттар ҙа ҡыйратылды. Дәүләт Әлибаев, Әкрәм Абдрахманов, сержант Александр Барсуков һәләк булды. Взвод командиры лейтенант Атаев шунда ла ҡалҡыулыҡты ҡалдырырға теләмәне. Артналёт бөтөп, төтөн, туҙан баҫылып та өлгөрмәне, дошман яғынан ун танкының, ер йыртып, үкереп килгәне күренде. Улар артынан бик күп гитлерсылар ябырылып килә ине.

Атаев үҙ командалығындағы кешеләрҙе аҙаҡҡы тапҡыр йыйҙы.

– Дуҫтарым, – тип өндәште ул уларға. – Беҙҙең сафта ни бары алты ғына һуғышсы ҡалды. Беҙҙең һәр беребеҙгә икешәр дошман танкыһы, унарлаған фашист һалдаты тура килә.

Әммә беҙҙең сигенергә хаҡыбыҙ юҡ! Беҙ аҡтыҡ минутыбыҙға саҡлы ғәзиз тыуған еребеҙ өсөн алышырға бурыслыбыҙ!

Яугирҙар шым ғына үҙҙәренә билдәләнгән урындарға таралыштылар.

Бик күп һалдаттарҙы эйәрткән дошман танкылары һаман яҡынлаша. Уларҙың хатта пулемёт көбәктәре, тәреләре лә ап-асыҡ күренә ине. Шул саҡ Байдәүләтовтан ун-ун биш аҙымда ғына урынлашҡан Келуб Беймуратов взводта иҫән ҡалған берҙән-бер ПТР-ҙан (противотанковое ружьё) ут асты. Дошмандың иң алдан килгән танкыһы яна башланы. Уның артынса икенсеһе лә, ҡара төтөнгә күмелеп, туҡтап ҡалды, ләкин өсөнсө танк Келуб Беймуратовтың үҙен ПТР-ы менән бергә иҙеп тапап китте. Мөхәммәтҡазы, яйын тура килтереп, уның аҫтына гранаталар бәйләме ырғытты. Танк, ҡара-ҡыҙғылт ялҡын сығарып, дөрләп яна башланы. Уның артынса килгән дүртенсе танк Мөхәммәтҡазыны иҙеп китте. Был танкыны лейтенант Атаев дөмөктөрҙө. Янған танкыларҙан һикерешеп сығыусы фашистарҙы автоматтан ҡырыусы Рәхим Баджаев бишенсе танкының аҫтында ҡалып һәләк булды. Ләкин был танк та йыраҡ китә алманы, брустверға һикереп менгән лейтенант Атаев уны гранаталар бәйләме менән «һыйланы». Лейтенант үҙе лә, граната ярсығы тейеп, яраланып йығылды. Яраһынан хәлһеҙләнеп барһа ла, Атаев тағы ике танкының башына етерлек көс тапты үҙендә. Тик шунан һуң ғына ул ҡанһырап ауҙы һәм мәңгегә хәрәкәтһеҙ ҡалды.

Взвод командирының һәләк булыуы Байдәүләтовты тетрәтте. Ул тиҙ тоҡана торған шыйыҡса тултырылған шешәләрен, гранаталарын барлап, ҡалған дошман танкыларына ҡаршы һуғышырға әҙерләнде. Танкыларҙың береһе, пушкаһынан ата-ата, Байдәүләтов йәшеренгән яҡҡа ыңғайланы. Уның моторы геүләүе, гусеницаларының шығырлауы һаман яҡыныраҡ ишетелде. Танк килеп етергә дүрт-биш метр самаһы ҡалғас, ҡапыл ҡалҡынған ыңғайына гранаталар бәйләмен ташланы ла Зәки траншея төбөнә сүкәйҙе. Ҡолаҡ тондорғос көслө шартлау тауышы яңғыраны. Зәки брустверҙан башын сығарып ҡарағанда, танк туҡтағайны. Шул саҡ уң яҡтан йәнә бер танкының яҡынлашып килгәне күренде. Зәки траншея буйлап уға ҡаршы йүгерҙе. Уңайлы ерҙе һайлап алып, гранаталар бәйләме һәм шыйыҡсалы шешә менән уныһын да яндырҙы. Дошмандың бер генә танкыһы ҡалды.

Ул туп-тура килә. Танкының яҡынлашыуын көсөргәнешлек менән көткән Байдәүләтов ҡапыл үҙенең быуындары йомшаыуын, хәлһеҙләнә башлауын тойҙо. Уның башы әйләнә, ҡоҫҡоһо килә башланы. Ул, барлыҡ көсөн йыйып, гранаталар бәйләмен ырғытты. Ләкин гранаталар танкыға барып етмәйенсә ярылдылар. Ярсыҡ тейеүҙән яраланып, Зәки траншея төбөнә ауҙы. Траншея өҫтөн шымартып уҙған танк гусеницаһынан ҡойолған тупраҡ менән ҡапланғас, ҡыбырларлыҡ та мөмкинлеге ҡалмаған Байдәүләтов һауаһыҙ тонсоҡто. «Бына ҡасан килде минең ысын үлемем!» – тигән ҡот осҡос уй менән ул иҫенән яҙҙы...

Үлемдән нисек ҡотолоуын, лейтенант Атаев взводынан тере йән эйәһе ҡалмаған 79,9 ҡалҡыулығына ҡабаттан хужа булған гитлерсыларҙың ҡыйратылыуы, башҡорт егеттәренең үҙен ҡаҙып алыуы һәм санитария эскадронына оҙатылыуы хаҡында аҙаҡтан, иҫенә килгәс кенә белде Байдәүләтов. Фронттағы барлыҡ гәзиттәрҙең сираттағы һанында Украина ерендә панфиловсыларҙың батырлығын ҡабатлаусылар тураһында яҙылыуы, ә корпус гәзитендә «В бой, кавалеристы!» тигән баш аҫтында фронтовик-шағир Виктор Головановтың атаевсыларға бағышланған шиғыры баҫылып сығыуы Байдәүләтовты бик ныҡ тулҡынландырҙы.

1. Тексты иғтибар менән уҡып сығығыҙ, һорауҙарға яуаптар рәүешендә уның йөкмәткеһен үҙләштерегеҙ.
2. Текстан һуғышҡа ҡағылышлы бөтә һүҙҙәрҙе һәм һүҙбәйләнештәрҙе яҙып алып, руссаға тәржемә итегеҙ. Уларҙың рус телендә һәм башҡорт телендә ҡулланылышында ниндәй оҡшашлыҡ һәм айырма күрәһегеҙ?
3. «Башҡорттар китте һуғышҡа...» – 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы тураһындағы әҫәр. Был дивизия тураһында һеҙҙең нимәләр уҡығанығыҙ, ишеткәнегеҙ бар ине? «Башҡорт кавалерия дивизияһы» тигән темаға кескәй белешмә төҙөп яҙығыҙ.
4. Ололарҙан һорашып, Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында башҡорттарҙан тағы ниндәй милли частар ойошторолоуы тураһында белегеҙ. Башҡа халыҡтарҙан да шундай милли частар булғанмы?
5. «Дәһшәтле алыш...» тип башланған абзацты диктант итеп яҙығыҙ. Диктанттарығыҙҙы алмашлап тикшерегеҙ, хаталарығыҙҙың сәбәптәрен асыҡлағыҙ, эшегеҙҙе үҙегеҙ баһалағыҙ.

6. Яныбай Хамматовтың тағы ниндәй әҫәрҙәрен беләһегеҙ? Улар һеҙгә оҡшанымы? Исемдәрен яҙып ҡуйығыҙ.
7. Башҡорт яҙыусыларының Бөйөк Ватан һуғышы тураһында тағы ниндәй әҫәрҙәрен беләһегеҙ? Үҙегеҙгә яҡшы таныш булған берәй әҫәр буйынса фекер алышығыҙ.
8. Мәҡәлдәрҙе уҡығыҙ. Мәғәнәләрен аңлатығыҙ.
   1. Дауға барғансы, яуға бар.
   2. Егет күрке дан менән, айғыр күрке ял менән.
   3. Батыр кәрәк яу килгәндә, түрә кәрәк дау килгәндә.

Башҡорт телендә сифат, исем алдында килгәндә, уның менән ярашмай, йәғни үҙгәрмәй. Ә рус телендә сифаттар, исем алдында килгәндә лә, исемдән башҡа ҡулланылһа ла, төрлөсә үҙгәрәләр.

Башҡорт телендә сифаттар, исемдән башҡа килһә генә, эйәлек заты, һан, килеш, хәбәрлек заты менән үҙгәрә ала.

**133-сө күнегеү.** Диалогтарҙы уҡығыҙ, ҡалын хәреф менән бирелгән сифаттарҙың ҡулланылыу формаларын күҙәтегеҙ.

1. – Ҡәләмеңде биреп тор әле!
   – Һиңә ниндәй ҡәләм кәрәк? Минең **йәшел, зәңгәр, ҡыҙыл** ҡәләмдәрем бар.
   – **Зәңгәрен** биреп тор.
2. – Был кофтаңды **йәшел** төҫкә буятаһыңмы?
   – Юҡ, **көрәнгә.**
3. – Һеҙ урманға **һалҡын** көндә барҙығыҙмы?
   – Эйе, һалҡында.
4. – Һин **йәш** кеше бит әле. Эйе, **йәшһең** әле.
5. – **Ҙур, ҡыҙыл** алмаларҙы ғына һайлап алғанһың икән.
   – Һин дә **ҙурҙарын, ҡыҙылдарын** ғына ал.

**134-се күнегеү.** «Аҡһаҡ ҡола» йырының һүҙҙәрен уҡығыҙ. Аттарҙың төҫтәрен белдергән һүҙҙәргә иғтибар итегеҙ.

Иртән дә тороп ҡараһам,
Аралап йөрөп байҡаһам,
Мундаһы бейек **күк ат** юҡ,
**Алма ла сыбар** дүнән юҡ,
Ҡарлуғас бот **ҡара ат** юҡ,
Балауыҙ төҫлө **һары ат** юҡ.

**байҡау** – тирә-яҡҡа ҡарау
**мунда** – аттың ҡулбашы өҫтөндәге ерҙән иң бейек урыны;
холка
**дүнән** – дүрт йәшлек айғыр
**балауыҙ** – воск

Иҫкәрмә: Түбәндәге һүҙҙәрҙе дөрөҫ уҡығыҙ.

күк ат – *күгат*
ҡара ат – *ҡарат*
һары ат – *һарат*

**135-се күнегеү**. Һәр төркөмдә ҡайһы һүҙ артыҡ? Ни өсөн?

Матурым, бәләкәйем, аҡҡошом, һылыуҡайым.
Йәшкелт, зәңгәрһыу, ап-аҡ, күкһел.
Тәмле аш, итле аш, бешмәгән аш, тоҙһоҙ аш.

## ШАЙМОРАТОВ ГЕНЕРАЛ

*Ҡадир ДАЯН шиғыры*
*Зәһир ИСМӘҒИЛЕВ көйө*

Башҡорттар китте һуғышҡа,
Оҙатып ҡалды күк Урал;
Ат уйнатып, алдан бара
Шайморатов генерал.

Шайморатов яу ҡырында
Дошмандарҙы көл иткән;
Утта янмай, һыуҙа батмай –
Һай, батыр ҙа ир икән.

Ватан өсөн йән ҡыҙғанмай
Һинең улдарың, Урал;
Шулар менән дошман ҡырҙы
Шайморатов генерал.

1. Тексты иғтибар менән уҡып сығып, ундағы фразеологик һүҙбәйләнештәрҙе күсереп алығыҙ, руссаға тәржемә итегеҙ.

2. Кем ул генерал Шайморатов? Уның тураһында һеҙҙең нимәләр уҡығанығыҙ, ишеткәнегеҙ бар? Белгәндәрегеҙҙе дөйөмләштереп, «Генерал Шайморатов» тигән темаға белешмә төҙөгөҙ.
3. Текст өҫтөндә тасуири уҡыу күнекмәләре үткәрегеҙ.
4. Йырҙың тексын ятлап, көйөн өйрәнеп, хор менән йырлағыҙ.

**136-сы күнегеү.** Хәрефтәр араһына ҡалған хәрефтәрҙе алфавит тәртибендә яҙығыҙ.

А, ... Ҡ.

**137-се күнегеү.** Түбәндәге һүҙҙәрҙең мөмкин тиклем күберәк синонимдарын табығыҙ.

Матур, алйот, ҡыйыу.

*Әнүәр БИКЧӘНТӘЕВ*

## БӨРКӨТ ҺАУАЛА ҮЛӘ

*(Өҙөк)*

...Дзотҡа ҡаршы көрәшеүҙең еңел түгел икәнен Саша яҡшы аңлай. Уның менән дзот араһында мең үлем һағалап тора. Ләкин иптәштәреңдең күҙ алдында барыу ниндәй бәхет! Бындай ҙур бәхет һәр ваҡытта ла һәм һәр кемгә лә эләкмәй.

Бына ниндәй ул – һуғыш майҙаны! Иптәштәре һалған эҙҙәр күптән инде артта ҡалды. Алда – Чернушкиға тиклем ҡар диңгеҙе ята. Анау ҡыуаҡтарға тиклем йүгереп кенә барып етке килә. Саша ул ҡыуаҡтар артында йәшеренергә теләмәй. Юҡ, уның өсөн ул ҡыуаҡтар тик яҡындағы маҡсат ҡына. Уға тиклем, күп булһа, ҡырҡ метр барҙыр. Был яуаплы сәғәттә, еңеү өсөн көрәш барғанда, бер генә метрға ла, хатта секундтың бәләкәй генә өлөшөнә лә, яңылышырға ярамай...

Фашистар бик һаҡ торалар. Улар Сашаны күреп ҡалдылар, буғай. Ул, ҡарға йәйелеп ятып, автоматтан ата башланы. Ҡулын һуҙып, аяҡтарын айыра – тик үлектәр генә шулай ята торғандыр. Баш осонан пулялар оса, улар төрлө яҡта – әле уңда, әле һулда, әле баш өҫтөндә, әле аяҡ осонда ҡар бураны күтәрәләр. Пулемёт шундай буран күтәрә алыр, тип ул бер ваҡытта ла уйламағайны.

Аяҡтарын йыйып, башын ҡар эсенә тәрәнерәк йәшергеһе, туптай йомарланғыһы килә. Ләкин ҡыбырларға ярамай. Үҙенән алда китеп һәләк булған иптәштәре кеүек, ҡуҙғалмай ятырға кәрәк.

Үлем һаман янда ғына йөрөй. Ошондай мәлдә дошманға ут менән яуап бирмәй ятыу ҡыйын. Ләкин түҙергә кәрәк, башҡа сара юҡ. Иренеңде сәйнә лә тын ғына ята бир, Сашок... Уға оса торған балаҫ та, үҙе йөрөй торған итек тә, хатта Т-34 танкыһының броняһы ла кәрәкмәй. Тик бер генә минут атмай торһондар ине.

Сашаның башында ниндәйҙер өҙөк-өҙөк уйҙар ҡайнаша. «Бөгөн Рәшиттең тыуған көнө...» – тип уйланы ул ҡапыл. Ғәжәп кеше ул Рәшит. Өфөнән киткән көндө Иҫке Өфөләге тау башында торғанда: «Бәхил бул, Өфөм!» – тигәйне. Мин уға: «Бәхилләшмә әле, хушлаш ҡына...» – тигәйнем. Бәхилләшеү менән хушлашыу араһында айырма ҙур шул...

...Лидаға тигән хатты ла яҙып бөтөрмәнем. Чернушкиҙа яҙып бөтөрөргә тура килер. Хәҙер Өфөлә нисек торалар икән? Бына минең һуғышыуымды күрһендәр ине. Ерән Митька көнләшеүенән шартлар ине. Ольга Васильевна, оҙатҡанда: «Һеҙҙең хаҡта быға тиклем бөтә эсәләрҙең эсәһе – Тыуған ил хәстәрлек күрҙе. Хәҙер инде һеҙ уны үҙегеҙ яҡларға тейешһегеҙ...» – тигәйне. Сашаны күрһә, ул ни әйтер ине икән?..

Сит уйҙарҙы ҡыу, Саша, Өфөнө онотоп тор. Алда – дошман!

Саша ҡар өҫтөнән һаҡлыҡ менән генә күтәрелә лә автоматтан ата башлай.

«Нимә шартланы унда? Әллә артиллеристар ата башланымы икән? Улай булһа, орудиелар бер атыу менән генә сикләнмәҫтәр ине. Тимәк, шартлау минең атыуымдан булған! Моғайын, пуля шундағы берәй минаға тейгәндер... Фашистар позицияларын миналар менән уратып алырға яраталар шул. Һеҙгә шулай кәрәк. Әйҙә, шартлағыҙ!..»

Саша арттан, рота ятҡан урман ситенән, «Ура!» тип ҡысҡырған тауыштар ишетеп, артына әйләнеп ҡараны. Тимәк, улар ҙа шартлау тауышын ишеткәндәр. Хәҙер улар йүгереп килеп етерҙәр ҙә Чернушкиға һөжүм башларҙар...

Тик был шатлыҡ оҙаҡҡа һуҙылманы. Дошман пулемёты тағы ата башланы. «Тағы ҡайҙан аталар? Бына һиңә кәрәк булһа! Дзот тағы йәнләнгән дә баһа!»

Атакаға күтәрелгән рота туҡтап ҡалды. Пулемётҡа ҡаршы йүгереп булмай. Фашист пулемётчиктары хәйләкәр

булып сыҡты: ротаны урмандан алдап сығарҙылар ҙа асыҡ ерҙән йүгерешкән һалдаттарҙы рәхәтләнеп ҡырырға тотондолар... Егеттәрҙе үлтерәләр, күпме кеше һәләк була!

«Моғайын, иптәштәрем мине әрләйҙәрҙер, – тип уйлап алды Саша, автоматын уң ҡулынан һул ҡулына күсереп. – Автоматтың хәҙер кәрәге юҡ: дискылар буш. Ни эшләргә? Туҡта, гранаталар бар бит әле!»

Саша алға табан бик ҡыҙыу шыуыша башланы. Ара яҡыная. Хәҙер, гранатаны ырғытһаң, дзотҡа тиклем еткереп булыр кеүек. Тағы әҙ генә шыуырға ла...

Саша, терһәгенә таянып, күтәрелде лә, бер аяғына тубыҡланып, бер-бер артлы өс граната ырғытты. Шунда уҡ өс шартлау ишетелде. Дзот бер минутҡа тынып ҡалды.

Ләкин күп тә үтмәне, дошман пулемёты тағы ла ата башланы.

«Ни эшләргә һуң? Иптәштәрҙе, атакаға күтәрелеп, апасыҡ яланда туҡтап ҡалырға мәжбүр булған иптәштәрҙе, ҡотҡарырға кәрәк!»

Сашаның башында ҡыйыу һәм тәүәккәл уй тыуҙы: «Автоматтан ата алмайым, сөнки дискылар буш... Гранаталарҙы ырғытып бөттөм... Ләкин минең ғүмерем бар бит әле. Дзот яп-яҡын. Йүгереп барып етеп, шул ҡәһәр һуҡҡан амбразураны ҡаплап була ла баһа!.. »

Саша ҡапыл һулға ташланды. Хәҙер амбразуранан уны күрмәйҙәр. Саша эре аҙымдар менән алға йүгерергә тотондо. Ул дошман уты аҫтынан сыҡты, уға бер кем дә ҡамасаулай алмай хәҙер. Чернушкиҙағылары атып еткерә алмаҫтар – пулемёт өсөн алыҫ...

Дзотҡа тиклемге ара Сашаға бик оҙон булып тойолдо... Ниһайәт, бер генә ынтылаһы ҡалды. Ана, амбразура!.. Унан татылдап, ҡыҙарған пулемёт көбәге сығып тора. О, ни тиклем уҫаллыҡ ул көбәктә! Ул үлем сәсә!.. Егеттәрҙе унан ҡотҡарырға кәрәк. Улар Чернушкиҙы азат итергә һүҙ бирҙеләр бит!

Саша тәүәккәл рәүештә аяҡ үрә баҫты ла ҡапыл дзоттың ҡарайып торған амбразураһына ташланды.

«Бына яҡшы булды, тәки килеп еттем!.. »

Ун туғыҙ йәшлек Өфө егете гвардия рядовойы Александр Матросовтың һуңғы һүҙҙәре шул булды...

**1.** Текстың йөкмәткеһен һөйләгеҙ.
**2.** Текстан һуғышҡа, хәрби хеҙмәткә ҡағылышлы һүҙҙәрҙе күсереп алығыҙ, уларҙың нимә аңлатҡанлығына төшөнөгөҙ.
**3.** Александр Матросов образын тыуҙырған кинофильмдарҙы, картиналарҙы, һәйкәлдәрҙе иҫегеҙгә төшөрөгөҙ, улар буйынса әңгәмә ойошторoғоҙ.
**4.** «Башҡортостан батырҙары» исемле альбомығыҙға А. Матросов тураһында материалдар туплағыҙ.
**5.** Тексҡа ҡарата һеҙ ниндәй һорауҙар ҡуйыр инегеҙ?

**138-се күнегеү.** Бирелгән сифаттарҙан ҡылымдар яһағыҙ.

Ҡара, алһыу, оҙон, йәшел, йәш, ҡыҙыл, нәҙек, тура, һыуыҡ, матур.

Өлгө: *аҡ – ағара.*

**139-сы күнегеү.** Беренсе бағаналағы һөйләмдәргә ҡарап, икенсе бағаналағыларын тултырып яҙығыҙ.

| | |
|---|---|
| 1. Ғинуарҙа көндәр бик ҡыҫҡа булды. | Февралдә көндәр ... башлай. |
| 2. Ғинуарҙа ҡояш йылытмай. | Февраль аҙағында ҡояш ерҙе ... башлай. |
| 3. Ғинуарҙа ҡар ап-аҡ була. | Февралдә ҡар ... башлай. |

**140-сы күнегеү.** Һеҙ – репортёр. Иптәшегеҙҙән алдағы ял көндәрен нисек үткәрергә, нимәләр эшләргә йыйыныуын һорашығыҙ.

*Рәүеф НАСИРОВ*

## ИЛ БАЛАҺЫ – ШАКИРЙӘН

*(«Ҡайҙан һин, Матросов?» китабы буйынса)*

Һуғышҡа тиклем үк була был...
Вокзалдан вокзалға күсеп, ҡайҙа тура килде шунда ҡунып, нисек етте шулай тамаҡ аҫрап йөрөй торғас, Ғәзнәүи бер заман Өфөгә килеп сыҡты. Көтмәгәндә-уйламағанда, урам

сатында осраған бер төркөм үҫмер малайҙар араһында бик тә таныш йөҙҙө күреп ҡалды ла, ҡыуанысын тыя алмай, ҡысҡырып уҡ ебәрҙе:

– Һаумы, Шакир!

Шакир тигәне ялт итеп боролоп ҡараны, әммә кемдеңдер халыҡ алдында үҙенә шулай һөрән һалып өндәшеүен оҡшатманы, ахырыһы, ҡаштарын йыйырҙы ла ымлап ҡына Ғәзнәүиҙе ситкә саҡырҙы.

– Беҙҙең закондарҙы оноттоңмо ни, Ғәзнәүи? Малайҙар алдында ниңә улай баҡыраһың? Мин бит хәҙер Шакирйән түгел, ә Шурик Матросов.

– Матросов? – Һис оҡшатманы Ғәзнәүи күптәнге дуҫы Шакирйән Мөхәмәтйәновтың был ҡыланышын. – Уныһы ни тигән хәбәр тағы?

Ләкин шунда уҡ башында бер уй келт итте: «Ә үҙең һуң? Тыумыштан башҡорт булһаң да, кем һине Ғәзнәүи Ирғәлин тип белә? Рус малайҙары алдында, мин – Ғәзнәүи, тип тороп булмай бит инде, эстәрен тырнап көлөрҙәр. Шуға күрә Гриша, Григорий Черников булып киттең түгелме? Шуның кеүек, Шакирйән дә Шурик, Александр тигән исем алғандыр...»

Өҫтө бөтөн генә ине Шакирйән-Шуриктың: иңбашында – ҡара костюм. Асыҡ иҙеүенән арҡыры-буй һыҙыҡлы тельняшкаһы күренеп тора. Аяғында ярым ботинка. Салбарының балаҡ остарын төрөп, аҡ ойоҡбашының ҡуңысына ҡыҫтырып ҡуйған. Харап икән!

Хәйер, элек тә бөхтә йөрөргә тырыша торғайны. Ғәзнәүи үҙенең өҫ-башына күҙ һалды. Күпкә хөрт ине үҙенең өҫ-башы. Хөрт кенәме ни, әләм-һәләмдәре ҡойолоп тора. Шакирйән дә иғтибар итте ахырыһы был хәлгә – иптәшенең иңбашына ҡулын һалды:

– Әйҙә, беҙгә, беҙҙең колонияға, ә? Исмаһам, бергә-бергә көн итербеҙ. Минең командала булырһың.

– Ҡайҙа һуң ул колония тигәнең?

– Яҡында ғына, Ағиҙел буйында. Сиған туғайын үттеңме – беҙгә килеп еттең тигән һүҙ. Ашаталар, ваҡытында йоҡлаталар. Уҡыталар, дүрт кенә сәғәт эшләтәләр, – тип һөйләп алып китте Шакирйән. Үҙе һис тыныс тормай, туҡтауһыҙ тыпырсына, боролоп-боролоп иптәштәренә ҡарап ала. – Мин бит активист хәҙер. Күп нәмәне ышанып тапшыралар... Ҡасҡан малайҙар артынан да ебәргеләйҙәр. Тотоп килтергәнем бар

үҙҙәрен. Бына әле бер нисә колонисты киноға алып килдем. Әйҙә, ә?

Ғәзнәүи саҡ ҡына ризалыҡ биреп ҡуйманы. Шакирйәнгә табан ынтылып-ынтылып ҡуйҙы, тик хәл иткес аҙымды яһарға нимәлер ҡамасауланы. Ҡаҡҡан бағаналай торҙо ла ҡалды. Шакирйән үҙ юлы менән китте. Ғәзнәүиҙең уны һуңғы тапҡыр күреүе ине.

Бына ошолай исем, фамилия алмаштырыу һуңынан икеһен дә яҙмышташ итәсәген, күп аңлашылмаусанлыҡҡа килтерәсәген, тиҙ генә үҙенең кире Ирғәлингә күсә алмаясағын белмәй ине әле Ғәзнәүи. Шакирйәнгә килгәндә инде, уның менән бөтөнләй буталсыҡ килеп сығасағын башына ла килтермәне ул…

Хәҡиҡәтте аяҡҡа баҫтырырға уйлап, 1986 йылда Ғәзнәүи һуғышта ҙур батырлыҡтар күрһәткән ауылдашы Фуат Әсәҙуллинға ике хат яҙып ебәрә.

*Беренсе хат*

«Һаумыһығыҙ, хөрмәтле Фуат!

Тажикстандан күп сәләм ҡабул итегеҙ. Шулай уҡ минең туған-тыумасаларға ла сәләм күндерегеҙ…

…Хәҙер мин, Шурик йәки Шакирйән тураһында нимә беләм, шул хаҡта һөйләргә теләйем.

Ул беҙҙең ауылдан 1934 йылда сығып китте. Ике йыл үткәс, 1936 йылда, кире ҡайтты, беҙҙең кеүек үк бер аҙ эшләп алды. Бәлки, хәҙер Учалы ҡалаһы ултырған урынды хәтерләйһеңдер? Уның эргәһендә һаҙран урын булып, унда колхоз иҫке таҡталарҙан һарай төҙөп, беҙ шунда йоҡлап йөрөй торғайныҡ. Ул да, киләһе уңышҡа тип, беҙҙең менән бергә ер тырматты. Шул саҡта уҡ ул, мине Шакир тип түгел, ә Шурик тип атағыҙ, ти торғайны. Ул саҡта, үҙең беләһең, күп кеше үҙ телен онотто. Уның менән дә шул хәл килеп сыҡты. Ә ҡулына рус гәзите килеп эләкһә, шул хәтлем яҡшы уҡыр ине, хатта өлкәндәр аптырап китә ине.

Тыуған яғын ҡалдырырға йыйынғас, ул мине лә үҙе менән китергә өгөтләй башланы: әйҙә, ти, китәйек, берәй балалар йортона барып урынлашырбыҙ, ни тиһәң дә, бергә булырбыҙ. Тик мин ни өсөндөр шөрләнем, өйҙә тороп ҡалдым. Бер аҙ ваҡыт үткәс, мин дә йыйындым, әлбиттә, һәм бер үҙем сығып

киттем, ил гиҙҙем. Йөрөй торғас, Ҡарғалы балалар йортона барып эләктем, ул Ырымбур өлкәһендә. Был балалар йортонда мин 1939 йылға тиклем йәшәнем, ләкин өйөмдө һағынғас, детдом директорына атайым менән әсәйем барлығын әйттем. Улар ауыл советынан быны раҫлаған яуап алғас, оҙатыусы кеше биреп, мине өйөмә үк килтереп тапшырып киттеләр.

Ләкин мин тағы сығып киттем. Бер мәл Өфөлә йөрөй инем – бына шунда Шурик (Александр) менән осраштым да инде. Ул миңә ҡайҙалыр Өфө эргәһендә балалар колонияһында йәшәүен, хәҙер Матросов Александр булып йөрөүен, активист булыуын һөйләне...

1986 йылдың 5 декабре».

*Икенсе хат*

«...Фуат, һинең һорауыңа яуап итеп, иң тәүҙә үҙем тураһында хәбәр итәм. Мин, **Г. И.** Черников, хәҙер рус милләтле булып йөрөйөм. Әгәр минең менән дә шул уҡ хәл килеп тыуһа, минең дә ҡасандыр Ирғәлин Ғәзнәүи Ғәли улы икәнлегемде берәү ҙә белмәҫ ине. Ә бит быларҙың барыһы ла беҙҙең ҡараусы, тәрбиәсе булмауҙан килеп сыҡты. Аҙ булдымы ни: балалар ҡабул итеү пунктының береһенән ҡасаһың, икенсеһенә барып эләгәһең, башыңа ни тура килә, шул исемде әйтәһең. Бына ни өсөн алдым мин хәҙерге фамилиямды.

Ә унан һуң беҙҙең кеүек ҡарауһыҙ йөрөгән малайҙарҙың үҙҙәренең законы бар ине, әгәр һин рус түгел, ә башҡа милләт малайы икән, һиңә ышанманылар, хатта ситләшә торғайнылар. Шуға күрә беҙ үҙ фамилиябыҙ, исемдәребеҙҙе алмаштырырға тырыша инек.

Хәҙер Шурик хаҡында.

Беҙ уҡый башлағас, 2-се класта шикелле, Шакирйән өйҙәренән ҡыҙыл тауар килтерҙе – белмәйем, әллә атлас, әллә ебәк. Тауарҙы киҫкеләне лә балаларға тарата башланы, бигерәк тә ҡыҙҙарға... Күпмелер ваҡыт үткәс, мәктәптә кино күрһәттеләр. Иртәгеһенә ул, мәктәпкә бөтәһенән дә алдараҡ килеп, кинотаҫма һалынған ҡумтаны алып китеп, тәнәфес ваҡытында тураҡлап, киҫәктәрен малайҙарға таратты.

Шунан һуң китте ул ауылдан.

Йыл ярыммы, әллә ике йылдан һуңмы, ул әйләнеп ҡайтты һәм шунда, миңә Шурик тип өндәшегеҙ, тине.

Һин һорайһың, күҙҙәре, танауы нисек ине, тип. Ентекләп хәтерләмәйем, әлбиттә. Ә бына өҫкө тештәре киң, һирәгерәк ине. Быныһын яҡшы иҫләйем... Ул саҡта беҙ күл буйында эшләй инек – күлдең исеме Юшалы ине шикелле.

Өфөлә осрашҡанда, улар алтымы, етеме кеше ине...

Григорий Черников.<br>1986 йылдың 23 декабре».

***

Ғәзнәүи Ирғәлиндең хаттары бөтә Ҡунаҡбай халҡын аяҡҡа баҫтырҙы, һуғыш бөтөү менән үк, уҡытыусыһы Сания Ғирфанованың, 50-се йылдарҙа пионер вожатыйы булып эшләгән Лиза Баҡыеваның, Саша Матросов тигәндәре беҙҙең ауыл егете Шакирйән дә баһа, тип Учалыға, унан Өфөгә барып юллап йөрөгәндәрен матбуғатҡа яҙып сығалар. Һәр кем Шакирйәнде иҫкә алырға тотона.

Мирғәзим Кәримов (Учалы районы, Ҡунаҡбай ауылы):

«Шакирйән менән миңә 1941 йылдың июнь башында осрашырға тура килде. Ул ваҡытта миңә ун өс йәш ине. Ул беҙҙең һыу ингән ергә килде. Уның тиҫтерҙәре: «О! Шакирйән ҡайтҡан!» – тип геүләшеп киткәс, ул тыныс ҡына: «Егеттәр, ағайығыҙ инде Шакирйән түгел, мине Саша, Саша тип йөрөтөгөҙ», – тине. «Ҡайһы яҡтарҙан ел ташланы?» – тигән һорауға ул уйсан ғына: «Эх, егеттәр, минең булмаған ер ҡалмағандыр инде ул, – тине лә, – ә бында Украина яҡтарынан ҡайттым», – тине. «Ә һин бит детдомда инең?» – тигәс, ул: «Ә мин бөгөн – бында, иртәгә – тегендә. Минең ҡайҙа икәнлегемде үҙемдән башҡа бер кем дә белмәй», – тип өҫтәне.

Ҡомда ҡыҙынған саҡта: «Теләйһегеҙме, мин һеҙгә фокус күрһәтәм», – тине лә ике усын асты. Унда сөй, асҡыс, йәкәл, ашыҡ кеүек нәмәләр ята ине. «Кемдеке, танып алығыҙ», – тигәс, малайҙар салбар кеҫәләрен ҡапшарға тотондо. Ундағы әйберҙәр Шакирйән-Сашаның ҡулында булып сыҡты. Малайҙар, ауыҙҙарын асып, хайран ҡалды... Өлкәндәр менән һөйләшкәндә, рус һүҙҙәрен ҡатнаштырып һөйләшә ине. «Цы-

ганская» һүҙе иҫтә ҡалған... Ошо килеүендә бер аҙна самаһы ғына булды, артабан һуғыш башланып китте...

...Хәтеремдә, 1939 йылдың йәйендә, июнь айында, миңә ул саҡта 11 йәш ине, минең ике туған ағайым – Ирғәлин Ғәзнәүи Ғәли улы, паспорты буйынса Черников Григорий Иванович, Мөхәмәтйәнов Шакирйән менән ҡайтып, мине Рәсәй буйлап ил гиҙергә йәки берәй балалар колонияһына барырға өгөтләй башланы. Сөнки беҙҙең ауылда йәшәүе бик ауыр ине.

Өсәүләп беҙҙең ауылдан 35 саҡрым ерҙә булған Ильинка алтын йыуыу приискыһына сығып киттек. Уйыбыҙ – мәғдән ташыған машина шоферҙары менән килешеп, Миәс ҡалаһына барып етеү. Юлда тегеләр тик русса һөйләште, бер-береһенә «Саша», «Гриша» тип өндәшәләр ине.

Алтын йыуыусылар мул йәшәй, өйҙәре лә һәйбәт була торғайны. Бына беҙ ҡасабаға барып индек. Урамдарҙың береһендә бер матур йорт ҡаршыһында йөк машинаһы тора ине, беҙ шул өйҙөң ишек алдына индек. Йорт хужаһы рус булып сыҡты. Шакирйән уның менән, «Миәскә тиклем алып бармаҫһығыҙмы икән», тип һөйләшә башланы. Ошо ваҡыт ул, солан тәҙрәһе аша стенала элеүле торған гитараны күреп ҡалып, уйнап ҡарарға рөхсәт һораны. Хужа сығарып бирҙе, Шакирйән уны сирткеләп ҡараны ла шул тиклем һәйбәт итеп уйнарға тотондо, хатта хужа ла хайран ҡалды. «Һеҙ, егеттәр, ҡайҙан булаһығыҙ һуң, исемдәрегеҙ нисек?» – тип һораны ул. Быға минең ағайым Черников Григорий Иванович исеменә паспорт күрһәтте. Ә Шакирйән, мин Саша Матросов булам, тине. Миңә барыһы ла ҡыҙыҡ күренһә лә, ниңә улай тип яуап ҡайтарыуҙарын аңламаным. Тағы бер аҙ гәпләшкәндән һуң, беҙ ашханаға киттек».

Чкалов (хәҙер Ырымбур) өлкәһенең Краснохолмск хәрбипехота училищеһында бергә уҡыған һәм бергә фронтҡа киткән Мисбах Сәйфетдинов (Салауат районы):

– Матросов менән мин училищела таныштым. Ул беҙгә: «Кемдәр ҡайҙан килгән, кемдәр Уралдан?» – тип мөрәжәғәт итте. Мин үҙемдең Уралдан икәнде әйттем. Шунда ул миңә бик яҡын тойолдо, сөнки беҙҙең училищела Советтар Союзының бөтә мөйөштәренән дә барҙар ине, ә Урал яғын Сашанан башҡа берәү ҙә иҫкә алманы. Башта мин уның ҡайҙан икәнен белмәй инем, беҙ Өфөнән, Башҡортостандан, тигәс, ысынлап та яҡташтар булып сыҡтыҡ.

***

Был иҫтәлектәрҙең барыһын да Башҡортостан кешеләре һөйләне. Ә Украинала иһә, Саша малай ваҡытында балалар йортонда тәрбиәләнеп киткән Ульяновск өлкәһендә, ни тиҙәр һуң?

Бер ниндәй ҙә документ таба алмағанлыҡтан, Украинаның етәксе органдары башта уҡ: Александр Матросов беҙҙең егет түгел, ул Башҡортостанда тыуған булһа кәрәк, тип белдерҙе. Ульяновск өлкәһендә лә быға ҡаршы булманылар.

Уның тәүге тәрбиәсеһе Анфиса Урманова (Мәләкәс ҡалаһында йәшәй ине), «Саша һеҙгә ҡасан килгәйне?» – тигән һорауға:

– 1934 йылда булды был, – тине. – Бер ҡыҙ бала менән икеһен йорт коридорында ҡалдырып киткәйнеләр. Көн һыуыҡ, ә балалар бер генә ҡат күлдәктән. Малай өҫтән одеял менән уранып алған. Балаларҙы индерҙек. Шулай итеп, Саша беҙҙә йәшәй башланы.

– Ә Мәләкәстән ҡайҙа китте ул?

– Ивановкаға оҙаттыҡ. Өс малай ине улар: Саша, Женя Карпухин, Леня Лямин. Иң үткер малайҙар. Әле лә иҫемдә, директорыбыҙ Сафонов Макар Петрович саҡырып алды ла: «Саша, һине икенсе, яҡшыраҡ детдомға күсерәбеҙ, бараһыңмы?» – ти. «Кем менән?» «Бына, Анфиса Владимировна менән». «Уның менән булһа, барам», ти был. Мине ярата ине шул. Фронттан да өс хат яҙғайны, мин уларҙы музейға биргәйнем, Мәскәүҙән И. Шкадаревич алып киткән... 1935 йылдың аҙағымы, әллә 1936 йылдың башы инеме икән, Ивановкаға киткән ваҡыты, һалҡын ине. Көҙ булды, ахырыһы.

Мин һиҙҙермәй генә Ҡунаҡбайҙан алып килгән фотоны сығарам, Анфиса Владимировнаның алдына һалам. Ул һүрәтте уңдан һулға табан бик ентекләп ҡарап сыға һәм... бармағын Шакирйәнгә туҡтата:

– Бына ул, Саша, – ти.

– Яңылышмайһығыҙмы? Һеҙҙең һүҙегеҙ беҙҙең өсөн бик мөһим. Уны күреп белеүселәр хәҙер бик аҙ.

– Юҡ, яңылышмайым, – ти Анфиса Владимировна. – Тик бәләкәйерәк икән бында.

Анфиса Владимировна артабан Матросовтың Краснохолмск хәрби-пехота училищеһында комсомол билеты алған

мәлде сағылдырған һәм Ивановкала күгәрсен тотоп төшкән фотоларын да алып ҡараны.

– Былар барыһы ла Саша, – тине.

1935 йылда «Саша»ны Ивановка балалар йортона (Ульяновск өлкәһе) күсерәләр. Бында ул мал-тыуар ҡарарға, баҡсала эшләргә өйрәнә.

Ивановка балалар йортона килеп теркәлгәндә, уның «Сашка» тигән ҡушаматы булған. Ә фамилияһы урынына «Бесфамильный» тип яҙғандар. 1937 йылда ил буйынса паспорттарҙы тәртипкә килтереү, ҡараусыһыҙ балаларҙы урынлаштырыу, берәҙәклекте бөтөрөү буйынса кампания башланғас, Ивановкаға килгән район ЗАГС-ы комиссияһы, Сашаның ҡушаматы «Сашка Бесфамильный» булыуҙан файҙаланып, уға тота ла «Матросов» тигән фамилия бирә.

Ивановка балалар йортонда ете класс тамамлаған Матросовты 1939 йылдың көҙөндә Һамар ҡалаһына алып барып, паровоз ремонтлау заводына эшкә урынлаштыралар. Ләкин бында ул оҙаҡҡа тотҡарланмай, Һарытау ҡалаһына юллана. Бында паспорт режимын боҙоуҙа ғәйепләнеп, ул 1940 йылдың сентябрендә Өфө хеҙмәт колонияһына оҙатыла.

Яңы урында Александр Матросов күпселеге ҡатын-ҡыҙ булған тәрбиәселәрҙең ышаныслы ярҙамсыһына әүерелә, тәртип булдырыуҙа ныҡлап ҡатнаша. 1942 йылда ул, бер нисә тапҡыр ғариза биргәндән һуң, Ҡыҙыл Армия сафына алына һәм Чкалов өлкәһенең Краснохолмск хәрби-пехота училищеһына ебәрелә. Курсанттар тейешле ваҡытты үтеп өлгөрмәй – фронтта кеше етмәү сәбәпле, училищенан бер нисә төркөмдө Калинин фронтына оҙаталар. 1943 йылдың ғинуарында була был. Александр Матросов И. Сталин исемендәге 91-се Тымыҡ океан доброволец комсомолецтар бригадаһына (һуңынан – 56-сы гв. уҡсы дивизияһының 254-се гв. уҡсы полкы) ебәрелә. Рота командирының ординарецы була ул.

Александр Матросов Псков өлкәһенең Локлян районы Чернушки ауылын алыу өсөн башланған һуғышта ҡатнаша һәм 1943 йылдың 27 февралендә Чернушкиҙан бер километр ситтәрәк Плетень ауылы эргәһендә, дошман дзотын күкрәге менән ҡаплап, һәләк була һәм подразделение һөжүменә уңыш килтерә.

Ҙур ҡаһарманлыҡ күрһәткәне өсөн, 1943 йылдың 9 июнендә А. Матросовҡа СССР Юғары Советы Президиумы Указы менән Советтар Союзы Геройы исеме бирелә.

1943 йылдың 8 сентябрендә 56-сы гв. уҡсы дивизияһының 254-се гв. уҡсы полкына Матросов исеме бирелә. Герой мәңгелеккә ошо полктың 1-се ротаһы яугирҙары исемлегенә индерелгән. Өфөлә 1951 йылда А. Матросовҡа, ә 1980 йылда А. Матросов менән М. Ғөбәйҙуллинға һәйкәл ҡуйыла. Өфөнөң бер урамы, кинотеатры, балалар хеҙмәт колонияһы уның исемен йөрөтә.

1. Таныш булмаған һүҙҙәрҙе күсереп алығыҙ, мәғәнәләрен асыҡлағыҙ. Уларҙың ҡайһыларын һеҙ үҙегеҙҙең телмәрегеҙҙә ҡулланаһығыҙ, ә ҡайһыларын – юҡ?
2. Шакирйән Мөхәмәтйәновтың – Александр (Шура) Матросов, Ғәзнәүи Ирғәлиндең Григорий Черников булып китеүенең сәбәптәрен аңлатығыҙ. Һеҙҙеңсә, был ыңғай күренешме? Хәҙер шулай булыуы мөмкинме? Фекер алышығыҙ.

**141-се күнегеү.** Һөйләмдәрҙе рус теленә тәржемә итегеҙ (телдән).

Февраль – ҡыштың һуңғы айы. Ҡояш бер аҙ йылыта башланы. Яҙ яҡынлаша. Ҡыйыҡтарҙан тамсы тама. Тик ҡапыл һыуыҡ ел өрҙө, ҡар яуып, буран сыҡты. Тотош ай буйына йә буран булды, йә ҡояш йылытты.

*(В. Бианки)*

**142-се күнегеү.** Башҡортса шулай әйтәләрме? Хаталары булһа төҙәтегеҙ.

Бейек буйлы кеше, ҡалын бүрәнә, ҡиммәтле ҡунаҡ, йыуан китап, йомро алйот, осло бысаҡ, ҡараңғы кеше, шәкәрле һүҙ, эҫе сәләм, юғары кейем.

**143-сө күнегеү.** Иптәшегеҙгә хат яҙығыҙ. Унда үҙегеҙҙең уның янына килергә теләүегеҙҙе һәм ни эшләргә йыйыныуығыҙҙы белдерегеҙ.

**144-се күнегеү.** Алдағы күнегеүҙәге миҫалдарҙың дөрөҫ варианттары.

Оҙон буйлы кеше, йыуан бүрәнә, ҡәҙерле ҡунаҡ, ҡалын китап, тулы алйот, үткер бысаҡ, наҙан кеше, татлы һүҙ, ҡайнар сәләм, өҫкө кейем.

**145-се күнегеү.** «Сифат» темаһы буйынса һорауҙар.

1. Сифат менән имя прилагательное араһында оҡшашлыҡ бармы? (Эйе, бар...)

2. Улар араһында ниндәй айырма бар?

3. Сифат исемдән башҡа ҡулланыла аламы?

4. Сифаттың ниндәй төрҙәре бар?

5. Бөтә төр сифаттарҙың да аҙһытыу дәрәжәһе буламы?

6. Төп сифаттарҙың бөтәһенең дә ниндәй дәрәжәһе була ала?

## Һүҙ күрке – мәҡәл

Ат даны – егет ҡулында, егет даны – үҙ ҡулында.

Ат дағаһыҙ булмаҫ, батыр яраһыҙ булмаҫ.

Айыу алыр егетте атынан танырмын, бүре алыр егетте бүркенән танырмын.

Егет күрке дан менән, айғыр күрке ял менән.

Толпарға тиң ат булмаҫ, ил һаҡлаған – ят булмаҫ.

# Башҡорт халыҡ ауыҙ-тел ижады

## БАШҠОРТ ХАЛҠЫНЫҢ АУЫҘ-ТЕЛ ИЖАДЫ

Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады бик бай. Уҙған быуаттың 70– 80-се йылдарында уның 18 томлығы баҫылып сыҡты. Әле ғалимдар 55 томлыҡ «Башҡорт халыҡ ижады» серияһын сығарыу өҫтөндә эшләйҙәр. Уның тәүге томдары донъя күрҙе инде.

Башҡорт ауыҙ-тел ижадында халыҡ хикәйәләре (легендалар, риүәйәттәр), әкиәттәр, эпостар, йырҙар, таҡмаҡтар, бәйеттәр, мөнәжәттәр, көләмәстәр, афористик жанрҙар (мәҡәлдәр, әйтемдәр, йомаҡтар) бар. Уларҙың күбеһе хәҙерге көндә йә бөтөнләй ижад ителмәй (мәҫәлән, халыҡ хикәйәләре, эпостар, әкиәттәр, мөнәжәттәр), йә бик һирәк ижад ителәләр (йырҙар, таҡмаҡтар). Тик көләмәстәр генә күпләп сығарыла.

Ауыҙ-тел ижадын өйрәнеүсе фән *фольклористика* тип атала. Башҡорт ауыҙ-тел ижадын өйрәнеүгә Әхнәф Кирәев (Кирәй Мәргән), Марат Минһажетдинов, Салауат Галин, Мөхтәр Сәғитов, Фәнүзә Нәҙершина, Әхмәт Сөләймәнов кеүек фольклорсы ғалимдар ҙур өлөш индерҙе.

1. Белешмәне иғтибар менән уҡып сығығыҙ. 5-се класта ауыҙ-тел ижады буйынса алған мәғлүмәттәрегеҙҙе иҫегеҙгә төшөрөгөҙ.
2. 5-се класта ауыҙ-тел ижады жанрҙарына бирелгән билдәләмәләрҙе иҫегеҙгә төшөрөгөҙ, һәр жанр буйынса үҙегеҙ белгән берәй әҫәрҙе һөйләп ишеттерегеҙ.

## УРАЛ БАТЫР

*(Башҡорт халыҡ әкиәте)*

### I

Борон-борон заманда, Уралтау менән Ағиҙел дә, Яйыҡ менән Һаҡмар ҙа юҡ саҡта, шыр урман эсендә йәшәгән, ти, бер бабай менән бер әбей. Байтаҡ ғүмер иткәс, Шүлгән менән Урал тигән ике улын йәтим ҡалдырып, әбей үлеп киткән. Беренән-бере теремек, беренән-бере шуҡ ике малайҙы бабай үҙе генә ҡарап үҫтергән. Ул үҙе шәп һунарсы булған. Йәйен дә, ҡышын да көндәр буйы һунарҙа йөрөгән. Айыу тиһәң – айыуҙы, бүре тиһәң – бүрене, арыҫлан тиһәң арыҫланды тере көйө тотоп алып ҡайтыуҙы бабай уйын шайы ла күрмәгән, ти, ул шулай көслө булған. Ни өсөн тиһәң, бабай һунарға гел бер генә ҡалаҡ януар ҡаны эсеп китә икән. Шул ҡанды эсеп алдымы – уға ана шул йыртҡыстың көсө өҫтәлер булған. Өй көтөп ҡалған Шүлгән менән Уралға турһыҡтағы ҡанды ауыҙ иттермәгән, гел генә: «Бәләкәйһегеҙ әле, кейек ауларға йәшегеҙ етмәгән; минән күрмәксе, турһыҡтағы ҡанды ауыҙлайһы булмағыҙ, һәләк булырһығыҙ», – тип киҫәтә торған булған. Ни өсөн тиһәң, йола буйынса, йыртҡыс кейекте үҙ ҡулы менән үлтергән кешегә генә уның ҡанын татып ҡарарға яраған.

Аталары һунарҙа саҡта, берҙән-бер көндө Шүлгән менән Урал янына бик һылыу ҡатын килеп ингән. Ингән дә:

– Атайығыҙ менән бергә һунарға йөрөмәй ни! Ниңә өйҙә ултыраһығыҙ? – тип һораған, ти. Шүлгән менән Урал:

– Йөрөр инек тә, атай беҙҙе алып бармай шул, йәшегеҙ етмәгән әле, тип өйҙә ҡалдыра, – тигәндәр икән, теге ҡатын:

– Өйҙә ултырып, йәш еткереп булалыр шул! – тип көлгән, ти.

– Нимә эшләп ҡарайыҡ һуң?

– Анау турһыҡтағы ҡанды эсергә кәрәк, – тигән, ти, теге ҡатын. – Шуны бер генә ҡалаҡ эсеп алдыңмы – бер көн эсендә үк ир еткән егеткә әйләнәһең, арыҫландай көслө булаһың.

Шүлгән менән Урал:

– Атайыбыҙ ҡан һалынған турһыҡ янына яҡын барырға ла ҡушманы. Эсһәгеҙ – һәләк булаһығыҙ, тине. Беҙ атай һүҙенән сыҡмайбыҙ, – тигәндәр, ти.

Шунан теге ҡатын:

– Бәләкәйһегеҙ шул әле. Атайығыҙ ни тиһә, шуға ышанаһығыҙ, – тигән, ти. – Был ҡанды эсһәгеҙ, һеҙгә арыҫлан көсө инәсәк тә, егет булып етәсәкһегеҙ. Унан инде рәхәтләнеп һунарға йөрөй башлаясаҡһығыҙ. Атайығыҙға өй һаҡлап ултырырға тура киләсәк, ул быуна шуны яҡшы беләә. Шуға ла турһыҡтағы ҡанды үҙе генә эсә, һеҙгә ауыҙ ҙа иттермәй. Ихтыяр үҙегеҙҙә, әйттем – бөттөм, бөттөм дә киттем, – тип, теге һылыу ҡатын юҡ булған.

Шул ҡатындың әйткәненә ышанып, Шүлгән ҡанды тәмләп ҡарамаҡсы булды, ти. Урал, атаһының һүҙенән сыҡмай, турһыҡҡа яҡын да барманы, ти.

Шүлгән турһыҡты алды, ти. Турһыҡ ауыҙын асты, бер ҡалаҡ ҡан ҡапты, ти. Ә ҡан шундай татлы, ти. Ҡанды ҡабып йотоуы булды – айыуға әүерелде, ти. Шул саҡ ҡатын йәнә килде, ти. Инә килеп, Уралға:

– Бына күрҙеңме, туғаның ни эшләне! – тип һыны ҡатып көлдө, ти. – Хәҙер мин уны бүре итәм, – тип әйтте, ти.

Ҡатын айыуҙың маңлайына бер сирткәйне – бүрегә әйләнде, ти, тағы бер сирткәйне – арыҫлан булды, ти. Шунан теге ҡатын арыҫланға атланып алды ла саптырып сыҡты ла китте, ти. Ҡатын тигәнебеҙ юха һылыу булған икән. Ҡатын ҡиәфәтенә ингән ана шул юханың хәйләһе арҡаһында Шүлгән үҙенең кешелеген ғүмергә юғалтып, кейек булып ҡалған; бер ҡараһаң – айыу, икенсе ҡараһаң – бүре, арыҫлан булып йөрөгән-йөрөгән дә бер күлгә батып үлгән, ти.

## II

Ата һүҙен йыҡмаған Урал тиңдәше юҡ батыр егет булып үҫеп еткән. Атаһы ҡеүек, һунарға йөрөй башлаған. Шул мәлдә генә тирә-яҡты үлем ҡурҡынысы солғаған: күлдәр, йылғалар ҡороған, үләндәр ҡыуарған, ағас япраҡтары һарғайып бөткән. Һауа тынсыуланған. Тын алырлыҡ та булмаған. Әҙәмдәр, йәнлектәр ҙә күпләп ҡырылған. Донъяны ҡыҙырып, бөтә тереклекте ҡоротоп йөрөгән Әжәлгә ҡаршы бер кем дә дауа таба алмаған.

Урал батыр, үлем сәсеүсе Әжәлдең үҙен тотоп үлтереп булмаймы икән, тип уйлана башлаған, ти. Был уйын атаһына ла әйткән. Атаһының һелтәгәндә йәшен уттары сығара торған алмас ҡылысы булған.

– Был ҡылыс – олатайыңдан ҡалған ҡомартҡы, – тип әйтеп, уны Уралға биргән, – бының менән бөтә нәмәне ҡыйратып була, тик Әжәлде генә үлтереп булмай. Шулай ҙа ал, кәрәге тейер, – тигән. – Ҡайҙалыр, бик алыҫта, Тереһыу тигән бер шишмә ағып ята икән. Ана шул Тереһыуҙың бер тамсыһы ла үлеп ятҡанды терелтә, ауырып йығылғанды аяғына баҫтыра, ә Әжәлде еңә, ти. Әжәлдән ҡотолоу өсөн башҡа әмәл юҡ, – тигән, ти.

Атаһы биргән ҡылысты биленә тағып, Урал башы һуҡҡан яҡҡа сығып китте, ти. Эй китте, эй китте, ти, был, бара торғас, ете юл сатына килеп етте, ти. Шунда уға аҡ һаҡаллы бер ҡарт осраны, ти:

– Әссәләмәғәләйкүм! – тине, ти, Урал үҙе башлап.

– Вәғәләйкүмәссәләм! Олоно ололоҡлауыңа рәхмәт! Юлдарың уң булһын, балам. Кәңәш кәрәкһә, кәңәш бирәйем, ярҙам һораһаң, ярҙам итәйем.

– Бабай, Тереһыуға ҡайһы юл менән барырға?

Бабай ете юлдың береһен күрһәткән.

– Бынан алыҫмы? Нисә көнлөк юл?

– Уныһын инде, балам, әйтә алмайым. Ҡырҡ йыл буйы мин ошо ерҙә һәр уҙғынсыға Тереһыу юлын күрһәтеп торам, иллә-мәгәр ошо ғүмер эсендә унан әйләнеп ҡайтҡан кешене күргән юҡ әле, – тигән, ти. Бабай йәнә шулай тип өҫтәп ҡуйған, ти: – Бара торғас, йылҡы өйөрө осрар. Өйөр башы Аҡбуҙат булыр. Булдыра алһаң, шуны тотоп мен, улым.

Урал батыр, бабай менән хушлашып-аманлашып, Тереһыу юлы менән китеп барҙы, ти. Китә торғас, теге бабай әйткән йылҡы өйөрөнә барып сыҡты, ти. Ҡараһа, йылҡы өйөрө араһында:

Башы йүгән күрмәгән,  
Һыртына эйәр теймәгән,  
Ҡолағын беҙҙәй ҡаҙаған,  
Ялын ҡыҙҙай тараған,  
Ҡарсыға түш, тар бөйөр,  
Еңел текә тояҡлы,  
Ҡыйғас ҡамыш ҡолаҡлы,  
Айғыр бүре күҙендәй,  
Күҙ бәбәген сылатыр,  
Елһә, ҡоштай елпенеп,  
Артында саң уйнатыр…

Аҡбуҙат тора ине, ти. Урал Аҡбуҙатҡа иҫе китеп ҡарап торҙо-торҙо ла әкрен генә янына барҙы, ти. Аҡбуҙат бер боролоп ҡараны ла ятһырамай-нитмәй тик торҙо, ти. Шунан Урал йәһәт кенә Аҡбуҙаттың башына суҡлы йүгән кейҙереп, һыртына көмөш эйәр һалған да һикереп менеп тә ултырған. Аҡбуҙат унда ла тик торған. Саптырып китмәксе генә булғайны, Уралды сөйҙө лә ебәрҙе, ти. Шул тиклем бейеккә сөйөп ебәрҙе, ти, батыр атылып төшөп, биленә тиклем ергә батты, ти. Тырышып-тырмашып батҡан еренән сыҡты ла, ти, Урал яңынан Аҡбуҙатҡа атланды, ти. Аҡбуҙат йәнә сойорғотоп ебәрҙе, ти. Был юлы ергә төшкәс, Урал тубыҡтан батты, ти. Тағы тырышып-тырмашып сыға һалды ла йәнә атланды, ти, Аҡбуҙатҡа. Атланды ла талпан һымаҡ йәбеште, ти. Аҡбуҙат арт һанын да сойорғотто, үрәпсеп үрә торҙо, ти – күпме генә тырышмаһын, был юлы Уралды осорта алманы, ти. Шунан баш тартҡан яҡҡа елдереп сығып китте, ти.

Эй бара, ти, Урал, эй бара, ти. Йәйрәп ятҡан яландарҙы, күккә ашҡан тауҙарҙы, убып алыр упҡындарҙы үтте, ти. Бер ҡара урмандың уртаһына еткәс, Аҡбуҙат туҡтаны, ти. Ни булды икән тип, Урал ергә һикереп төштө, ти. Шул ваҡыт Аҡбуҙат, телгә килеп:

– Беҙ хәҙер Тереһыу юлын быуып ятыусы туғыҙ башлы дейеү бәрейе янына килеп еттек, һиңә уның менән алышырға тура килер. Ялымдан өс бөртөк ҡылымды алып ҡал. Кәрәк булһам, шуларҙы өтөрһөң – мин килеп тә етермен, – тип әйтте, ти.

Урал Аҡбуҙаттың өс бөртөк ҡылын өҙөп алды, ти, – Аҡбуҙат шунда уҡ юҡ та булды, ти.

## III

– Ни эшләргә, ҡайҙа барырға?

Шулай аптырап торғанда, Урал бик һылыу бер ҡыҙ уҙып барғанын күреп ҡалды, ти. Ул ауыр тоҡ йөкмәгән ине, ти. Урал, ҡыҙҙы туҡтатып:

– Эй, һылыу, ҡайҙа китеп бараһың? Тоғоңда нимә ул? Бик һәлмәк күренә, – тип һораны, ти.

Шунан ҡыҙ, илай-илай, үҙ ҡайғыһын һөйләп бирҙе, ти. Ҡарағаш исемле был ҡыҙҙы күптән түгел генә дейеү урлап алып килеп, үҙенә ҡол иткән. Ул, туғыҙ башлы дейеүҙең туғыҙ

балаһы уйнаһын өсөн, йылға буйынан иртәнән кискә саҡлы ҡырсынташ ташый икән. Урал, ҡыҙҙы йәлләп:

– Ҡана, һылыу, тоғонҙо үҙем күтәрәйем, – тигәйне, Ҡарағаш:

– Юҡ, юҡ, егет, минең менән бергә бараһы булма, һиҙеп ҡалһа, дейеү башыңа етер! – тип әйтте, ти.

Әммә Урал үҙенекен итеп, таш тултырылған тоҡто туғыҙ башлы дейеүҙең туғыҙ балаһы йыйылышып торған урынға хәтле күтәреп алып барҙы, ти. Урал ташты ергә ҡуйыуы булды – дейеү балаларының таш атышып уйнап китеүҙәре булды, ти. Улар атышҡан арала, эргәләге бер ҡарама ботағына Урал ат башы хәтле бер ташты аҫып ҡуйҙы ла үҙе боҫа-боҫа туғыҙ башлы дейеү йәшәгән мәмерйә ауыҙына үтте, ти.

Дейеү балаларының уйындары оҙаҡҡа барманы – таштары төрлө яҡҡа атылып, юғалышып бөттө, ти. Шунан улар оҙон бау менән ҡарамаға аҫып ҡуйылған ҙур ташты күреп ҡалдылар, ти. Шунда йүгерештеләр, ти. Мәрәкә күреп, береһе ташты атындырып ебәргәйне, таш, кире килеп, тегене һуғып йыҡты, ти. Дейеү малайы тора килеп, асыу менән йәнә осорта һуҡҡайны, таш уның башын иҙә һуҡты ла ҡуйҙы, ти. Башы ярылған туғанының үсен алмаҡ булып, ташты дейеүҙең икенсе малайы һуғып ебәргәйне – уныһы ла, башы ярылып, йән бирҙе, ти. Дейеү балаларының туғыҙы ла бына шулай береһе артынан береһе ҡырыла торһон, беҙ дейеүҙең үҙенә киләйек.

Урал батыр эҙләп барған мәмерйә бейек тауҙы юл киҫеп үткән ерҙә генә ине, ти. Туғыҙ башлы дейеү ҡараңғы мәмерйәнең ауыҙында ғына ята ине, ти. Тирә-йүне әҙәм һөйәктәре менән тулы ине, ти. Урал батыр алыҫтан уҡ:

– Эй, дейеү, юл бир, мин Тереһыуға китеп барам! – тип һөрәнләне, ти.

Быға дейеүҙең бер ҙә иҫе китмәне, ти, юлға арҡыры төшкән көйө ята бирҙе, ти. Урал батыр йәнә:

– Юл бир! – тип ҡысҡырғайны, дейеү, асыуы килеп, тыны менән үҙенә тартып ала башланы, ти. Урал батыр уның эргәһенә килеп баҫҡанын һиҙмәй ҙә ҡалды, ти. Шулай ҙа ҡаушап ҡалманы:

– Алыш бармы, көрәш бармы? – тине, ти.

Дейеү, ҡыйыу егеттәрҙе бик күп күреп тә, быға һис тә еңелмәгәнлектән, бер ҙә иҫе китмәй генә:

– Минең өсөн барыбер. Нисек үлергә теләһәң, шулай булһын, – тип яуап ҡайтарҙы, ти.

Шунан былар тау һыртының иң ҡалҡыу еренә менеп баҫтылар ҙа тирләп-бешеп көрәшә башланылар, ти. Эй көрәшәләр, эй көрәшәләр, ти. Көрәшә торғас, төш ауып, көн кискә һарҡты, ти. Бына бер заман дейеү Уралды күтәреп алып тороп ырғытты, ти. Урал биленән ергә батты, ти. Дейеү уны тартып сығарҙы – көрәш йәнә башланды, ти. Дейеү Уралды йәнә атып бәрҙе, ти. Был юлы инде Урал муйынынан ергә батты, ти. Дейеү уны ике ҡолағынан тартып сығарҙы, ти.

Көрәш яңынан башланды, ти. Эй көрәшәләр, эй көрәшәләр, ти, былар, көрәшә торғас, кис булып, эңер төшә башланы, ти. Бына бер заман әллә кем булып ирәйеп йөрөгән дейеүҙе Урал, елтерәтеп күтәреп алып тороп, быраҡтырып ебәрҙе, ти, теге мәлғүн биленән ергә батты, ти. Батҡан еренән Урал тартып сығарҙы, ти, көрәш йәнә башланды, ти. Урал дейеүҙе тағы элеп алды, тағы һелкеп һалды, ти. Был юлы дейеү муйындарынан ергә батып, туғыҙ башы туғыҙ яҡҡа һерәйеп тороп ҡалды, ти. Туғыҙ башты берәм-берәм ҡолаҡтарынан тартҡылап, Урал дейеүҙе тартып сығарҙы, ти, – көрәш өр-яңынан ҡыҙып китте, ти. Дейеү алан-йолан ҡаранырға ла өлгөрмәне – Урал уны ҡапыл элеп алды, ти, туғыҙ башын туғыҙ яҡҡа борғолап, йән асыуы менән тағы атып бәрҙе, ти, дейеү ергә һеңде лә ҡуйҙы, ти. Яуыз дейеүҙең башына ҡиәмәт килеүе шул булды, ти.

Ҡарағаш, бисара егеттең һөйәктәрен йыйып алып, күмеп ҡуяйымсы тип, тау башына менһә, Уралды һау-сәләмәт көйө күреп, шатлығынан илап ебәрҙе, ти. Дейеү күренмәгәс, ғәжәпкә ҡалып:

– Дейеү ҡайҙа китте һуң? – тип һораны, ти.

Урал батыр:

– Мин уны ергә һеңдерә һуҡтым, – тип әйтеп тә өлгөрмәне, улар баҫып торған урындан өс-дүрт аҙым ғына ситтәрәк бөркөлөп-бөркөлөп төтөн күтәрелеп сыҡты, төтөн артынса ялҡын сыға башланы, ти.

Быны күреп, Ҡарағаштың:

– Был ни хәл? – тип һорауына, Урал батыр:

– Мин ошо урында дейеүҙе ергә һеңдерә һуҡҡайным. Ер был хәшәрәттең емтеген үҙенең ҡуйынына алыуҙан ерәнде, буғай. Шуғалыр, моғайын, янып, төтөнө сығып ята, – тип яуап бирҙе, ти.

Был тау ошо яныуынан туҡтамаҫ булды, ти. Шул көндән алып уны Янғантау тип йөрөтә башланылар, ти.

## IV

Дейеүҙең башына еткәс, Урал батыр Янғантау булыр тау башында оҙаҡ торманы, ти. Кеҫәһенән теге өс бөртөк ҡылды алды ла өтөп ебәрҙе, ти. Өтөүе булды – Аҡбуҙаттың тып итеп ҡаршыға килеп баҫыуы булды, ти. Шунан Урал батыр Ҡарағашты менгәштереп алды ла Тереһыу юлы менән осортоп сығып китеп тә барҙы, ти.

Эй баралар, ти, эй баралар, ти. Йәйрәп ятҡан яландарҙы, күккә ашҡан тауҙарҙы, убып алыр упҡындарҙы, алҡынып аҡкан даръяларҙы осоп үттеләр, ти. Бара торғас, Аҡбуҙат йәнә туҡтаны, ти. Туҡтаны ла, телгә килеп:

– Беҙ хәҙер Тереһыуға яҡынлаштыҡ. Мәгәр уның юлын ун ике башлы дейеү быуып ята. Һиңә уның менән алышырға тура килер. Ялымдан өс бөртөк ҡылымды алып ҡал. Кәрәк булһам, шуларҙы өтөрһөң – мин килеп тә етермен, – тип әйтте, ти.

Урал Аҡбуҙаттың өс бөртөк ҡылын өҙөп тә алды – ат шунда уҡ юҡ булды, ти. Шунан Урал Ҡарағашҡа:

– Һин ошо ерҙә мине көтөп тор. Дейеүҙең башына еткәс, килеп алырмын. Бына һиңә ҡурайымды ҡалдырам. Юлым уңһа, ҡурай осонан һөт тамыр, уңмаһа, ҡан тамыр, – тип, дейеү менән алышырға китте, ти.

Бына алда Тереһыу сылтырап ағып ята, ти. Шишмә бейек тау аҫтынан ғына ағып сыға ла шунда уҡ әллә ҡайҙа, ер аҫтына инеп китә икән, ти. Йәне сыҡҡанға йән биреүсе, ауырыу йыҡҡанды аяҡҡа баҫтырыусы Тереһыу тирәһе өйөм-өйөм, тырым-тыраҡай ятҡан әҙәм һөйәктәре менән тулған ине, ти. Был шишмәне, бер тамсы һыуын да бирмәйенсә, ун ике башлы ҡарт дейеү һаҡлап ята икән, ти. Урал батыр күҙ күреме ерҙән үк:

– Эй, дейеү, юл бир, мин Тереһыу алырға килдем! – тип һөрәнләне, ти.

Дейеү, бер ҙә ыжламайынса, Тереһыу алдында ҡуҙғалмай ята бирҙе, ти. Урал батыр йәнә: «Юл бир!» тип ҡысҡырғайны, дейеү, асыуы килеп, Уралды тыны менән үҙенә тартып ала башланы, ти.

Урал батыр дейеү ҡаршыһына килеп баҫҡанын һиҙмәй ҙә ҡалды, ти. Шунда ла ҡаушап ҡалманы:

– Алыш бармы, көрәш бармы? – тине, ти.

Дейеү, бындай егеттәрҙе байтаҡ күреп тә, быгаса һис еңелмәгәнлектән, бер ҙә иҫе китмәй генә:

– Минең өсөн барыбер. Нисек үлергә теләһәң, шулай булһын, – тип яуап ҡайтарҙы, ти. Урал батыр:

– Ярай улай булһа, – тип, билендәге алмас ҡылысын һурып алып, уңлы-һуллы сатрашлап һелтәгәйне, тирә-яҡҡа йәшен уттары сәсрәп китте, ти. Дейеүҙең күҙҙәре, шунан сағылып, асалаҡ-йомалаҡ булып торҙо, ти.

Урал:

– Ярай улай булһа, – тип йәнә бер тапҡыр әйтте лә ҡылысы менән дейеүҙе тураҡлай башланы, ти. Һелтәгән һайын дейеүҙең бер башы ҡыйылып торҙо, ти.

Был ваҡытта Ҡарағаш ҡулындағы ҡурай осонан һөт тамды, ти. Ҡарағаш быны күреп, бик һөйөндө, ти. Әммә күп тә үтмәне, дейеүҙең яман үкереүен ишетеп, тирә-яҡтағы вағыраҡ дейеүҙәр, аждаһалар уға ярҙамға килде, ти. Урал батыр уларына ла бирешмәне, ти, аяҡтарын ерә баҫып, башы болотҡа тейерҙәй булып, йәшен ялтлатып, алмас ҡылысын уңлы-һуллы һелтәй торҙо – һонолған берен ҡыя торҙо, ти.

Бына бер заман, дейеүҙе лә, аждаһаларҙы ла ҡыйратып бөттөм тигәндә генә, Урал батырҙың өҫтөнә һанһыҙ күп ен-бәрейҙәр көтөүе ябырылды, ти, тын да алдырмай, егетте бөрөп алып бара башланы, ти.

Был ваҡытта баяғы ҡурайҙың башынан ҡан тамыптамып ҡуйҙы, ти. Быны күреп, Ҡарағаш бик ныҡ борсолдо, ти. Шунан ул ниҙелер хәтеренә төшөргәндәй торҙо ла ҡурайҙа ишетер ҡолаҡҡа яғымһыҙ әллә ниндәй бер бейеү көйө тарта башланы, ти. Теге ен-бәрейҙәргә шул ғына кәрәк икән: Уралды яңғыҙ ҡалдырып, ҡурай тауышы ишетелгән яҡҡа йүгерештеләр ҙә шунда барып, тыйыла алмайынса, бейергә керешеп тә киттеләр, ти. Баҡһаң, был уларҙың бейеү көйө булған икән. Шул форсаттан файҙаланып, Урал батыр ун ике башлы дейеүҙең генә түгел, уның ярҙамсыларының да башына етте, ти.

## V

Урал батыр: «Ен-бәрейҙәр донъяһын ҡыйратып, Терәһыу шишмәһен дейеү ҡулынан ҡотҡарҙым, хәҙер инде уның тереклек һыуы кешеләргә булыр», – тип шатланып, шишмә эргәһенә килһә, унда бер тамсы ла һыу юҡ ине, ти. Ни өсөн тиһәң, был һуғышта иҫән ҡалған дейеү бәрейҙәре, әҙәм затына

ҡалмаһын тип, Тереһыуҙы эсеп ҡороткандар икән. Урал батыр шишмә янында күпме генә ултырмаһын, бер тамсы ла һыу сыҡманы, ти.

Урал батыр быға бик көйөндө, ти. Шулай ҙа уның дейеүҙәрҙе, аждаһа-йыландарҙы пыран-заран килтереп ҡырып ташлауы файҙаһыҙ булманы: бөтә тирә-яҡҡа йән керҙе, үләндәр, ағастар йәшәрҙе, ҡоштар һайрашты, кешеләр йөҙөндә шатлыҡ балҡыны, ти.

Урал батыр үҙенең Аҡбуҙатына менеп, алдына Ҡарағашты ултыртып алды ла Тереһыуҙы ташлап китеп тә барҙы, ти. Был урында Урал тураҡлаған дейеү бәрейҙәре, аждаһа-йыландар кәүҙәһенән ҙур бер тау өйөлөп ҡалды, ти. Ана шул тауҙы халыҡ телендә Ямантау тип йөрөтә башланылар, ти.

Урал менән Ҡарағаш, ирле-ҡатынлы булып, донъя көтә башланылар, ти. Уларҙың өс улы булды, ти: өлкәне – Иҙел, уртансыһы – Яйыҡ, кинйә улдары – Һаҡмар.

Хәҙер инде был тирәгә Әжәл һирәк килә торған булып китте, ти. Ни өсөн тиһәң, ул бәһлеүән Урал батырҙан, уның йәшен уты сығара торған ҡылысынан шөрләй ине, ти. Бына шул арҡала халыҡ бик ишәйеп китте, ти. Шул тиклем күбәйҙе, хатта эсер һыу ҙа етмәй башланы, ти. Урал батыр, был ауыр хәлде күреп, берҙән-бер көндө ҡылысын ҡынынан тартып алды ла, баш өҫтөндә өс тапҡыр һелтәп, ергә сапты, ти. Сапты ла:

– Бына ошо ерҙә ҙур һыуҙың башы булыр! – тип әйтте, ти. Үҙе шунда уҡ өлкән улы Иҙелде саҡырып килтереп: – Бар, улым, аяғың тартҡан яҡҡа сығып кит, халыҡ араһында йөрө, иллә-мәгәр, берәй ҙур ағым һыуға барып етмәйенсә, артыңа әйләнеп ҡарайһы булма! – тип әйтте, ти.

Атаһы һымаҡ ҙур кәүҙәле Иҙел, аяғының тәрән эҙен ҡалдыра-ҡалдыра, төшлөккә ҡарай сығып китте, ти. Атаһы уның артынан күҙ йәштәрен мөлдөрәтеп ҡарап ҡалды, ти. Сөнки ул Иҙелдең кире әйләнеп ҡайтмаясағын белеп тора ине, ти.

Эй бара, ти, Иҙел, эй бара, ти, туҡтап хәл йыйыуҙы ла белмәй, ти. Бара торғас, уңға ҡайырылып китте, шунан төньяҡҡа йүнәлде, ти. Эй китте, ти, Иҙел, эй китте, ай китте, йыл үтте, ти, шунан ул көнбайышҡа юл тотто, ти. Бара торғас, ҡамышы ҡама менән тулған ҙур бер йылғаға килеп етте, ти. Шунан Иҙел артына әйләнеп ҡараһа, уның эҙенән киң йылға булып ап-аҡ һыу урғылып ағып килеп, ошо ҡамалы йылғаға ҡоя башланы, ти.

Йәмле Ағиҙел йылғаһы ана шулай барлыҡҡа килде, ти.

Иҙел батыр оҙон юлға сығып киткән көндө Урал ҡалған ике улын да шундай уҡ шарт менән илгә сығарып ебәрҙе, ти. Ләкин улар ағаларына ҡарағанда ҡыйыуһыҙыраҡ, түҙемһеҙерәк булғандар, ти: Иҙел батыр һымаҡ, бер үҙҙәренең генә ауырлыҡтар менән тулы оҙон юлды үтергә йөрәктәре етмәне, ти. Һаҡмар үҙенең тыуып үҫкән еренән алыҫлаша башлағас, яманһыулап китеп: «Ни эшләп әле мин әллә ниндәй ят ерҙәрҙә япа-яңғыҙым ҡыҙырып йөрөйөм? Яйыҡ ағайыма барайым да ҡушылайым, бергә йөрөүе еңел дә, күңелле лә булыр», – тип, Яйыҡҡа барып ҡушылды, ти.

Ҡайһылай ғына булмаһын, халыҡ Иҙелгә генә түгел, Яйыҡ менән Һаҡмарға ла бөткөһөҙ рәхмәт уҡыны, шундай данлы улдар үҫтергәне өсөн, Урал батырға оҙон ғүмер теләне, ти.

Ләкин йөҙ ҙә бер йәшкә еткән Урал батырҙың ғүмере күп ҡалмағайны: уның ҡартайып, хәлһеҙләнә башлауын күптән көтөп йөрөгән Әжәл яҡынлашҡайны инде, ти. Бына хәҙер Урал батыр хәл эсендә ята. Уның янында, изгелекле батырыбыҙҙан айырылабыҙ инде, тип ҡайғырышып, бөтә халыҡ йыйылған, ти. Шул ваҡыт әле генә әллә ҡайҙан ҡайтып төшкән ир уртаһы бер кеше йыйылған халыҡты икегә айырып үтте лә, үлем түшәгендә ятҡан Урал батырға ҡарап:

– Эй батырҙың-батыры Урал атлы атабыҙ, һин түшәккә ятҡан көндө үк мин, халыҡ үтенеүе буйынса, теге заман ен-бәрейҙәр эсеп бөтөрөп киткән Тереһыуға барғайным. Ул ҡоромаған булған икән: унда ете көн, ете төн ултырып, һуңғы тамсыларынан бына бер мөгөҙ тереклек һыуы йыйып алып ҡайттым. Шуны халыҡ исеменән һиңә тапшырам. Ҡәҙерле атабыҙ, һин шул һыуҙы эсеп ебәр ҙә, үлемдең ни икәнен дә белмәйенсә, халҡың бәхетенә мәңге йәшә! – тип мөгөҙҙө түшәктә ятҡан Урал батырға һондо, ти.

– Тамсыһын да ҡалдырмай эс, Урал батыр! – тип үтенде, ти, халыҡ та.

Урал батыр әкрен генә тороп, аяғына баҫты, тере һыуҙың һуңғы тамсылары һалынған мөгөҙҙө уң ҡулы менән алды, шунан халыҡҡа баш эйеп, рәхмәтен белдерҙе лә мөгөҙҙәге һыуҙы уртланы, ти. Ләкин һыуҙың бер тамсыһын да йотманы, бер алдына, бер артына әйләнеп, бер уңға, бер һулға ҡарап, бөтә тарафҡа ла бөркөп сыҡты, ти.

Шунан:

– Мин – бер кеше, һеҙ – күп кеше; мин түгел, ер-һыу үлемһеҙ булһын; быуынға быуын бәйләнһен, әҙәм заты ишәйһен, бар тереклек йәшәһен. Минең үлемһеҙлегем шул булыр, – тине, ти.

Урал батыр шулай тип әйтеп бөтөрөүгә, тирә-яҡҡа йәм инде, йән инде, ти: аяҡ аҫты сиҙәмләнде, ағастар йәшелләнде, төрлө еләк-емеш өлгөрҙө, гөлдәр сәскә атты, аҫыл ҡоштар һайрай башланы; сылтырап шишмәләр аҡты, ҡуйы ҡамышлы күлдәр барлыҡҡа килде, шул күлдәрҙә, Ағиҙелгә, Яйыҡҡа, Һаҡмарға килеп ҡушылған яңы йылғаларҙа аҡҡоштар ҡаңғылдашып йөҙөргә, баш осонда аҡсарлаҡтар сырылдашып осорға тотондо, ти.

Кешенең бына шул йәмле донъяла йәшәгәндән-йәшәгеһе килде, ти. Шунда туҡһан йәшлек бер сәсән халыҡ алдына сығып, ҡалҡыуыраҡ ергә баҫып алды ла былай тип һамаҡланы, ти:

Ай, тыуған ер, тыуған ер,
Олатайҙар торған ер,
Дүрт аяҡлы януарға
Төйәк булған тыуған ер.
Туғайҙары түшәктәй,
Талы, муйылы ҡурсаҡтай,
Балтырғаны беләктәй,
Һарынаһы силәктәй,
Сәскәләре мең төҫлө,
Иҫертерлек хуш еҫле,
Йәйрәп ятҡан еребеҙ!
Алпан-толпан атлаған
Айыуы күп еребеҙ;
Алырын аңдып йөрөгән
Бүреһе күп еребеҙ;
Ҡыҫҡа ҡойроҡ, шеш ҡолаҡ
Ҡуяны күп еребеҙ;
Ыҫпай баҫып йөрөгән
Төлкөһө күп еребеҙ;
Балығы аттай тулаған,
Ҡамаһы ҡуйҙай һулаған,
Һыуы ярына һыймаған

Йылғаһы күп еребеҙ!
Ай, тыуған ер, тыуған ер,
Олатайҙар торған ер,
Атам кейәү булған ер,
Әсәм килен булған ер,
Кендегемде киҫкән ер,
Тәмле һыуын эскән ер!

Ҡарт сәсән ана шулай, үҙе йәшәгән ерҙең байлығына, матурлығына һоҡланып, ҡобайыр әйтте, ти. Халыҡ ҡыуанысына ҡыуанып, Урал батыр шул мәлдә донъя ҡуйҙы, ти.

Халыҡ Урал батырҙы бик ҙурлап, хөрмәтләп, ҡалҡыу ергә күмде, ти. Һәр кем уның ҡәбере өҫтөнә бер ус тупраҡ һалып сыҡты, ти. Был йола быуын-быуын туҡтаманы, ти. Көн үтте, йыл үтте, ти. Урал батырҙың ҡәберенән кеше өҙөлмәҫ булды, ти. Уның ҡәберенә услап һала торғас, шул тиклем күп тупраҡ өйөлдө, ҡәбер өҫтөндә хатта бик ҙур тау барлыҡҡа килде, ти.

Ана шул тауға халыҡ Урал тигән исем биргән, ти. Унда Урал батырҙың һөйәктәре әле лә һаҡлана икән: Урал тауынан сыға торған бөткөһөҙ күп алтын-көмөш, төрлө-төрлө аҫыл таштар тигәнебеҙ ана шул Урал батырҙың һөйәктәре икән ул.

1. Һүҙлек эше башҡарығыҙ: таныш булмаған һүҙҙәрҙе күсереп алығыҙ, мәғәнәләрен асыҡлағыҙ. Был һүҙҙәрҙең текста ҡулланылышына иғтибар итегеҙ.
2. *Ауыҙ итеү, татып ҡарау, һәләк булыу, сөйөп (сойорғотоп) ебәреү, үс алыу, иҫ китмәү, атып бәреү, башына етеү, пыран-заран килтереү* һүҙбәйләнештәренең мәғәнәләренә төшөнөгөҙ. Үҙегеҙҙең телмәрҙә был һүҙбәйләнештәрҙе ҡулланаһығыҙмы?
3. Кем ул ир еткән егет? Һеҙҙеңсә, ир еткән егет булыр өсөн, ниндәй сифаттарға эйә булырға кәрәк? Фекер алышығыҙ.
4. *Атай һүҙенән сыҡмау, ата һүҙен йыҡмау* тигәндә нисек аңлайһығыҙ? Атайҙарығыҙ менән шул турала һөйләшегеҙ.
5. Рус әкиәттәрендә тереһыу бармы? Ниндәй әкиәттә? Иҫегеҙгә төшөрөгөҙ. Был оҡшашлыҡтың сәбәбен аңлатығыҙ.
6. *Ете юл саты, туғыҙ (ун ике) башлы дейеү, өс бөртөк ҡыл* һ. б. тағы ниндәй әкиәттәрҙә бар?
7. Әкиәттә Ағиҙел, Яйыҡ, Һаҡмар йылғаларының, Янғантауҙың, Ямантауҙың, Уралтауҙың, Уралдағы ер аҫты байлыҡтарының килеп сығыуын халыҡ нисек аңлата? Был турала һеҙ нисек уйлайһығыҙ?

**8.** Урал батырҙың ҡаһарманлығы тураһында фекер алышығыҙ.
**9.** Әкиәттең йөкмәткеһен һөйләгеҙ.
**10.** Ҡарт сәсән әйткән «Тыуған ер» ҡобайырын ятлағыҙ.

**146-сы күнегеү.** Шиғыр өҫтөндә тасуири уҡыу күнекмәләре үткәрегеҙ. Шиғыр йөкмәткеһе буйынса ижади эш эшләгеҙ.

## ЯПРАҠ

Шишмә ҡырында
аҡ ҡайын,
Аҡ ҡайын үҫә,
Йылы елдәр наҙлай уны,
Яй ғына иҫә.

Бына бер көн йәш
бер япраҡ
Шишмәгә баҡты,
Хыялы ташҡындай аҡты,
Йөрәге ҡаҡты!
– Их, һыуға бер
сумаһы ла
Йөҙәһе ине.
Их, ошо ботаҡ-бығауҙы
Өҙәһе ине!
Ел иҫте, япраҡ тертләне
Һәм төштө һыуға:
Теләге – яңғыҙ яҙмышы
Бирелде уға.

Һыу уны ҡымтып алды ла
Йыраҡ ағыҙҙы.
Ни көтә унда яңғыҙҙы –
Аңһыҙҙы?!

*(Р. Назаров)*

## АЛДАР МЕНӘН ШАЙТАН

*(Башҡорт халыҡ әкиәте)*

Элек Алдар исемле бер кеше булған. Ул үҙенең әҙәм затынан булған барлыҡ дошмандарын – байҙарҙы, муллаларҙы, хандарҙы алдап бөткәс, туҡта әле, шайтан затынан берәйһе тура килмәҫме, тип, тау башына, урманға менеп киткән. Урманға килгән дә был, бер ағасты йығып, ҡайырын һыҙыра ғына башлаған икән, ҙур ғына бер шайтан килеп тә сыҡҡан.

– Һин кем? – тип һораған шайтан Алдарҙан. – Ни эшләп беҙҙең урманда балта тауышы сығарып йөрөйһөң?

– Мин Алдар булам, – тигән был, – һеҙҙе алдарға тип килгәйнем.

Шайтан бынан бик ҡаты көлгән дә:

– Шайтанды әҙәм балаһы алдай алғаны юҡ әле, – тигән. – Беҙ үҙебеҙ кешеләрҙе алдайбыҙ, юлдан яҙҙырабыҙ.

Шунан Алдар теге шайтанға:

– Улай булғас, һин әҙ генә көтөп тор. Мин бынау бүрәнәне генә ҡырҡып бөтөрәйем дә, шунан һуң көс һынашырбыҙ, – тигән, ти.

Шайтан быны көтөп ултыра башлаған. Алдар һаман үҙ эше менән була икән. Бик оҙаҡ ултырғас, шайтан түҙмәгән:

– Эй, Алдар, тиҙерәк маташ, – тигән, – минең бит әле башҡа ерҙәргә лә бараһым бар.

– Ярай, – тигән Алдар, – эшең улай бик ашығыс булһа, миңә бер аҙ булыша тор.

Шайтан риза булған:

– Әйҙә, тиҙерәк бөтөрәйек эшеңде, – тигән.

Алдар шайтанды бүрәнә өҫтөнә ултыртҡан да:

– Һин ҡулыңды бынау ярыҡҡа тығып тор, – тигән. – Мин шынаны ғына һуғып сығарайым да көрәште башларбыҙ.

Шайтан бүрәнәнең ярығына ҡулын тыҡҡан. Алдар шынаны һуғып сығарыуы булған, ҡулы ҡыҫылған шайтан яман итеп аҡырып та ебәргән. Алдар иһә, быға һис кенә лә иҫе китмәйенсә, балтаһын биленә ҡыҫтырып, ҡайтыу яғына йүнәлгән.

– Шуны белеп ҡал, – тигән ул шайтанға, – минең исемем Алдар түгел, ә Былтыр булыр.

Алдар ҡайтып киткәс, был шайтандың ҡысҡырыуын ишетеп, башҡалары йүгерешеп килеп еткән.

– Кем ҡыҫты? – тип һорағандар улар, аптырап.

– Былтыр ҡыҫты, – тип яуап биргән быныһы, илай-илай.

– Һай, йүнһеҙ, – тигәндәр быға шайтандар, – былтыр ҡыҫҡанға быйыл ҡысҡыралармы ни?

«Былтыр ҡыҫҡанға быйыл ҡысҡырмайҙар» тигән һүҙ бына шунан тороп ҡалған, ти.

Икенсе бер ваҡыт Алдар, тағы шул тауға килеп, бер кәкре ҡайынды ҡырҡайым ғына тип торһа, әлеге шайтан килеп сыҡҡан.

– Әһә, килдеңме, Былтыр, – тигән был шайтан, – инде хәҙер эләктең!

– Килеүен килдем дә, – тип яуап биргән Алдар, – тик һин минең исемемде дөрөҫ әйтмәнең бит әле. Мин бит Былтыр түгел, ә Алдарҙың үҙе булам. Бына һине алдарға тип килгәйнем.

– Юҡ инде, – тигән шайтан, – хәҙер минең ҡулымды бүрәнәгә ҡыҫтыра алмаҫһың.

– Ярай, улай булһа, – тигән Алдар, – ҡыҫтыртмаһаң, ҡыҫтыртмаҫһың, ошо ағасты ғына терәп тор әле, мин, өйгә ҡайтып, алдар тоғомдо алып киләйем. Шунан алышырбыҙ.

Шайтан, икеләнеберәк:

– Һин тағы ла минең ҡулды ҡыҫтырырға уйлайһыңдыр әле, – тигән.

– Юҡ, юҡ, – тип яуап биргән Алдар. – Ышанмаһаң, бына үҙең ҡара: был ағаста ярыҡ әҫәре юҡ.

Шайтан килеп ҡараһа, ысынлап та, ҡайында бер ниндәй ҙә ярыҡ юҡ, тик бер яҡҡа ауышыңҡырап тора, ти.

– Бына шул кәкре еренән терәтеп торорға кәрәк, ауып китмәһен. Мин тиҙ килермен, – тигән Алдар.

Шайтан шулай, үҙе риза булып, кәкре ҡайынды терәп тороп ҡалған, ти. Алдар иһә, балтаһын яурынына һалып, ҡайтып киткән дә ҡабат урманға барыу тураһында уйлап та бирмәгән, ти.

«Кәкре ҡайынға терәтеү» тигән һүҙ шунан тороп ҡалған, ти.

Бер заман Алдар урманға тағы килгән. Эшкә генә тотонған икән, балта тауышына әлеге шайтан тағы килеп сыҡҡан.

– Эй, Алдар! – тигән был шайтан. – Хәҙер һин мине кәкре ҡайынға терәтеп китә алмаҫһың. Әйҙә, көс һынашабыҙ. Алып килдеңме тоҡсайыңды?

Алдар, шайтанды күргәс, уфтанған булып:

– Һай, ҡороғор икән! – тигән. – Алдар тоғон кистән санаға сығарып ҡуйғайным. Санаһы-ние менән ҡапҡа төбөндә онотолоп ҡалған. Булмаһа, һин, бер нәмә эшләмәй генә, ошо ҡырҡылған ағас төбөндә ултырып тор. Мин, тиҙ генә ҡайтып, алып киләйем.

Шайтан, икеләнеп:

– Ярыҡ ере юҡмы? – тип һораған.

– Юҡ, юҡ, – тигән Алдар, – бына, ышанмаһаң, килеп ҡара, шып-шыма!

– Кәкре ере юҡмы? – тигән шайтан.

– Юҡ, юҡ, – тигән Алдар, – ышанмаһаң, бына, үҙең ҡара, төп-төҙ.

Шайтан, шикләнерлек нәмә тапмағас, төп башына менеп ултырған, ти.

– Һин бер ергә лә китмә, – тип киҫәтеп ҡуйған, ти, Алдар шайтанды. – Ҡуҙғалмай ғына ултыр. Мин хәҙер килеп етермен.

Шайтан ултырып ҡалған, ә Алдар өйөнә ҡайтып киткән дә ҡабат шайтан янына килергә уйлап та ҡарамаған, ти.

«Төп башына ултыртыу» тигән һүҙ ана шул ваҡыттан тороп ҡалған, ти.

Бер саҡ Алдар тауға санаһын да алып килгән, ти. Урмандан утын ҡырҡып, санаһына тейәп бөтөп кенә торһа, быны янына тағы әлеге шайтан килеп сыҡҡан, ти.

Алдарҙы күргәс, шайтан:

– Эй, Алдар! – тип ҡысҡырған. – Хәҙер һин мине ҡырҡылған ағас төбөнә ултыртып китә алмаҫһың! Ташла эшеңде, башлайыҡ алышты!

Алдар, тағы ныҕыраҡ уфтанған кеше булып:

– Эй, шайтан дуҫ, һин аҙ ғына алданыраҡ килһәң булмай инеме ни? – тигән булған. – Бына минең алдар тоғом сананың төбөндә ине, утын аҫтында ҡалды. Булмаһа, был утынды икәүләп алып ҡайтып бушатайыҡ та шунан һуң алышып ҡарарбыҙ. Әйҙә, ултыр.

Шайтан, риза булып, санаға менеп ултыра. Былар икәүләп тау башынан выжлатып шыуып төшөп киткәндәр. Шайтан аптырай.

– Был ниндәй сана? – тип һорай.

– Үҙе йөрөй торған сана был, – тип яуап бирә Алдар. – Тау башына менеп, башын түбән яҡҡа ҡаратып ултырһаң, үҙе ала ла китә.

Шайтанға бындай сана бик оҡшап ҡалған.

– Бир миңә! – ти.

– Ал әйҙә, – ти Алдар. – Тик шуның өсөн һин мине бер тапҡыр елкәңә атландырып йөрөтөрһөң.

Шайтан риза була. Алдар, шунда уҡ утынын бушатып, санаһының ҡарамаларын ҡырҡып ташлай ҙа шайтанға тоттора. Үҙе утынын йөкмәп ҡайтып китә. Ә шайтан, сананы тау башына һөйрәп мендереп, ултырайым тиһә – сананың төбө юҡ, ти. Сана түбәнгә шыуып төшөп китә, ә шайтан, һемәйеп, тау башында ултырып ҡала.

«Төпһөҙ санаға ултыртыу» тип һөйләү ана шунан тороп ҡалған, ти.

Шайтан, күпме генә алданһа ла, Алдарға һис тынғылыҡ бирмәгән: ҡайҙа ғына барһа ла, тегенең алдына килә лә сыға, ти. Тора-бара был Алдарҙы ялҡыта башлаған. Шунан бер саҡ, шайтан килеп ингәс, Алдар быға әйтте, ти:

– Минең алдар тоғом бик алыҫта булып сыҡты бит әле. Әгәр түҙемең етһә, әйҙә, бергә барып алып киләйек.

Шайтан риза булды, ти. Былар икәүләп сығып киттеләр, ти. Әй баралар, ти, былар, әй баралар, ти. Бара торғас, арып, хәл алырға ултырҙылар, ти. Бер аҙ ултырғас, Алдар әйтә:

– Мин ни эшләп йәйәү киләм әле, – тигән була, – һин бит мине елкәңдә күтәреп йөрөргә тейешһең.

Шайтан әйтә:

– Ни өсөн? – ти.

Алдар әйтә:

– Мин һиңә бер ваҡыт санамды бирҙем бит. Биргәндә, әйтеп бирҙем түгелме?

Шайтан әйтә:

– Юҡ, ул дөрөҫ түгел, һинең санаң мине ултыртманы. Шуның өсөн мин дә һине күтәреп йөрөтмәйем.

Алдар әйтә:

– Улай булғас, әйҙә, яңынан алышабыҙ. Бынныһында кем еңелә, шул еңеүсене елкәһенә ултырта, – ти.

Шайтан әйтә:

– Кем йәшкә олораҡ, шул еңә, – ти.

– Һин нисә йәштә һуң? – тип һорай Алдар.

Шайтан әйтә:

– Мин тыуғанда, күк табаҡтай ғына, ер ҡалаҡтай ғына ине, – ти.

Алдар, быны ишеткәс, илап ебәрә. Шайтан, аптырап:

– Ниңә илайһың? – тип һорай.

Алдар әйтә:

– Тап шул йылды минең кесе улым үлгәйне. Шуны хәтергә төшөрҙөм, – ти.

Шулай итеп, Алдар, бик йәтешләп кенә шайтандың елкәһенә менеп ултыра ла, оҙон көйгә һуҙып ҡына йырлап

тик бара, ти. Шайтан ах та ух килә, ти, быныһы йырлауын белә, ти. Бик оҙаҡ шулай барғас, хәле бөткән шайтан Алдарҙан һорай, ти:

– Тағы оҙаҡ барабыҙмы әле?

Алдар әйтә:

– Бынау йыр бөткәнсе барабыҙ әле, – ти. Үҙе оҙон көйөн һуҙа, ти.

Эй баралар, ти, былар шулай, эй баралар, ти. Көн баралар, төн баралар, аҙна баралар, ай баралар. Шайтан атлай, Алдар һаман йырлай, ти. Шунан шайтан, тамам хәлдән тайғас, Алдарҙан тағы һорай:

– Бөтәме һинең шул йырың, юҡмы?

Алдар әйтә:

– Ашыҡма, шайтан, ашыҡма, – ти. – Башҡорттоң йыры оҙон була ул. Әле мин көйләгәне йырҙың башы ғына.

«Еңгән еңелгәндең елкәһенә менгән» тигән әйтем ана шунан бирле йәшәй икән.

Шулай итеп, шайтан Алдарҙы ғүмер буйы елкәһендә йөрөткән, ти. Башҡортта оҙон итеп йырлау ғәҙәте лә шунан башланған, ти.

1. Әкиәтте иғтибар менән уҡып сығығыҙ, уны өлөштәргә бүлегеҙ. Һәр бүлеккә исем бирегеҙ, йөкмәткеһен һөйләгеҙ.
2. Тырнаҡтар эсенә алынған *әйтемдәрҙе, фразеологик берәмектәрҙе* күсереп алығыҙ, үҙегеҙҙең тормош тәжрибәһенән сығып, уларҙың дөрөҫлөгөн дәлилләүсе миҫалдар килтерегеҙ.
3. *Шайтан заты, әҙәм заты* һүҙбәйләнештәренә аңлатма бирегеҙ.
4. *Юлдан яҙҙырыу* һүҙбәйләнешенең мәғәнәһенә төшөнөгөҙ, руссаға тәржемә итегеҙ. Текстан башҡа һүҙбәйләнештәрҙе лә табып алып, ошо уҡ эште башҡарығыҙ. Улар менән үҙегеҙ бер нисә һөйләм төҙөп яҙығыҙ.
5. Үҙегеҙгә оҡшаған бер бүлекте изложение итеп яҙығыҙ.
6. Башҡорт әкиәттәрендә Алдар кеүек йыш осраған бүтән образдар ҙа бар. Кемдәр улар? Улар тураһында белгән әкиәттәрегеҙҙең исемдәрен яҙып ҡуйығыҙ.
7. Алдар менән шайтан тураһында үҙегеҙ әкиәт уйлап сығарып яҙығыҙ. Әкиәтегеҙгә исем ҡушығыҙ, класта уҡып күрһәтегеҙ.

## ЙОМАҠТАР

а) Ҡалаһы бар – халҡы юҡ,
Диңгеҙе бар – һыуы юҡ.

б) Ағас түгел – япраҡлы,
Тун түгел – тегелгән.

в) Бер алмағаста – алты ботаҡ,
Ботаҡ һайын – һигеҙ сәтләүек,
Бөтәһе нисә сәтләүек?

г) Яратам һине, яратам һине,
Яратҡан өсөн туҡмайым һине.

ғ) «Тей!» – тиһәң, теймәй,
«Теймә!» – тиһәң, тейә.

д) Тарағы бар – сәсен тарамай,
Урағы бар – иген ура алмай.

ҙ) Бер кеше төшөндә диңгеҙгә балыҡ тоторға сығып китә. Диңгеҙҙә дауыл ҡуба ла, кәмә бата башлай. Кеше ҡысҡыра, ярҙам һорай – уға һис ярҙам итеп булмай. Нисек ҡотҡарырға?

е) Һыуҙы ҡасан иләк менән ташып була?

Я у а п т а р ы: карта; китап; алмағаста сәтләүек үҫмәй; туп; ирендәр; әтәс; йоҡоһонан уятырға; ҡар булғас.

1. Йомаҡтар предметтың йә күренештең ниндәй билдәләренә ҡарап ҡойолған?
2. Нимә ул **йомаҡ?** Уның тураһында ентекләберәк һөйләгеҙ.
3. Класта бер-берегеҙгә йомаҡ ҡойошоғоҙ.
4. Ата-әсәләрегеҙҙән, ололарҙан һорашып йомаҡтар яҙып алығыҙ. Ул йомаҡтарҙы, үҙегеҙ белгәндәрҙе лә ҡушып, «Минең ауылымдың фольклоры» тигән альбомығыҙға индерегеҙ.
5. Йомаҡтар.

а) Аҫтында беләк була,
Ҡабырғаһында эйәк була,
Өҫтөндә күҙ була,

Үҙе төҙ була.
Йүткерә, төкөрә,
Төкөрһә – үлтерә.

б) Яртыһының яртыһы –
Үҫкән ағас яртыһы.
Яртыһының яртыһы –
Тос тимерҙең яртыһы.
Яртыһының яртыһы –
Осҡан ҡоштоң яртыһы.

в) Дуға тиһәң – ағас түгел,
Ураҡ тиһәң – тимер түгел,
Айға оҡшаш, йәнгә хас.

Яуаптары: уҡ, ян; ҡылыс; мылтыҡ.

## ҠУРАЙ

*(Башҡорт халыҡ йыры)*

Урал ғына тауҙың, ай, башында
Урай-урай үҫкән бер ҡурай.
Шул ҡурайҙы алып, тартты һиһәң,
Ҡайғы-хәсрәт баҫыла бер талай…

Таҡыя ғына башлы ҡырлы ҡурай,
Моңло ғына итеп уйнайым.
Ҡурайҡайым еңел, көйө ауыр,
Еңел көнкәйҙәрҙе уйлайым.

Тартсы әле, егет, ҡурайыңды,
Ауыр донъя еңел тойолһон.
Эскенәйем тулы ҡайғы-хәсрәт
Ҡурай моңо менән ҡойолһон.

**1.** Ҡурай ҡайҙа үҫә? Һеҙҙең үҫеп ултырған ҡурайҙы күргәнегеҙ бармы? Уны ни өсөн *таҡыя башлы* тиҙәр? Ҡурай үләненең һүрәтен төшөрөгөҙ.

2. *Ҡурайҡайым еңел, көйө ауыр* тигәндә һеҙ нисек аңлайһығыҙ? Көйҙөң ауыр булыуы бында нимәгә ишаралай?
3. Ҡурай үләне табып, үҙегеҙ ҡурай эшләп ҡарағыҙ. Ғ. Сөләймәновтың «Ҡурай» тигән китабын файҙаланырға мөмкин.

**147-се күнегеү.** Шиғырҙы яттан яҙығыҙ.

Һыҙҙырт, ҡурай, үткән ҡайғыларҙы,
Өҙҙөрт, ҡурай, йөрәккәй ҡылдарын;
Һиҙҙерт, ҡурай, ҡайнар тойғоларҙы,
Һөйҙөрт, һөйләп башҡорт моңдарын.

*(Ш. Бабич)*

**148-се күнегеү.** Һүҙҙәрҙе уҡығыҙ, [*у*], [*ү*] өндәрен дөрөҫ әйтегеҙ.

| | | | |
|---|---|---|---|
| ауыр | ваҡиға | ваҡ | тау |
| ауыш | ваҡыт | вайымһыҙ | яу |
| әүәл | вәғәҙә | ватан | көтөү |
| тәүлек | ватыҡ | вазифа | килеү |

## АЛМАШ

Башҡорт телендә лә, рус телендәге кеүек, айырым предметты, билдәне, иҫәпте, эште белдермәйенсә генә, шуларға күрһәтеүсе һүҙҙәр бар. Улар **алмаш (местоимение)** тип атала.

Алмаштың төп билдәһе – күрһәтеү.

**149-сы күнегеү.** Һөйләмдәрҙе уҡығыҙ. Тәүге бағаналағы ҡалын хәреф менән бирелгән һүҙҙәрҙе икенсе бағаналағы ниндәй һүҙҙәр алмаштыра? Ул һүҙҙәрҙе парлап яҙып алығыҙ.

| | |
|---|---|
| 1. **Ҡустым** әле бәләкәй. | Ул балалар баҡсаһына йөрөй. |
| 2. Бөгөн кис **һыуыҡ.** | Бындай көндә балалар күберәген өйҙә ултыра. |
| 3. Класыбыҙҙа **егерме биш** уҡыусы бар. | Бөгөн класыбыҙҙың бөтә уҡыусылары ла киноға бара. |

4. Беҙ тиҙҙән **Өфөгә** барасаҡбыҙ. Унда беҙҙе төрлө урындарға экскурсияға йөрөтәсәктәр.

**150-се күнегеү.** Текстан алмаштарҙы табығыҙ. Уларҙы үҙҙәре алмаштырған һүҙҙәр менән парлап яҙып алығыҙ.

1. Атайымды, ағайымды бик күргем килгәндә, ағайымдың гармунын ҡулыма алғылай башланым. Ул инде иҫкергән, уның ниндәй төҫтә икәнен дә әйтеп биреү мөмкин түгел. Ағайым фронтҡа киткәнсе лә, бер аҙ уйнай торғайным да. Гармун тоторға ул өйрәтте.

Булаша торғас, үҙем белгән башҡа йырҙар ҙа өйрәнелде.

2. Арып-талып еңгәм эштән ҡайтып инде шулай. Бер аҙ хәл алды ла миңә өндәшә. Уның бойоҡ күҙҙәрендә өмөт сағылды, матур аҡ йөҙөнә нур ишараты йүгерҙе.

*(Ә. Хәмәтдинова)*

**151-се күнегеү.** Һөйләмдәрҙе тултырып яҙығыҙ.

1. Һыйыр ... быҙауын ялай башланы. ... быҙауы хәҙер ҙурайҙы инде. (Уның, үҙенең. ) 2. ... күрмәгән Мәскәүҙе, ... күрергә теләй. (Улар, кемдәр. ) 3. ... китабым өҫтәлдә ята. Мин ... китабымды алдым. (Үҙемдең, минең. ) 4. Беҙ ... катогыбыҙҙы ҡарҙан таҙартып торабыҙ. (Үҙебеҙҙең, беҙҙең. )

## ҠУРАЙ МОҢО

*(Башҡорт халыҡ әкиәте)*

Борон заманда бик данлыҡлы бер ҡурайсы йәшәгән, ти. Үҙ ғүмерендә бик күп туйҙарҙа, күп йыйындарҙа ҡурай уйнап, бөтә Уралда дан алған кеше булған, ти, был. «Атанан күргән – уҡ юныр, әсәнән күргән – тун бесер» тигәндәй, бының ике улы ла оҫта ҡурайсы булған, ти. Бер ваҡыт ҡарт ҡурайсы, әжәл етеп килгәнен һиҙеп, улдарын саҡырып алған да былай тигән:

– Балаҡайҙарым, мин күп йәшәнем, күпте күрҙем. Ҡурайым менән ҡайғылының күңелен астым, моңһоҙҙо моңландырҙым, дәртһеҙҙе дәртләндерҙем, бәхетленең бәхетен бүлештем.

– Шулай, атай, шулай, – тиештеләр, ти, улдары.

– Ҡайҙа барһам да, урыным түрҙә булды. Донъя ҡыуманым. Бына атай-олатайҙар янына оҙон юлға сығырға ваҡыт етте. Һеҙгә бүлеп ҡалдырыр малым да юҡ. Башҡалар һымаҡ, бай мираҫ ҡалдыра алмайым. Ғәйеп итмәгеҙ, балалар. Хоҙай тәүфиҡ бирһен үҙегеҙгә…

– Шулай, атай, шулай, – тиештеләр, ти, уландары.

– Ҡәҙерен белһәгеҙ, минән ҡалған менән дә кәм-хур булмаҫһығыҙ. Берегеҙгә, ана, йорт менән ат, икенсегеҙгә еҙ ҡурайым булыр. Йә, кемегеҙгә нимә ҡалдырайым?

– Тәүҙә ағайым әйтһен, – тине, ти, кинйә улы.

– Ҡурай тартып үҙең дә мандымағанһың. Өй менән ат миңә булһын, – тине, ти, оло улы.

– Һин шуға ризамы, Кинйә? – тип һораған атаһы. (Кинйә улдың исеме лә Кинйә булған икән, ти.) Кинйәһе:

– Риза, атай, риза, – тине, ти.

Атаһы, быны ишеткәс, Кинйәһенә ҡурайын бирҙе, ти. Бирҙе лә:

– Йә, бәхилләшәйек инде, уландар… Кинйә, һин ҡурайыңды тартып ебәр әле… Еҙ ҡурайым тауышын ишетәйемсе…

Кинйә моңло итеп бер көй уйнап ебәрҙе, ти. Шул моңдо тыңлап ятып, ойоғандай итте лә, ти, ҡарт ҡабат ҡайтмаҫ ергә китте, ти.

Атаһы үлгәс, ағаһы бай ғына бер ҡатынды кәләшлеккә алды, ти. Бай еңгә Кинйәне тәүге көндән яратманы, ти. Ә балаһы булғас, Кинйәгә бөтөнләй көн күрһәтмәй башланы, ти. Бала ҡараған да, мал артынан йүгергән дә, утын, бесән ташыған да шул Кинйә, ти. Көнө-төнө эшләһә лә, өҫтөндә алама сәкмән, аяғында тишек итек булды, ти. Күп түҙгән Кинйә еңгәһенең ыҙалатыуына. Бик күп түҙгән. Аулаҡ саҡтарҙа, еҙ ҡурайын уйнап, күңелен йыуатыр булған.

Шулай йылдар үткән. Кинйә бынамын тигән егет булып үҫеп еткән. Бер ваҡыт был еҙ ҡурайын алған да ағаһының йортон ташлап сыҡҡан да киткән. Китеп бара торғас, Йүрүҙән буйына килеп сыҡҡан. Көн кисләп киткәс, шунда бер мәмерйә табып, уның эсендә ял итеп китмәк булған. Ҡурайын ҡосаҡлап, бер яҫы таш өҫтөнә менеп ятҡан да, ята торғас, йоҡлап киткән. Бер ваҡыт бик ныҡ ҡысҡырып һөйләшкән тауышҡа уянып, күҙен асып ҡараһа, шаҡ ҡата: бер өйөр шайтандар үҙҙәренең кәсептәре тураһында һөйләшә икән. Берәүһе әйтә:

– Мин хандың ҡыҙын ауырыттым.

– Унан нисек ҡотолорға? – тип һорай икенсеһе.

– Ҡыҙҙы ҡурай моңо ғына ҡотҡара ала. Янына килеп, еҙ ҡурайҙа уйнаусы булһа, ул иҫән-һау килеп торасаҡ.

Әһә-ә, эшегеҙ былай икән әле, тине лә, ти, Кинйә, иртән торғас, китте, ти, әлеге хан ҡыҙын эҙләп. Бара торғас, бер ҡалаға барып етте, ти. Ә унда – ҡалаға инә торған ҡапҡала бер түгел, ике әмер эленеп тора, ти. Уларҙың береһендә: «Хандың берҙән-бер ҡыҙы ауырыу сәбәпле, ҡалала йыр йырлау, ҡурай уйнау, күңел асыу тыйыла. Был әмерҙе үтәмәгән кешеләрҙең башы киҫеләсәк», – тип, икенсеһендә: «Кем дә кем хандың ауырыу ҡыҙын һауыҡтыра, хан ҡыҙҙы шул кешегә кейәүгә бирә, ҡыҙға өҫтәп, ярты ханлығын да бирә. Ә кем, һауыҡтырам, тип тә һауыҡтыра алмай, шул кешенең башы киҫеләсәк!» – тип яҙылған, ти. «Ай-һай, закун ҡаты икән быларҙың!» – тип уйлаған, ти, Кинйә. Шулай ҙа үҙе, ҡурайын ҡуйынына йәшерҙе лә китте, ти, ҡала эсенә инеп. Ҡала урамдары буйлап йөрөй торғас, Кинйә хан һарайы янына барып сыҡты, ти. Шунда торған һаҡсыларға:

– Ханға әйтегеҙ, мин уның ҡыҙын һауыҡтырырға килдем, – тип әйтте, ти.

Быны ишеткәс, һаҡсылар хахылдашып көлөргә тотондолар, ти:

– Эй, йолҡош, йолҡош. Хан улдары, батша улдары һауыҡтыра алмағанды, һин ни эшләй алаһың инде?! Һа-һа-һа!..

Шул саҡ тауышҡа хан үҙе килеп сыҡты, ти.

– Ни булды, ниңә шулай кешнәшәһегеҙ?

– Нисек көлмәйһең? Бынау йолҡош һине саҡырта, ҡыҙыңды һауыҡтырам, ти.

– Үтеп ҡара, егет. Тик үкенерҙән булмаһын. Минең шартым ҡаты, – тине, ти, хан, Кинйәгә ҡарап.

– Беләм. Ҡыҙыңды күрһәт, – ти Кинйә.

Барып инһәләр һарайға, ҡыҙ ята, ти, ауырып бер ҙур, матур бүлмәлә. Тирә-яғында әбей-һәбей, ҡатын-ҡыҙ ултыра, ти.

– Минең бер шартым бар, ханым. Мин дауалағанда, бүлмәлә ҡыҙҙан башҡа кеше булмаһын, – тине, ти, Кинйә.

– Һин әйткәнсә булһын, – ти хан. Бүлмәнән бөтәһе лә сығалар.

Кинйә ишекте эстән бикләп алды ла, ҡуйынынан ҡурайын сығарып, моңло бер көйҙө уйнап ебәрҙе, ти. Бер көйҙө уйнап бөтөүгә, ҡыҙ күҙҙәрен асты, ти. Ә икенсе көйҙө уйнауға, тороп ултырҙы, өсөнсө көй тамамланыуға иһә, иҙәнгә төшөп, бейеп үк китте, ти. Ҡыҙға һоҡланып ултырған егет, онотолоп китеп, уйнаны ла уйнаны, ти, ҡурайҙа.

Бер аҙҙан бүлмәгә хан килеп ингән дә аптырап ҡалған, ти.

– Рәхмәт, егет, ҡыҙымды һауыҡтырыуыңа. Мин вәғәҙәмдә торам: ҡыҙымды ал, кейәүем булырһың. Быға өҫтәп, ярты ханлығым да һинеке булыр. Тик, егет, мин һине хөкөмгә лә тарттырмаҡсымын. Ҡурай тартып, минең әмерҙе боҙғанһың.

Хандың шулай тип әйтеүе булған, ике һаҡсы ике яҡтан Кинйәне тотоп та алды, ти.

– Ханым, бер генә һүҙ әйтергә рөхсәт итсе, – тип үтенде, ти, Кинйә.

– Әйт.

– Ҡыҙыңды һауыҡтырыусы ошо ҡурай моңо булды, һинең әмереңде беләм. Ул әмер ҡыҙың ауырыған саҡта бирелгән. Ҡыҙ һауыҡҡас, әмерҙең көсө лә бөтөргә тейеш бит, – тигәйне, ти, Кинйә, хан:

– Һинеке хаҡ, – тип, Кинйәне кейәү итте, ти. Кинйә менән хан ҡыҙының туйы ҡырҡ көн, ҡырҡ төн барҙы, ти. Туйҙа булмаған, һыйланмаған кеше ҡалманы, ти.

1. Әкиәтте иғтибар менән уҡығыҙ. Әкиәткә хас ниндәй үҙенсәлектәр таптығыҙ?
2. *Донъя ҡыуыу, кәм-хур булыу, күңел йыуатыу, күңел асыу* һүҙбәйләнештәренең мәғәнәләрен асыҡлағыҙ. Уларҙың ҡайһыларын һеҙ үҙегеҙгә ҡарата ҡулланыр инегеҙ, ә ҡайһыларын – юҡ? Ни өсөн?
3. Ҡурайсы уландарына *ҡайҙа барһам да, урыным түрҙә булды,* ти. Һеҙ быны нисек аңланығыҙ? Үҙегеҙҙең урынығыҙ түрҙә булыуын теләр инегеҙме?
4. Әкиәт ни өсөн «Ҡурай моңо» тип аталған? Әкиәттәрҙә ошолай сихри көскә эйә булған тағы ниндәй музыка ҡоралдары осрай? Уларҙың исемдәрен яҙығыҙ, ҡайһы әкиәттән икәнен иҫегеҙгә төшөрөгөҙ.
5. Күренекле башҡорт ҡурайсыларының исемлеген төҙөп, улар тураһында мәғлүмәттәр йыйығыҙ.

**152-се күнегеү.** Түбәндә аңлатмалағы һәм белешмәләге туғанлыҡты белдергән һүҙҙәрҙе тап килтерегеҙ. Әгәр һеҙҙең яҡта икенсе һүҙҙәр ҡулланылһа, уларҙы ла өлгөләгесә нөктәле өтөр аша, эргәһенә яҙығыҙ.

а) Ғаиләләге иң кескәй бала.
б) Минән оло ир туғаным.
в) Минән кесе ҡыҙ туғаным.
г) Әсәйемдең әсәһе.
д) Әсәйемдең ағаһы.
е) Апайымдың ире.
ж) Еңгәмдең әсәһе.
з) Еңгәмдең һеңлеһе.

*Белешмә өсөн һүҙҙәр.* Өләсәйем, бабайым, ҡоҙаса, һеңлем, кинйә, ҡоҙағый, еҙнә, ағайым.

Өлгө: *минең кесе ир туғаным – ҡустым, энем, мыртый.*

**153-сө күнегеү.** Өлгөгә ҡарап, бирелгән һорауҙарҙың һәр береһенә тап килгән бер нисә алмаш яҙығыҙ.

Өлгө: Кем? – Мин, һин, беҙ, һеҙ, улар, тегеләр, бөтәһе лә һ. б.

Ҡайҙа? Ниндәй? Нисек?

**154-се күнегеү.** Ҡалын хәрефтәр менән бирелгән алмаштар урынына ниндәй һүҙҙәрҙе ҡуйып булыр?

1. **Ней** башына **ней** ҡунған, **нейтәйем** тигәйнем, **нейтте** лә китте.
2. **Үҙҙәре** генә нишләрҙәр икән унда улар?
3. **Ҡасан** ғына әле **һеҙ** ҙә **шунда ошолай** итеп **нейтә** торғайнығыҙ.
4. **Үҙҙәренән әллә кемдәр теләһә ҡайҙа, нимә теләһә, шуны** эшләп йөрөгәндәр, беҙгә **нейтеп тә** тормағандар.
5. **Үҙҙәре улайтып** йөрөгәс, беҙ **ни эшләргә** тейеш һуң?

Бөтә алмаштар урынына ла икенсе һүҙҙәр ҡуйырға кәрәкме?

## АЗАМАТ

*(Башҡорт халыҡ йыры)*

Алыҫтарҙан, ай, күренгән
Ирәндеккәй тауының аҡ ташы.
Ҡайҙа бармай, ниҙәр күрмәй
Ир-егеткәй менән ат башы.

Ир-азамат менгән аттың
Бәкәлдәре уның аҡ булыр.
Аҫыл егет ҡайҙа йөрөһә лә,
Ҡылған эше уның хаҡ булыр.

1. *Ир-егеткәй, ир-азамат* һүҙҙәренең яһалышын аңлатығыҙ. Улар араһында айырма бармы? Ошондай типтағы бер нисә һүҙ уйлап яҙығыҙ: ҡатын-ҡыҙ, ҡарт-ҡоро һ. б.
2. Йырҙың тексын ятлағыҙ, фонояҙманан тыңлап, йырлап өйрәнегеҙ.

*Мостай КӘРИМ*

## «АЗАМАТ»

*(«Ғүмер миҙгелдәре» китабынан)*

1970 йылда Украинала башҡорт әҙәбиәте көндәре уҙҙы. Хайран ҡалырлыҡ аяҙ аҙна, яҡты көҙ ине. Күк көмбәҙе, әйтерһең, ҙур көмөш ҡыңғырау, һауала осоп барыусы торналар тауышынан ул зыңғырлап тора. Днепрҙы мин йылдың төрлө миҙгелендә күргәнем бар, әммә уның был ваҡыттағы асыҡ зәңгәрлеге хатта күктең үҙе менән тиңләшә ала. Ошо мәшһүр даръяның буйҙарында аҙна буйына башҡорт һүҙе, башҡорт моңо яңғыраны.

Әйтергә кәрәк, ул замандарҙа әле украин әҙиптәренең, сәнғәт әһелдәренең һәм бүтән уҡымышлыларының Башҡортостанға ҡарата, хәтерҙәре йомшарып, хөрмәттәре кәмемәгәйне, һуғыш йылдарында беҙҙең тупрағыбыҙҙа төйәк табып, йән аҫрап ҡалған оло ижадсыларҙың исемдәре йыш телгә алына. Павло Тычина, Максим Рыльский, Владимир

Сосюра, Юрий Яновский, Петро Манч... Ҡайҙа барһаҡ та, хужаларҙың тәү әйткән һүҙе – сәләм, икенсеһе – рәхмәт, өсөнсөһө – мөхәббәт булды. Хәҙер донъялар үҙгәрҙе. Яҡшылыҡты онотоу, яманлыҡты, берәм-берәм соҡоп сығарып, өҙлөкһөҙ хәтерләү ғәҙәткә инде, тормош ҡағиҙәһенә әйләнде. Кешеләр һәм халыҡтар ҡасандыр бер-береһенә эшләгән изгелектәр хаҡында иҫкә төшөрөргә тартыналар, оялалар һымаҡ. Ә теге йылдарҙа!.. Өҫтәлдәр тулы һый, йөрәктәр тулы һөйөү ине.

Һуңғы кистә Киевта Украина Яҙыусылар союзының рәйесе Олесь Гончар затлы рестарандарҙың береһендә беҙҙең хөрмәткә ҙур мәжлес үткәрҙе. Күренекле яҙыусылар, музыканттар, рәссамдар, артистар менән табындаш булдыҡ, һүҙ күп һөйләнмәне, әммә йыр күп йырланды. Украин, башҡорт, татар, рус көйҙәре бер-береһен алмаштырып торҙо. Күмәкләп, ҡара-ҡаршы йырлашыу ҙа, яңғыҙ башҡарыу ҙа булды. Эргәмдә ултырған Олесь Гончар беҙҙең көйҙәрҙе шул тиклем йотлоғоп, онотолоп тыңлай, гүйә, уны сәңгелдәктән бирле оҙата йөрөгәндәр.

Өҫтәлдең урта бер еренда ултырған Муса Ғәли бер мәл аяҡ үрә баҫты, ҡуш усы менән сал сәсен һыйпап, тамағын ҡырҙы. Минең һынағаным бар: табында ул тороп сәсен һыйпанымы... Тимәк, йырлаясаҡ. Уйлауым раҫҡа сыҡты. Ул «Азамат»ты башлап ебәрҙе. Күрше-күләне менән һүҙгә мауығып, гөж килгән ҡыҙмаса ҡунаҡтар ҡапыл шымып ҡалды. Ошондайыраҡ ҡатнаш мәжлестә тәүҙә Муса йырына русса аңлатма бирә торғайны, был юлы әллә онотто, әллә кәрәк тапманы. Йырлаусының күкрәген ярып сыҡҡан моң тулҡын-тулҡын булып залға эркелде. Муса Ғәли бөгөн айырыуса илһам кисерә. Тауышы үҙенән-үҙе ағыла. Тыйырға теләһә лә, тыя алмаҫ ине. Уның иркендә түгел.

Алыҫтарҙан ғына, ай, күренә
Ирәмәлкәй тауҙың аҡ ташы.
Ҡайҙа ла ғына бармай, ниҙәр күрмәй
Ир-егеткәй менән ат башы.

Йырсы туҡтағас та, йыр тынманы һымаҡ. Байтаҡ ара ул кешеләрҙе айнытмай арбап тотто.

– Бөйөк йыр. Тәү тапҡыр ишетәм, – тине Олесь.

– Әйтәйемме ниндәй йыр был? Был йыр...

– Туҡта, әйтмә. Үҙем аңлағанымды һөйләйем.

– Йә.

– Ул бынан йөҙ йыл, бәлки, ике йөҙ йыл әүәл генә тыуғандыр. Әммә унда боронғо скиф далаларының ҡеүәтле ауазы бар. Элекке һалынған батырлыҡ ойотҡоһо бызырлай. Мин шуларҙы ишеттем. Иҫ киткес инде: бер үк ваҡытта ул, үҙенең тәү сығанағына әйләнеп ҡайтып, алыҫ тарихтың төпкөлөн айҡай төҫлө.

– Ғәжәп...

– Ғәжәп шул. Бөйөк әҫәрҙәр, миңә ҡалһа, ғаләм менән бергә яралған да донъя күрергә үҙ ваҡытын, үҙ сиратын көтөп ятҡан. Мәле еткәс, кемдеңдер йәнен ярып, көнгә сыҡҡан. Йәнә ошоно һиҙемләнем: һеҙҙең халыҡ батырлығы, һуғышсанлығы менән дан тота, ләкин был йыр яуға өндәмәй. Оран һалыусы йырҙың был тиклем иркен тынлы, һуҙынҡы һәм биҙәкле булыуы мөмкин түгел.

Бына шулай асты үҙе өсөн беҙҙең «Азамат»ты Украинаның бөйөк кешеһе. Бына нимәләрҙе ишетте «ят ҡолаҡ». Йырҙы, ихтимал, яу юлдарын үтеп, иленә ҡайтып килеүсе яугир сығарғандыр. Әммә ул яуға ла саҡырмай, батырлыҡҡа ла өндәмәй. Ә бар булмышы батырлыҡҡа дан булып яңғырай һәм һағыш...

Мин Олестың һиҙгерлегенә, нескә зауығына һоҡландым:

– Рәхмәт, дуҫым. Йырыбыҙҙы аңлап, ҙурланың.

Ул ғәҙәтенсә тыйнаҡ ҡына йылмайҙы.

Иртәгеһен беҙ осоп киттек. Аэропортҡа оҙатырға Олесь Гончар, Борис Олейник, Дмитрий Павлычко, Иван Драч, Платон Воронько, тағы байтаҡ кеше килде. Муса Ғәли трапҡа менеп еткәс, түбәндән Олесь ҡысҡырҙы:

– Хушлашыу йыры итеп «Азамат»ты йырла әле, Муса!

Муса инәлтмәне. Траптың иң өҫкө баҫҡысында тороп йырлап ебәрҙе:

Алыҫтарҙан ғына, ай, күренә...

Күк йөҙө саф. Ерҙә һары нур уйнай. Донъя шундай аяҙ. Йыр һауаларға аша. Аша ла торыйҡ-торыйҡ торналар торҡолдауына ҡушыла.

Ир-егеткәй менән ат башы...

Стюардесса йырсыны салонға саҡыра. Ишек ябыла. Беҙ китәбеҙ. Беҙ китәбеҙ, йырыбыҙ ҡала. Хатта яманһыу...

1. Тексты иғтибар менән уҡып сығығыҙ. Аңлашылмаған һүҙҙәрҙе табып, уларҙың мәғәнәләрен асыҡлағыҙ, урындарына синонимдарын ҡуйып ҡарағыҙ.
2. *Хәтер йомшарыу, йән аҫрау, күкрәк ярып сыҡҡан моң* һүҙбәйләнештәренең мәғәнәһенә төшөнөгөҙ. Авторҙың ни өсөн нәҡ ошо һүҙбәйләнештәрҙе ҡулланғанын аңлатығыҙ.
3. Автор украин әҙиптәренән кемдәрҙең исемдәрен телгә ала? Улар тураһында, белгәндәрегеҙгә таянып, әңгәмә үткәрегеҙ.
4. Олесь Гончарҙың «Азамат» йырына биргән аңлатмаһын иғтибар менән уҡып сығығыҙ, һеҙ уның менән килешәһегеҙме? Был йыр тураһында үҙегеҙ ниндәй фекерҙә? Шул турала әңгәмәләшегеҙ.
5. Берәй башҡорт халыҡ йырын тыңлап, тәьҫораттарығыҙ менән уртаҡлашығыҙ.

## КӨЛӘМӘСТӘР

* * *

Хужа Насретдиндан:

– Һинеңсә, ҡояш файҙалыраҡмы, әллә аймы? – тип һорағандар.

Хужа:

– Ай, – тип яуап биргән.

– Ни өсөн? – тип һорағас, Хужа:

– Сөнки ҡояш көндөҙ, былай ҙа яҡты ваҡытта яҡтырта, ә ай төндә – ҡараңғы ваҡытта яҡтырта, – тип яуап биргән.

* * *

Хужа мәктәптә уҡып йөрөгән саҡта, уҡытыусыһы унан:

– Хужа, тәүлек оҙонлоғо нисә сәғәт? – тип һораған.

– Бөгөн егерме биш сәғәт, – тип яуап биргән Хужа.

Уҡытыусыһы:

– Егерме дүрт сәғәт! – тип төҙәткәс, Хужа уға:

– Үҙегеҙ кисә көн бер сәғәткә оҙайҙы, тигәйнегеҙ түгелме һуң? – тигән, ти, аптырап.

1. Көләмәстәрҙе уҡып, йөкмәткеләрен һөйләгеҙ, уларҙың ни өсөн көлкө тыуҙырыуын аңлатығыҙ.

2. Үҙегеҙ белгән көләмәстәрҙе яҙып сығығыҙ. Яҙған көләмәстәрегеҙҙе уҡып ишеттерегеҙ.
3. Рустарҙа, татарҙарҙа һ. б. халыҡтарҙа *көләмәс* нисек атала? Үҙегеҙ белгән берәй телдә көләмәс һөйләгеҙ.
4. Үҙегеҙ көләмәс уйлап сығарып ҡарағыҙ. Һәйбәт көләмәс сыҡһын өсөн нимә кәрәк?
5. Исегеҙгә төшөрөгөҙ – нимә ул *көләмәс?* Уға хас булған үҙенсәлектәрҙе атағыҙ.
6. Бүтәндәрҙән ишеткән йәки үҙегеҙ уйлап сығарған көләмәстәрҙе «Минең ауылымдың фольклоры» тигән альбомығыҙға туплағыҙ.

## Һүҙ күрке – мәҡәл

Аҡыллыға һүҙ әйттем – уйланы ла белде, аҡылһыҙға һүҙ әйттем – тыңланы ла көлдө.

Алйоттан аҡыл һорама.

Иҫәр менән иҫәр булма.

Тиле үҙен маҡтар.

Тинтәккә көн дә туй.

Йүләргә талҡан да бер, шалҡан да бер.

# Боронғо әҙәби ҡомартҡыларыбыҙ

## БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕ ТАРИХЫНАН

Башҡорт әҙәбиәтенең йөҙҙәрсә йылға һуҙылған бай тарихы бар. Уның сығанаҡтары XI быуаттағы төрки телендәге яҙма ҡомартҡыларға барып тоташа. Беҙгә килеп еткән күренекле яҙма ҡомартҡыларҙың иң боронғоһо – «Йософ ҡиссаһы» әҫәре. Уны 1233 йылда Ҡол Ғәли исемле шағир ижад иткән. Был әҫәр башҡорт һәм татар халыҡтарының уртаҡ әҙәби мираҫы булып тора.

Алтын Урҙа дәүләте осоронда башҡорттарҙың илбаҫҡынсыларға ҡаршы көрәшен сағылдырған әҫәрҙәр ижад ителә. Бошман Ҡыпсаҡ тураһында риүәйәт, «Һуңғы Һартай» әҫәрҙәре, мәҫәлән, шундайҙар. «Ек Мәргән» әҫәрендә халыҡтың Ҡазан хандарына ҡаршы көрәше күрһәтелә.

XIX быуатта йәшәгән һәм ижад иткән мәғрифәтселәр халыҡты уҡырға, тәрбиәле, белемле, һөнәрле булырға өндәгән. Мифтахетдин Аҡмулланың «Нәсихәттәр», «Башҡорттарым, уҡыу кәрәк!» исемле шиғырҙары быға асыҡ миҫал.

XIX быуатҡа тиклем әҙәбиәт ҡулъяҙма рәүешендә йәшәгән. Йәғни китаптар ҡулдан ҡулға күсерелеп таралғандар. Китаптарҙы ҡулдан күсереп яҙыу менән шөғөлләнгән кешеләр – каллиграфтар булған.

1812 йылда Ҡазан университетының типографияһында «Ҡуҙыйкүрпәс» повесы баҫылып сыға. 1839 йылда шунда уҡ Ҡол Ғәлиҙең «Йософ ҡиссаһы» әҫәре донъя күрә. Шунан һуң яҙма әҙәбиәт аҡрынлап баҫма әҙәбиәткә әйләнә.

Бөгөнгө көндә башҡорт әҙәбиәте ныҡ үҫешкән милли әҙәбиәт булып тора. Йыл һайын тиҫтәләрсә роман, повесть, бик күп хикәйәләр, поэмалар, шиғырҙар, драма әҫәрҙәре баҫылып сыға.

1. Тексты уҡып, башҡорт әҙәбиәтенең тарихы тураһында аңлағандарығыҙҙы һөйләгеҙ.
2. Ҡулъяҙма әҙәбиәт менән баҫма әҙәбиәтте сағыштырып, уларҙың оҡшаш һәм айырмалы яҡтары тураһында фекер алышығыҙ.
3. Ни өсөн әҙиптәрҙең берәүҙәрен *яҙыусы* тип, икенселәрен *шағир* тип, өсөнсөләрен *драматург* тип йөрөтәләр?
4. Һеҙгә ниндәй әҫәрҙәр ныҕыраҡ оҡшай – прозамы, поэзиямы әллә драма әҫәрҙәреме?

*Ҡол ҒӘЛИ*

## ЙОСОФ ҠИССАҺЫ

*(Өҙөк)*

Бала саҡтан Йософ нәби бер төш күрҙе
(Уны алдан һеҙгә һөйләп биргән инек),
Һуңынан бик күп ҡайғы-хәсрәт күрҙе,
Төрлө-төрлө михнәттәргә төштө имде.

Шунан ғына Хоҙайҙан рәхмәттәр килде,
Ябраил аша сәләмдәрен ебәрҙе:
«Йә, Йософ, был михнәттәрең ниҙән инде –
Алла һиңә мәғлүм итә, бел һин имде...

Михнәт бөттө, Алла һиңә рәхәт бирҙе,
Өҫтәүенә, сикһеҙ оло мөлкәт бирҙе,
Батшалыҡ ҡылырға һиңә форсат бирҙе.
Аманат: яҙыҡ эштән һаҡлан имде».

Йософ нәбигә ысынлап рәхәт килде,
Мысырҙа хөрмәтле оло батша булды,

Алла уға бөтә мөлкәтте лә бирҙе,
Бар эште яҡшылыҡ менән эшләр имде.

Ай тулып, һәр яңыһы тыуғанында,
Ғәскәр йыйылып, бергә-бергә килгәнендә,
Атҡа менеп, Йософ һунар сыҡҡанында,
Һигеҙ мең кеше оҙата барыр имде.

Ҡөҙрәте менән Хаҡ уны итте барлы,
Хөкөмө ғәҙел, аҡылы теүәл, үҙе ғәрле,
Дине бөтөн, ғилеме тамам, йөҙө нурлы,
Йөҙөн күргән йәнен фиҙа итер имде.

Зөләйха зәғифләнде, күҙе күрмәҫ,
Ашау-эсеү, кейенеүгә күңел бирмәҫ,
Ныҡ ҡартайҙы, Йософ уны күреп белмәҫ,
Ә Йософто ул һис тә онотмаҫ имде.

Йософ йөрөгән юлдарҙан китмәҫ булды, –
Ғүмерен уға бағышларға ниәт ҡылды –
Бисара Зөләйхаға бары шул ҡалды,
Ғишыҡлығы уның һаман артыр имде.

Шулай бер көн, сираттағы ай тулғанда,
Аттар кешнәп, ғәскәр тағы йыйылғанда,
Ғәзиз Йософ сәхрәләргә йыйынғанда,
Зөләйха юлында илап торор имде.

Зөләйханың бындай хәлен Йософ белмәҫ,
Зирәк Йософ Зөләйхаға яҡын килмәҫ,
Илағаны ҡолағына ишетелмәҫ –
Барабан, борғо тауышы ҡаплар имде.

Зөләйха хәсрәт йотоп кирегә китер,
Ҡайғы-хәсрәт уттары бәғерен өтөр;
Илай-илай Йософ эргәһенән үтер,
Шулай ҙа ҡауышыу өмөтөн өҙмәҫ имде.

Зөләйха оҙаҡ көндәр шулай йөрөнө,
Хәлдән тайҙы, башы миңрәүләнде…

Тағы ла ай тулып, яңыһы тыуҙы,
Йософ йәнә сәхрәгә атын ҡыуҙы.
Зөләйха, ҡысҡырып, уға тауыш бирҙе:
«Йә, Йософ, миңә бер күҙ һалың имде...»

Ул арала Йософ та яҡынлашты,
Янына килеп, хәл-әхүәлдәрен һорашты,
«Кемһең һин, ни кәрәк һиңә? – тип белеште, –
Әйт аңлатып, йомошоңдо үтәйем имде».

Зөләйха әйтер: «Әй, һөйөклө шаһым,
Хәлем зәғиф, күҙем күрмәй – бел һин асыҡ:
Мысыр батшаһы ҡатыны – Зөләйха ҡарсыҡ,
Бына хәҙер ошо хәлгә төштөм имде.

Иҫеңдәме, һине һатып алған инем,
Бөтөн малым һиңә фиҙа ҡылған инем,
Һиңә ғишҡымдан мин хайран ҡалған инем,
Бына бөгөн ни хәлгә төштөм имде!

Ҡулдарымдан китте инде аш-һыу, ниғмәт, –
Һис ҡалманы, юҡҡа сыҡты бар мал-мөлкәт.
Әммә ләкин кәмемәне ғишҡым-хәсрәт,
Бер туҡтауһыҙ яндыра, арта имде...»

Йософ, Зөләйханы күреп, бик йәлләне,
Уның ғишҡы-хәсрәтенә ғәжәпләнде,
Әйткәненә ысынлап ышанманы,
Һынар өсөн ҡабатлап һорар имде:

«Йә, Зөләйха, ҡайҙа һинең һанһыҙ малың,
Зифа буйың, оҙон сәсең, нескә билең?
Тулған айҙай балҡыр ине матурлығың –
Нисек итеп ошо хәлгә төштөң имде?»

Зөләйха әйтер: «Матурлығымды, малымды бирҙем,
Һинең өсөн бөтәһен дә фиҙа ҡылдым.
Бәхетемдән, тәхетемдән мин төңөлдөм,
Һинең ғишҡың мине әсир итте имде».

Йософ әйтер: «Әгәр ҙә ысынлап ғашиҡ булһаң,
Ғашиҡлыҡҡа тоғролоҡто һаҡлай алһаң,
Ғашиҡлыҡҡа ысынлап дәғүә ҡылһаң,
Был дәғүәңә берәй дәлил кәрәк имде».

Зөләйха әйтер: «Әйҙә, яҡыныраҡ кил,
Рәхим итеп, ҡамсыңды, Йософ, миңә бир,
Ғашиҡ булһам, ул хәҙер һиңә белдерер,
Күрһәтмәһә, был дәғүәм урынһыҙ имде».

Йософ уға ҡамсыһын урап тотторҙо,
Ҡатын ҡамсыға бер өрөп кире бирҙе,
Ҡамсыға ут тоҡанмышын Йософ күрҙе,
Уты Йософтоң ҡулын көйҙөрөр имде...

Зөләйха әйтер: «Йә, Йософ, ышандыңмы,
Ҡамсы ниҙән ҡабыныуын аңланыңмы?
Әллә ҡулың янғанын да тойманыңмы?
Ҡырҡ йыл ул ут мине көйҙөрә имде».

Йософ нәби был эшкә бик ғәжәпләнде,
Зөләйхаға нәсихәттәр, өгөт бирҙе:
«Һин өмөтлән, көткән вәғәҙә көнө килде,
Михнәт үтте, рәхәт килде, аңла имде».

Шул мәлдә Ябраил тағы осоп килде,
Хаҡ сәләмен Йософҡа ул еткерҙе...

Ябраил әйтер: «Мәүләм сәләм ебәрҙе,
Хәҡиҡәт, һиңә ул ебәрҙе мине,
Зөләйхаға никах ҡылып, алһын, тине,
Зөләйха – ҡатын, һин – батша булһын имде».

Ябраилдан Йософ нәби быны белде,
Зөләйха торған ергә кире барҙы,
Быларҙы һөйләп, уны шатландырҙы:
«Йә, Зөләйха, рәхәт-һөйөнөс килер имде».

Быны ишетеп, Зөләйха ҡайғыға ҡалды:
«Эй, Хоҙайым, үҙең беләһең минең хәлде,

Матурлығымдан, малымдан күптән яҙҙым,
Үҙем ҡарт, өҫтәүенә, ике күҙем күрмәҫ имде…»

Шул сәғәт Ябраил ҡабаттан килде,
Ҡанаты менән һыйпаны, доға ҡылды –
Зөләйханың күҙе асылды, йәп-йәш булды,
Йөҙө тулған ай шикелле балҡыр имде.

Йософ нәби шунда оло мәжлес йыйҙы,
Әмер бирҙе, Зөләйхаға никах ҡылды.
Хөрмәтле күп ҡунаҡтар һарайға йыйылды,
Бик күп ҡыуаныс-шатлыҡтар булыр имде…

Унан аҙаҡ хаҡ әмере шулай булды:
Ошо икәүҙең ғүмере бергә уҙҙы,
Ун ике ул мәүләнең бүләге булды,
Олоһона, Мөсәлим, тиерҙәр имде.

**1.** Тексты иғтибар менән уҡып сығығыҙ. Йөкмәткеһен һөйләгеҙ.
**2.** Әҫәр, уның авторы тураһында кескәй белешмә төҙөп яҙығыҙ.
**3.** Тел көрмәлдергесте дөрөҫ итеп уҡығыҙ:

Тау буйындағы урманда
Тумыртҡа туҡылдата.
Туҡ-туҡ-туҡ, тумыртҡа,
Туҡылдатып ултырма.

## АЛМАШ ТӨРКӨМСӘЛӘРЕ

Бер төр алмаштар заттарҙы белдергән һүҙҙәрҙе алмаштыра. Бындай алмаштар **зат алмаштары (личные местоимения)** тип атала. Зат алмаштары алтау: *мин, һин, ул, беҙ, һеҙ, улар*.

Зат алмаштары килеш менән үҙгәрә.

*Беҙ, һеҙ, улар* – исемдәр кеүек үҙгәрә. Ә *мин, һин, ул* алмаштарының, килеш менән үҙгәргәндә, һуңғы хәрефтәре *(н, л)* төшөп ҡала.

Урын-ваҡыт килештә был алмаштарҙың формаһы түбәндәгесә: *миндә, һиндә, унда*.

**155-се күнегеү.** Һөйләшеүҙе дауам итегеҙ.

– Әйтегеҙ әле, был урын бушмы?

– Быныһы буш түгел, ә тегеһе буш. Рәхим итеп ултырығыҙ...

**156-сы күнегеү.** Берлектәге зат алмаштарының башҡорт һәм татар телдәрендәге килеш менән үҙгәрешенә иғтибар итегеҙ. Башҡорт телендәге зат алмаштарының дөрөҫ яҙылышын һәм әйтелешен хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ.

| | *Башҡорт телендә* | *Татар телендә* |
|---|---|---|
| Төп килеш | мин, һин, ул | мин, син, ул |
| Эйәлек килеш | минең, һинең, уның | минем, синең, аның |
| Төбәү килеш | миңә, һиңә, уға | миңа, сиңа, аңа |
| Төшөм килеш | мине, һине, уны | мине, сине, аны |
| Урын-ваҡыт килеш | миндә, һиндә, унда | миндә, синдә, анда |
| Сығанаҡ килеш | минән, һинән, унан | миннән, синнән, аннан |

**157-се күнегеү.** Шиғырҙы рус теленә тәржемә итегеҙ.

## ҠЫШ КИЛГӘС

Алыҫ урман,
Урманда томан.
Ерҙе ҡаплаған
Аҡ мамыҡ юрған.
Тышта ата ҡаҙ.
Ул, меҫкен, бойоҡ.

– Әсәй, ниңә уның
Бер аяғы юҡ?
Тышта ел өрә,
Ҡарҙы һеперә.
Мин өйҙә торам
Һалҡынға күрә.

*(М. Кәрим)*

## ҠАРМАСАН МЕНӘН СӘРМӘСӘН

*(«Һуңғы Һартай» хикәйәте буйынса)*

Барыһын да уйлай башлаһам, башым яна! Шулай ҙа мин бөтә булғанды һөйләп бирергә телемде мәжбүр итермен.

Бөтәгеҙ ҙә тыңлағыҙ!

Исемем – Ялыҡ! Ташҡай улы Бурнаҡтың улымын, Һартай ырыуынан. Тамғам – төлкө ҡойроғо. Ҡасандыр мин дә данлыҡлы яугир инем. Эйе. Мине аҡһаҡал тип тә, бей тип тә йөрөтәләр ине. Элек мин дә шәп йәшәнем. Минең тирмәм Сейәлетүбә эргәһендә ине.

* * *

Тыңлағыҙ барығыҙ ҙа!

Һеҙгә балаларым хаҡында һөйләйем. Улар икәү ине. Икеһе лә ул ине. Тәүгеһе тыуғас, мин уға Ҡармасан тип исем ҡуштым. Икенсеһен Сәрмәсән тип атаным.

Хәҙер юҡ инде улар.

Улар яҡты донъянан китте. Ә исемдәре йөрәгемдә ут менән яҙылып ҡалды! Хоҙайым! Уларҙың ҡәберен рәхмәтең менән тултыр!

Мин әйтәйем, Өлкән тигән бер әсә балалары булһалар ҙа, улар һис тә бер-береһенә оҡшамағандар ине. Ағаһы энеһенән бер ҡарышҡа бейегерәк ине, күҙҙәре уның ямғырға сыланған сөм ҡара ҡарағат төҫлө ине. Ул яралы бөркөт кеүек ҡыйыу, ҡурҡыу белмәҫ батыр булды.

Аҙаҡ үҙ күҙҙәрем менән күрҙем: Аҡһаҡ Тимерҙең һуғышсылары уның менгән атын йыҡты. Ҡотлобәк мырҙа Ҡармасандың муйынына боғалаҡ ташланы. Шул ерҙә Ҡармасан, минең Ҡармасаным, ерҙән ырғып тороп, Ҡотлобәкте матҡып тотоп алды ла ҡаянан һыуға һикерҙе.

Уның суҡмары килмешәктәрҙең тимер торҡа кейгән баштарын бешкән сәтләүектәй итеп онтаны. Үҙ ғүмерендә уның алты ғына уғы яҙа китте. Ул егет ине!

Инде – Сәрмәсән!

Эй, ағайҙарым! Йылға буйында үҫкән йәш күрәнде күргәнегеҙ бармы? Ул шундай төҙ, зифа. Эйе. Ел иҫкәндә, ул талғын ғына сайҡалып китә. Ул һәр ваҡыт һылыу. Шулай. Бына шуның кеүек ине минең Сәрмәсәнем. Ул ҡурайға оҫта ине, йырлап йөрәгемде ойота ине. Ул йырсы ла, ҡурҡыу белмәҫ яугир ҙа булды. Был да яҡшы. Уны яраттым. Икеһен дә ярата инем мин уларҙың. Улар минең балаларым, данлы батырҙарым булды, исемдәре лә мәңгегә ҡалды…

Тыңлағыҙ!

Ҡара абыҙ аҡһаҡалдың һылыуҙарҙан-һылыу бер ҡыҙы бар ине. Ҡоҙғон ҡанатынан да ҡара ине уның сәстәре. Ә йөҙө яңы яһалған йәш ҡороттан да аҡ ине. Күтәрелеп бер ҡараһа, күҙҙәренән нур сәсә ине. Уның исеме Айбикә ине. Йәш тә, матур ҙа ине.

Уны күргәс, улым Ҡармасанға:

– Улым, – тинем, – энең әле йәш. Һин Ағиҙелдең аръяғында Ҡара абыҙ аҡһаҡал торғанын беләһең. Уның Айбикә тигән ҡыҙы бар. Донъяла үҙенә иш ҡалдырыр өсөн ҡатындан тыуған йән ҡатын эҙләр!

Ҡармасанға мин шулай тинем. Ул мине аңланы: «Белмәйем» тип торманы. «Кәрәкмәй» тип тә әйтмәне.

Ул бит минең улым ине.

Шунан...

Мин Ҡара абыҙға өс көтөү һарыҡ, ярты өйөр бейә ебәрҙем. Ҡармасанға кәләш алып бирҙем.

Ҙур итеп туй яһаным. Ҡунаҡтар бал эсте, ҡымыҙ эсте, төрлө йыр йырлашты. Шунан сапҡынсы килеп төштө.

Йә Хоҙай! Сабырлыҡ бир! Уйҙарым бутала. Әммә миңә түҙергә, бөткәнсе һөйләргә кәрәк.

Шулай итеп, беҙ бал, ҡымыҙ эсеп, туйҙа ултырабыҙ. Бик һәйбәт. Кис булды. Йыр тынған арала, ҡайҙалыр сыңлатып бейә һауғандары, сиңерткә сырылдағаны ишетелә. Торҙом да тышҡа сыҡтым. Тып-тыныс. Күккә ҡараным – салт аяҙ. Бейектә, түңкәреп ҡуйған сүмес кеүек, Етегән йондоҙ йымылдай, йондоҙҙар яна. Эйе, тирә-яҡ тын, ләкин ниҙер көтәм, ниҙәндер шомланам.

Көткәнем килде. Тәүге сапҡынсы. Хәтеремдә: менгән аты арыған, аҡ күбеккә батҡан. Бына ни тине был сапҡынсы:

– Түрә! Хәбәр алып килдем. Тимер хан, күҙе сыҡҡыры, төшлөк яҡтан бында килә. Бик күмәктәр. Эйе. Йәйге эҫелә себен ни тиклем булһа, былар ҙа шул тиклем. Улар тауҙар аша артылып килә. Йәшел байраҡтары Яйыҡтың был яғында күренә башлаған.

Бына ниндәй хәбәр ишеттем мин унан. Был меҫкен сапҡынсыға мин асыуланманым. Юҡ! Мин уны тирмәмә алып индем, ашаттым. Ҡунаҡ иттем. Яҡшы эшләнем.

Эйе! Сапҡынсы бушты һөйләмәгән. Ысынлап та, шулай булды. Улар килде.

Был хәл урмандағы ояһыҙ кәкүктең һаҡауланған сағында булды...

1. Тексты иғтибар менән уҡып сығығыҙ. Унда нимә тураһында һүҙ барғанын асыҡларға тырышығыҙ. Кем ул Тимер хан? Ни өсөн Ялыҡ бей уға ҡаршы һуғыша?
2. Таныш булмаған һүҙҙәрҙе табығыҙ, мәғәнәләрен аңлатығыҙ.
3. *Йырлап йөрәгемде ойота ине, улар яҡты донъянан китте, исемдәре йөрәгемдә ут менән яҙылып ҡалды* һөйләмдәренең мәғәнәһен асыҡлағыҙ, уларҙы текстан табып уҡығыҙ.
4. Башҡортостан картаһынан Ҡармасан менән Сәрмәсән йылғаларын табығыҙ. Шуға ҡарап, әҫәрҙәге ваҡиғаларҙың ҡайһы тирәлә барғанлығын асыҡлағыҙ.
5. Ҡармасан менән Сәрмәсән образдарына характеристика бирегеҙ.

**158-се күнегеү**. Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.

Ай кеүек тыуһаң ине лә,
Ай кеүек тулһаң ине.
Ә һүнгәндә, йондоҙ һымаҡ,
Ҡапыл атылһаң ине.

*(М. Кәрим)*

**159-сы күнегеү.** Тексты башҡорт теленә тәржемә итегеҙ.

Ночью бомбардир писал письмо:

«Дорогая мамочка, если бы ты знала, как я скучаю по тебе.

Если бы ты только знала, как мне хочется быть возле тебя. Скажу тебе правду не только потому, что люблю тебя больше всех на свете. Но ты ведь единственная понимаешь, что я ближе к маленьким, чем к большим...»

*(В. Гроссман)*

**160-сы күнегеү.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.

– Һаҡмарҡайым аҡ тулҡынға биҙәлгән...
– Тулҡын түгел – тәнем шулай биҙрәгән
Түбән ҡарап һыу алған биҙрәләрҙән.

*(Р. Түләк)*

Башҡорттарҙа йылғанан һыуҙы биҙрәләрҙе йылға үренә ҡаратып алырға ҡушалар. Үлгән кешеләрҙе йыуыу өсөн генә, һыуҙы биҙрәләрҙе түбән ҡаратып алалар. Шағир бында башҡорт ауылдарында фажиғәләрҙең күбәйеүенә һәм йәш быуындың халыҡтың ғөрөф-ғәҙәттәрен һанламауына ишара яһай.

*Салауат ЮЛАЕВ*

## БҮГӘСӘҮГӘ ҠУШЫЛЫП, ИР-БАТЫРҒА ҠУШ БУЛЫП...

Алыҫ та алыҫ ерҙәрҙә,
Беҙ күрмәгән илдәрҙә
Дон тигән йылға бар икән.
Йылғала йөҙгән балыҡҡа,
Эшләп көн күргән халыҡҡа,
Тирҙәрен түккән улдарға,
Ай кеүек һылыу ҡыҙҙарға
Донда ла тормош тар икән,
Унда ла тормош тар икән.

Дон буйынан ҡуҙғалып,
Яҡ-яғына күҙ һалып,
Бүгәсәү тигән бер батыр,
Йәмәлкә тигән ир-батыр,
Сал бөркөттәй саңҡылдап,
Янған үрттәй ялҡынлап,
Халыҡҡа оран ташлаған,
Ялпыға хитап ташлаған.

Тауҙарҙы үткән был хитап,
Һыуҙарҙы кискән был хитап.
Бүгәсәү батыр янына
Ғәскәр килгән бихисап.
Эйәрләп, атҡа менгән дә,
Биленә ҡылыс элгән дә,
Бүгәсәү тигән шул батыр,
Йәмәлкә тигән ҙур батыр,
Арыҫландай ажғырып,
Юлында ҡойон яндырып,
Түрәһе менән батшаның,
Баяры менән батшаның,
Байҙары менән батшаның,

Һанаты менән батшаның
Алыш та атыш башлаған.

Дуҫтарын йыйған Бүгәсәү,
Дошманын ҡырған Бүгәсәү,
Һуғышта алған дан менән
Яйыҡҡа еткән Бүгәсәү.
Аңлағыҙ ошо телмәрҙән:
Ул миңә хәбәр ебәргән,
Бығаулының ҡулынан
Бығауын йолҡам, тигән ул;
Тышаулының аяғынан
Тышауын йолҡам, тигән ул;
Ерһеҙ ҡалған башҡортҡа
Ерен бирәм, тигән ул;
Һыуһыҙ ҡалған башҡортҡа
Һыуын бирәм, тигән ул;
Ҡол булып килгән башҡортҡа
Иркен бирәм, тигән ул.
Башҡорттар үҙ ерендә,
Тыуған-үҫкән илендә,
Ҡош булып, күккә менһендәр,
Балыҡтай һыуҙа йөҙһөндәр,
Боландай ерҙә елһендәр,
Ана шулай тигән ул.

Хәбәрем бар күп ерҙәрҙән;
Батыр ҙа батыр ирҙәрҙән:
Тамъянынан, Бөрйәндән,
Юрматы, Ҡыпсаҡ, Үҫәргән,
Түңгәүерҙән, Ҡатайҙан,
Йәшенән, ҡарт атайҙан, –
Бары ла әҙер торалар,
Бары ла уҡ-ян ҡоралар.
Йыл артынан йыл үтте,
Ҡыш булды ла, боҙ китте.
Нисәмә йылдар буйына,
Ҡамыт кейгәндәй муйынға,

Бөркөттәй саңлар заманда
Тыныс тороп ҡараныҡ;
Бай, түрәләр ни ҡушһа,
Шуны эшләп ҡараныҡ;
Ни һораһа бай, түрә,
Шуны биреп ҡараныҡ.

Билде лә бөктөк хеҙмәттә,
Тирҙе лә түктек хеҙмәттә;
Алтын да биреп ҡараныҡ,
Атын да биреп ҡараныҡ.
Түрәнең тамағы туйманы,
Йәбер-золомон ҡуйманы:
Меңәрләп малды ҡыуҙылар,
Йөҙәрләп йәнде ҡыйҙылар;
Ил ағаһы ирҙәрҙең
Күҙенә ҡурғаш ҡойҙолар;
Аҫыл да аҫыл ҡыҙҙарҙы
Ҡол итеп ситкә ҡыуҙылар.
Ҡан һауҙы инде күҙебеҙ,
Бөттө инде түҙемебеҙ!

Бүгәсәүгә ҡушылып,
Ир-батырға ҡуш булып,
Казактарға иш булып,
Яуға сығыр көн етте,
Ирек яулар көн етте!
Туй барғанда, түш кереп,
Көрәшкә сыҡҡан – батырмы?
Икәүҙән-икәү алышып,
Ҡорҙашын йыҡҡан –
батырмы?
Халҡына йәне ҡушылған,
Дошмандан илен ҡурсыған,
Эйәрләп атҡа атланған,
Ажғырып яуға ташланған, –
Илдең батыры шул булыр,
Илдең күрке шул булыр.

1. Текстан таныш булмаған һүҙҙәрҙе яҙып алығыҙ, мәғәнәләрен аңлатығыҙ.
2. *Көн күреү, тир түгеү, йән ҡыйыу, ҡан һауҙы* һүҙбәйләнештәренең мәғәнәләрен аңлатығыҙ, уларҙы ҡулланып бер нисә һөйләм төҙөгөҙ.
3. Кем ул *Бүгәсәү, Йәмәлкә?* Салауат Юлаев ни өсөн уны маҡтай, халыҡты уға ҡушылырға саҡыра? Шуға аңлатма бирегеҙ, аңлатмағыҙҙы текстҡа ҡарап төҙөгөҙ.
4. Башҡорт телендә элек рус исемдәрен ныҡ башҡортсалаштырып әйткәндәр. Түбәндәге исемдәрҙең русса нисек булғанын асыҡлағыҙ:

Тәрәнтәй – Терентий
Гөргөрөй –
Йәгүр –
Ыстапан –
Гәрәскә –
Тымафый (Тимүшкә) –
Мәтрүнә –
Мәрйә –

Ололарҙан һорап, исемлекте дауам итегеҙ.

5. Текста башҡорт ырыуҙарының исемдәре телгә алына. Был ырыуҙарға ҡараған башҡорттарҙың әлеге ваҡытта ҡайһы тирәлә йәшәгәндәрен асыҡлағыҙ.
6. Текст өҫтөндә тасуири уҡыу күнекмәләре үткәрегеҙ.

**161-се күнегеү**. Шиғырҙы ятлағыҙ.

Ир-егеттән азаматлыҡ китһә,
Азатлығы бөтә, халҡы бөтә.
Халҡы бөткән ирҙең «ирмен» тиеп
Аталырға тулы хаҡы бөтә.

*(Ә. Үтәбай)*

**162-се күнегеү**. Ҡалын хәрефтәр менән бирелгән һүҙҙәрҙе алмаштар менән алмаштырығыҙ. Һөйләмдәрҙең мәғәнәһе үҙгәрҙеме?

1. **Саматтың** китабы. 2. **Урманда** үҫә, ә **яланда** үҫмәй. 3. **Апаһына** асыулана. 4. **Төҫлө** ҡәләмдәр. 5. Наилға **ун биш** һум аҡса бирҙе.

**163-сө күнегеү.** Түбәндәге текста исем, сифат һәм ҡайһы бер ҡылымдар урынына алмаштар ғына бирелгән. Алмаштар урынына, һәр берегеҙ үҙегеҙ теләгәнсә, тулы мәғәнәле һүҙҙәр ҡуйып яҙып, тексты аңлайышлы итегеҙ.

Тегендә йөрөп ҡайтҡандан һуң, ул тағы ла шунда инде. Тик теге бында булмай сыҡты. Тегеләрҙән ниткәйне, улары: «Ул шундай инде ул, әле генә ошонда нитеп йөрөй ине, моғайын, шунда киткәндер», – тине. Был да шунда нитергә булды. Шулай ҙа анауһы тегенән килеп сыҡҡас, әлегә уны ошонда ғына көтөргә булды.

Алмаштарҙың тағы ла биш төркөмсәһе бар.

**Күрһәтеү алмаштары:** *был, былай, бындай; шул, ошо, теге.*

**Билдәләү алмаштары:** *һәр, үҙ, бөтә...*

**Һорау алмаштары:** *кем, нимә, нисек, ниндәй...*

**Юҡлыҡ алмаштары:** *һис кем, бер кем дә, һис нимә, бер нимә лә...*

**Билдәһеҙлек алмаштары:** *әллә кем, теләһә кем, кемдер...*

Алмаш төркөмсәләрен иҫтә ҡалдырыуы бик уңайлы. Зат алмаштары тураһында алдағы биттәрҙә әйтелгәйне.

**Күрһәтеү** алмаштары, исеме үк әйтеүенсә, төртөп «күрһәтәләр» – **был, шул, ошо, анау, теге.**

Уларҙың һәр береһенән тағы ла **нисек? ниндәй?** һорауҙарына яуап бирерлек формалар яһала: **шул – шулай, шундай...**

**Билдәләү** алмаштарының өсөһөн генә нык иҫтә ҡалдырырға кәрәк: **һәр, үҙ, бөтә.** Ҡалған билдәләү алмаштары йә ошоларҙан яһала, йә синоним була: **һәр** – *һәр бер, һәр кем, ...*; **үҙ** – *үҙем, үҙенеке, үҙебеҙ, ...*; **бөтә** – *бөтәһе, барлығы, һәммәһе, ... .*

**Һорау** алмаштарына башҡорт телендәге бөтә һорау һүҙҙәр инә. Беҙ ул һүҙҙәрҙе көнөнә һәр беребеҙ әллә нисә тапҡыр ҡабатлайбыҙ.

**Юҡлыҡ** алмаштары менән **билдәһеҙлек** алмаштарының төп һүҙҙәре – һорау алмаштары. Шуларға **һис, бер** һүҙҙәре һәм **дә** киҫәксәһе өҫтәлеп, **юҡлыҡ** алмаштары яһала; **әллә, теләһә** һүҙҙәре һәм **-дыр** киҫәксәһе өҫтәлеп, **билдәһеҙлек** алмаштары яһала.

## ҠАРАБАЙ МЕНӘН САРЫБАЙ

*(«Ҡуҙыйкүрпәс» повесы буйынса)*

Борон Иртыш йылғаһы башланып киткән ерҙә бер башҡорт ырыуында Ҡарабай тигән бик абруйлы кеше ғүмер иткән. Уның яңғыҙ йәшәгәнлеген күреп, башҡа башҡорттар ҙа шул тирәгә килеп ултыра башлағандар.

Ҡарабайҙың мал-тыуары күп булған. Унан күреп, башҡалар ҙа күпләп мал аҫрай башлағандар. Тик Ҡарабайҙың балалары булмаған. Бының өсөн ул бик ҡайғырған. Йәйләү кешеләре менән ул йыш ҡына күрше ҡаҙаҡ далаларына һунарға йөрөгән.

Берҙән-бер көндө һунарҙа йөрөгәндә, улар өҫтөнә бер арыҫлан килеп сыға. Элек бер ҙә күренмәгән был йыртҡыс януар һунарсыларҙы сигенергә мәжбүр итә. Тик Ҡарабай ғына урынынан ҡуҙғалмай тороп ҡала. Арыҫлан, ҡот осҡос ялын тырпайтып, Ҡарабайға ташлана. Ҡарабай ҡаушап ҡалмай, уғын атып өлгөрә, арыҫлан, үкерә-үкерә йығылып, шунда уҡ йән бирә. Шул арала юлдаштары ла килеп етә. Улар Ҡарабайҙың иҫ киткес ҡыйыулығына һоҡланалар. Ошо көндән алып, уны Ҡарабай батыр тип йөрөтә башлайҙар.

Ҡарабайҙың арыҫлан үлтереүе тураһындағы хәбәр башҡорт, ҡаҙаҡ ырыуҙары араһында бик тиҙ тарала. Ҡарабай менән танышырға теләүселәр күбәйә. Бигерәк тә Сарыбай исемле ҡаҙаҡ батыры уның менән танышырға һәм дуҫлашырға теләй. Тиҙҙән ул был теләгенә ирешә. Берҙән-бер көндө ул Ҡаҙкүл тигән күл буйында һунарҙан һуң ял итеп ятҡан Ҡарабай янына килеп сыға. Сарыбай, истәкте үҙ ерендә күргәс, был беҙҙең яҡҡа барымтаға килгәндер, тип уйлап, уғын Ҡарабайға тоҫҡай ҙа:

– Атып йыҡмаҫ борон, исемеңде әйтеп ҡал! – тип ҡысҡыра.

– Мин Ҡарабай булам! – ти батыр, ғорур тауыш менән.

Ҡаҙаҡ батыры, быны ишеткәс, бик ныҡ ҡыуана, Ҡарабай менән күптән танышырға теләүе тураһында әйтә, нығыраҡ дуҫлашыр өсөн, уны үҙенең йәйләүенә ҡунаҡҡа алып ҡайта. Тирә-яҡтан бик күп ҡунаҡтар йыйып, уларҙы арыҫлан үлтергән батыр менән таныштыра. Ҡунаҡ өс көн буйы дауам итә. Ҡарабай хөрмәтенә төрлө уйындар ойошторалар, ат сабыштыралар, көрәшәләр. Ҡунаҡтар, хужаға рәхмәт әйтеп, Ҡарабайҙың батырлығын маҡтап таралышалар. Сарыбай Ҡарабайға ике арғымаҡ бүләк итә, ә кинйә улы Яланбай башҡорт батырын ауылына тиклем оҙатып бара.

Ҡарабай ҙа, үҙен оҙатып килгән Яланбайға һый-хөрмәт күрһәтеп, иң яҡшы ике арғымағын бүләк итеп, уларға төрлө бүләктәр, ҡайтып еткәнсе ашарлыҡ аҙыҡ-түлек артмаҡлатып оҙатып ҡала. Тәүге ҡар төшкәс тә, әлеге Ҡаҙкүл янына һунарға саҡыра.

Яланбай ҡайтыу менән, атаһына Ҡарабайҙың сәләмен әйтеп, ебәргән бүләктәрен тапшыра. Сарыбай бик ҡыуана. Яңынан осрашыу көндәрен түҙемһеҙлек менән көтә башлай.

Һунарға билдәләнгән көн килеп еткәс, Сарыбай уландары менән юлға сыға. Бик ашығалар, юлда осраған йәнлектәрҙе лә аулап тормайҙар. Ике көндән улар Ҡаҙкүл янында булалар. Улар килеп етеү менән, күп тә үтмәй, Ҡарабай, уның артынса юлдаштары күренә. Ҡыуанысы эсенә һыймаған Сарыбай дуҫын ҡосаҡлап ала. Был көндө улар, дуҫтарса әңгәмәләшеп, уйын-көлкө менән күңел асып үткәрәләр.

Икенсе көндө улар, төркөмдәргә бүленеп, һунарға сығалар. Һунар уңышлы була, ә көтмәгәндә килеп сыҡҡан бер хәл ике батырҙың дуҫлығын тағы нығыта.

Сарыбай яңғыҙы ҡуйы ҡамышлыҡ буйлап китеп барғанда, уға аңғармаҫтан бик ҙур бер юлбарыҫ тап була. Йыртҡыс уның өҫтөнә ташлана. Батыр уға һөңгөһөн ҡаҙап өлгөрә, әммә юлбарыҫ үлмәй. Яралы йыртҡыс һөңгөнө һындыра һуға. Ҡоралһыҙ ҡалған батыр атынан һикереп төшә, ярһыған йыртҡыс уның атын ботарлап ташлай, тағы ла нығыраҡ ҡотороноп, Сарыбайҙың өҫтөнә яңынан ташлана. Шул саҡ Ҡарабай килеп сыға, юлбарыҫтың башын яра саба. Сарыбай шатлығынан ни эшләргә лә белмәй, дуҫын ҡосаҡлап-ҡосаҡлап рәхмәт әйтә:

– Атым ботарланып ташланғайны, үҙем ҡоралһыҙ тороп ҡалғайным. Мине үлемдән ҡотҡарыр өсөн Алла ебәргән һине!

Ҡарабай, иң элек һин үҙең, йыртҡысты йәрәхәтләп, көсөн алғайның, тип дуҫын маҡтай. Шул ваҡыт Сарыбайҙың уландары, Ҡарабайҙың юлдаштары килеп етәләр. Туҡталған урындарына ҡайтып, ҡымыҙ эсә-эсә, иртәгәһенә буласаҡ һунар тураһында һөйләшеп ултырғанда Ҡарабайҙың бер көтөүсеһе ат саптырып килеп етә. Ул йыраҡтан уҡ:

– Һөйөнсө! – тип ҡысҡыра. – Ҡатының Алтыша һиңә ул тапты!

Был хәбәрҙе ишетеүгә бик ҡыуанған Ҡарабай дуҫы менән юлдаштарын ҡосаҡлап ала, шатлыҡлы хәбәр өсөн көтөүсеһенә рәхмәт әйтеп, уға үҙенең яҡшы атын бүләк итә. Шунда уҡ мәжлес ойошторалар. Ҡарабайҙы ҡотлай-ҡотлай ҡымыҙ эсеп, ит ашап туйғас, Ҡарабай Сарыбайға:

– Ҡәҙерле дуҫым! Һинең менән һунарға йөрөү бик күңелле булһа ла, улымды ҡайтып күрергә йөрәгем ашҡына, һин үҙең дә ата кеше, минең хәлемде аңлап, юлға сығыуыма ҡаршы килмәҫһеңдер, тип уйлайым, – ти.

Был һүҙҙәрҙе ишетеүгә, ете бала атаһы Сарыбай, арыҫлан үлтереүсе батыр дуҫы менән айырылышҡыһы килмәһә лә, уның бик ҡайтҡыһы килеүен күргәс, ирекһеҙҙән риза була.

Һунарсыларҙың ике төркөмөндә лә аттар эйәрләнә, һауытһабалар ат өҫтөнә артылған була. Шул саҡта Сарыбайҙың бер көтөүсеһе сабып килеүен күреп ҡалалар. Көтөүсе, килеп еткәс тә, хужаһына: һинең һөйөклө ҡатындарыңдың береһе һылыу ҡыҙ тапты, тип хәбәр итә. Сарыбай, шатлығынан дуҫының муйынына һарылып:

– Мине үлемдән ҡотҡарған хөрмәтле дуҫым! Ҡыҙымды үҙ улыңа кәләш итеп бирәм! – ти.

Ошо һүҙҙән һуң ике дуҫ ҡосаҡлаша ла бөтәһенең күҙ алдында ҡулға-ҡул һуғышалар. Шунан һуң улар йәнә хушлашып, оҙаҡламай ҡайтанан күрешергә һүҙ бирешеп, үҙ юлдарына китәләр.

1. Өҙөктө иғтибар менән уҡып сығығыҙ. Уҡыу барышында осраған яңы һүҙҙәрҙе яҙып ала барығыҙ. Һуңынан уларҙы күмәкләп, ололарҙан һорап, һүҙлектәрҙән ҡарап, мәғәнәләрен асыҡлағыҙ.
2. Өҙөктөң йөкмәткеһен үҙ һүҙҙәрегеҙ менән һөйләп өйрәнегеҙ.
3. Ҡарабай менән Сарыбай батырҙарға характеристика бирегеҙ.

4. Текста арыҫлан менән юлбарыҫ тураһында һүҙ бара. Был әҫәргә улар нисек килеп инделәр икән?
5. Ҡарабай менән Сарыбайҙың артабанғы яҙмышы, ваҡиғаларҙың нисек дауам итеүе ҡыҙыҡһындырһа, повестың тулы тексын табып уҡырға тырышығыҙ.

**164-се күнегеү.** Алмаштарҙы рус теленә тәржемә итегеҙ.

Беҙ, улар, был, тегендә, бында, кем, нимә, ниндәй, бөтә, барыһы, әллә ни, һис кем, ҡайҙалыр, нисәнсе, күпме.

**165-се күнегеү.** Башҡорт халыҡ йырының өҙөгөн тасуири уҡығыҙ.

## ТУҠ БУЙЫ

Туҡ буйҡайҙары, ай, туҡ, тиҙәр,
Туҡ һыуындай һыуҙар юҡ, тиҙәр.
Туҡ буйында үҫкән, ай, егеттәр –
Һайлап алған һаҙаҡ-уҡ, тиҙәр.

Туп-туп итеп баҫҡан туры аттың
Туҫтаҡ кеүек булыр тояғы.
Ирмен генә тигән ир-егеттең
Ат башындай булыр йөрәге.

**166-сы күнегеү.** Бирелгән һорау алмаштарынан билдәһеҙлек һәм юклыҡ алмаштары яһағыҙ.

Ниндәй, ҡайҙа, ҡасан, ниңә, күпме.

**167-се күнегеү.** Алмаштарҙы табып, төркөмсәләрен билдәләгеҙ.

1. Һеҙ, егеттәр, ошо ерҙән китмәгеҙ, мине көтөп тороғоҙ.
2. Үҙеңә юлдаш итһәң, мин дә һинең менән барыр инем.
3. Һеҙ үҙегеҙ кем булаһығыҙ?
4. Шунан былар һәр береһе үҙ иленә ҡайтып киттеләр, ти.

*(«Аҡъял батыр» әкиәтенән)*

Ниндәй төркөмсә алмаштары күберәк осраны?

**168-се күнегеү.** Ҡайһы һүҙбәйләнеш артыҡ? Ни өсөн?

1. Мин киткәнгә, ул әйткәс, һин барыуҙан, ул саҡтарҙа, беҙ килгәндә.

2. Беҙҙең ауыл, һеҙгә барабыҙ, кемдән киләләр, уларҙы күрҙем, һине саҡыралар.

**169-сы күнегеү.** Мәҡәлдәрҙе уҡығыҙ, мәғәнәләрен аңлатығыҙ.

1. Тәм татыған ҡойоңа төкөрмә.
2. Татлынан татлы – яҡшы һүҙ, затлынан затлы – яҡты йөҙ.
3. Тик тормаған теленән табыр.

*Мифтахетдин АҠМУЛЛА*

## НӘСИХӘТТӘР

*(Өҙөк)*

Иң әүүәл кәрәк нәмә – иман, тигән,
Ахирәт эштәренән инан, тигән.
«Хоҙай, кисер!» – тигән менән эш бөтмәйҙер,
«Иман шартын» өйрәнмәһә – Иван, тигән.

Икенсе ҡиммәт нәмә – күңел, тигән,
Күңеле боҙоҡ әҙәмдән төңөл, тигән.
Боҙоҡҡа ер өҫтөнән аҫты артыҡ,
Булмаһа күңел таҙа – күмел, тигән.

Өсөнсө ҡиммәт нәмә – аҡыл, тигән,
Аҡылһыҙҙа тәүфиҡ яғы таҡыр, тигән.
Аҙ эшкә асыуланып, динен боҙор,
Иманын көфөрлөккә һатыр, тигән.

Дүртенсе ҡиммәт нәмә – шөкөр, тигән,
Ниғмәткә шөкөрһеҙлөк – көфөр, тигән.
Ятҡан ерҙән: «Хоҙай, кисер!» – тигән – хурлыҡ,
Сәбәп эҙләп, төҙ юл менән йүгер, тигән.

Бишенсе ҡиммәт нәмә – әҙәп, тигән,
Әҙәп тигән – мөхәббәткә сәбәп, тигән.
Көфөрлөк әҙәплелә тормағандай,
Әҙәпһеҙҙә иман тороу ғәжәп, тигән.

Алтынсы ҡиммәт нәмә – сабыр, тигән,
Сабыр кеше моратын табыр, тигән,
Һәр эштә сабырһыҙҙың төбө – хурлыҡ,
Сабырһыҙлыҡ башҡа бәлә һалыр, тигән.

Етенсе ҡиммәт нәмә – ихлас, тигән,
Ихласһыҙҙың эше ҡабул булмаҫ, тигән.
Аҡыллылар ошо һүҙҙе белһә кәрәк:
Иман, аҡыл, әҙәп, ихлас – юлдаш, тигән.

1. Яңы һүҙҙәрҙе яҙып алып, мәғәнәһенә төшөнөгөҙ. Уларҙы һеҙ үҙ-ара һөйләшкәндә ҡулланаһығыҙмы? Уларҙың кемдәрҙең телмәренә хас булыуын асыҡлағыҙ.
2. Әҫәрҙең ни өсөн **нәсихәт** тип аталыуын аңлатығыҙ.
3. Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.
4. Аҡмулла кем булған? Уның ниндәй әҫәрҙәрен беләһегеҙ? Уның тураһында белгәндәрегеҙҙе, уҡығандарығыҙҙы туплап, «М. Аҡмулла» тигән белешмә төҙөгөҙ.

**170-се күнегеү.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.

Үрәпсеп тора үрләстә
Ҡырлас яллы саптарым.
Зыңҡылдата өҙә баҫыр,
Саҡма сағыр сапҡырым.

Тетрәнеп, сыңғырлап ҡуя
Ауыҙлыҡ сыңғалары.
Үтһәк, яҙылыр күк тауҙың
Суғырмаҡ һырмалары.

*(Х. Назар)*

**үрәпсеү** – аттың бер юлы алғы ике аяғын күтәреүе
**саптар** – ат төҫө: ялы, ҡойроғо сал, үҙе ерән
**сапҡыр** – скакун
**яҙылыр күк** – тигеҙләнер кеүек
**саҡма сағыр** – тояғы менән таштан осҡон сәсрәтер

**171-се күнегеү.** Һүҙҙәрҙе һәм һүҙбәйләнештәрҙе дөрөҫ уҡығыҙ.

| | | |
|---|---|---|
| ҡолағы | ҡолаҡ ауырта | ике ҡолаҡ |
| ҡармағын | ҡармаҡ алдым | бер ҡармаҡ |
| ҡыуағы | ҡыуаҡ эргәһендә | ҡуйы ҡыуаҡ |
| көрәген | көрәк эҙләне | тимер көрәк |
| күлдәгем | күлдәк үтекләй | һары күлдәк |

**172-се күнегеү.** Бирелгән хәрефтәр араһына ҡалған хәрефтәрҙе алфавит тәртибендә яҙығыҙ.

Т, ... Я.

**173-сө күнегеү.** Тыуған көнө уңайынан берәй дуҫығыҙға (туғанығыҙға) ҡотлау хаты яҙығыҙ.

**174-се күнегеү.** «Нәсихәттәр» әҫәренең йөкмәткеһенә ярашлы ниндәй һорауҙар ҡуйыр инегеҙ?

## СӘСӘНДӘР ИЖАДЫ

Башҡорт һүҙ сәнғәте тарихында сәсәндәр ижады айырым урын алып тора. Рәсәйгә ҡушылғанға тиклем, сәсәндәрҙе *йырау* тип йөрөткәндәр. Беҙҙең көндәргә Һабрау, Асан Ҡайғы, Ҡаҙтуған, Шалғыҙ йырауҙарҙың ҡайһы бер әҫәрҙәре килеп еткән. Был йырауҙарҙың исеме ҡаҙаҡтар, ҡарағалпаҡтар араһында ла билдәле – улар ошо халыҡтарҙың уртаҡ һүҙ оҫталары булып иҫәпләнә.

Рәсәйгә ҡушылғандан һуң йәшәгән башҡорт сәсәндәренең әҫәрҙәре беҙгә күберәк килеп еткән. Ҡобағош, Ҡарас, Ерәнсә, Байыҡ, Буранбай, Ишмөхәмәт, Ғәбит, Мөхәмәтша Буранғолов сәсәндәр ижад иткән ҡобайырҙар, йырҙар, бәйеттәр киң билдәле.

Салауат Юлаев менән Мифтахетдин Аҡмулла ла сәсән булған. Улар шағир булараҡ яҙып та ижад иткәндәр.

Сәсәндәр ижадын **ауыҙ-тел әҙәбиәте (изустная литература)** тип, йәғни телдән йәшәүсе әҙәбиәт тип йөрөтәләр. Яҙма әҙәбиәттән айырмалы рәүештә, ауыҙ-тел әҙәбиәте бөтә халыҡҡа аңлайышлы булған. Сөнки сәсәндәр халыҡтың үҙ телендә ижад иткәндәр.

## ҺАБРАУ

*(XIV – XV быуаттар)*

### Һабрауҙың ир-егеттәргә әйткәне

Айҙың моңло булғаны –
Битен монар алғаны;
Көндөң моңло булғаны –
Битен болот алғаны;
Бейек тауҙың үлгәне –
Башын томан алғаны;
Ай менән ҡояштың үлгәне –
Тонйорап барып батҡаны;
Ағыр һыуҙың үлгәне –
Өҫтөн күк боҙ алғаны;
Ир-егеттең үлгәне –
Илен дошман алғаны;
Ҡара ерҙең үлгәне –
Ҡар аҫтында ҡалғаны;
Ата-әсәнең үлгәне –
Баланан хурлыҡ күргәне;
Илдең нурлы булғаны –
Батырының тыуғаны;
Илде монар алғаны –
Батырһыҙ тороп ҡалғаны.
Быуын-быуын үткәндә,
Илемдән ҡалыр нимә бар?
Малдай ҡаза күрмәгән,
Кешегә бирһәң, бөтмәгән,
Үлмәй торған – яҡшылыҡ;
Илен һөйөп ат менгән,
Көндәй тонйорап батмаған,
Башын монар баҫмаған
Батыр ирҙең исеме бар.
Быуын-быуын үткәндә,
Киң донъяла нимә тар?
Киң донъяла уйнаған,
Ҡупшы итек һайлаған
Ҡунаҡсының итеге тар.

Быуын килгән киң илдә
Урман, үлән үҫкәндә,
Тауҙың буйы йәмләнә;
Быуын килгән киң илдә
Батырҙан батыр тыуғанда,
Батыр юлынан сапҡанда,
Атанан күреп уҡ юнһа,
Илдең йөҙө йәнләнә;
Батырҙан батыр тыуғанда,
Батыр юлынан сапҡанда,
Атаға уҡ ҡайраһа,
Илдең йөҙө тарлана.

1. Сәсәндең ир-егеттәргә нимә әйтергә теләгәнен асыҡлағыҙ. Уныңса, ир-егеттәр нисек булырға тейеш? Ғөмүмән, ир-егетлектең асылы нимәлә? Фекер алышығыҙ.
2. Текст өҫтөндә тасуири уҡыу күнекмәләре үткәрегеҙ.
3. «Башҡорт сәсәндәре» тигән альбом булдырығыҙ. Унда Һабрау сәсән тураһында тапҡан тиклем материал туплағыҙ.

## ҠОБАҒОШ СӘСӘН

*(XVI быуат)*

### Аҡмырҙа сәсән менән Ҡобағош сәсәндең әйтешкәне

Борон Дим буйында йәйләгән, Торатауҙа ҡышлаған Ҡарағөләмбәт тигән хан булған. Уға саҡлы ул ерҙе – Дим буйын – биләгән, мең башы булып танылған Ҡобағош тигән бей булған. Ҡарағөләмбәт хан булып, Дим буйын алғанға, Ҡобағош уға баш һалмай, ике араһы яулашҡандар. Ҡобағош ҡаршы тора алмай, Ҡарағөләмбәттән еңелгәс, Ҡатай яғына ҡасҡан. Ҡобағош үҙе сәсән булған. Ҡасып йөрөгәндә, ҡатындар кейеме кейеп, йәйләү аралап йөрөгән. Халыҡты ҡотортоп, Ҡарағөләмбәт яҡлы бейҙәрҙе йә төшөрткән, йә үлтерткән. Шунан тирә-яҡтағы бейҙәр үҙ-ара һөйләшеп, Ҡобағошто тоторға булғандар. Ләкин былай ғына тота алмағандар. Ҡайҙа ятҡанын халыҡ әйтмәгән. Шунан яу туплап, яу менән Ҡатай урмандарын ҡамап һөҙөргә булғандар. Быны халыҡ Ҡобағошҡа

белдергән. Ул Бөрйән яғында бер тауҙа ҡаҙып тораҡ яһаған. Бей яуы килә башлағас, ауыҙын бер таш менән ҡаплаған. Унлап кеше тартып ҡараһа ла, аса алмаған. Ундан артыҡ кеше тоторға урыны булмаған. Шулай итеп, Ҡобағошто тота алмағандар.

Ҡобағоштоң Айбағош менән Көнбағыш тигән улдары үҫеп, Үҫәргән ырыуын ҡыйрата башлағас, Бикбау бей илсе ебәреп, килешергә һораған.

Ҡобағош: «Мин риза, тик бер шартым бар. Бикбау бейгә әйт, йыйында кем һөйләһә лә, ирек булһын. Халыҡ кемде ғәйепле тапһа, уға үлем булһын. Шуға риза булһа, мин барам», – тигән.

Бикбау бей, аҡыл эйәләрен йыйып, кәңәш-төңәш иткән. Ханға ла әйткән, былар уйлашҡан-уйлашҡан да нисек тә Ҡобағош сәсәнде һөйләтмәҫкә юл эҙләгәндәр. Хан кәңәш биргән:

– Һин, – тигән, – сәсәндәреңде йыйы, йомаҡ әҙерләһендәр. Ҡобағош уны-быны уйламай, әҙерләнмәй килер. «Шул йомаҡҡа яуап бирә алмаһаң, һүҙ ҙә асмай, буй бирәһең» тип әйт, – тигән, ти.

Шулай итеп, һүҙ төйнәп, Ҡобағошто саҡырғандар.

Ҡобағош килгәс, Бикбау бейгә:

– Халыҡ һинән дә ҡурҡмаһын, ғәйеплене үлем көткәнде белһен. Минең улымдың береһе һинең күкрәккә, һинең улың минең күкрәккә хәнйәрҙәрен терәп торһон, – тигән.

Бикбау бей риза булған да:

– Йә, кем һүҙ аса, һинме, минме? – тигән. Ҡобағош:

– Мин һөйләһәм, һиңә һүҙ ҡалмаҫ. Әйтереңде әйтеп үл, һин башла, – тигән.

Бикбау:

– Минең шартым бар: бер сәсәнемә ҡушам, йомаҡ әйтһен. Шуға яуап бирә алмаһаң, һинең телең киҫелһен. Башың киҫһәм дә, мин хаҡлы, ни эшләһәм дә, мин хаҡлы булайым, – тигән.

Ҡобағош:

– Ярай. Тапһам, үҙеңә лә шул шартмы? – Бикбау бей риза булған.

Бикбау бей алдан әйтеп ҡуйған сәсәне Аҡмырҙаны саҡырып:

– Йомағың булһа, йомаҡ әйт, бүтәнең булһа, бүтәнде әйт. Ҡобағошто еңһәң, һиңә дан! – тигән.

Шунан ике сәсән һүҙгә керешкән.

А ҡ м ы р ҙ а:

Ҡобағош – сәсән, тинеләр,
Ҡобағош – сәсән, тинеләр,
Илен-йортон үртәткән,
Үҫәргәнде йөҙәткән
Ҡобағош килә, тинеләр,
Ҡобағош килә, тинеләр.

Ирәндеккә үрелгәс,
Ирәндеккә үрелгәс,
Улдары мән күренгәс,
Улдары мән күренгәс,
Булат ҡылыс һелтәрме,
Һүҙен әйтеп китерме?
Әйт, Аҡмырҙа, тинеләр, ау,
Әйт, Аҡмырҙа, тинеләр.

Уға әйтерем шул булыр,
Йомарланған һүҙ булыр,
Ул әйтерме, кем әйтер,
Ул әйтмәһә, бей әйтер.
Бейгә өҫтәп ил әйтер, ау,
Бейгә өҫтәп ил әйтер.

Бер һунарсы булған, ти,
Бер ҡош атып алған, ти.
Күҙен ҡарға суҡыған,
Йөҙәп, йөнө ҡалмай екегән,
Ҡанаты һыныҡ, башы юҡ –
Тал турғайы булған, ти, ау,
Тал турғайы булған, ти.
Ябалаҡтан йән алып,
Ҡошто уға биргән, ти,
Әҙернәһен киргән, ти,
Төн юшауын абайлап,
Ҡара төндө ай-һайлап,
Игәрҙәрен өҫкөтөп,
Бер арыҫланды тотҡан, ти, ау,
Тотҡан да иң киргән, ти.

Ул һунарсы кем икән,
Ҡобағош сәсән шул микән?
Ҡош арыҫланы ни икән,
Үҫәргән менән бей микән?
Игәрҙәй улдар эйәрткән,
Игәрҙәй улдар эйәрткән, ау,
Ҡобағош булмай, кем икән?

Ҡобағош:

Сәсән дә, сәсән икәнһең,
Аңлар сәсән икәнһең.
Йомарланған һүҙеңде
Белмәй һөйләй икәнһең, ау,
Белмәй һөйләй икәнһең.

Бер һунарсы тигәнең,
Бер һунарсы тигәнең,
Күҙен ҡарға суҡыған,
Йөнө ҡалмай екегән,
Ҡанаты һыныҡ, башы юҡ,
Тал турғайҙай кәре юҡ.
Ҡошто ауланы, тигәнең –
Хандан илен тапатҡан,
Мал-тыуарын талатҡан
Бейең булмай, кем булһын, ау,
Бейең булмай, кем булһын.

Ябалаҡтай ҙур ханға,
Йөндән осор юҡ данға
Илен ҡоштай бәйләгән,
Тотоп ханға һыйлаған –
Илендәге бей булһа,
Төндәй илде ҡаплатҡан,
Тирбәтеп илде йоҡлатҡан,
Ант итеп ханға бирелгән,
Теле яндай кирелгән
Аҡмырҙа булмай, кем булһын, ау,
Аҡмырҙа булмай, кем булһын.
Игәрҙәре тигәнең,

Һунар алыр тигәнең –
Хан табанын ялаған,
Илде аямай талаған
Яһаҡсы булмай, кем булыр, ау,
Яһаҡсы булмай, кем булыр.

Төн юшаған арыҫланың,
Төн юшаған арыҫланың –
Намыҫы бейҙән киртелгән,
Асыуы ташып тертелгән,
Ҡобағошто ла килтергән,
Күп яуызды үлтергән
Илдән бүтән кем булыр, ау,
Илдән бүтән кем булыр.

Аҡмырҙа:

Яманға ҡаршы тулҡынған,
Яҡшыға ҡарап урғылған,
Диңгеҙҙән дә ятыулы,
Уралдан да артыулы
Нимә булыр? – әйт шуны,
Сәсән булһаң, тап шуны.
Булаттан үткер, яу ҡыйыр,
Ҡан сығармай, яу һуйыр,
«Мин-мин» тигән, «мин» тигән,
Бауыры бөтөн Хоҙайҙай,
«Мин, үҙем мин – хан» тигән,
«Бар фарманым дан» тигән,
Хандан ҡурҡмаҫ бар микән, ау,
Бейҙән өркмәҫ бар микән?
Ағыр һыуҙы аҡтырмаҫ,
Ағыр һыуҙы ятҡырмаҫ,
Төнләгән ҡурҡып яптырмаҫ,
Атанан күреп уҡ юнған,
Иркә үҫеп ир булған,
Толпар менеп ил күргән
Хандан ғәййәр кем булыр, ау,
Бейҙән таяр кем булыр?

Ҡобағош:

Донъяла иң тулҡынлы,
Ҡайнап ағыр упҡынлы,
Юл да бирмәҫ артыулы,
Диңгеҙҙән дә ятыулы –
Туңмай ятҡан ил зары, ау,
Тынмай ятҡан ил зары.
Булаттай үткер яу ҡыйыр,
Ҡан сығармай яу һуйыр,
Ил сигендә дан алған,
Ил тышында һан алған,
Ханға ҡаршы уҡ булған,
Бейгә ҡаршы ут булған –
Сәсән булмай, кем булһын,
Сәсәнгә тиң кем булһын:
Яманлыҡты яҡламаҫ,
Дошман хәтерен һаҡламаҫ,
Яҡшылыҡты һөйөр ул,
Илдең зарын һөйләр ул,
Яуға саҡырып өндәр ул,
Дауға саҡырып өндәр ул.
Атанан күреп уҡ юнған
Яуҙа үҫкән ир булыр,
Таянғаны ир булыр,
Ханға ҡаршы яу булыр, ау,
Ханға ҡаршы ҡан булыр.

Тау ярған да халыҡ булыр,
Таш ярған да халыҡ булыр,
Мәңге юлы ерекмәҫ,
Өҫтөнә туҙан ятҡырмаҫ
Батыр сапҡан юл булыр, ау,
Данды таҡҡан шул булыр.
Һыуҙар ҡайнап аҡмаҫтай,
Тулҡынын да ҡаҡмаҫтай
Тынған сағы бер булыр, ау,
Ул сағы ла шул булыр:
Илен яҡлап, яу сапҡан,

Ерен һаҡлап, дан тапҡан,
Ҡанһыраған батырҙың
Ҡанын йыуған саҡ булыр, ау,
Ҡанын йыуған саҡ булыр.

Ҡобағош яуап биргәндән һуң, Бикбау бей ҙә, Аҡмырҙа сәсән дә һүҙһеҙ ҡатып ҡалған, ти.

Ҡобағош улына:

– Ал хәнйәрең, тыҡ ҡынына, – тигән.

Бикбауҙың улы ла, Ҡобағоштоң улы ла хәнйәрен ҡынына тыҡҡас, Ҡобағош, Бикбау бейгә яҡын килеп, тағы әйткән, ти:

Ҡобағош килә, тинегеҙ,
Ҡобағош килә, тинегеҙ,
Килгәнемде күрҙегеҙ, ау,
Әйткәнемде белдегеҙ,
Түрә түгел, ҡарамын,
Түрә түгел, ҡарамын,
Толпар менгән хандарға
Яуға ҡаршы барамын, ау,
Яуға ҡаршы барамын.
Әйткәнемде тыңлаһаң,
Тел төбөмдө аңлаһаң,
Үҙеңде бей ҡуйырмын, ау,
Ҡарышһаң, тотоп һуйырмын.
Ил ҡаныны ялаһаң,
Илдең сүбен тараһаң,
Дошманды әйтеп һанаған
Телем әйтер, ял(ы)ҡмаç,
Яҡшыны һөйөр, ҡаныҡмаç,
Ил зарыны һөйләр ул,
Яуға саҡырып өндәр ул,
Дошманын юҡ итмәйсә,
Теләгәненә етмәйсә,
Уф та тимәç, ял(ы)ҡмаç, ау,
Уф та тимәç, ял(ы)ҡмаç,
Әсә һөтөн тапламаç,
Дошман хәтерен һаҡламаç,
Ыласындай ҡуш улым,
Ыласындай ҡуш улым –
Алдымда, Бикбау, әйт һүҙең,

Алдымда, Бикбау, әйт һүҙең:
Аманлыҡмы теләйһең, ау,
Хан һүҙенме һөйләйһең?
Яманлыҡты ҡуймаһаң,
Хандан күңелең уймаһаң,
Һаман ҡандан туймаһаң,
Һаман ҡандан туймаһаң,
Толпарға менгән улдарым,
Атанан күргән юлдарын
Ташлап ситкә тайшанмаҫ,
Һыныңа ҡарап аңшаймаҫ.
Сергеһенән ҡан кисмәй,
Арыҫландай айҡап ҡан эсмәй,
Аттан эйәр алмаҫтар, ау,
Ҡынға ҡылыс һалмаҫтар.

Бикбау бей, һүҙ биреп үлемдән ҡалһа ла, аҙаҡ һүҙен боҙған. Хандан көс алып, ул да етмәгәс, ҡаҙаҡ бейҙәренә мал биреп, яу саҡырып, күп йыл буйы һуғышҡан.

Бара-бара халыҡ, Бикбау менән ханды берәм-берәм ташлап, Ҡобағошҡа ыҡлаған. Хан түҙмәгән, ҡасҡан. Бикбау ҡалған. Ҡобағошҡа буй биргән.

Ҡарағөләмбәт, бүтән хандарҙан көс алып, ил өҫтөнә килерҙе ишеткәс, Ҡобағош, ат саптырып, ил йыйған.

– Был хандан ҡотолоп булмаҫ, аҡ батшанан ярҙам һорайыҡ, беҙгә ярҙам бирһен, арала ыҙғыш бөтһөн, ырыу-ырыуға ерҙе бүлеп бирһен, – тип үҫәргәндән Бикбау бейҙең үҙен, бөрйәндән Иҫке бейҙе, ҡыпсаҡтан Ҡара Ҡужаҡты, тамъяндан Шаҡманды аҡ батшаға ебәргән, ти.

1. Тексты иғтибар менән уҡып сығығыҙ, таныш булмаған һүҙҙәрҙе күсереп алып, мәғәнәләрен асыҡлағыҙ.
2. Ҡобағош сәсән үҙе тураһында *түрә түгел, ҡарамын,* ти. Быны менән ул нимә әйтергә теләне икән?
3. Ҡобағош, Аҡмырҙа сәсәндәр тураһында элек ишеткәнегеҙ (уҡығанығыҙ) бар инеме? Улар кемде яҡлап сығыш яһайҙар? Был нимәлә күренә? Быға яуапты уларҙың телмәренән эҙләгеҙ.
4. Тексты, ролдәргә бүлеп, сәсәндәр һымаҡ башҡарып ҡарағыҙ.
5. Ҡобағош сәсән тураһында материалдарығыҙҙы «Башҡорт сәсәндәре» альбомына индерегеҙ.

**175-се күнегеү.** Йомаҡтарҙы сисегеҙ.

а) Өс йөҙ алтмыш биш сыйырсыҡ,
Илле ике тубырсыҡ,
Ун ике торна, бер аҡҡош,
Белмәһәң, урыныңдан төш!

б) Ун ике аҡҡош осоп бара,
Бүлкә-бүлкә төшөп бара.
Һәр бер бүлкәлә өсәр ҡош,
Һәр бер ҡошта дүртәр ҡанат,
Һәр бер ҡанатта ете ҡауырһын,
Һәр бер ҡауырһында егерме дүрт мамыҡ.

**176-сы күнегеү.** Шиғыр юлдарын руссаға тәржемә итегеҙ.

«Ҡылыс күтәргән – ҡылыстан уҡ турала!»
Тарих иҫкәртә тап бына шул турала!

*(Ш. Бикҡол)*

## ҺАН

**Һандар (имена числительные)** предметтың иҫәбен белдерә. Башҡорт телендә һанды белдереүсе 20 һүҙ бар: *бер, ике, өс, дүрт, биш, алты, ете, һигеҙ, туғыҙ, ун, егерме, утыҙ, ҡырҡ, илле, алтмыш, етмеш, һикһән, туҡһан, йөҙ, мең*. Башҡа бөтә һандар ошо һүҙҙәрҙең теҙмәһенән яһала: *ун ике, ике йөҙ мең, алты йөҙ туҡһан бер*.

Бер генә һүҙҙән торған һандар **ябай** һан тип, ә ике йәки бер нисә һүҙҙән торған һандар **ҡушма** һандар тип атала. Ҡушма һан эсендәге бөтә һүҙҙәр ҙә айырым яҙыла: *ике мең өс йөҙ илле алты – 2356*.

**177-се күнегеү.** Һорауҙарға яуаптар яҙығыҙ.

Һинең буйың, ауырлығың күпме? Оҙонлоҡҡа, бейеклеккә нисә сантиметр һикерә алаһың? Турникта нисә тапҡыр тартыла алаһың? Һинең сумкаңда бөгөн нисә китап бар? Әле дәфтәреңдең нисәнсе битенә яҙаһың? Был күнегеү китаптың нисәнсе битендә?

## БАЙЫҠ СӘСӘН

*(1710 – 1814)*

### Байыҡ сәсәндең ҡаҙаҡ аҡыны Бохар менән әйтешкәне

Байыҡтың атаһы Байназар тархан булған, Әй йылғаһы буйындағы ерҙәрҙе биләгән. Ул Салауат Юлаевтың олатаһы Аҙналы менән бер заманда йәшәгән. Байназар тархандың биш улы булған: иң олоһо Байыҡ, икенсеһе Танып, өсөнсөһө Тайып, дүртенсеһе Ҡайып, бишенсеһе Танһыҡ исемле.

Үҙе сәсән булып, Байыҡ атаһынан йәшләй айырылған, ил гиҙеп йөрөгән. Үҙ алдына йәшәп ятҡан Тайыбы, Аҙналы тархандың ҡыҙын урлап, был тирәлә тормай, ҡаҙаҡ араһына тайған. Танып менән Ҡайыбы бер яуҙа ғәйеп булған. Байназар төпсөк улы Танһыҡ менән тороп ҡалған.

Танып менән Ҡайып ғәйеп булған яуҙа Байыҡ менән Юлай ҙа булған. Яу баҫтырылғас, улай-былай итеп, атаһы Юлайҙы аҡлатҡан. Ә Байыҡ, ҡайҙа барырға, ни эшләргә белмәй, ҡаҙаҡ араһына ҡасҡан. Шунда йөрөгәндә, Байыҡтан көлөп, мыҫҡыл итергә уйлап, ҡаҙаҡ аҡындары былай тигән:

Башҡорт булдың, бар булдың,
Киң далала зар булдың.
Үҙеңә йомаҡ әйтәйем,
Тапһаң, улым итәйем;
Тапмаһаң, ҡолом итәйем,
Көндөҙ ҡуйым көтөрһөң,
Кисен йөнөн тетерһең,
Йоҡом ҡалды, тимәҫһең –
Көндөҙ серем итерһең.
Ҡуш ағастың ҡуш башы
Бер ҡаҙанға һыймаҫтай,
Ҡуш ҡусҡарҙың ҡуш башы
Бар икән ил ҡашҡаһы.
Ат башындай ҡаҡ ерҙән
Яра төшкән аҡ түгел,
Ай менән көндәй икәүһе,
Яңғыҙланған таҡ түгел.

Байыҡ былай тип яуап биргән:

Киң далам, тип әйткәнең,
Иленән ҡасҡан был башҡорт
Маҡтаһын, тип көткәнең –
Мин дә күргән ер икән,
Һин дә белгән ер икән.
Ағас-ташы булмағас,
Өҫтөн ҡылған ҡаплаған,
Сағыл тауы булмағас,
Ҡомдан сөйәлдәй тау ҡылған;
Елененән һөт аҡмаҫ,
Һыуһаған йотом һыу тапмаҫ –
Дала тигәнең шул икән,
Дала тигәнең шул икән.
Турһыҡтай бурһыҡ үҫтергән,
Ҡарһаҡтан барын боҫторған,
Ишәктәр моңло ҡысҡырған,
Бүтән моңо булмаған
Һип-һил торған сүл икән,
Һип-һил торған сүл икән.
Ҡаяла талпынған бөркөтөн,
Толпарҙа елгән егетен
Алмаштырған бер бөтөн –
Дөйә өҫтөндә ялпаңлап,
Ҡолаҡсыны һәлпәңләп,
Ҡаҙаҡ тигән ир икән,
Ҡаҙаҡ тигән ир икән.
Ҡуш ағасым тигәнең –
Киң далала ҡуш ылаш,
Ҡаҙағыңды киптергән
Киң далала Ҡуш Алаш.
Ҡуш ағастың ҡуш башы,
Тап Алаштың ҡашҡаһы –
Бер ҡаҙанға ҡуш антын
Һалып бергә ҡайнатҡан
Туҡалдай кейәү һайлатҡан
Абылай солтан хан икән,
Абылай солтан хан икән.

Шунан һуң ҡаҙаҡ бейҙәре Байыҡты тоторға әҙләй башлаған. «Илгә айҙар, йөрәккә хәнйәр булырға итә икән», – тип, уны юҡ итергә уйлағандар. Байыҡ ҡасҡан, кире Уралға ҡайтҡан.

1. Текстан таныш булмаған һүҙҙәрҙе яҙып алығыҙ, һүҙлек ярҙамында уларҙың мәғәнәләрен асыҡлағыҙ. Был һүҙҙәр араһында бөгөнгө телдә бөтөнләй ҡулланылмағандары бармы? Ундай һүҙҙәр нисек атала?
2. Кем ул *төпсөк ул*? Уны икенсе төрлө тағы нисек атайҙар?
3. Кем ул Байыҡ сәсән? Ҡасан, ҡайҙа йәшәгән, нимә менән шөғөлләнгән, ни өсөн ҡаҙаҡтар араһында ҡасып йөрөгән? Уның тураһында телдән кескәй белешмә төҙөгөҙ.
4. Байыҡтың яуап һүҙҙәрен иғтибар менән уҡығыҙ. Ҡаҙаҡ бейҙәренең уны ни өсөн үлтерергә ниәтләүен асыҡлағыҙ.
5. «Башҡорт сәсәндәре» альбомына Байыҡ сәсән тураһында үҙегеҙ таба алған тиклем материал туплағыҙ.

## АРХАИЗМДАР, НЕОЛОГИЗМДАР, ВАРВАРИЗМДАР ТУРАҺЫНДА ТӨШӨНСӘ

Башҡорт телендә актив ҡулланылыусы һүҙҙәрҙән тыш бик һирәк ҡулланылыусы һүҙҙәр ҙә бар. Уларҙы иҫкергән һүҙҙәр, тип йөрөтәләр. Был һүҙҙәр ҡасандыр бик актив ҡулланылғандар, ләкин ваҡыт үтеү менән уларҙы икенсе һүҙҙәр алмаштырған. Мәҫәлән, элек көнсығыш халыҡтарында, шул иҫәптән башҡорттарҙа ла, ай исемдәре *Рәжәб, Шәғбан, Рамаҙан, Шәүүәл, Зөлҡәғиҙә, Зөлхизә, Мөхәррәм, Сәфәр, Рабиғел әүүәл, Рабиғел ахыр, Йомадиәл әүүәл, Йомадиәл ахыр* булған. Хәҙерге телдә улар, белеүегеҙсә, бөтөнләй икенсе төрлө атала. Ошолай ҡулланылыштан төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе **архаизмдар** тип атайҙар.

Техниканың, фәндең, мәҙәниәттең үҫеүенә бәйле рәүештә, тормошта яңы күренештәр, төшөнсәләр, предметтар барлыҡҡа килә. Уларҙы белдереү өсөн телдә яңы һүҙҙәр тыуа. Был яңы һүҙҙәрҙе **неологизмдар** тип йөрөтәләр. *Информатика, интернет, мобильник* һ. б., мәҫәлән, – шундайҙар.

Ҡайһы берҙә телдә актив ҡулланылған һүҙҙәрҙе лә сит телдән ингән һүҙҙәр менән алмаштырып һөйләү бар. Мәҫәлән, *вис*

(бөтәһе лә), *конечно* (әлбиттә), *короче* (ҡыҫҡаһы) һ. б. Бындай һүҙҙәрҙе **варваризмдар** тип атайҙар.

1. «Йософ ҡиссаһынан» килтерелгән өҙөктә архаизмдарҙы табығыҙ. Архаизмдарҙың күбеһенсә ниндәй әҫәрҙәрҙә осрауына иғтибар итегеҙ.
2. Үрҙәге өҙөктә неологизмдар бармы? Ни өсөн? Сәбәбен аңлатығыҙ.
3. Үҙегеҙҙең телмәрегеҙҙә варваризмдарҙы табығыҙ. Уларҙың күплеге йәки әҙлеге нимә менән аңлатыла?

**178-се күнегеү.** Тәүҙә ижекләп, һуңынан ғәҙәттәге темпта яҡшы артикуляция менән (йәғни һәр өндө асыҡ итеп әйтеп) уҡығыҙ. Баҫымға иғтибар итегеҙ.

Һаңғыраула́нмағанһыңдыр бит?
Бысышма́ҫһығыҙмы икән?
Кисектермәҫтә́н.
Ҡысҡыры́шмаһағыҙсы!

**179-сы күнегеү.** Һорауҙарға ентекләп яуап бирегеҙ.

1. Һиңә туған тел дәрестәрендә ниндәй эштәр оҡшай? Ниңә?
2. VI класта уҡыған ниндәй әҫәр ныҒыраҡ иҫеңдә ҡалды?
3. Башҡорт халыҡ ижадына ҡараған ниндәй жанрҙарҙы беләһең? Рус халыҡ ижадына ҡараған ниндәй жанрҙарҙы беләһең? Ике халыҡтың ижадында ниндәй оҡшаш жанрҙар бар?

**180-се күнегеү.** Һорауҙарға ярашлы бер-берегеҙ менән һөйләшегеҙ.

Бөгөн ниндәй көн? Туған телдән киләһе дәрес йома көнмө, әллә шәмбелә буламы? Һеҙҙең репетицияғыҙ дүшәмбе буламы? Үткән аҙнала һин ҡайһы көн киноға барҙың әле? Атайың ҡайһы көндәрҙә ял итә? Ә һин?

# Башҡортостандың халыҡ шағирҙары

## МӘЖИТ ҒАФУРИ

*(1880 – 1934)*



Мәжит Ғафури (Ғәбделмәжит Нурғәни улы Ғафуров) 1880 йылдың 20 июлендә Башҡортостандың хәҙерге Ғафури районы Еҙем-Ҡаран ауылында тыуған. Тәүҙә тыуған ауылында, аҙаҡ төрлө йылдарҙа хәҙерге Ҡырмыҫҡалы районы Ҡыйышҡы ауылында, Троицк ҡалаһындағы «Рәсүлиә», Ҡазандағы «Мөхәммәҙиә», Өфөләге «Ғәлиә» мәҙрәсәләрендә белем ала. Октябрь революцияһынан һуң «Ирек», «Көрәш», «Ҡыҙыл юл», «Урал», «Башҡортостан» һәм башҡа бик күп гәзиттәрҙең редакцияларында эшләй. Ғүмеренең һуңғы йылдарында әҙәби ижад эше менән генә шөғөлләнә.

М. Ғафуриҙың ижады күп яҡлы. Ул «Ярлылар, йәки өйҙәш ҡатын», «Ҡара йөҙҙәр», «Шағирҙың алтын приискыһында», «Тормош баҫҡыстары» повестарының, «Ҡыҙыл йондоҙ» драмаһының, күп һандағы шиғри әҫәрҙәрҙең, хикәйәләрҙең авторы. Башҡорт, татар, рус, ҡырғыҙ, сыуаш, латыш, мари, белорус, украин, үзбәк, ҡаҙаҡ телдәрендә уның һикһәндән артыҡ китабы донъя күргән. М. Ғафуриҙың

әҙәби һәм ижтимағи хеҙмәтен Башҡортостан хөкүмәте юғары баһаланы. 1923 йылда уға Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән маҡтаулы исем бирелде. Башҡортостандың бер районы, ҡала урамдары, Башҡорт дәүләт академия драма театры, Өфөләге иң ҙур парктарҙың береһе уның исемен йөрөтә. Өфөлә шағир ғүмеренең һуңғы йылдарында йәшәгән йортта музей ойошторолған.

## БИР ҠУЛЫҢДЫ!

Кил әле һин, иптәш! Бир һин миңә
Һөйәлләнеп ҡатҡан ҡулыңды,
Янған йөрәк менән ысын, ихлас
Тәбрик итәм изге юлыңды.

Бир һин миңә, ҡырҙа һабан һөрөп,
Тупраҡланып ҡатҡан ҡулыңды,
Бир һин миңә, дошман күкрәгенә
Төҙәп, мылтыҡ атҡан ҡулыңды.

Бир һин миңә, хәләл көсөң менән
Эшләп, тиргә батҡан ҡулыңды,
Эштән арып, тағы көс йыйырға
Аҫҡа һалып ятҡан ҡулыңды.

Бир һин миңә, ғәйрәт менән һуғып,
Дошман башын ватҡан ҡулыңды.
Дуҫтар битен үпкән кеүек үбәйем
Һөйәлләнеп ҡатҡан ҡулыңды!

1. Шиғырҙы тасуири уҡыу күнекмәләре үткәрегеҙ, һуңғы строфаны диктант итеп яҙығыҙ.
2. Шағир кемдең ҡулы тураһында һүҙ алып бара? Ниңә ул уны дуҫының битен үпкәндәй үбергә әҙер?
3. Мәжит Ғафуриҙың үҙегеҙ уҡыған башҡа әҫәрҙәрен иҫегеҙгә төшөрөгөҙ, улар буйынса әңгәмә ойоштороғоҙ.
4. «Башҡортостандың халыҡ шағирҙары» тигән альбом булдырығыҙ. Уны Мәжит Ғафури тураһында материалдар туплауҙан башлағыҙ.

## МОСТАЙ КӘРИМ

*(1919 – 2005)*



Мостай Кәрим (Мостафа Сафа улы Кәримов) 1919 йылдың 20 октябрендә Башҡортостандың хәҙерге Шишмә районы Келәш ауылында тыуған. 1935 йылға тиклем тыуған ауылында ете йыллыҡ мәктәптә, унан ике йыл Өфөлә педагогия рабфагында уҡый. Бөйөк Ватан һуғышы алдынан ғына Башҡорт дәүләт педагогия институтын (хәҙерге БДУ) тамамлай.

Һуғыштың башынан аҙағынаса ҡатнаша, ҡаты яралана, орден һәм миҙалдар менән бүләкләнә.

Һуғыштан һуң төрлө вазифалы эштәрҙә эшләй, 1951– 1962 йылдарҙа Башҡортостан Яҙыусылар союзының идара рәйесе булып тора.

Мостай Кәрим – әҙәби ижадтың бөтә өлкәләрендә лә актив эшләгән күп яҡлы талант эйәһе. Уның «Европа – Азия», «Вьетнам яҙмалары», «Болгар дәфтәренән» кеүек шиғыр шәлкемдәре, «Үлмәҫбай», «Сер», «Йылмайыу», «Ҡара һыуҙар» поэмалары, «Беҙҙең өйҙөң йәме», «Өс таған», «Оҙон-оҙаҡ бала саҡ», «Ярлыҡау» повестары, «Ҡыҙ урлау», «Ай тотолған төндә», «Айгөл иле»,«Салауат», «Ташлама утты, Прометей!» драмалары киң билдәле. Был әҫәрҙәр рус, татар, украин, ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, авар, тажик, грузин, литва, латыш һ. б. телдәргә тәржемә ителгән.

Мостай Кәримдең йөҙгә яҡын китабы донъя күргән. Ул – үҙ заманының иң популяр, иң күренекле әҙиптәренең береһе. Уның Тыуған ил алдындағы, башҡорт милли әҙәбиәтен һәм туғандаш халыҡтар менән әҙәби бәйләнеште, дуҫлыҡты үҫтереүҙәге хеҙмәте юғары баһалана.

1963 йылда уға Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән юғары исем бирелә. Ул Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһына (1967), СССР дәүләт премияһына (1972), Ленин премияһына (1984), Социалистик Хеҙмәт Геройы исеменә (1979) лайыҡ була.

## ӨСӨНСӨ КӨН ТОТАШ ҠАР ЯУА

Өсөнсө көн епшек ҡар яуа,
Өсөнсө көн тоташ, өсөнсө көн
Әрней минең иҫке бер яра.
Өсөнсө көн тоташ ҡар яуа.

Тимер ярсыҡ – яра төбөндә.
Тимер ярсыҡ йөрөй тәнемдә,
Әйтерһең, ҡарт гонаһ эйәһе
Әйләнгеләп ҡуя ҡәберҙә.

Шуға күрә әрней ул яра.
Өсөнсө көн тоташ ҡар яуа…
Тимер ярсыҡ ниңә ҡуҙғала?
Ул да, ахыры, әрнеп һыҙлана.

Ҡандай ҡыҙыл ине таң нуры,
Таң ҡыҙартты үлән ысығын.
Икебеҙгә тейҙе бер юлы
Бер минаның ике ярсығы.

Береһе ҡалды сержант Фоминда,
Текә яр ситендә ҡәберҙә,
Икенсеһе – минең тәнемдә.
Ун ике йыл әрней шул яра.
Өсөнсө көн тоташ ҡар яуа.

Ҡарҙар ирер, йылы ел иҫһә,
Ҡарҙар китеп барыр, яҙ килһә,
Бәлки, үсем кәмер дошманға,
Тәнемдәге тимер ireһә.

1. Шиғырҙы иғтибар менән уҡып сығығыҙ. Унда ниндәй яра тураһында һүҙ бара? Уның авторҙың үҙенә ҡағылышы бармы? Ошо турала белгәндәрегеҙгә таянып, әңгәмә ойоштороғоҙ.
2. *Бәлки, үсем кәмер дошманға, тәнемдәге тимер ireһә* тигән һүҙҙәрҙең мәғәнәһен аңлатып бирегеҙ.
3. Һеҙ нисек уйлайһығыҙ: ни өсөн ҡар яуғанға авторҙың яраһы һыҙлай? Был турала ололарҙан, һуғыш ветерандарынан һорап ҡарағыҙ – улар ни тиер икән?
4. Был шиғырға кем көй яҙған? Яҙманан был йырҙы тыңлап ҡарағыҙ. Йырҙы башҡарған кеше тураһында нимәләр беләһегеҙ? Уның башҡарыуында тағы ниндәй йырҙар тыңлағанығыҙ бар? Йырсының, ул башҡарған йырҙарҙың исемдәрен яҙып ҡуйығыҙ.
5. «Башҡортостандың халыҡ шағирҙары» альбомына Мостай Кәрим тураһында материалдар туплағыҙ.
6. Башҡорт телендә *ирей* һәм *эрей* – икеһе ике һүҙ. Уларҙы бутарға ярамай. *Ирей* – ҡаты хәлдән шыйыҡҡа әүерелеү. *Эрей* – сифат үҙгәреү. Миҫалдар. *Ҡар ирей, тимер ирей, күңел ирей*, ләкин: *һөт эрей*.

## ҺАН ТӨРКӨМСӘЛӘРЕ

Һандарҙың **бер нисә төркөмсә формаһы** бар. Улар предметтарҙың иҫәбен, урынлаштырылыу тәртибен, яҡынса иҫәбен, тигеҙ итеп бүленеүен белдерә. Төркөмсә формалары һанға төрлө ялғау ҡушыу юлы менән яһала.

**181-се күнегеү.** Һандарҙың төркөмсә формаларын яҙығыҙ.

Төп һандар (количественные числительные): бер, ...
Рәт һандары (порядковые числительные): беренсе, ...
Йыйыу һандары (собирательные числительные): берәү, ...
Бүлем һандары (разделительные числительные): берәр, ...
Сама һандары (приблизительные числительные): унлап, ...

*Һандар:* ике, дүрт, һигеҙ, ҡырҡ.

## РӘМИ ҒАРИПОВ

*(1932 – 1977)*



Рәми Йәғәфәр улы Ғарипов 1932 йылдың 12 февралендә Башҡортостандың Салауат районы Арҡауыл ауылында тыуған. Шунда ете йыллыҡ мәктәпте тамамлағас, Өфөләге 9-сы һанлы интернат-мәктәптә уҡый. 1950 – 1955 йылдарҙа Мәскәүҙәге А. М. Горький исемендәге әҙәбиәт институтында белем ала. «Совет Башҡортостаны» гәзите, «Ағиҙел», «Башҡортостан ҡыҙы» журналдары редакцияһында, китап нәшриәтендә эшләй.

Ҡыҫҡа ғына ижад ғүмерендә Рәми Ғарипов тиҫтәләрсә китаптарҙан торған бай мираҫ ҡалдырҙы. Шиғриәт менән ул Өфөлә интернатта уҡыған сағында ныҡлап ҡыҙыҡһына башлай. «Йүрүҙән» исемле тәүге йыйынтығы 1954 йылда сыға. Шунан бер-бер артлы «Ташсәскә» (1958), «Һабантурғай йырҙары» (1964), «Осоу» (1966), «Аманат» (1969), «Миләшкәләш» (1974) исемле китаптары донъя күрә. Шулай ҙа уның әҫәрҙәренең күпселек өлөшө, шул иҫәптән «Табыныу» поэмаһы ла, шағир үҙе үлгәндән һуң ғына баҫыла. «Йондоҙло уйҙар» (1987), «Умырзая йыры» (1981), «Алырымҡош менән Бирмәмҡош» (1992) китаптарын, һайланма әҫәрҙәренең ике томлығын (1996; 1998) уҡыусылар яратып уҡый.

Рәми Ғарипов әҙәби тәржемә өлкәһендә бик актив эшләне һәм үҙен был йәһәттән дә иң оҫта, талантлы әҙиптәрҙең береһе итеп танытты. Көнсығыш классиктары Рудаки, Ғүмәр Хәйәм робағиҙарынан, Шекспир, Гёте, Гейне әҫәрҙәренән, Пушкин, Лермонтов, Шевченко, Есенин, Твардовский, Ғамзатов һ. б. күренекле шағирҙарҙың шиғырҙарынан ҙур бер шиғри антология төҙөнө. Был китап «Минең антологиям» исеме аҫтында 1990 йылда баҫылып сыҡты.

Рәми Ғарипов илем, халҡым, тип йәшәне, кешелекте, әхлаҡи сафлыҡты данланы, уҡыусыларын битарафлыҡҡа, ғәҙелһеҙлеккә, рухһыҙлыҡҡа ҡаршы аяуһыҙ көрәшергә, йәшәүҙең мәғәнәһен белеп йәшәргә өйрәтте. Уның бөтә ғүмере, ижады халыҡҡа хеҙмәт итеүҙең гүзәл өлгөһө булды. Шуға ла ул халыҡ күңелендә, тыуған әҙәбиәтебеҙ тарихында иң яҡты эҙ ҡалдырған әҙиптәрҙең береһе булараҡ танылды.

1987 йылда «Табыныу» поэмаһы һәм «Умырзая йыры» исемле китаптары өсөн Рәми Ғарипов Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһына лайыҡ булды. 1992 йылда уға Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән юғары исем бирелде. Ул уҡыған элекке интернат-мәктәп, хәҙерге Беренсе республика гимназия-интернаты уның исемен йөрөтә.

## АМАНАТ

*(Ҡобайырҙан өҙөктәр)*

Телең барҙа – илең бар,
Илең барҙа – иркең бар,
Иркең барҙа – күркең бар,
Ил биҙәргә дәртең бар…
Бәпләп-әрләп, тел менән
Кеше иткән инәбеҙ,
Эшле иткән инәбеҙ;
Һөйләп-көйләп
тел менән
Хисле иткән инәбеҙ,
Көслө иткән инәбеҙ;
Күҙебеҙҙе тел менән
Нурлы иткән инәбеҙ,
Үҙебеҙҙе тел менән
Йырлы иткән инәбеҙ!..
Терелткән дә тел шуға,
Үлтерткән дә тел шуға;
Тел әйткән һүҙ ел түгел,
Ҡәҙер-хөрмәт бел уға,
Ҡәҙер-хөрмәт бел уға!..

Тел асҡысы – ил асҡысы,
Күҙ өҫтөндә ҡаш һымаҡ,
Ҡаштан яҙған – күҙҙән яҙып,
Ҡатып ҡалыр таш һымаҡ,
Ятып ҡалыр таш һымаҡ…
Һай, таш булма, таш булма,
Аң ғына бул телеңә,
Аң булмайса, туң булһаң,
Бер имгәк һин илеңә,
Бер түңгәк һин илеңә!
Тел төпкәйе – тал төпкәйе,
Тал төпкәйе – тамыр ул,
Тамырына балта сапһаң,
Талың ҡороп ҡалыр ул;
Тарбағынан ҡан-йәш һарҡып,
Тып-тып итеп тамыр ул;
Туп-туп итеп,
ҡош ҡундырмай,
Түңгәк булып ҡалыр ул,
Түңгәк булып ҡалыр ул!..

Әсә теле барында,
Сәсән теле барында
Кәм-хур булмаҫ табында,
Йөҙ ҡыҙартмаҫ табында,
Дуҫ-ишең ҡоронда,
Ғәҙәтенсә борондан,
Йырлар моңло йырын да,
Түрҙә булыр урын да...
Телең барҙа – илең бар,
Илең барҙа – иркең бар,
Иркең барҙа – күркең бар,
Ил биҙәргә дәртең бар...

Әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем,
Һүҙем әйтеп бөтәйем:
Ни һуң икән киләсәк?
Кемдәр унда киләсәк?
Яуап биреп үтәйем:
Төрлө гөлдәр үҫәсәк,
Татлы хуш еҫ һибәсәк,
Һутлы емеш бирәсәк,
Һәр гөлгә ер етәсәк.
Бер баҡса ул – Киләсәк,
Хөр баҡса ул – Киләсәк!..
Шуның өсөн һуғыштыҡ,
Бергәләп ҡан ҡойоштоҡ,
Шул ҡан менән дан алып,
Бер ҡор булып ойоштоҡ;
Яулап алған тел менән,
Һаҡлап ҡалған тел менән
Һәр кем шунда киләсәк,
Сабый булып көләсәк –
Шул баҡса ул – Киләсәк,
Мул баҡса ул – Киләсәк!..

Ата-бабаң ҡалдырған һүҙ –
Аманатым шул һиңә.
Аманатҡа хыянатһыҙ,
Аҡыҡтан аҡ юл һиңә,
Аҡыҡтан аҡ юл һиңә!..

1. Тексты иғтибар менән уҡып сығығыҙ. Автор ни өсөн уны ҡобайыр тип атаған?
2. Кеше тормошонда телдең әһәмиәтен шағир нисек баһалай? Текстан миҫалдар килтерегеҙ.
3. «Тел асҡысы – ил асҡысы» тип башланған строфаны ятлағыҙ.
4. Рәми Ғариповтың үҙегеҙ белгән башҡа әҫәрҙәрен иҫегеҙгә төшөрөгөҙ, исемдәрен яҙып ҡуйығыҙ.
5. Рәми Ғариповҡа эйәреп, туған тел тураһында шиғыр яҙып ҡарағыҙ. Шиғырығыҙҙа телдең әһәмиәтен, үҙегеҙҙең, уға мөнәсәбәтегеҙҙе күрһәтегеҙ.
6. «Башҡортостандың халыҡ шағирҙары» альбомына Рәми Ғарипов тураһында материал туплағыҙ.

### Һүҙ күрке – мәҡәл

Тел яҙмышы – ил яҙмышы.

## РАУИЛ БИКБАЕВ

*(1938)*



Рауил Төхвәт улы Бикбаев 1938 йылдың 12 декабрендә Ырымбур өлкәһенең Покров районы Юғары Ҡунаҡбай ауылында тыуған.

Күрше Ғабдрахман ауылындағы ете йыллыҡ мәктәпте, Аҡбулаҡ педагогика училищеһын, Башҡорт дәүләт университетының филология факультетын тамамлай. Аспирантуранан һуң оҙаҡ йылдар Өфөләге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында ғилми хеҙмәткәр булып эшләй. 1995 – 2010 йылдарҙа Башҡортостан Яҙыусылар союзының идара рәйесе вазифаһын башҡарҙы.

Рауил Бикбаев университетта уҡыған йылдарында яҙыша башлай. «Дала офоҡтары» тигән тәүге шиғырҙар йыйынтығы 1964 йылда донъя күрә. Шунан бирле ул бер нисә тиҫтә китап сығарҙы, хәҙерге башҡорт поэзияһының кимәлен билдәләрлек күренекле шағир булып танылды. «Кеше өс нәмәгә табынырға тейеш: иленең уҙғанына, уның бөгөнгөһөнә һәм тыуыр киләсәгенә. Әүәлге менән киләсәк – кешелектең ике ҡанаты», – ти шағир үҙенең «Автобиография» китабында. Ул халҡының данлы үткәне, бөгөнгө хәле тураһында уйлана. Рауил Бикбаев поэзияһында халыҡ яҙмышына бәйле проблемалар күтәрелә, заман, ил, халыҡ, киләсәк алдында яуаплылыҡ тураһында һүҙ бара. «Каруанһарай», «Баҙар балтаһы», «Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!» поэмаларында, «Халҡыма хат» шиғырында был бигерәк тә асыҡ күренә.

Рауил Бикбаев – күренекле әҙәбиәт ғалимы. Ул филология фәндәре докторы, профессор. Хәҙерге башҡорт поэзияһының үҫеү проблемаларына арналған күп ғилми хеҙмәттәрҙең авторы. Уның бигерәк тә Ш. Бабич ижадын өйрәнеү, әҫәрҙәрен халыҡҡа ҡайтарыу буйынса хеҙмәте ҙур.

Рауил Бикбаев – республикабыҙҙың Ғ. Сәләм исемендәге йәштәр премияһы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты. 1992 йылда уға Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән юғары исем бирелде.

## ХАЛҠЫМА ХАТ

*(Өҙөктәр)*

Туған телем минең! Күпме һүҙең
Йондоҙ кеүек йым-йым нурлана.
Тамырыңды уйлап ғорурланам,
Бөгөнгөңдө күреп хурланам.

Туған телкәйемдең хәлдәренән
Бәғерҙәрем яна, теленә.
Халҡыма мин ошо хатты яҙам,
Оран һалам башҡорт иленә…

Башҡорт балаһы мин,
Ер хәтерендә
Мең йыл уйылып барған эҙем бар.
Быуындарға ялғап быуындарҙы,
Илде тотҡан телем, һүҙем бар.

Шул тел менән халҡым үҙ яҙмышын
Ҡайһы быуаттарға яҙмаған.
Күпме аҫыл ерҙәренән яҙған,
Күпме аҫыл ирҙәренән яҙған,
Күпме аҫыл йырҙарынан яҙған,
Тик моңонан, теленән яҙмаған…

Ни үтмәгән башҡорт баштарынан –
Дусар булған шундай язаларға –
Тарих, уйлап, үҙе һиҫкәнер!
Кемдәр күргән, ирек даулағанға,
Кешеләрҙең телен киҫкәнен?!

Башҡорт илен тотош утҡа солғап,
Тәфтиләүҙәр ниҙәр ҡылмаған?!

Тик батшалар телен киҫкәндә лә,
Башҡортом бит телһеҙ булмаған!..

Халҡым! Намыҫың ғорур булып ҡалған,
Ябырылһа ла золом, йәберҙәр,
Батырҙарҙың теле киҫелһә лә,
Киҫелмәгән моңоң йәнеңдә...

Ҡулындағы ҡанлы бығауҙарын
Өҙҙө халҡым, ғәҙел юл табып.
Башҡорт аты елеп етмәҫ ергә
Барып етте башҡорт китабы.

Башҡорт моңо, башҡорт ҡурайына
Алҡышламай бөгөн ҡай тараф?
Бейегәндә төньяҡ амурҙары,
Донъя сәхнәләре сайҡала.

Һәләттәргә һәләт өҫтәлгәндә,
Алҡыш яулап, донъя гиҙерлек
Күпме кешеләрҙе туған моңдан,
Туған телдән нисек биҙҙерҙек?!

Телле көйө телһеҙ башҡорттар бар,
Әсә телен белмәй үҫкәндәр...
Бармы ерҙә үҙ ҡулдары менән
Сабыйының телен киҫкәндәр?!.

Быуылдымы беҙҙә халыҡ рухы,
Намыҫыбыҙ юҡмы аҙыраҡ?
Ҡуйынында үҫкән сабыйҙарын
Тырышып-тырышып ата-әсәләре
Үҙ теленән үҙе яҙҙыра.

Сабыйҙарҙың күҙенә ғәмһеҙ ҡарап,
Упҡын ситтәренә еткәнбеҙ.
Теле бөткәндең бит көнө бөтә,
Иле бөтә теле бөткәндең.

Сит телгә балам маһир, тиеп,
Шатлығынан берәү һикерә.

Тик ни мәғәнә үҙ әсәңдең теле
Үҙ балаңа инде үгәй булғас,
Сит телдән дә булғас ситерәк?

Ни мәғәнә гөлдәй баҡса төҙөү,
Ул баҡсаны яман ҡый алһа,
Тиҫтерҙәре араһында бала
Башҡорт булыуынан,
Сыуаш булыуынан,
Мари булыуынан оялһа?

Ни мәғәнә батшаларҙың исемен,
Сит ил тарихтарын ятлауҙан,
Ил тарихы илгә бикле булһа,
Намыҫыбыҙҙы туҙан ҡаплаһа?

Ни мәғәнә башҡорт китаптары
Сит илдәргә еткән бер мәлдә,
Күпме бала туған телкәйендә
Әлифба ла таный белмәгәс?..

Был донъяла телдең ҡороуҙары
Яманыраҡ даръя ҡороуҙан,
Һиңә быны нисек аңлатырға,
Телле көйө телһеҙ ырыуҙаш?

Аҡылыңдан әллә яҙҙыңмы һин,
Тере көйө телдән яҙырға?
Телдән яҙғанға бит оҙаҡ ҡалмай
Алҡымынан әжәл алырға!..

Туған телем өсөн кәрәк икән –
Бар бәхетем, әйҙә, юҡ булһын,
Туған телем өсөн кәрәк икән –
Ауыҙымдағы телем ҡырҡылһын!

Туғанынан яҙған – ярты йәтим.
Туған теленән яҙған – мең йәтим!
Телде тоҙаҡларлыҡ ғәмһеҙлектән
Уян, халҡым, ҡуҙғал, милләтем!

1. Тексты иғтибар менән тасуири уҡып сығығыҙ.
2. Кемдәр ул – *төньяҡ амурҙары?* Ошо исемдәге романды, бейеүҙе иҫкә төшөрөгөҙ.
3. *Ҡулындағы ҡанлы бығауҙарын өҙҙө халҡым,* тип, автор нимә әйтергә теләгән? Ошо турала әңгәмә ойоштороғоҙ.
4. Халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың тағы ниндәй әҫәрҙәрен уҡығанығыҙ бар?
5. Һуңғы ике строфаны ятлағыҙ.
6. «Башҡортостандың халыҡ шағирҙары» тигән альбомығыҙға Рауил Бикбаев тураһында материал туплағыҙ.
7. «Башҡортостандың халыҡ шағиры» тигән исемгә тағы кемдәр лайыҡ булған? Уларҙың тулы исемлеген төҙөгөҙ, биографиялары, ижадтары тураһында материалдар туплап, альбомығыҙға индерегеҙ.
8. Рәми Ғариповтың «Аманат», Рауил Бикбаевтың «Халҡыма хат» әҫәрҙәренең төп темаһы – туған телебеҙҙең артабанғы, киләсәктәге яҙмышы. Шул турала мәҡәлә яҙығыҙ.

## ҺАНДАРҘЫҢ ҮҘГӘРЕШЕ

Башҡорт телендә һандар, исем алдында килгәндә, бер нисек тә үҙгәрмәйҙәр. Исемдән башҡа килһәләр, уларға исемдең бөтә ялғауҙары ла ҡушыла ала: *берәүмен, меңдән, алтынсылар, өсәүҙеке, ун икем* (тулды). Әгәр ҙә һан ҡушма булһа, ялғау һуңғы һүҙгә генә ҡушыла. Рус телендәге һан менән сағыштырығыҙ:

*1. Восемьсот пятьдесят четыре рубля – һигеҙ йөҙ илле дүрт һум.*

*2. К восьмистам пятидесяти четырём рублям – һигеҙ йөҙ илле дүрт һумға.*

*3. К восьмистам пятидесяти четырём прибавить сто, будет девятьсот пятьдесят четыре – һигеҙ йөҙ илле дүрткә йөҙҙө ҡушһаң, туғыҙ йөҙ илле дүрт була.*

**182-се күнегеү**. Автобиографияғыҙҙы яҙығыҙ.

**Бүлем** һандарының ялғауы, әгәр һан тартынҡы өнгә бөтһә, *-ар, -әр* була. Һуҙынҡыға бөткән һандарға *-шар, -шәр* ялғауҙары ҡушыла. Миҫалдар: *бер-әр, өс-әр, дүрт-әр, ун-ар, утыҙ-ар, йөҙ-әр, мең-әр; алты-шар, ике-шәр, илле-шәр.*

Иҫкәрмә бар. **Һикһән** менән **туҡһан** һандарына **-ешәр, -ышар** ялғауҙары ҡушыла.
**Берешәр, өсөшәр** тип һөйләү һәм яҙыу – хата.

**183-сө күнегеү.** Үҙегеҙҙең бер туғандарығыҙҙың, атай-әсәйҙәрегеҙҙең бер туғандарының, ике туғандарығыҙҙың, олатай-өләсәйҙәрегеҙҙең тыуған көнөн һәм тыуған йылын яҙығыҙ.

**Һүҙ күрке – мәҡәл**

Егәрленең ҡулы ете.

Ике уйла, бер эшлә.

Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ.

Алтмыш аҙым алға атла, алты тапҡыр артыңа ҡара.

Өс таған таймаҫ.

Сәсәндең теле уртаҡ, егәрленең ҡулы уртаҡ.

Егет саҡ – егәрле саҡ, арыҫлан тотоп егерлек саҡ.

# Башҡортостандың халыҡ яҙыусылары

## ЗӘЙНӘБ БИИШЕВА

*(1908 – 1996)*



Зәйнәб Абдулла ҡыҙы Биишева 1908 йылдың 2 ғинуарында Башҡортостандың хәҙерге Күгәрсен районы Туйымбәт ауылында тыуған. Йәшләй етем ҡала. Шул уҡ районның Аҡман (Ибрай) ауылы мәктәбендә, Ырымбур яғындағы Ташлы ауылында әҙерлек курсында уҡый. Шунан Ырымбурҙағы Башҡорт педагогия техникумын тамамлай. 1929 – 1931 йылдарҙа Темәс ауылында уҡыта. Аҙаҡ төрлө йылдарҙа Мәсетлелә, Салауат районында, Өфөлә гәзит редакцияларында, Башҡортостан радио комитетында, китап нәшриәтендә эшләй. 1951 йылдан тик әҙәби ижад менән генә шөғөлләнә.

Зәйнәб Биишева Ырымбурҙа уҡыған сағында яҙыша башлай, тик яҙмаларын матбуғатҡа бирергә ашыҡмай. Уның «Партизан малай» исемле тәүге китабы 1942 йылда баҫыла.

Зәйнәб Биишева төрлө жанрҙарҙа эшләй. Уның шиғри әҫәрҙәре, балалар өсөн яҙылған әкиәттәре күп. «Серле ҡурай»,

«Нәҙер» пьесалары төрлө театрҙарҙа ҡуйылды. Шулай ҙа беҙгә ул күбеһенсә прозаик булараҡ билдәле. Төрлө йылдарҙа яҙылған «Көнһылыу», «Гөльямал», «Дуҫ булайыҡ», «Сәйер кеше», «Уйҙар, уйҙар...» повестары, «Мөхәббәт һәм нәфрәт», «Һөнәрсе менән Өйрәнсек» хикәйәттәре, «Яҡтыға» трилогияһы ҙур танылыу алды.

Яҙыусы тәржемә өлкәһендә лә актив эшләне. Ул Н. Гоголдең «Тарас Бульба», И. Тургеневтың «Бежин туғайы», А. Гайдарҙың «Тимур һәм уның командаһы» повестарын, Л. Н. Толстойҙың, С. Аксаковтың, А. Чеховтың, М. Горькийҙың хикәйәләрен башҡортсаға тәржемә итте.

Әҙибәнең башҡорт әҙәбиәтен үҫтереүгә индергән хеҙмәте юғары баһалана. Бер нисә орден менән бүләкләнә, 1968 йылда Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһына, 1990 йылда Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы тигән юғары исемгә лайыҡ була. Тыуған ауылы Туйымбәттә яҙыусының йорт-музейы асылды, Өфөләге, Мораҡтағы бер мәктәп, Башҡортостан «Китап» нәшриәте уның исемен йөрөтә.

## СЫНАЯҠ УЙНАТЫУ

*(«Кәмһетелгәндәр» романы буйынса)*

Сынаяҡ уйнатыу – ҡыҙҙарҙың ала ҡар ваҡытында кәртә, лапаҫ баштарында уйнала торған иң тәүге яҙғы уйындары. Кейемһеҙлек арҡаһында оҙон ҡыш буйына өйгә бикләнергә мәжбүр булған бала-саға, ҡояш йылыта башлау менән, оянан яңы сыҡҡан тауыҡ себештәре шикелле, тышҡа һибелә. Ләкин ер әле ҡарҙан әрселеп бөтмәгән. Әлегә берҙән-бер йылы урын – аҙбар, лапаҫ башы.

Емеш менән Йәнеш бер ҡумта тулы төрлө-төрлө сынаяҡ, быяла ярсыҡтары, матур шыма ҡырсынташтарҙан торған «байлыҡтарын» тиҙ арала һөрткөләп таҙартып, уларҙан бик шәп «һый» әҙерләнеләр. Күк, йәшел, ҡыҙыл, һары сынаяҡтарҙың ҙурыраҡ ярсыҡтары «тәрилкәләргә» әйләнде. Уларға ваҡлап һалынған һары быяла ярсыҡтары – һары «емешкә», күк, зәңгәр, ҡыҙыл быяла ярсыҡтарынан ҡатнаштырып эшләгәндәре – «муйыл», «эремсек майҙарына», ә ваҡ ҡына аҡ

таштар «шәкәргә» әйләнде. Бер тиҫтер йоҡа ялпаҡ таштар – «ҡоймаҡ», ваҡ йомро таштар – «бауырһаҡ», төрлө-төрлө оҙонса таштар «кәнфит» булды. Ғөмүмән, «һый»ҙың иҫәбе-һаны юҡ ине...

– Йә, кемдәрҙе саҡырабыҙ, һылыу? – тине Йәнеш, ҡыуа-нып. – Һый етерлек булды.

– Шәүрәне, Сабира менән Сәмиғәне... Заһираны, Хәсбия-малды, – тип теҙҙе Емеш.

– Хәсбиямалды?.. Кит, шул маңҡаны!.. – тип ҡаршы төштө Йәнеш. – Алтынбикәне, тиһәң, бер хәл...

– Ә ул маҡтансыҡ!.. Кәрәкмәй! – тип өҙҙө Емеш.

Шул ваҡыт ситән башында Сәмиғәнең өлтәй башы күренде. Ул, сысҡан ҡойроғондай ике үрем һары сәсен тырпайтып, лапаҫ башына менеп килә ине.

– Эй, Сәмиғә һылыуым килә. Әйҙүк, түрҙән уҙ, һылыу, – тип, хәс Сәрбиямал булып, татлы тәтелдәп ҡаршылады уны Йәнеш. – Йә, ни йомошоң бар, һылыу?

Бындағы яҙғы сынаяҡ уйынын лапаҫ башында уйнала торған балалар спектакле тип атарға мөмкин булыр ине. Бында һәр бала үҙ әсәһенең, өләсәһенең йәки апайҙың, баланың ролен башҡара. Уның бөтә һүҙе, ҡыланышы, тормошҡа, кешеләргә мөнәсәбәте үҙ ғаиләһенең күҙлегенән сығып алып барыла. Кемдең ата-әсәһе ауылда ниндәй ҡатламға инә, ул уйында ла шул ҡатламдың ролен уйнай. Шул ҡатлам күҙлегенән, шул ҡатлам ғәҙәтенән һәм мөмкинлегенән сығып эш итә. Шул арҡала, был уйынға ҡарап, ауылдағы ғөрөф-ғәҙәт һәм мөнәсәбәттәрҙе һис яңылышмай күҙ алдына килтерергә була ине. Шуныһы ҡыҙыҡ, ҡайһы саҡта был өлкәндәр ролен уйнау бик мәҙәк, көлкө килеп сыға. Ләкин уйын бик етди һәм тәбиғи итеп алып барылғанлыҡтан, бынан бер кем дә көлмәй. Һәр кем үҙ ролен етди рәүештә дауам итә. Әле бына әсәй ролен уйнаған апаһы Сабираның ҡыҙы булып килгән Сәмиғә лә, лапаҫ башына менгәс, тап тормоштағыса, аяҡ остарына ғына ҡарап, ҡыймай тороусы оялсан, әҙәпле ҡыҙ ролен бик оҫта башҡарҙы.

– Йәнеш еңгә, – тигән булды ул, көскә тауышын сығарып, – әсәйем һине беҙгә ҡунаҡҡа килһен тигәйне...

Тимәк, улар ҙа сынаяҡ уйнарға керешкәндәр. Емештәрҙән алдараҡ өлгөргәндәр. Йәнеш тә, уйындың тәртибен боҙмай, һаман шул Сәрбиямал булып ҡыланды:

– Эй, эшем күп ине бит әле. Үҙем дә ҡунаҡ саҡырырға әҙерләнгәйнем бит әле.

Сәмиғә, оҙон муйынын һуҙып, нәҙек кенә тауыш менән:

– Улай тимә инде, беҙ алдан өлгөргәс, алдан беҙгә барығыҙ инде, әсәйем бик үтенеп саҡырҙы, – тип яуапланы. Йәнеш ғәйәт эшлекле тауыш менән:

– Йә, ярай улай булһа. Барһам, барып сығырмын, – тине.

Ғәҙәт буйынса, саҡырыусы икенсе тапҡыр килмәйенсә барыу әҙәпһеҙлек була. Кеше ни тиклем бай булһа, саҡырыусының үҙенән баймы, ярлымы булыуына ҡарап, ул шул тиклем оҙаҡларға, саҡырыусыны ҡат-ҡат йөрөтөргә тейеш ине. Бына оҙаҡламай Сәмиғә Емештәргә тағы килеп етте.

– Йәнеш еңгә, әсәйем, тиҙ генә килһен, тип әйтте. Башҡа ҡунаҡтар килеп бөттө, – тип хәбәр итте. Йәнеш тағы ла, Сәрбиямал булып:

– Эй Аллам, эшем бик күп ине бит әле. Саҡырмаһағыҙ ҙа ярар ине лә, – тип наҙланып, борғоланып, ризаһыҙ ғына төҫ менән барырға әҙерләнә башланы.

– Әйҙә, Емеш ҡыҙым, барайыҡ, булмаһа. Мә, сатин күлдәгеңде кей. Хәситәңде таҡ. Кешмир яулығыңды ябын. Мә, сәс тәңкәңде лә таҡмай ҡалдырма, штобы матур кейен, – тип һөйләнә-һөйләнә, Емешкә һалам бөртөктәре тотторҙо. Сәмиғә тағы бер ҡат:

– Тиҙ генә барығыҙ, еңгә, әсәйем, тиҙ булһындар, тине, – тип ҡабатланы ла, тағы ситән аша һикерә-һикерә, Собхан старшиналар яғына китте.

Йәнеш менән Емеш, бер ситән башынан икенсеһенә үтеп, Сәмиғәләргә барып еткәндә, унда байтаҡ ҡыҙҙар йыйылғайны инде. Шәүрә лә, Хәсбиямал да бында ине. Улар ауылда иң ярлы кешеләр булғанлыҡтан, әллә ҡасан уҡ, иң алдан килеп ултырғайнылар. Емештәрҙән һуң, бик оҙаҡ көттөрөп, Заһира, унан Гөлйыһан килде...

Бына ҡыҙҙар йыйылып бөттө. Тик Собхан старшинаның ҡыҙы Алтынбикә генә юҡ ине әле. Сәмиғә уға бара-бара арып

бөттө. Көттөрөү, ялындырыуҙа ул үҙенең әсәһенән дә арттырып ебәрә ине. Ахырҙа өй хужаһы түҙмәне, ҡунаҡтарын табынға саҡырҙы.

– Йәгеҙ, рәхим итеп ултырышығыҙ, ҡунаҡтар, һин, Йәнеш әхирәт, бынауында, минең янға, Гөлйыһан еңгә менән Заһира еңгәләр, һеҙ түргә уҙығыҙ, Шәүрә килен, һин ошонан, ситтән ултырырһың, миңә сәй яһашырһың, – тип, Сабира ҡунаҡтарын дәрәжәләренә ҡарап урынлаштырып сыҡты. Иң түрҙә бер урынды буш ҡалдырҙы.

– Бында Алтынбикә еңгә ултырыр. Ул ни, маллы-барлы кеше, бушамайҙыр. Бишенсе тапҡыр барғанды көтәлер инде ул...

Сабираның һүҙен башҡалар ҙа хупланы:

– Шулай инде...

– Бай кешенең килем-китеме лә күп була инде уның... Йә берәйһе килеп төшкәндер... Шуға килә алмай торалыр...

Сабира табын әҙерләп бөтөп, сәй яһай ғына башлағанда, лапаҫ башына ялт итеп Алтынбикә килеп менде. Ул ысын ҡунаҡҡа барғандағы кеүек матур итеп кейенеп-яһанып килгәйне. Уның өҫтөндә әллә нисәмә ҡатмар һалып тегелгән атлас күлдәк, ысын мәрйендәр, көмөш тәңкәләр теҙеп, шау уҡа тегелгән өр-яңы елән, аяғында быltыр Тимербай ағай тегеп биргән еҙ дағалы күн итек, ә беләктәрендә – көмөш беләҙектәр, бармаҡтарында – көмөш балдаҡтар, ҡашлы йөҙөктәр, башында – шау биҙәкле йәшел кешмир яулыҡ ине. Алтынбикә, йәшкә Йәнештәрҙән оло булмаһа ла, буй-һыны, кейеме менән бөтөнләй еткән ҡыҙ булғайны инде. Ҡыҙҙар һоҡланыулы күҙҙәрен унан ала алмай тынып ултырҙылар. Ә Алтынбикә, уларға юғарынан мыҫҡыллы ҡараш ташлап, бөтә кейеме менән ҡояшта йылҡылдап, әйләнеп-тулғанып тора бирҙе лә, һүҙҙәрен теш араһынан ғына сығарып:

– Бәй, көтмәҫ булғас, мыҫҡыл итеп, ниңә саҡырҙың?! – тине.

Уның кейемдәре алдында юғалып ҡалған Сабира, ҡапыл йоҡоһонан уянып киткән кеүек, һикереп торҙо:

– Әйҙүк, Алтынбикә еңгә, түрҙән үҙ. Ана, һиңә иң түрҙән урын ҡалдырҙыҡ, рәхим ит.

Ләкин Алтынбикә быңдай иғтибарһыҙлыҡты күтәрергә теләмәне. Күҙҙәрен уҫал уйнатып:

– Кәрәкмәй, уҙмайым. Уҙғандан да артыҡ булды, – тине. – Көтмәҫ булғас, саҡырмайҙар уны. Оло башымды кесе итеп килгәнемдең ҡәҙерен белмәгән кешелә ни эшләп сәй эсеп ултырайым ти мин. Мине кем тип белдең, ҡорсаңғы! – тип екерҙе лә, иҫ киткес тәкәббер ҡиәфәт менән ҡыҙҙар алдында тағы бер-ике әйләнгәс, баҫҡыс буйлап ергә төшөп китте.

– Китмә инде, Алтынбикә еңгә, үпкәләмә, – тип Сабира ҡунаҡсыллыҡты ахырынаса түҙемлелек менән дауам итте. – Беҙ бит яңы ғына ултырғайныҡ. Берәр сынаяҡ та эсеп өлгөрмәнек... Эй Алла, ҡалай уңайһыҙ булды бит әле был. Ҡуй инде...

– Ҡалған сәй эсеп ултырырға, мине кем тип белдең? Ҡорсаңғы!..

Был һүҙҙәрен әйткәндә, Алтынбикә, сәсрәтә баҫып, ялан кәртәнән урамға сығып бара ине инде.

– Ҡайһылай һауалы, ай-һай-һай! – тип баш сайҡап ҡуйҙы Баҙыян еңгә. – Әсәһе лә беҙҙең кеүекте бер ҡасан да һанға һуҡманы бит уның. Ярар, ҡыҙым, бер саҡ һеҙ ҙә уларҙы һанға һуҡмаҫһығыҙ әле...

Сабира, тынысланып, ихласлыҡ менән йәнә ҡунаҡтарын һыйларға кереште...

1. Текста ҡайһы осор һүрәтләнгән? Һеҙ быны нимәләргә ҡарап белдегеҙ?
2. Текста телгә алынған ҡыҙҙарҙың һәр береһенә телдән характеристика бирегеҙ. Улар араһында һеҙгә иң оҡшағаны кем булды? Ни өсөн?
3. Текстан кейем-һалым, биҙәүестәрҙең исемдәрен яҙып алығыҙ. Һеҙҙең был әйберҙәрҙе күргәнегеҙ бармы? Уларҙың русса исемдәре нисек?
4. Тексты уҡығанда һеҙ ҡунаҡ һыйлауҙың ниндәй тәртиптәрен отоп алдығыҙ? Уларҙың ҡайһыларын һеҙ электән белә инегеҙ, ә ҡайһылары һеҙҙең өсөн яңылыҡ булды?
5. Һеҙ хәҙер ниндәй уйындар уйнайһығыҙ? Һеҙҙең уйындар әҫәр геройҙарыныҡынан айырыламы? Нимәһе менән? Ни өсөн? Үҙегеҙ яратып уйнаған берәй уйынды тасуирлағыҙ.
6. Балаларҙың һөйләшкәнен ролдәргә бүлеп уҡығыҙ. Уҡығанда интонацияға иғтибар итегеҙ.
7. «Башҡортостандың халыҡ яҙыусылары» тигән альбом булдырығыҙ, унда Зәйнәб Биишева тураһында материалдар туплағыҙ.

**8.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.

Сыйыр-сыйыр сыйырсыҡ,
Һиңә ҡуйҙым оясыҡ,
Сыйырсығым-матурсығым,
Ҡунаҡ булып тороп сыҡ.

*(Ғ. Амантай)*

Һандар һүҙ менән дә, цифр менән дә яҙыла ала. Ғәрәп цифрҙары (1, 2, 3...) һәм рим цифрҙары (I, II, III...) була. Ғәрәп цифрҙары менән бирелгән һандарҙың ялғауҙары цифр аҙағынан һыҙыҡса аша яҙыла. Рәт һандарына ялғауҙарҙың -*сы, -се, -сө* өлөшө генә, ә ҡалған ялғауҙарҙың барыһы ла тотошлай өҫтәлә.

Сағыштырығыҙ:
1. Өс-әр (-кә, -әрләп) – 3-әр (-кә, -әрләп);
2. Өс-өнсө – 3-сө;
3. Илле-нсе – 50-се.

Әгәр цифр датаны белдергән һан булһа, уның ялғауы яҙылмай: *9 Май, 2012 йыл.* Рим цифрҙары янына ялғау ҡуйылмай: *VI класс, XXI быуат.*

**184-се күнегеү.** Йәйә эсендәге һандарҙы файҙаланып, һорауҙарға яуап бирегеҙ. Һандарҙы тейешле формаларға ҡуйып, һүҙ менән яҙығыҙ.

1. Дәрес ҡасан башлана? (9)
2. Һин ҡайһы йылда тыуғанһың? (2004)
3. Был фильм ҡасан башлана? (4 сәғәт 15 минут)
4. Һеҙгә ҡасан барайыҡ? (4 май)

Башҡорт телендә ҡушма һан эсенә ингән һәр һүҙ айырым яҙыла: *ун бер, ун ике, ун өс...*

## ӘХИӘР ХӘКИМОВ

*(1929 – 2003)*



Әхиәр Хәсән улы Хәкимов 1929 йылдың 23 августында Дәүләкән районының Яңы Йәнбәк ауылында тыуған. Дәүләкән педагогия училищеһын, Мәскәү дәүләт университетының филология факультетын тамамлаған. Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан. Үзбәкстанда, Ҡырмыҫҡалы районының Иҫке Муса ауылында мәктәптә уҡытҡан. Оҙаҡ йылдар «Ағиҙел» журналы, «Литературная газета» редакцияларында эшләй. Филология фәндәре кандидаты.

Ә. Хәкимов прозаһы тематик яҡтан күп төрлө. Уның тәүге күләмле әҫәрҙәре («Осар ҡоштар», «Бәйге», «Күпер», «Аҡһаҡ бүре» повестары) һуғыш ваҡиғаларын тасуирлай, «Ҡуштирәк» романы хәҙерге ауыл тормошон сағылдыра. Һуңғы йылдарҙа әҙип күбеһенсә тарихи темаға яҙа («Һауыр ҡумта», «Думбыра сыңы», «Каруан» романдары). Әҫәрҙәре ун биштән артыҡ телгә тәржемә ителгән.

Әхиәр Хәкимовтың Тыуған ил алдындағы, башҡорт милли әҙәбиәтен үҫтереүҙәге хеҙмәте юғары баһалана – ул ордендар һәм миҙалдар менән наградлана, Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһына (1984), Ғ. Сәләм исемендәге йәштәр премияһына (1980), Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы (2001) тигән юғары исемгә лайыҡ була.

## СӘЛӘХ ҠАРТ

*(«Туй» повесы буйынса)*

Һуғыш туҡталыуға ай тигәндә, ауылда берәм-берәм һалдаттар күренә башланы. Түшенә миҙал тағып, бынан бер нисә ай элек кенә фронтҡа киткән Сәләх ҡарт та ҡайтып

төштө. Ҡарттың былай ҙа ҡуңыр йөҙө, ел-ямғырҙа, ҡояшта ҡарайып, баҡыр төҫөнә ингән. Үҙе, етмәһә, һаҡалын ҡырып ташлап, мыйыҡ ҡына ҡалдырған. Яҫы ҡайыш быуған өр-яңы гимнастёркаһы, ҡырынраҡ һалып кейгән пилоткаһы, етеҙ хәрәкәттәре – бөтәһе лә уны элеккенән байтаҡ йәш күрһәтә. Хатта тауышы ла үҙгәреп киткән кеүек.

– Ай-һай, йылғыр булып сыҡтың әй, Сәләх ҡорҙаш! – тип ҡуйҙы бер ҡарт. – Бынау йәштә яуға барыу уйын эшме...

Уны хуплап, башҡалары ла шаян һүҙ ҡыҫтырырға тырышты:

– Уйынмы, түгелме, ул бармайынса, һуғыш тәки туҡтаманы бит!

– Ҡартың хәйләкәр шул – йығылғанды түбәләшергә генә барҙы!

– Юҡты һөйләйһең. Сәләх ағайға маршал Жуков үҙе хат ебәргән булған, ти, бит. Тиҙерәк кил, һинһеҙ эш яман, бирешмәй Гитлер, йәнәһе...

– Ә ниңә, Гитлерҙы дөмөктөрмәһә, миҙал бирерҙәр инеме ни?

Сәләх ҡарт, ауылдаштарының шаяртыуына мыйыҡ аҫтынан ғына көлөп, үҙенә һүҙ сираты етеүен көттө. Тауыш баҫыла биргәс, гимнастёркаһын һыпырғыланы, кеҫәһенән төрөпкә килтереп сығарҙы, уны ҡабаланмай ғына тултырып, патрон гильзаһынан яһалған зажигалкаһын сыртлатты.

– Бәй, тәмәке ташлауыңа биш-алты йыл бар ине шикелле, ҡабат тарта башланыңмы ни? – тине баяғы ҡарт.

– Шулай шул, ағай... Әле берегеҙ Жуковты телгә алып уҙҙы. Шунан башланды...

Халыҡ, ҡыҙыҡ хәбәр ишетергә иҫәп тотоп, тынып ҡалды.

– Эйе, шунан башланды, – тип ҡабатланы Сәләх ҡарт. – Польшаны үтеп, Германияға барып сыҡҡас, бөтә артиллерия машиналарға тағылды. Ат менән генә юл ыратырлыҡ түгел бит инде хәҙер – һөжүм шәбәйгән саҡ. Ә беҙҙең дивизияны дошман ғәскәрен уратып алырға әҙерләйҙәр, тип ишетелде. – Ул, төрөпкәһен йыш-йыш һурып, төтөнөн өрөп ебәрҙе лә кет-кет көлөп ҡуйҙы. – Бына шул. Бер көн комбат саҡырып алды ла: «Полктың бөтә аттары тылға оҙатыла. Таратмай-юғалтмай, фәлән ергә илтеп тапшырыу һиңә йөкмәтелә. Бүтән батареяларҙан тағы ике кеше китә, һин – старший...» – тине.

Сара юҡ, таң менән тороп, полктағы бөтә атты ҡабат Польша яғына әйҙәнек. Тағы шуныһы, оло юлдан бармаҫҡа ҡушты капитан. Бойороҡ шундай, ғәскәргә ҡамасау булмаҫҡа тейеш, ти. Бойороҡ икән – бойороҡ. Киттек. Тәүге көндә егерме биш-утыҙ саҡрым ер үтелде, ул-был мажараға осраманыҡ... Иртәгеһенә иртүк тороп, тағы юлға төштөк. Поляктарҙың рустан әллә ни айырмаһы юҡ, телдәре яҡын. Һораша-һораша барабыҙ. Берҙән-бер уй – аттарҙы тиҙерәк тапшырырға ла кире борололорға. Самай Берлинға яҡынайғанда бында йөрөп ҡалғы килмәй... Минең иҫәп буйынса, бараһы урынға кискә барып етергә тейешбеҙ. Тик өйҙәге иҫәп юлда бик үк тура килмәй шул ул. Бара торғас, бараһы ауылыбыҙҙың тәңгәленә еттек тә аптырап ҡалдыҡ: алда ҙур йылға, фураж ташығанда, нисәмә рәт үтеп-һүтеп йөрөгән таҡта күперҙең көлө күккә осҡан: «Да, ҡаптыҡ!» – тип аптырап тик торабыҙ. «Давай, мин әйтәм, егеттәр, берегеҙ уңға, икенсегеҙ һулға барып, кисеү эҙләгеҙ». Ҡайҙа инде ул! Яҙғы ташҡындан һуң һыуҙың яңы ғына ҡайта башлаған сағы. Ат йөҙҙөрөп түгел, кәмә менән төшөргә ҡурҡыныс. Ул арала күҙ бәйләнеп өлгөрҙө. Тағы ҡунырға тура килде.

Иртән, эҙләй торғас, биш-алты саҡрым үрҙәрәк ҙур таш күпергә барып сыҡтыҡ. Ә уныһына яҡын барырлыҡ түгел: аллы-артлы танкылар, «катюша»лар, ғәскәр йә ҡорал тейәгән машиналар геүләп тора.

Көтә торғас, төш ауҙы. Тик шунда ғына көнбайышҡа туҡтауһыҙ ағылған машиналарҙың ҡойроғо өҙөлдө. Йүгерҙем күперҙе һаҡлап торған һалдаттар яғына. Сержанттары менән иртәнсәк һөйләшеп ҡуйһам да, барыбер рөхсәт кәрәк. «Черт с тобой, әйҙә, ҡыуала аттарыңды!» – тине сержант. Беҙ, шарт та шорт сыбыртҡы шартлатып, һыҙғырышып, аттарҙы күпергә ҡыуа башланыҡ. Тик аттарҙы һис тыңлатып булмай – күперҙән ҡурҡалар. Бомба төшкән дә, снаряд, мина ярылған да – шул күпер. Немец аңдып ҡына тора унда ғәскәр күренеүен. Шуға аттарҙың, күперҙе күреү менән, ҡоттары оса.

Ниһайәт, мең бәлә менән алдағы аттарҙы күпергә мендерҙек тә йән-фарман килеп ҡыуалайбыҙ. Шул ваҡыт ҡаршы яҡтан күпергә геүләп ике мотоцикл килеп менде. Артта өс-дүрт машина күренде. Мотоциклға атланған һалдат:

– Был ниндәй цирк?! Бушатығыҙ күперҙе! – тип аҡыра, автоматын болғай-болғай. Мин дә, асыуҙан шартларҙай булып:

– Кит юлдан! – тип ҡысҡырам.

Тотондоҡ һүҙ көрәштерергә, бер-беребеҙҙе әрләргә. Өҫтәүенә, теге сержант, иларҙай булып, өҙәңгегә йәбешкән:

– Кирегә ҡыу аттарыңды! Унда ниндәйҙер начальство килә! Икебеҙҙең дә башты өҙөп ырғыталар хәҙер!

Эш былай тартҡылашыуға киткәс, мин дә, тиҫкәре, аҡыра-баҡыра сыбыртҡы болғайым. Башты өҙәләрме, күпер бағанаһына терәп аталармы – барыбер. Тамам күҙ тонған. Шул саҡ кемдер атымдың башынан тотто. Ни тиергә лә өлгөрмәнем, эйәрҙән һөйрәп тә төшөрҙөләр. Йылтыр күн кейем кейгән йәш кенә полковник, яғамдан әләктереп алды ла:

– Кем һин? Күрһәт документыңды! – тип аҡырып ебәрҙе. Ҡот осто. Етмәһә, баяғы өс-дүрт машинаның артында тағы унлабы күренде. Фронт юлын тотҡарлаған өсөн, атып китһәләр ҙә, бер ни ҙә юҡ бит инде. Теге полковник уның һайын ҡыҙҙы. Кеҫәнән һалдат кенәгәһен, аттарҙың ҡағыҙын сығарғанды ла көтмәй. Ахырҙа эргәһендә торған лейтенантҡа: «Арестовать!» – тип ҡысҡырҙы.

Тап ошо ваҡыт урталараҡ торған машинанан берәү килеп сыҡты ла «Отставить!» тигәйне, ике беләгемә йәбешкән ике һалдат, йылан саҡҡан һымаҡ, ҡулдарын йәһәт кенә тартып ала һалдылар. Арҡанан һалҡын тир бәреп сыҡты, күҙем шарҙай булды әй! Ҡаршымда ниндәйҙер ҙур командир баҫып тора. Тотлоға-тотлоға: «Ғәйеплемен, иптәш генерал...» – тигәйнем, был, ҡырыҫыраҡ йылмайып: «Маршал!» – тип төҙәтте. Минең инде аяҡтарым дерелдәй башланы.

– Ну, шаштыра ҡартың! Маршал, ти, әй, күҙен дә йоммай! – тип, йыйылған халыҡ араһынан берәү көлөп ебәрҙе.

– Ҡуй әй! – тине икенсеһе. – Өс йыл передовойҙа йөрөп, маршал түгел, генералын да һирәк күрелә торғайны...

Ҡарттың иһә иҫе лә китмәне, һөйләүен дауам итте:

– Быныһы анау полковник һымаҡ туҙынманы, яйлап ҡына һораша башланы. Мин дә, иҫемә килеп, аңлатып бирҙем. Маршал, мин һөйләп бөткәс, әҙ генә уйланып торҙо ла, кеҫәһенән алтын портсигар сығарып, сыртлатып асып ебәрҙе. «Тартып ебәр, һалдат», – ти, портсигарын миңә һуҙып...

– Ай-һай, яңылышмайһыңмы, Сәләхетдин ағай? Яман да уҫал кеше тиҙәр ине Жуковты... – тип, баяғы фронтовиктарҙың береһе тағы шик белдерҙе.

Ҡарт әҙерәк үпкәләне шикелле. Төрөпкәһен һура-һура:

– Ағайың – Жуков ғәскәрендә йөрөгән кеше. Уның нindәйлеген һинән яҡшыраҡ белә... Уҫал, имеш!.. – тип, яурынын һикертеп ҡуйҙы.

– Тыңлама шуларҙы, һөйлә! – тине бер ҡатын.

– Һөйлә, тип... ни ерҙә туҡталғайным әле?

– Маршал папирос һауытын асты...

– Ә, эйе... Тартып ебәр, ти миңә... Аҫырға бойорамы, киҫергәме, тип ҡалтырап торған кеше, ҡайҙа ул «юҡ, тартмайым» тип киреләнеү! Тик барыбер ҡул бармай әй. Икеләнәм: ышанырғамы быға, ышанмаҫҡамы? Ә ул, минең хәлде күреп: «Ал, ал!» – ти. Дауыл ситләтеп уҙҙы, ахыры, тип уйланым да, ҡулды һоноп, үҙем дә һиҙмәҫтән: «Улайһа, алғас-алғас, икене алайым инде», – тип һал хәбәрҙе. Тирә-яҡтағы һалдаттар, әрем ҡапҡандай, сырайын һытты, береһе хатта шым ғына: «Вәт, нахал!» – тип ҡуйҙы. Маршал көлә: «Запасҡамы? Тартырға бирмәйҙәрме әллә?» – ти. Яуап биреп өлгөрмәнем, был: «Лейтенант, һалдатҡа бер пачка папирос килтер!» – тип бойорҙо. «Кәрәкмәй, мин әйтәм, икенсеһен иптәшемә алғайным». Лейтенанты ла етеҙ икән, йылмайып-көлөп, папирос килтереп тә тотторҙо. Шунда уҡ, маршал зажигалкаһынан тоҡандырып, тәмәке төтөнөн мине «нахал»дан һалдырған һалдаттың битенә өр ҙә ебәр! «Ярай, ҡарт, хуш. Бынан кире маршал юлына арҡыры төшмә, бик ашыҡҡан саҡ, – ти Жуков, көлә. – Ә тырыш хеҙмәтең өсөн рәхмәт!.. » Шул. Машиналар ары китте, өнөммө был, төшөммө, тип аңшайып тороп ҡалдым.

– Афарин ҡартыңа! Жуков һынлы Жуков менән һөйләшеп торсо әле!.. – тине бер ҡарт.

– Тәмәкене лә шунан бирле тартаһыңмы?

– Эйе. Маршал бүләген ташлап китәһеңме ни? Янымдағы ике һалдат менән уны төшкә лә еткермәй тартып бөттөк.

– Аттар һуң, ағай, аттар? Ни эшләттегеҙ уларҙы?

– Ни эшләтәйек? Йүгереп йөрөп йыйып алдыҡ та тейешле урынға алып барып тапшырҙыҡ!.. Эй, унда! Меңәрләгән баш мал йыйылып киткән. Эшелон-эшелон тейәп, илгә оҙаталар. Колхоздарға...

– Их, беҙгә лә һис юғы биш-алтыһы эләкһә, – тип ҡуйҙы бер малай.

– Беҙгә булмаҫ шул, улым. Белоруссия, Украина ерҙәренең көлө осоп ята. Шуларҙы аяҡҡа баҫтырырға кәрәк, – тине Сәләх ҡарт, етди төҫкә инеп.

1. Текстың йөкмәткеһен Сәләх ҡарт исеменән һөйләгеҙ. Телмәрегеҙҙә текста һүрәтләнгән ситуацияға, һөйләүсенең йәшенә, характерына ярашлы интонация һайларға тырышығыҙ.
2. *Көлө күккә осҡан; Күҙ бәйләнеп өлгөрҙө; Төш ауҙы; Машиналарҙың ҡойроғо өҙөлдө; Күҙ тонған; Арҡанан һалҡын тир бәреп сыҡты; Дауыл ситләтеп үҙҙы; Көлө осоп ята* һөйләмдәрен текстан табығыҙ, мәғәнәләренә төшөнөгөҙ. Авторҙың ни өсөн нәҡ ошолай тип яҙыуына аңлатма бирегеҙ. Һөйләмдәрҙең мәғәнәһен икенсе һүҙҙәр менән аңлатығыҙ.
3. «Башҡортостандың халыҡ яҙыусылары» альбомына Әхиәр Хәкимов тураһында материалдар туплағыҙ.
4. «Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы» тигән исемгә тағы кемдәр лайыҡ булған? Уларҙың тулы исемлеген төҙөгөҙ, биографиялары, ижадтары тураһында материал туплап, альбомығыҙға индерегеҙ.

**Һан** исем алдында килгәндә, сифат кеүек үк, үҙгәрмәй. Уның төркөмсә ялғауы ғына була. Ә инде исемдән башҡа килгәндә, һанға исемдең бөтә ялғауҙары ла ҡушыла ала. Ҡушма һандарҙа ялғау тик һуңғы һүҙгә генә өҫтәлә. Рус телендә һан, исем менән килһә лә, яңғыҙ булһа ла, килеш менән үҙгәрә, ҡушма һәм теҙмә һандарҙың һәр өлөшө лә килеш формаһын ала.

Сағыштырығыҙ:

*867 + 549=1416*

Башҡортса: *һигеҙ йөҙ алтмыш етегә биш йөҙ ҡырҡ туғыҙҙы ҡушһаң, бер мең дүрт йөҙ ун алты була.*

Русса: *К восьмистам шестидесяти семи прибавить пятьсот сорок девять, будет одна тысяча четыреста шестнадцать.*

**185-се күнегеү.** Ғәмәлдәрҙе уҡығыҙ һәм һүҙ менән яҙығыҙ.

$215 + 135 = 350$
$536 - 106 = 430$
$2642 - 1356 = 1286$
$939 + 643 = 1582$
$3423 : 3 = 1141$
$125 \times 6 = 750$

**186-сы күнегеү.** Яңғыҙ ҡулланылған һандарҙың исем ялғауҙары алғанын күҙәтегеҙ.

Беренсе кластарға – беренсе-ләр-гә. Алтынсы кластабыҙ – алтынсы-ла-быҙ. Биш кешеһе – биш-еһе. Өс кешене – өсәү-ҙе.

**187-се күнегеү.** Уң яҡ бағаналағы һандарҙы файҙаланып, һорауҙарға яуап бирегеҙ. Цифрҙарҙы һүҙ менән яҙығыҙ.

| | |
|---|---|
| 1. Һин нисәнсе мәктәптә уҡыйһың? | 112 |
| 2. Наил нисәнсе класта уҡый? | 7 |
| 3. Айгөл нисәнсе йортта йәшәй? | 34 |
| 4. Һеҙҙең фатирығыҙ нисәнсе ҡатта? | 4 |
| 5. Һиңә нисәнсе йәш? | 13 |

**188-се күнегеү.** Һорауҙарға яуаптар яҙығыҙ.

Һеҙ **ҡасан** экскурсияға барҙығыҙ?
Һеҙ кисә **ҡайҙа** барҙығыҙ?
**Кемдәр** кисә экскурсияға барҙы?
Һеҙ кисә **ни эшләнегеҙ?**

### Тел көрмәлдергестәр

Тышындағылары эсендәгеһенән дә төҫһөҙҙәрсе.

Мәсьәләләрҙе сисешмәҫһегеҙме?

## Дуҫлыҡ менән көслөбөҙ

*Ҡәҙим АРАЛБАЙ*

### ДУҪЛЫҠ ҺӘЙКӘЛЕ

Күк Уралды,
Баш ҡаламды нурлап,
Күккә ашты мәрмәр монумент.
Ул – символы изге көрәштәрҙең,
Сал тарихтың һүнмәҫ даны бит…

Ағиҙелдең бейек яр башында
Һырғый һәйкәл күккә олғашҡан…
Бөйөк дуҫлыҡ, нығып быуат-быуат,
Йөрәктәргә килеп тоташҡан.

1. Текстан рус теле аша килеп ингән һүҙҙәрҙе яҙып алығыҙ. Уларҙың башҡорт телендәге үҙгәрешенә иғтибар итегеҙ. Ни өсөн бер һүҙҙең ныҡ «башҡортлашыуын», ә икенселәренең бөтөнләй үҙгәрмәүен аңлатығыҙ.
2. Шиғырҙа ниндәй һәйкәл тураһында һүҙ бара? Был һәйкәл тураһында һеҙ нимәләр беләһегеҙ: ул ҡасан, ҡайҙа, нимә хөрмәтенә ҡуйылған, авторҙары кем?
3. Дуҫлыҡ, туғанлыҡ тураһында белгән мәҡәлдәрегеҙҙе яҙып ҡуйығыҙ. Кемдеке күберәк? Яҙған мәҡәлдәрегеҙҙең мәғәнәһе тураһында әңгәмә үткәрегеҙ.
4. Тасуири уҡыу күнекмәләре үткәрегеҙ. Шиғырҙы ятлағыҙ.

*Зәйнәб БИИШЕВА*

## ДАУЫЛ

*(«Дуҫ булайыҡ» повесы буйынса)*

Байтаҡ ҡына балыҡ тотҡас, Юлдаш менән Ҡыҙырас, күл уртаһындағы утрауҙа урындыҡ шикелле түшәлеп ятҡан яҫы таш өҫтөнә ултырып, алып килгән аҙыҡтарын, ҡурған балыҡтарын ашап алдылар ҙа тағы ҡармаҡлай башланылар. Тора-бара хатта кис етеп килгәнен дә тойманылар. Котелокта балыҡ арыу уҡ булды.

Шул саҡ еңелсә ел сыҡты. Ҡыҙырас ниңәлер борсола башланы. Ысынлап та, ел көсәйә барҙы, Ирәндек өҫтөндә аҫылынып торған аҡ болот һорғолтланып, ҡуйырып, ҡаяларға һырыша башланы. Талҡаҫ өҫтө, күгелйем яҡтылығын юғалтып, ҡараһыу төҫкә инә барҙы.

– Ай-һай, ел көсәйергә уйлай, Юлдаш, ҡайтайыҡ. Ел сыҡһа, Талҡаҫ харап яман, ти, ул...

Ел, ысынлап та, бик тиҙ көсәйҙе. Көн тамам күңелһеҙләнеп, һалҡынсаланып китте. Ҡояш нурҙары тоноҡланды. Ирәндек тотош аҡһыл һоро болот менән ҡапланды. Юлдаш ҡайтырға әҙерләнергә мәжбүр булды.

– Ярға сығып ҡына өлгөрһәк ярар ине. О, ниндәй ҡурҡыныс! – тип һөйләнде Ҡыҙырас. Юлдаш, тешен ҡыҫып, өндәшмәне. Уның ошондай матур көндө боҙған елгә лә, ҡапыл ҡурҡаҡ малайға әйләнгән Ҡыҙырасҡа ла асыуы килә ине.

Ләкин Талҡаҫ оҙаҡламай Юлдашты ла Ҡыҙырастың һүҙҙәренә ышанырға, һиҙҙермәй генә борсолорға мәжбүр итте. Ел көсәйгәндән-көсәйә, тулҡындар эреләнә, йышая барҙы. Кәмәне ауыл яғына тура алып барып булмай башланы. Сөнки тулҡын ҡабырғаға килеп бәрелгән һайын, кәмә ауып китә яҙа ине. Ә кәмәне тулҡынға ҡаршы алып барырға Юлдаштың көсө етмәне. Шунан ул, йә, ни булһа ла булыр, тип, Ҡыҙырасҡа:

– Кәмәне көнбайышҡа бор. Елгә арт менән барайыҡ! – тип ҡысҡырҙы.

Ҡыҙырас:

– Улай, ни, кәмәне ел ауҙара һуғыр бит, – тип ҡаршы төшмәксе булғайны ла, көслө тулҡын килеп бәрелеп, кәмәне тапсыҡ шикелле итеп үҙе үк бороп ебәрҙе. Юлдаш уға:

– Ҡойроҡто яҡшы тот! – тип ҡысҡырҙы. Уның тауышында ла ҡурҡыу һиҙелә ине инде. Сөнки ел ҡотороноп көсәйә. Күк йөҙө ҡара болот менән ҡуйыраҡ ҡаплана бара, ә улар һаман Уртаташ янында ғына сыуалалар ине әле. Юлдаш, әлбиттә, ҡурҡып ҡул ҡаушырып ултырманы, бар көсөнә тырышып иште. Тик былай ҙа бик үк оҫта булмаған ҡойроҡсо хәҙер ҡойроҡ тотоуҙың рәтен аҙ-маҙ ғына белеүен дә онотто. Ә ел шаулап, ажғырып, уны һыу менән ҡойондорҙо. Юлдаш өҫтөнә лә, кәмәгә лә бер өҙлөкһөҙ һыу һипте. Ҡыҙырас, ҡурҡыуҙан ни эшләргә белмәй:

– Батабыҙ, әй, ни, Юлдаш, батабыҙ! – тип ҡысҡырып ебәрҙе. Ул ғына ла түгел, тамам өмөтһөҙләнеп, көрәген кәмә төбөнә ырғытып ебәрҙе лә, ҡалтыранып, бөршәйҙе лә ултырҙы.

Ҡойроҡсоһоҙ ҡалған кәмәне аҡбаш тулҡындар, уңға ла, һулға ла борғолап, ҡайҡалта-сайҡалта ярға ҡыуып алып киттеләр. Ҡыҙырас, күҙҙәрен сырт йомоп:

– Бөттөк! Баттыҡ! Үлдек!.. – тип ҡабатланы. Уның йөҙө, ирендәре ағарынды. Юлдаш, уға ышанып, ошондай хәтәр юлға сығыуы өсөн үкенде. Ләкин һуң ине инде. Үкенеп, ҡурҡып ултырырға түгел, көрәшергә, еңеп сығырға кәрәк ине. Шуға күрә ул үҙенең ҡурҡыуын ғына еңеү түгел, Ҡыҙырасты ла йыуатырға, уны ҡойроҡ тоторлоҡ хәлгә килтерергә теләп, ҡыйыу тауыш менән:

– Их, шәп тә һуң, Ҡыҙырас! Беҙҙе ел хәҙер ярға үҙе үк сығарып ташлаясаҡ! – тип ҡысҡырҙы.

Ләкин Ҡыҙырас тағы ла бер нәмә лә ишетмәне. Ә тулҡын һаман ҡотороноп, кәмәне алға ҡыуҙы. Юлдаш та, уға өндәшеп хәл бөтөрөүҙең файҙаһыҙлығын аңлап, бынан һуң һүҙһеҙ генә ишеүендә булды. Ахыр бына яҡында ғына яр буйы ҡамышлыҡтары күренде. Ҡото осоп, бөршәйеп ултырған Ҡыҙырас, ҡапыл йәнләнеп, ҡыуанысынан ни эшләгәнен белмәй, һикереп торҙо.

– Юлдаш! Ни, Юлдаш, тим! Яр!.. Ярға ет...

Ошо ваҡыт, артыҡ асыулы килеп бәрелгән тулҡынданмы, әллә Ҡыҙырастың, кәүҙә туралығын һаҡлай алмай, ел ыңғайына янтайыуынанмы, күҙ асып йомғансы, кәмә бер яҡҡа ауып китте. Малайҙар, ботаҡтарынан өҙөлгән алмалар шикелле, суп-суп итеп, һыуға йығылып төштөләр.

Бер аҙҙан һыу өҫтөнә Юлдаш ҡалҡып килеп сыҡты һәм, тирә-яғына ҡаранып:

– Ҡыҙырас, Ҡыҙырас! – тип ҡысҡырып ебәрҙе лә үҙҙәре

ауып төшкән ерҙә әйләнеп йөҙөргә кереште. Үҙе һаман: «Ҡыҙырас, Ҡыҙырас!» – тип ҡысҡырҙы. Шулай йөҙә торғас, Юлдаштың күҙе алыҫ түгел бер ҡара нөктәгә төштө. «Был ни? Әллә ярҙамға берәйһе киләме?..» – тип уйланы ул.

Юҡ, был уларҙың үҙ кәмәһе ине. Ул, малайҙарҙы һыуға ауҙарғас, үҙе нисектер ҡайтанан турайып ултырған да, тулҡындар өҫтөндә сайҡалып, һикергеләп йөрөй ине. Юлдаш тағы өмөтләнеп: «Бәлки, Ҡыҙырас кәмәлә ҡалғандыр», – тип уйланы. Унан, бар көсөн йыйып, кәмәгә табан йөҙә башланы. Ләкин Ҡыҙырас унда ла юҡ ине! Юлдаштың йөрәге өҙөлөп төшкән һымаҡ булды. Хәле бөтөп, беләктәре талып китте. Ул йән әсеүе менән тағы бер-ике ҡат:

– Ҡыҙырас! – тип ҡысҡырҙы. Кәмә борғоланды. Юлдаштың ҡулынан ысҡынып китергә тырышты. Ошо ваҡыт ул:

– Юлдаш! – тигән хәлһеҙ генә бер тауыш ишетеп ҡалды. Шул уҡ ваҡытта үҙенән ҡырҡ-илле метр алыҫлыҡта, тулҡын эсендә, бер күренеп, бер юғалып Ҡыҙырастың ярға табан йөҙөп барғанын күреп ҡалды. Юлдаштың беләктәренә лә хәл кире ҡайтты. Ул, тейен етеҙлеге менән тырмашып, кәмәгә менде.

«Яр алыҫ. Йөҙөп барып сығырға Ҡыҙырастың хәле етмәҫ, тиҙерәк ҡыуып етеп, ҡотҡарырға кәрәк!..»

Ул ишкәктәрҙе ҡайырып алып, үҙендә бығаса бер ҡасан да булмаған көс менән ғәйрәтләнеп, ишергә тотондо. Яртылаш һыу баҫҡан кәмә тыңлаусан алға ынтылды. Үҙенә ярҙам килгәнде күргәс, Ҡыҙырас та ярға ынтылыуҙан туҡтап, кәмәгә табан йөҙә башланы. Күп тә үтмәй, ул, ағарынып-күгәренеп, кәмәгә килеп менде. Тик балыҡлы котелок ҡына кәмәлә юҡ ине хәҙер. Малайҙар менән бергә ул да күлгә сумғайны.

Бынан ары тулҡын уларҙы бик тиҙ ярға сығарып ташланы. Улар кәмәне яр ситендәге тирәккә бәйләгәс, ҡыуанып, йүгереп һыртҡа менделәр. Ләкин улар ҡайтып китергә генә торғанда, яҡында ғына асыулы, ҡалын тауыш ишетелде:

– Ах, кәмәне бына кемдәр алып киткән икән.. Ә мин уны эҙләп бөтә Талҡаҫты урап сыҡтым!

Малайҙар икеһе бер юлы тауыш килгән яҡҡа боролдолар. Унда, яр буйлап, йүгерә-атлай бая кәмәне алып киткән саҡта бармаҡ янап ҡалған ҡара мыйыҡлы, ҙур кәүҙәле ағай килә ине. Ҡыҙырас, уны күреү менән, өркkән ҡыр кәзәһе шикелле, ырғып-һикереп, ауыл яғына йүгерҙе лә китте. Юлдаш бер үҙе аптырап торҙо ла ҡалды. Кәмәне һорамай алған өсөн яуап

бирергә кәрәк булғанда ҡасып китеүҙе ул башына ла килтерә алманы, әлбиттә. Шулай ҙа ни эшләргә, Ҡыҙырастың был ҡылығына нисек ҡарарға икәнен уйларға ла өлгөрмәне, теге ағай килеп етеп, уның ҡолағына ла йәбеште.

– Ниңә кәмәне алып ҡастың? Ниңә һорамай алдың, собака малай?!

Ул ошо һорауҙы бер нисә тапҡыр ҡабатлап, айыу тәпәйендәй ҙур ҡаты ҡулдары менән Юлдаштың ике ҡолағын да матҡып тотоп борғоланы-борғоланы ла, малайҙың өндәшмәүен, урынынан да ҡуҙғалмауын күреп, аптырап туҡтап ҡалды.

– Бәй-бәй, ниңә иламайһың, собака малай? Телең юҡмы әллә һинең?

Юлдаш, ғәҙәтенсә, һалҡын ғына йылмайып, ашыҡмай ғына:

– Ниңә булмаһын, бар. Ярай әле ул ауыҙ эсендә. Юҡһа, ағай, һеҙ телдән дә тотоп тартыр инегеҙ, – тине.

Ағай, ҡыҙыҡһынып, уға текләп ҡарап торҙо ла түш кеҫәһенән блокнот менән ҡәләм алды.

– Ҡара һин уны, нимә ти!.. Уҫал малай икәнһең дә баһа. Исемең нисек һинең?

– Юлдаш.

– Фамилияң?

– Әлимов.

Ағай, ҡәләмен төкөрөкләй биреп, блокнотына Юлдаштың исем-фамилияһын яҙып ҡуйҙы ла:

– Ә теге, ҡасып киткән кем малайы? Уны ла бынауында һинең яныңа яҙып ҡуяйым.

Юлдаш, күңелһеҙ генә итеп:

– Белмәйем, – тине.

– Әйтергә теләмәйһең инде, ә?

Юлдаш, үҙһүҙләнеп:

– Белмәйем, – тип ҡабатланы.

Ағай йәнә бер тапҡыр Юлдашҡа ҡараны ла:

– Иптәште һатмайһың икән. Яҡшы, яҡшы. Ә ул, собака малай, һатты: ташланы ла ҡасты. Хәҙер кәмә өсөн һинең бер үҙеңә генә яуап бирергә тура киләсәк бит инде, – тине. Юлдаш, күтәрелеп ҡарамайынса ғына:

– Эйе. Киләсәк, – тип яуап бирҙе. Үҙе, ут кеүек янып барған ҡолаҡтарын баҫып ҡарағыһы килеүен көскә тыйып: – Хәҙер миңә ҡайтырға мөмкинме инде? – тип һораны.

– Мөмкин. Бар ҡайт, ҡустым, ҡайт, – тине.

Юлдаш ашыҡмай ғына ауыл яғына китте.

**1.** Текста осраған яңы һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен асыҡлағыҙ, улар менән телдән һөйләмдәр төҙөгөҙ.

**2.** Юлдаш менән Ҡыҙырас образдарына характеристика бирегеҙ, уларҙың үҙегеҙгә оҡшаған һыҙаттарын атағыҙ.

**3.** Талҡаҫ күле тураһында ҡыҫҡаса белешмә төҙөгөҙ.

**4.** Һеҙ Башҡортостанда тағы ниндәй күлдәр барлығын беләһегеҙ? Уларҙың ҡайһыларын күргәнегеҙ бар? Үҙегеҙ яҡшы белгән берәй күлгә телдән тасуирлама яһағыҙ.

**5.** З. Биишева повесын ни өсөн «Дуҫ булайыҡ» тип атаны икән? Һорауға яуап биреү өсөн, повесты тулыһынса уҡып сығырға тырышығыҙ.

**6.** «Талҡаҫта дауыл» тигән һүрәт төшөрөгөҙ.

**7.** «Минең дуҫым» тигән белешмә (яҡын дуҫыңа характеристика), йәки шул темаға шиғыр, хикәйә яҙығыҙ.

*Ғабдулла ТУҠАЙ*

## ШҮРӘЛЕ

*(Өҙөктәр)*

... Бик матур бер айлы кистә
Был ауылдан бер егет
Киткән урманға утынға
Яңғыҙы, бер ат егеп.
Тиҙ барып еткән егет,
Эшкә тотонған шунда уҡ,
Киҫә башлаған утынды
Балта менән «туҡ» та «туҡ!»
Йәйге төндөң ғәҙәтенсә
Төн бер аҙ һалҡын икән,
Барса ҡош-ҡорт йоҡлаған
Булғанға, урман тын икән.
Шундай тын, яҡшы һауала
Беҙҙең утынсы иһә,

Алды-артты, уңды-һулды
Ҡарамай, утын киҫә.
Балтаһы ҡулда, егет эштән
Бер аҙ туҡтап тора.
Туҡта, сеү! Йәмһеҙ тауышлы
Әллә нимә ҡысҡыра.
Һиҫкәнеп, беҙҙең егет
Ҡатып ҡала аяғүрә,
Аңламаҫтан ҡаршыһында
Әллә ниндәй «ят» күрә.
Нимә был? Ҡасҡынмы, енме?
Йә өрәкме, нимә был?
Ҡот осорлоҡ, бик килешһеҙ,
Әллә ниндәй нәмә был!..
Яп-яланғас, нәп-нәҙек,
Ләкин кеше төҫлө үҙе.
Урта бармаҡ буйлығы бар
Маңлайында мөгөҙө.
Кәкре түгел бармаҡтары,
Бик төҙ-төҙөн,
Тик килешһеҙ – һәр береһе
Ярты аршындан оҙон.

* * *

Бик оҙаҡ торғас ҡарашып,
Күҙҙәрҙе күҙгә терәп,
Өндәшә батыр утынсы:
«Һиңә минән ни кәрәк?»
– Бер ҙә шикләнмә, егет, һин,
Мин ҡараҡ, уғры түгел.
Юл да киҫмәйем, шулай ҙа
Мин бигүк туғры түгел.
Ғәҙәтем: яңғыҙ кешеләрҙе
Мин ҡытыҡлап үлтерәм.
Бына әле, һине күргәс,
Шатлығымдан үкерәм...
Кил әле, һин дә бер аҙ
Бармаҡтарыңды һелкет,
Эй, йәш егет! Килсе икәү
Уйнайыҡ бер аҙ кети-кети!

– Яҡшы, яҡшы, һүҙ ҙә юҡтыр,
Мин ҡарышмай уйнайым.
Тик һин минең шартыма
Күнмәçһең, тип уйлайым.
– Шартың нимә, һөйлә, зинһар,
Әй бисара әҙәмгенәм!
Тик тиҙерәк уйнайыҡсы,
Нимә ҡушһаң да күнәм.
– Һөйләйем шартымды һиңә,
Яҡшы тыңлап тор! Ана
Шунда бар бит бик оҙон һәм
Бик йыуан бер бүрәнә...
Бүрәнәнең бер осонда
Бар асылған ярығы,
Шул осонан ныҡ ҡына һин тот,
Әй урман һарығы!
Тыҡты теге бүрәнәнең
Ярығына бармағын.
Уҡыусым, күрҙеңме инде
Йәш егеттең ҡармағын?
Һуҡҡылайҙыр балта менән
Ҡыçтырылған сөйгә был.
Хәйләһен дә әкрен-әкрен
Килтерәлер көйгә был...
Һуға торғас, ахырҙа
Сөй сығып, бушап китеп,
Ҡыçылды бармағы шунда
Шүрәленең шап итеп.
Һиҙҙе эште шүрәле лә,
Аҡыра ла баҡыра,
Һыҙлана һәм ярҙамына
Шүрәлеләр саҡыра...
– Әй, егет, һис юҡ икән
Мәрхәмәт хисең һинең.
Әйт, исмаһам, исемеңде!
Кем һин? Исемең кем һинең?..
– Әйтһәм әйтәйем, белеп ҡал,
Исемем «Былтыр» минең,

Мин һинең ағаң булырмын
Шуны белеп тор, энем!
Шүрәле ялынып һорай,
Ауҙан ысҡынмаҡ була.
Һәм дә ысҡынғас, егеткә
Бер-бер хәл ҡылмаҡ була.
Ҡысҡыра: «Ҡыҫты, харап итте
Яуыз «Былтыр» мине.
Аһ, үләм бит! Был бәләнән
Кем килеп йолор мине?»
Иртәгәһен шүрәлеләр
Был меҫкенде тиргәйҙәр:
– Һин йүләрһең, ҡоторғанһың,
Тилергәнһең бит, – тиҙәр.
Әйтәләр: «Ҡысҡырма һин,
Яҡшылыҡ менән тыйыл!
Эй, йүләр! Ҡыҫҡанға былтыр,
Ҡысҡыралармы быйыл!»

**1.** Һүҙлек эше башҡарығыҙ: таныш булмаған һүҙҙәрҙе күсереп алып, мәғәнәләрен асыҡлағыҙ. Улар араһында бөгөнгө телдә бөтөнләй ҡулланылмағандары бармы? Улар нисек атала?

**2.** Шүрәленең урта бармаҡ оҙонлоҡ мөгөҙө бар, ти шағир. Оҙонлоҡто сама менән үлсәүҙең тағы ниндәй берәмектәре бар – уларҙы теҙеп яҙығыҙ, булдыра алған тиклем руссаға тәржемә итегеҙ. Мәҫәлән:

бер иле – … ,
бер ҡарыш – … ,
беләк буйы – … .

**3.** Кешенең урта бармаҡтан башҡа тағы ниндәй бармаҡтары бар – исемдәрен һанап сығығыҙ, рус телендә нисек аталғандарын әйтегеҙ. Сағыштырығыҙ: аяҡ бармаҡтарының да исемдәре ҡул бармаҡтарыныҡы кеүекме?

**4.** Нимә ул *кети-кети уйнау?* Яуабын таба алмаһағыҙ, атай-әсәйҙәрегеҙҙән һорағыҙ.

**5.** Шүрәле тураһында һеҙҙең ишеткәнегеҙ бар инеме? Һеҙ уны нисек күҙ алдына килтерәһегеҙ – һүрәтен төшөрөгөҙ.

**6.** «Алдар менән Шайтан» әкиәтен иҫегеҙгә төшөрөгөҙ. Ике әҫәрҙә лә *Былтыр ҡыҫҡанга быйыл ҡысҡырмайҙар* тигән

әйтемдең асылы әйтелә. Ошо әйтемде тағы ла ниндәй хәлдәргә ҡарата әйтеп була? Әкиәттә тағы бер нисә әйтемдең килеп сығышы асыҡлана.

7. Шүрәле менән Шайтан образдарын сағыштырығыҙ, уларҙың уртаҡ һәм айырмалы яҡтарын күрһәтегеҙ. Халыҡ ижадында тағы ниндәй мифик образдар бар, улар ниндәй әҫәрҙәрҙә осрай? Фекер алышығыҙ.
8. Ғабдулла Туҡай – татар халҡының бөйөк шағиры. Һеҙҙең уның тураһында ишеткәнегеҙ, әҫәрҙәрен уҡығанығыҙ бар инеме? Мөмкин булған тиклем мәғлүмәт туплап, уның тураһында фекер алышығыҙ, күмәкләп кескәй белешмә төҙөгөҙ.

*Мостай КӘРИМ*

## ОҘАТЫУ

*(«Беҙҙең өйҙөң йәме» повесы буйынса)*

Август айының һуңғы көнө килеп етте. Ул иртә шундай йылы ине. Өй алдындағы һары үләндәр, баҡсалағы ағас япраҡтары, өй түбәләре, урамдағы яңы телеграф бағаналары – бөтәһе, бөтәһе лә ҡояш нурына күмелгән.

Был иртәлә Петро ағай һәм Оксана беҙҙең ауыл менән хушлаштылар.

Ҡапҡа төбөндә күптән инде егеүле ат тора. Арба тирәһендә малайҙар һәм ҡыҙҙар йүгерешеп йөрөй. Ололар ҡойма буйында һөйләшеп тора.

Өйҙә юлға йыйыналар. Әсәй Оксанаға иң матур күлдәген кейҙерә. Атай юл әйберҙәрен арбаға сығарып һала ла яңынан өйгә инә. Өләсәйем бөтәбеҙгә лә саҡ ҡына ултырып торорға ҡуша. Тик шул ваҡытта ғына әсәй, миңә табан боролоп, әйтеп ҡуя:

– Бына, Йәмил, – ти ул, – һеңлең менән хушлашыр ваҡыт та етте. Бөгөн Оксана атаһы менән бергә Украинаға китә. Һуңыраҡ беҙ ҙә, күмәкләп, Петро ағайындарға ҡунаҡҡа барырбыҙ. Ярармы, ҡыҙым? – Быныһын ул Оксанаға әйтә.

– Ой, әсәкәйем, тиҙерәк килегеҙ! – ти һеңлем. – Ә Йәмил әле үк барһын. Бараһыңмы, Йәмил?

– Икегеҙ ҙә киткәс, өйҙә кем ҡалыр һуң? Йәмил беҙҙең менән барыр, – ти өләсәйем.

Мин аптырайым: ни эшләп Оксана үҙе генә китә икән? Мин бит уның менән теләһә ҡайҙа барырға әҙер торам. Шуны аңламайҙармы икән ни?

Аҙыраҡ ултырғандан һуң, өләсәйем урынынан тора. Уның артынан беҙ ҙә ҡуҙғалабыҙ.

Бөтәбеҙ ҙә урамға сығабыҙ. Кешеләр Петро ағайҙы уратып алалар, уның ҡулын ҡыҫалар:

– Хуш бул, туған, – тиҙәр улар, – беҙҙе онотма. Ҡунаҡҡа йышыраҡ кил!

Кемдер, Оксананы күтәреп алып, биттәренән үбә. Шунан һуң уны ҡулдан ҡулға йөрөтәләр. Хушлашыу бик оҙаҡҡа һуҙыла, һеңлем эргәһенә иң аҙаҡтан өләсәйем килә һәм уның сәсенән һыйпай.

– Бәхетле, тәүфиҡлы бул, ҡыҙым, – ти. Өләсәйҙең йәшле күҙҙәре берсә асыла, берсә йомола.

Беҙ бишебеҙ ҙә арбаға менеп ултырабыҙ. Әсәй Оксананы итәгенә ала. Атай дилбегәне һелтәп ебәрә. Беҙ ҡуҙғалып китәбеҙ. Ҡапҡа төбөнә йыйылған кешеләр ҡарап ҡалалар. Фәһимә ҡысҡырып иларға тотона, ә Марат менән Фәрит, арба артынан эйәреп, йүгереп килә.

– Һау бул, Оксана! – ти Марат.

– Иҫән бул! – ти Фәрит.

Һеңлем малайҙарға ҡул болғай. Урам башында улар ҙа тороп ҡалалар.

Анау саҡта беҙ атай менән туҡтап хәл йыйған урманлы тауҙы ла үтеп китәбеҙ. Туғайға килеп сыҡҡас, атай атты туҡтата. Иң элек арбанан үҙе һикереп төшә.

– Барығыҙ, балалар, һеҙ алдан йүгерегеҙ, арығас, тағы ултырырһығыҙ, – ти ул.

Мин артҡа әйләнеп ҡарайым. Атай, әсәй, Петро ағай – өсөһө лә арба артынан атлап килә…

Минең эсем бошоп китте.

– Һин китмә, туғаным! – тим Оксанаға.

– Әсәй ҙә барырға ҡуша бит, – ти ул. – Минең атайым һәйбәт. Ул һине лә, мине лә ярата. Ә һин әсәйҙәр менән ҡунаҡҡа килерһең. Беҙҙең унда яңы өйөбөҙ булыр.

Атайҙар, атты саптырып, беҙҙең арттан килеп етә. Оксана менән беҙ арбаға менеп ултырабыҙ. Бик оҙаҡ барғас, алыҫта, ағастар араһында, бер аҡ йорт күренде.

– Бына, килеп тә еттек, – ти атай.

Беҙ ана шул аҡ йортҡа етер-етмәҫ, бер ағас төбөндә туҡтайбыҙ. Атай менән Петро ағай йортҡа инеп китә, беҙ өсәү арбала ултырып ҡалабыҙ. Йорт тирәһендә күмәк кешеләр йөрөп тора.

Бер аҙҙан атай менән Петро ағай килеп сыҡты.

– Билеттар булды, – ти атай. – Тиҙҙән поезд киләсәк, мин әйберҙәрҙе килтерәйем. – Ул шәп-шәп атлап китеп бара. Беҙ дүртәү шунда ҡалабыҙ. Петро ағай менән әсәйем ниҙер һөйләшә. Русса белмәгәс, мин уларҙың һүҙҙәрен аңламайым.

Әйберҙәрҙе күтәреп, атай ҙа килеп етә. Инде өсәүләп һөйләшә башлайҙар.

– Килә! – тип ҡысҡырҙы кемдер.

Беҙ хушлаша башланыҡ. Петро ағай башта атайҙы ныҡ итеп ҡосаҡланы, унан әсәйҙең ҡулдарын ҡыҫты, иң аҙаҡ мине күтәреп алды ла өс тапҡыр битемдән үпте.

Оксана әсәйгә килеп һыйынды. Әсәйем уны ҡыҫып-ҡыҫып ҡосаҡларға тотондо. Шунан атайым һеңлемде әсәй ҡулынан йәһәт кенә алып һөйҙө лә ергә төшөрҙө.

– Хушлашығыҙ инде, балалар, – тине атайым.

Һеңлем миңә әйләнеп ҡараны. Уның яңаҡтары буйлап юл-юл булып йәш аға ине. Мин һеңлемдең беләгенән тотоп алдым:

– Оксана, китмә, туғаным!

– Йәмил, илама, улым, һеҙ тиҙҙән тағы күрешерһегеҙ, – тине атай.

Паровоз ҡысҡырып ебәрҙе. Петро ағай Оксананы тиҙ генә вагондың өҫкө баҫҡысына баҫтырып ҡуйҙы ла үҙе лә һикереп менде. Вагондар ҡуҙғалып китте. Беҙ ҡул болғап ҡалдыҡ…

Поезд урман эсенә инеп юғалды. Ә беҙ һаман шунда баҫып торабыҙ. Ҡапыл мин әсәйҙең йомшаҡ тауышын ишетәм:

– Үҙ ояһына осоп китте… ҡошсоғом минең… шатлығым минең…

Атайым бик оҙаҡ уйланып тора. Унан һуң беребеҙгә лә ҡарамай ғына һүҙ башлай:

– Улай тимә, Көнбикә. Ҡыҙыбыҙ ғүмер буйы беҙҙең өйөбөҙҙөң йәме булып ҡалыр.

1. Текст өҫтөндә тасуири уҡыу күнекмәләре үткәрегеҙ.
2. Ни өсөн Йәмилдең атаһы Оксананы *беҙҙең өйҙөң йәме* тип атай?
3. Һеҙ үҙегеҙ Оксананы нисек күҙ алдына килтерҙегеҙ? Уның образына телдән характеристика бирегеҙ.
4. Йәмил менән Оксананың артабанғы яҙмышы нисек булыр икән? Әҫәрҙе үҙегеҙсә (телдән) дауам итегеҙ.

## 6-СЫ КЛАСТА ҮТЕЛГӘНДӘР БУЙЫНСА ҺОРАУҘАР, ЭШТӘР, АҢЛАТМАЛАР

1. Башҡорт һәм рус телдәрендә исем һорауҙары араһында айырма бармы?

2. Башҡорт телендә исемдәрҙең килеш менән үҙгәреүенең төп үҙенсәлеге.

3. Рус телендә ҡайһы бер исемдәр килеш менән үҙгәрмәй (мәҫәлән, пальто). Шулай уҡ йә берлектә генә, йә күплек формала ғына йөрөй торған исемдәр байтаҡ (мәҫәлән, кофе, кино, коньки, сани, ножницы). Башҡорт телендә нисек?

4. Башҡорт телендә төп һәм шартлы сифаттар була. Төп сифаттар предметтың үҙенең билдәһен белдерә (төҫ, күләм, тәм һ. б.), ә шартлы (условные) сифаттар иһә контекста ғына сифат функцияһын башҡара. Шартлы сифат предметтың материалы, урыны, ваҡыты, тәғәйенләнеше буйынса билдәһен белдерә. Ғәҙәттә, бындай сифаттар функцияһында исемдәр, ҡылымдар, шулай уҡ бүтән һүҙ төркөмдәре килә: алтын балдаҡ, яҙыу өҫтәле, атайымдағы китап, йөҙлө лампа, кисәге хәл.

5. Башҡорт телендә нәмә һәм нимә тигән ике оҡшаш һүҙ бар. Нәмә – ул исем, әйбер һүҙенең синонимы. Нимә – ул һорау алмашы.

6. Йыйыу һандары (собирательные числительные) башҡорт телендә етәү генә: **берәү, икәү, өсәү, дүртәү, бишәү, алтау, етәү**. Һөйләштәрҙә *унау, йөҙәү* формалары ла осрай.

7. Йыл һуҙымында өйрәнелгән әҫәрҙәрҙең иң ныҡ оҡшағаны һәм хәтерегеҙҙә ныҡ һаҡланғаны ниндәйе булды?

8. Кемдең хәтере оҙонораҡ? Йыл буйына ятлаған шиғырҙарҙы, өйрәнгән йырҙарҙы иҫегеҙгә төшөрөгөҙ.

9. Йыл буйына төҙөгән альбомдарығыҙҙы тәртипкә килтерегеҙ. Үҙегеҙ ижад иткән әҫәрҙәрегеҙҙе айырым альбомға (мәҫәлән, «Беҙҙең ижад» исеме менән) туплағыҙ. Альбомдарығыҙҙы артабанғы кластарҙа ла дауам итерһегеҙ.

10. Фольклористика, әҙәбиәт ғилеме, тел ғилеме, хитап, характеристика, архаизмдар, неологизмдар, варваризмдар тураһында ҡыҫҡаса һөйләгеҙ. Ошо йүнәлештә 5-се класта алған белемдәрегеҙҙе лә яңыртығыҙ.

11. Башҡортостан, Урал тауҙары, Башҡортостан йылғалары, Өфө, башҡорт халҡының тарихы, милли йолалары, ауыҙ-тел ижады, теле, әҙәбиәте, күренекле әҙиптәре тураһындағы белешмәләрҙе яңынан ҡарап сығығыҙ. Тыуған төйәгебеҙҙең образы тулыраҡ күҙаллаһын өсөн тағы ниндәй белешмәләр кәрәк икәнен асыҡлағыҙ һәм был эштәрҙе башҡарыуҙы 7-се класҡа бурыс итеп ҡуйығыҙ.

## ҺҮҘЛЕК

### А

**абайлау** – заметить, понять, обратить внимание

**ағыу** – яд

**ажғырыу** – разъяряться. **Ажғырып ташланыу** – яростно броситься

**азамат** – почтенный, уважаемый человек

**айырыуса** – бигерәк тә; особенно

**аҡ кейек** – ҡиммәтле тиреле кейек (тейен, шәшке, һуҫар һ.б.); красный зверь (белка, норка, куница и т.д.)

**аҡлатыу** – доказать невиновность

**алҡым** – тамаҡ, үңәс; горло

**алҡын** – тулы һыулы, шәп ағыусы (йылға); полноводная, буйная (река)

**алъюҫыҡҡа** – буштан-бушҡа; попусту

**алышыу** – *бында:* көрәшеү, һуғышыу; бороться, драться, воевать

**аманат** – 1. Изге ҡомартҡы; святыня. 2. Заложник

**аңҡыу** – распространяться (об аромате цветов), благоухать

**аңшайыу** – аптырау, албырғау; растеряться

**арҡадаш** – көрәштәш, фекерҙәш; товарищ по борьбе, единомышленник, соратник

**аҫаба** – ерле; коренной. **Аҫаба башҡорт** – ерле башҡорт; *ист.* башкир-вотчинник

**аҫыл егет** – добрый молодец

**ауаз** – тауыш, өн; голос

**аулаҡ** – глухой, безлюдный

**ауыҙлыҡ** – удила

**ашыҡ** – һөйәк; альчик, бабка

### Б

**бағышлау** – посвящать

**балауыҙ** – воск

**балтырған** – борщевик

**баҫалҡылыҡ** – спокойствие, сдержанность, уравновешенность

**баҫҡынсы яу** – баҫып алыу һуғышы; завоевательная война

**бауырһаҡ** – национальное блюдо из теста
**башалтай** – носки (шерстяные)
**бей** – *ист.* ырыу башлығы; предводитель рода
**бер тындан** – тиҙ, туҡталмайынса; на одном дыхании
**берәҙәклек** – бродяжничество
**биҙгәк** – лихорадка, малярия
**биҙҙереү** – отучать; надоедать
**бизмән** – весы
**бикәс** – ҡәйенһеңле; золовка (младшая сестра мужа)
**бихисап** – бик күп, хисапһыҙ, һанһыҙ; очень много, бесчисленное количество
**боғаҙлау** – һуйыу; резать, забивать, задирать
**боғалаҡ** – петля
**бойоҡ** – күңелһеҙ; грустный
**болан** – олень
**боҫ** – пар
**бөгәсә** – сегодня (накануне) ночью
**бөжәк** – насекомое
**бөхтәлек** – опрятность, аккуратность
**бәғер** – сердце, душа
**бәкәл** – щиколотка (у человека), бабка (сустав ноги у животного)
**бәлтерәү** – становиться вялым
**бәндә** – раб, слуга, человечишка; *здесь:* злодей
**бәхилләшеү** – прощаться
**былбыл** – һандуғас; соловей
**бынамын** – превосходный
**быстырлау** – копошиться
**булғадир** – бригадир; *бында:* бригада генералы; бригадный генерал
**булышыу** – ярҙамлашыу; помогать
**бурһыҡ** – барсук
**бушбоғаҙ** – горлопан

## В

**вазифа** – дәрәжә, бурыс; должность, обязанность

## Ғ

**ғали йәнәптәре** – ололап, ихтирам итеп әйтеү һүҙҙәре; Ваше сиятельство, Ваше превосходительство
**ғариза** – заявление
**ғишыҡ** – мөхәббәт; любовь
**ғәзиз** – ҡәҙерле; дорогой
**ғәйеп булыу** – юғалыу; пропасть без вести
**ғәййәр** – ҡыйыу, батыр; смелый, храбрый
**ғәрле** – намыҫлы; совестливый
**ғәрләнеү** – оскорбляться
**ғәрәсәт** – ҡойон; буря, ураган

## Д

**дағa** – подкова
**данлыҡлы** – прославленный, известный
**дар** – дар ағасы; виселица
**даръя** – большая, полноводная река, *уст.* море, океан
**диуар** – *уст.* стена, забор, преграда
**дорфалыҡ** – тупаҫлыҡ; грубость
**дөмбәҫләү** – бить, лупить

**дөрләү** – ялҡынланып яныу; воспламеняться, возгораться
**дыуамал** – сумасбродный, безрассудный
**дәғүә** – талап; претензия
**дәрт** – воодушевление
**дәртләндереү** – воодушевлять, вдохновлять

## Е

**екегән** – йолҡонған; общипанный
**екереү** – кричать, гаркать, орать
**елек** – костный мозг
**елен** – вымя
**елеү** – сабыу; нестись, мчаться
**елтерәтеп (сығарыу)** – вышвырнуть
**ерән** – рыжий
**ерәнеү** – брезговать, испытывать отвращение
**етди** – серьёзный
**етем, йәтим** – сирота

## З

**залим** – иҙеүсе, йәберләүсе; деспот, тиран, угнетатель
**затлы** – юғары сифатлы, ҡиммәтле; качественный, дорогой
**зауыҡ** – вкус
**зирәк** – смекалистый, сообразительный
**зиһен** – аҡыл, хәтер; ум, память
**золом** – яуызлыҡ; зло
**зыярат** – кладбище

## И

**игәр** – помесь собаки с волком
**илсе** – посланник, посол
**илтеү** – алып барыу, килтереү; нести, доставлять
**илһам** – вдохновение
**илһамланыу** – вдохновляться
**иман** – (дингә, Аллаға) ышаныу, намыҫ; (религиозные) убеждения, совесть
**имгәк** – обуза, бремя. **Аяҡлы имгәк** – ходячая обуза; существо, доставляющее много хлопот окружающим
**имгәкләү** – ходить на четвереньках
**имеү** – һурыу; сосать
**иңе** – киңлеге; ширина чего-либо
**иңкеш** – шмель
**иң киреү** – күкрәк киреү; выпячивать грудь
**ипле** – сдержанный, аккуратный
**истәк** – истяк (древнее название башкир, данное им казахами)
**ифрат** – бик; очень
**ихлас** – искренне
**ихтилал** – күтәрелеш; восстание

## Й

**йолҡош** – оборванец
**йомарланған һүҙ** – йомаҡ; загадка

**йор** – остроумный
**йөҙәтеү** – аптыратыу, ыҙалатыу; мучить, изводить
**йөпләү** – хуплау; подтверждение, одобрение
**йыуа** – дикорастущий лук
**йәбер-золом** – гнёт, притеснения
**йәҙрә** – ядро, пуля
**йәйрәп ултырыу** – сидеть развалившись
**йәкәл** – бәкәл һөйәге; щиколотка, бабка
**йәнәшә** – рядом

## К

**кафыр** – безбожник, иноверец, неверный, *уст.* вероотступник
**кейәү** – жених, зять
**кереш** – тетива (лука)
**кешнәү** – ржать
**килен** – сноха
**килешеү** – соглашение, договор
**килмешәк** – ҡырҙан килгән, ят; чужой, пришлый
**кир** – мухортый (о масти лошади)
**көбө** – сосуд высотой около метра из полого ствола дерева
**көлтә** – сноп
**көләкәс** – смешливый человек, весельчак
**көләс** – приветливый, ласковый
**көнләшеү** – зависть
**көпө** – стёганка, ватник
**көрт** – сугроб
**көртмәле** – черника (ҡара көртмәле), брусника (ҡыҙыл көртмәле), голубика (күк көртмәле)
**көрһөнөү** – уфылдау; вздыхать
**көфөр** – гонаһ; грех
**күбек** – пена
**күк көмбәҙе** – небосвод
**күмәс** – сөсө икмәк; булочка из пресного теста
**күс** – рой, пчелиная семья
**кәләш** – невеста
**кәпәренеү** – осоноу, маҡтаныу; важничать, чваниться
**кәр** – көс, ҡеүәт; сила, мощь
**кәртә** – изгородь
**кәрәҙ** – соты. **Кәрәҙле бал** – сотовый мёд
**кәсеп** – промысел, ремесло

## Ҡ

**ҡабаҡ** – түбә, бәләкәй тау; возвышенность
**ҡаза** – беда, несчастье
**ҡайрау** – үткерләү; точить
**ҡаҡ** – пастила
**ҡаҡлығыу** – отскочить
**ҡаҡшау** – *бында:* бөлөү, йонсоу; изводиться
**ҡамау** – окружить
**ҡамсат** – калан, бобёр, выдра; мех камчатского бобра; *здесь:* шапка из шкуры выдры
**ҡамсы** – кнут
**ҡамыт** – хомут, ярмо
**ҡанһырау** – истекать кровью
**ҡаныҡыу** – *бында:* бәйләнеү; придираться

**ҡарама** – вяз (дерево)
**ҡарғыш** – проклятие
**ҡармау (ҡармалау)** – йәбешеү, тотоноу; обхватить, схватить
**ҡарһаҡ** – дала төлкөһө; корсак, лиса степная
**ҡарыш** – сирек; вершок
**ҡата** – калоши
**ҡаушау** – аптырау, албырғау; растеряться
**ҡауырһын** – перо (птицы)
**ҡашҡа** – күренекле, данлыҡлы кеше, батыр; уважаемый, известный человек
**ҡашына** – алдына, янына, эргәһенә; взять (к себе)
**ҡисса** – повесть
**ҡитға** – часть света, континент, материк
**ҡиәмәт** – конец (света), светопреставление, судный день
**ҡоймаҡ** – блин
**ҡомарлыҡ** – азарт, жадность
**ҡомартҡы** – реликвия, памятник
**ҡон** – үс; месть
**ҡор** – тетерев
**ҡорбан** – жертва
**ҡорҙаш** – йәштәш, замандаш; ровесник, современник
**ҡоролма** – строение
**ҡоролтай** – съезд, конгресс
**ҡортҡа** – әбей; старуха
**ҡот** – йәм, йән; уют, краса, душа
**ҡотҡо** – ҡотортоу; провокация, подстрекательство
**ҡуйын** – пазуха
**ҡулаша** – ағас (йүкә) ҡабығынан яһалған ялғаш һымаҡ һауыт; лохань
**ҡумта** – шкатулка
**ҡуныу** – йоҡлап сығыу; переночевать
**ҡупшы** – нарядный, изысканный, элегантный
**ҡурғаш** – свинец
**ҡурсыу** –яҡлау; защитить, обезопасить, окружить заботой
**ҡусҡар** – улитка
**ҡушамат** – ләҡәп; прозвище, псевдоним
**ҡуштан** – ялағай; пособник, приспешник, подлиза
**ҡушын** – йөҙ кешелек ғәскәри берәмек; воинское подразделение из ста человек
**ҡый** – сорняк
**ҡылған** – дала үләне; ковыль
**ҡыпыш тун** – бөләкәй генә ҡыптыр тун; шуба из невыделанных шкур
**ҡырағай** – дикий
**ҡырғын** – ҡырылыш; бойня, мор
**ҡыр кәзәһе** – ҡоралай; косуля
**ҡырҡа** – ҡапыл; резко
**ҡыуғын** – *здесь:* сплав (леса)
**ҡәбер** – могила
**ҡәҙер** – ҡиммәт, ихтирам; цена, достоинство, уважение
**ҡәлғә** – крепость
**ҡәһәрләү** – ҡарғау; проклинать
**ҡәтғи** – строгий,

решительный, твёрдый, категоричный, требовательный

## Л, М

**лапаҫ** – навес, лабаз
**мал-тыуар** – домашний скот
**мандымау** – йәлсемәү, уңмау; не достичь желаемого, не везти
**мандыу** – поправляться, выздоравливать; налаживаться (о жизни)
**миҙгел** – ваҡыт, осор; время, период, сезон
**миңрәүләнеү** – иҫһеҙләнеү; тупеть, становиться бестолковым
**мираҫ** – наследство
**михнәт** – ыҙа, ҡыйынлыҡ; страдание, мучение
**миһырбанлы** – милосердный, жалостливый
**монар** – дымка, туман, мгла
**монпаси** – һурғыс кәнфит; монпансье
**мөлкәт** – байлыҡ, мал-тыуар; богатство, имущество, состояние
**мөһабәт** – величественный
**мутлашыу** – хитрить

**мырҙа** – 1. Эне, ҡусты; младший брат. 2. Юғары ҡатлам кешеләренең титулы; титул представителей высшего слоя населения; господин
**мышы** – лось
**мәғдән** – ҡаҙылма байлыҡ; полезное ископаемое
**мәғрифәтсе** – просветитель
**мәкер** – злое намерение, коварство, хитрость
**мәлғүн** – окаянный
**мәмерйә** – пещера, грот
**мәрхәмәт** – пощада, милосердие, сострадание
**мәрәкә** – ҡыҙыҡ; потеха, забава
**мәсхәрә** – оят; позор, срам. **Мәсхәрә итеү** – опозорить
**мәтрүшкә** – душица. **Һары мәтрүшкә** – зверобой
**мәшһүр** – күренекле, билдәле, атаҡлы; знаменитый
**мәшәҡәт** – хлопоты, суета, забота

## Н

**наҡыҫ** – әҙ; недостаточный, скудный
**ниғмәт** – байлыҡ; богатство, достаток
**никах** – бракосочетание
**нәби** – пәйғәмбәр; пророк
**нәсихәт** – өгөт, нотоҡ; назидание, наставление
**нәфис** – изящный, нежный
**нәфрәт** – ненависть, презрение

## О, Ө, Р

**ожмах** – йәннәт; рай
**ойотҡо** – закваска
**олғашыу** – етеү, тоташыу; возвышаться
**олпат** – солидно, степенно

**оран һалыу, саң ҡағыу, төрән һуғыу** — бить в набат, бросить клич
**осҡон** – искра
**өҙәңге** – стремя
**өйөм** – куча
**өйөр** – табун (лошадей), стая, косяк
**өйөрмә** – ҡойон; вихрь, смерч
**өйрә** – суп без мяса
**өшәнеү** – арыу; утомляться, изнуряться
**риүәйәт** – предание
**ришүәт** – взятка
**рәйес** – председатель

## С

**сабын** – сабынлыҡ; сенокосное угодие
**сағыл** – косогор
**сайыр** – смола
**сапҡын** – гонец
**сардар** – ғәскәр башлығы; полководец
**сатнама һыуыҡ** — ҡаты һыуыҡ; сильный мороз
**сатыр** – ҡыуыш; шатёр
**сауҡа** – молодая берёза
**сая** – бойкий, смелый, отчаянный
**семтеү, семетеү** – щипать
**септә** – рогожа
**серге** – эйәр аҫтына һала торған кейеҙ; чепрак
**сирылыу** – морщиться
**ситән** – плетень
**солғау** – баҫып, ҡаплап алыу; окутать, обволакивать
**солох** – тыныслыҡ, килешеү; мир, соглашение
**сорғотоу** – сөйөү, ырғытыу, атыу; подбрасывать, метать, стрелять
**сөй** – ҡаҙаҡ; гвоздь
**сөйәл, һөйәл** – бородавка
**сөм ҡара** – ҡап-ҡара; чёрный-пречёрный
**сөсө ҡамыр** – пресное тесто
**суҡмар** – һуғыш ҡоралы; палица, булава
**сүбәк** – пакля
**сығым** – расход
**сырай** – йөҙ, лицо. **Ҡараңғы сырай** – угрюмое лицо
**сәйер** – странный
**сәмләнеү** – задор, азарт
**сәмреғош** – мифик ҡош; мифическая птица; *здесь:* двуглавый орёл
**сәп** – мишень
**сәтләүек** – орех
**сәхрә** – простор, красивая местность, природа

## Т

**таж** – корона
**тайыу** – поскользнуться; удирать
**таҡыя** – тюбетейка
**талпан** – клещ
**талығыу, талыу** – арыу, йонсоу; утомляться
**тарма** – киндер; конопля
**татып ҡарау** – тәмләп ҡарау; попробовать на вкус
**таяр** – сая, тәүәккәл; решительный
**таяу** – терәү; опора
**теҙген** – узда
**текә** – крутой
**терегөмөш** – ртуть

**терһәк** – локоть
**тиктомалға** – буштан-бушҡа, юҡҡа; зря, попусту
**тиктомалдан** – ни с того ни с сего, понапрасну
**тиҫтер** – йәштәш; одногодок, ровесник
**тиҫтә** – десяток
**тоҙаҡ** – силок, петля
**тоҡом** – нәҫел-нәсәп; порода, род, племя
**тома һуҡыр** – совершенно слепой
**тонйорау** – тускнеть при закате (о солнце)
**тонсоғоу** – задохнуться
**торҡа** – хәрби баш кейеме; шлем
**тоҫҡау** – төҙәү; целиться
**төмән** – ун меңлек ғәскәри берәмек; воинское подразделение из десяти тысяч человек
**төнлөк** – вентиляционное отверстие, отдушина (в юртах, банях)
**төрән** – лемех (у плуга)
**төшлөк** – көньяҡ; юг
**төшөм** – прибыль
**тубыҡ** – колено
**турһыҡ** – хайуан тиреһенән эшләнгән һауыт; бурдюк
**туҫтаҡ** – сеүәтә; миска
**түңкәреү** – аҫтын өҫкә килтереү; перевернуть
**түрә** – начальник
**тыпырсыныу** – барахтаться, дрыгать ногами
**тыранса** – ҡарағайҙан балта менән ярылған йоҡа таҡта; дранка
**тышау** – путы
**тәгәс** – сеүәтә; миска, чашка
**тәкәббер** – самонадеянный, задиристый, высокомерный
**тәҡдир** – яҙмыш; рок, судьба
**тәҡәт** – сабырлыҡ, түҙемлек; терпение
**тәнтерәкләү** – еле-еле шагать
**Тәңре** – мәжүсиҙәрҙең аллаһы; Всевышний, божество язычников
**тәүбә итеү** – каяться
**тәүфиҡ** – әҙәп; благовоспитанность
**тәүәккәл** – решительный
**тәхет** – трон

## У, Ү, Ф

**уғры** – бур; вор
**уҡлау** – скалка
**уҡсылар батальоны** – стрелковый батальон
**умарта** – улей
**упҡын** – пропасть, бездна
**утлыҡ** – стойло (для лошадей)
**уфтаныу** – көрһенеү; вздыхать
**уяу** – зоркий, чуткий, бдительный
**үкһеҙ** – етем; круглый сирота
**үрмәләү** – карабкаться
**үртәү** – яндырыу; жечь
**үтес** – көтәсәккә алған әйбер (аҡса); взятая в долг вещь (деньги, кредит)
**үткер** – 1. Острый. 2. Сос, зирәк, ҡыйыу; шустрый, смелый
**фарман** – бойороҡ; приказ
**фәһем** – өлгө, үрнәк; пример

## Х

**хазина** – байлыҡ
**Хаҡ, Мәүлә, Хоҙай** – Алланың исемдәре; имена Аллаха
**хандан күңелең уймаһаң** – если не отвернёшься от хана
**хафа** – беспокойство
**хикмәтле** – мудрёный, причудливый
**хитап** – халыҡҡа поэтик мөрәжәғәт; поэтическое обращение к народу
**хөр** – ирекле; свободный
**хуплау** – яҡлау, йөпләү; признание, поддакивание, одобрение
**хуш еҫ** – тәмле еҫ; приятный запах, аромат
**хыянат** – измена
**хәйер** – милостыня, подаяние
**хәләл** – законный, разрешённый шариатом
**хәситә** – бетеү; амулет, талисман
**хәсрәт** – ҡайғы; скорбь, печаль, горе
**хәстәрлек** – забота
**хәтәр** – ҡурҡыныс; очень страшный, жуткийҺ
**һағауыл** – һаҡсы; телохранитель, охранник
**һағыныу** – скучать, тосковать
**һаҙаҡ** – уҡтарҙы һалып йөрөтөү өсөн тәғәйенләнгән махсус һауыт; колчан
**һаҙран** – һаҙмат; болотистый
**һай** – неглубокий
**һалмаҡ** – неторопливый, ровный
**һалым** – налог
**һамаҡлау** – говорить напевно, прибаутками
**һанат** – *уст.* чиновник
**һанға һуғыу** – иғтибар итеү, иҫәпләшеү; обращать внимание, считаться
**һарына** – саранка (трава)
**һатлыҡ йән** – продажная душа, предатель
**һауалы** – маҡтансыҡ, эре; хвастливый, высокомерный
**һауап, сауап** – благородное, богоугодное дело
**һелтәү** – һуғыу; махать, бить
**һемәйеү** – алданыу; быть обманутым
**һере** – выносливый, крепкий
**һеркә** – пыльца
**һитә** – перга
**һөҙлөк** – навар на поверхности мясного бульона
**һөйкөмлө** – милый, притягательный
**һөйрәлеүсе** – пресмыкающееся, рептилия
**һөйһөнөү** – хушһыныу; быть довольным, довольствоваться
**һөлгө** – таҫтамал; полотенце
**һөмһөҙ** – оятһыҙ; бесстыжий, наглый, нахальный
**һөрән** – ҡысҡырыу, оран; крик, клич, воззвание, призыв
**һуйыр** – глухарь
**һут** – нектар; сок

**һүлпәнлек** – вялость, неторопливость, медлительность
**һығылма (бил)** – гибкий (стан)
**һылтыҡлау** – сатанлау, аҡһаҡлау; хромать (слегка)
**һыңар аяҡлы** – одноногий
**һырғый** – оҙон, бейек; длинный, высокий
**һыуһын** – жажда
**һәләкәт** – гибель, катастрофа
**һәләт** – способность

## Ш

**шайыҡ** – һеләгәй; слюна
**шаңҡытыу** – глушить, оглушить
**шарлама (шаршы)** – водопад, перекат
**шаһит** – свидетель, очевидец
**шеш** – опухоль, шишка, нарыв
**шик** – сомнение
**ширлек** – скамейка
**шомланыу** – тревожиться
**шоңҡар** – ыласын; кречет
**шөкөр** – умение довольствоваться, благодарение
**шөрләү** – ҡурҡыу
**шуҡ** – шаловливый, озорной. **Шуҡ һүҙ** – озорное словцо, прикол
**шыбырлау** – шёпот, шептать
**шыйтыҡ** – упругий, гибкий
**шына** – клин
**шәльяулыҡ** – большой платок
**шәүлә** – күләгә; тень, призрак
**шәхес** – личность

## Ы

**ығы-зығы** – суета
**ыҙа** – яфа; мучение, страдание
**ыжламау** – иғтибар итмәү, иҫе китмәү; игнорирование
**ылаш** – помост, решётка для сушки курута
**ылымыҡ** – водоросль
**ылыҫ** – хвоя
**ынйы** – жемчуг
**ыңғырсаҡ** – седёлка
**ырыҫ** – бәхет, далан; счастье
**ырыуҙаш** – сородич
**ыҫланыу** – коптиться

## Э

**эйәр** – седло
**элмәк** – боғалаҡ; петля
**эне** – ҡусты; младший брат
**эңер** – вечерние сумерки
**эремсек** – творог
**эскерһеҙ** – ихлас; открытый, бескорыстный, искренний, добродушный

## Ә

**әҙернә** – ян, йәйә; лук
**әжәл** – үлем; кончина, смерть
**әмер** – бойороҡ; приказ, распоряжение
**әмир** – бойороҡ биреүсе, түрә; повелитель, начальник

**әрнеү** – ауыртыу, һыҙлау; болеть, страдать
**әрсәләү** – яҡлау; заступаться
**әсир** – тотҡон; пленный
**әүәл (әүүәл)** – беренсе, тәүҙә; сначала, во-первых, прежде, раньше

## Ю

**юйыу** – юҡ итеү; стереть, уничтожить
**юрамал** – нарочно
**юрға** – иноходец (конь)
**юртыу** – аяҡты етеҙ алып шәп хәрәкәт итеү (атҡа ҡарата); идти трусцой
**юха** – чудовище, мифический змей, живущий тысячу лет; оборотень
**юшау** – серем итеү; дремать (о лошадях); үлән ашау; щипать траву

## Я

**Ябраил** – фәрештә; ангел
**яҙҙырыу** – лишать
**яй** – әкрен; медленно
**яйһыҙ** – неудобный, неприятный, затруднительный
**ялҡытыу** – надоедать
**ялпаҡ** – плоский
**ялпы** – ярлы, хеҙмәтсән; масса (народа)
**ялыу** – жалоба
**ям** – *ист.* ям, почтовая станция. **Ям сабыу** – ямская гоньба
**януар** – ҡырағай йәнлек, йыртҡыс; зверь
**янъял** – ығы-зығы; скандал
**ярашыу** – килешеү, дуҫлашыу; соглашаться, брататься
**яр һалыу** – ҡысҡырыу, аҡырыу, хәбәр итеү; орать, оглашать
**ят бауыр** – инородец; чужой
**ятыу** – омут
**яу** – һуғыш; война
**яугир** – һалдат, һуғышсы; воин
**яһаҡ** – ясак, подать, дань
**яшыҡ** – үтә ябыҡ; тощий

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ


**Уҡыу – белем шишмәһе**

Бөгөн – белем көнө . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 3
*Түбәнге кластарҙа тел буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау* . . . . . . . . 5
*Ә. Әхмәт-Хужа.* Алмаш үҫә . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 6
*У. Кинйәбулатов.* Уҡытыусыма . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 8
*Т. Дәүләтбирҙина.* Миҙгелдәр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 9

**Йырым минең – Башҡортостан**

Башҡортостан . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 11
*З. Биишева.* Башҡортостан. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 13
*Р. Ғарипов.* Дан һиңә, дан, Башҡортостан! . . . . . . . . . . . . . . . . 14
*Ф. Туғыҙбаева.* Эй яҙмышым минең – Башҡортостан. . . . . . . . . . . 15
*Ш. Бабич.* Башҡортостан . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 17
*Ғ. Хөсәйенов.* Мөҡәддәс *(«Донъя» китабынан)* . . . . . . . . . . . . . . 18
*Н. Нәжми.* Һинең ниндәй улыңмын мин? . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 19

**Уҙған ғүмер – ҡалған хәтер**

*Ә. Усманов.* Башҡорттарҙың ғәскәри хеҙмәте . . . . . . . . . . . . . . . . 21
*Исем* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 24
Ҡолой кантон *(Башҡорт халыҡ йыры)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 25
*Ғ. Хөсәйенов.* Рудасы Исмәғил Тасим улы *(Повестан өҙөк)* . . . . . 27
*Т. Ҡарамышева.* Малайҙар. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 32
*Л. Толстой.* Кешегә күпме ер кәрәк? . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 33
*Ә. Хәкимов.* Еҙүкәй янында *(«Һауыр ҡумта» романы буйынса)* . 38

**Ил һаҡлап, азатлыҡ даулап**

Башҡорт ихтилалдары . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 47
Салауат *(Башҡорт халыҡ йыры)*. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 49

*Уртаҡлыҡ һәм яңғыҙлыҡ исемдәр* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 50
*М. Иҙелбаев.* Хушлашыу *(«Юлай улы Салауат» китабынан)* . 52
*Р. Бикбаев.* Салауат ҡылысы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 62
*Исемдәрҙең һан һәм зат менән үҙгәреүе* . . . . . . . . . . . . . . . . . 64
*С. Злобин.* Салауат Юлаев *(Романдан өҙөк)* . . . . . . . . . . . . . . 65
*Исемдәрҙең яһалышы* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 68
*Ғ. Ибраһимов.* Сапҡын *(«Кинйә» романы буйынса)* . . . . . . . . 68

**Төньяҡ амурҙары**

*Я. Хамматов.* Төньяҡ амурҙары *(Романдан өҙөк)* . . . . . . . . . . . . . 75
Кутузов *(Башҡорт халыҡ йыры)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 80
Ҡаһым түрә *(Риүәйәт)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 81
*Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреүе* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 84
Рус-француз һуғышы бәйете . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 88
Бәйет тураһында төшөнсә. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 89

**Утлы йылдар ауазы**

*Ш. Бабич.* Башҡорт халҡына көйлө хитап *(Өҙөк)* . . . . . . . . . . . 90
*Исемдәрҙең эйәлек заты менән үҙгәреүе* . . . . . . . . . . . . . . . . . 92
*Р. Солтангәрәев.* Осто бөркөт... *(Повестан өҙөк)* . . . . . . . . . . . 93
Хитап тураһында төшөнсә . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 105

**Уралып ятҡан Уралтау**

*Д. Бураҡаев.* Урал тауҙары . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 106
Урал *(Башҡорт халыҡ йыры)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 108
*Р. Бикбаев.* Уралыма . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 109
*Я. Хамматов.* Самородок *(«Бөртөкләп йыйыла алтын» романы буйынса)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 110

**Ағиҙелкәй алҡын, һыуы һалҡын**

Башҡортостан йылғалары . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 116
Йәмле Ағиҙел буйҙары *(Башҡорт халыҡ йыры)* . . . . . . . . . . . . 117
*Сифат* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 118
*Р. Бикбаев.* Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ! *(Поэманан өҙөк)* . . . . . 119
*Сифат дәрәжәләре* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 123
Йәмле Дим буйы *(Башҡорт халыҡ йыры)* . . . . . . . . . . . . . . . . . 125
Ағиҙел менән Яйыҡ *(Риүәйәт)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 126
Халыҡ хикәйәләре тураһында төшөнсә. . . . . . . . . . . . . . . . . . . 128
*Ә. Вахитов.* Ир ҡанаты *(Әҫәрҙән өҙөк)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . 129
Характеристика тураһында төшөнсә. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 140

**Тау башында балҡый бер ҡала**

Өфө . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 141
*Төп һәм шартлы сифаттар* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 143
*Р. Янбулатова.* Гүзәл Өфөм – баш ҡалам . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 145
*А. Камалов.* Боронғо башҡорт ҡалалары. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 146

**Башҡорт йолалары**

*А. Ҡобағошов.* Ҡарға бутҡаһы тәмлеме? . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 151
Ҡарға бутҡаһы *(Башҡорт халыҡ йыры)*. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 152
*Т. Ҡарамышева.* Кәкүк сәйе. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 153
*Сифаттарҙың яһалышы* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 155
Башҡорт байрамы. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 156
*С. Агиш.* Ҡунаҡ һәм намыҫ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 157
*Ф. Туғыҙбаева.* Һыу юлы. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 164

**Башҡорт аштары**

Милли аштар. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 167
*Ҡ. Даян.* Башҡорт ҡымыҙы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 168
*М. Өмөтбаев.* Башҡорт ҡорото . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 169
*В. Власов.* Башҡорт балы *(Өҙөк)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 171
*Н. Сафин.* Бишбармаҡ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 173

**Әсәм теле – сәсән теле**

Башҡорт теле . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 175
*З. Биишева.* Башҡорт теле . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 178
*Ғ. Хөсәйенов.* Әсәм теле – сәсән теле *(«Донъя» китабынан)* . . . . 179
Яҡшы һүҙ – йән аҙығы *(Башҡорт халыҡ әкиәте)*. . . . . . . . . . . . . 181
*Р. Ғарипов.* Туған тел. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 185
*Ә. Вахитов.* Һүҙ хаҡында баллада . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 186

**Башҡорттар китте һуғышҡа**

*Я. Хамматов.* Башҡорттар китте һуғышҡа *(Өҙөк)*. . . . . . . . . . . 194
*Ҡ. Даян.* Шайморатов генерал . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 200
*Ә. Бикчәнтәев.* Бөркөт һауала үлә *(Өҙөк)* . . . . . . . . . . . . . . . . . 201
*Р. Насиров.* Ил балаһы – Шакирйән
*(«Ҡайҙан һин, Матросов?» китабы буйынса)* . . . . . . . . . . . 204

**Башҡорт халыҡ ауыҙ-тел ижады**

Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 214
Урал батыр *(Башҡорт халыҡ әкиәте)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 215
Алдар менән шайтан *(Башҡорт халыҡ әкиәте)* . . . . . . . . . . . . . 227
Йомаҡтар . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 233
Ҡурай *(Башҡорт халыҡ йыры)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 234
*Алмаш* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 235
Ҡурай моңо *(Башҡорт халыҡ әкиәте)*. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 236
Азамат *(Башҡорт халыҡ йыры)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 241
*М. Кәрим.* «Азамат» *(«Ғүмер миҙгелдәре» китабынан)*. . . . . . 241
Көләмәстәр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 244

**Боронғо әҙәби ҡомартҡыларыбыҙ**

Башҡорт әҙәбиәте тарихынан . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 246
*Ҡол Ғәли.* Йософ ҡиссаһы *(Өҙөк)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 247
*Алмаш төркөмсәләре* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 251
Ҡармасан менән Сәрмәсән *(«Һуңғы Һартай» хикәйәте буйынса)*
252
*С. Юлаев.* Бүгәсәүгә ҡушылып, ир-батырға ҡуш булып . . . . . . . 256
Ҡарабай менән Сарыбай *(«Ҡуҙыйкүрпәс» повесы буйынса)*. . . . 261
*М. Аҡмулла.* Нәсихәттәр *(Өҙөк)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 265
Сәсәндәр ижады . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 267
Һабрау . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 268
Ҡобағош сәсән . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 269
*Һан* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 277
Байыҡ сәсән . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 278
Архаизмдар, неологизмдар, варваризмдар тураһында төшөнсә . 280

**Башҡортостандың халыҡ шағирҙары**

*М. Ғафури* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 282
Бир ҡулыңды! . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 283
*М. Кәрим* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 284
Өсөнсө көн тоташ ҡар яуа. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 285
*Һан төркөмсәләре*. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 286
*Р. Ғарипов* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 287
Аманат *(Ҡобайырҙан өҙөктәр)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 288
*Р. Бикбаев* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 290

Халҡыма хат *(Өҙөктәр)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 291
*Һандарҙың үҙгәреше* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 294

**Башҡортостандың халыҡ яҙыусылары**

*З. Биишева* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 296
Сынаяҡ уйнатыу *(«Кәмһетелгәндәр» романы буйынса)* . . . . 297
*Ә. Хәкимов* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 303
Сәләх ҡарт *(«Туй» повесы буйынса)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . 303

**Дуҫлыҡ менән көслөбөҙ**

*Ҡ. Аралбай.* Дуҫлыҡ һәйкәле . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 310
*З. Биишева.* Дауыл *(«Дуҫ булайыҡ» повесы буйынса)* . . . . . . . . 311
*Ғ. Туҡай.* Шүрәле *(Өҙөктәр)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 315
*М. Кәрим.* Оҙатыу *(«Беҙҙең өйҙөң йәме» повесы буйынса)* . . . . . . . 319
*6-сы класта үтелгәндәр буйынса һорауҙар, эштәр, аңлатмалар* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 322
Һүҙлек . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 324

*Учебное издание*

**Хажин** Вакил Исмагилович
**Вильданов** Ахат Ханнанович
**Карабаев** Мунир Иделович
**Аминева** Зубаржат Рафкатовна
**Аккужина** Фаурия Ахтямовна

**БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК И ЛИТЕРАТУРА**

**Учебное пособие для 6 класса**
**для изучения родного (башкирского) языка и литературы**
**в общеобразовательных организациях**
**с русским языком обучения**

*(на башкирском языке)*

*Уҡыу баҫмаһы*

**Хажин** Вәкил Исмәғил улы
**Вилданов** Әхәт Ханнан улы
**Ҡарабаев** Мөнир Иҙел улы
**Әминева** Зөбәржәт Рәфҡәт ҡыҙы
**Аҡҡужина** Фәүриә Әхтәм ҡыҙы

**БАШҠОРТ ТЕЛЕ ҺӘМ ӘҘӘБИӘТЕ**

**Уҡытыу рус телендә алып барылған**
**дөйөм белем биреү ойошмаларының**
**6-сы класы өсөн туған (башҡорт)**
**телен һәм әҙәбиәтен өйрәнеү өсөн уҡыу ҡулланмаһы**

Редакция мөдире *Г. А. Раянова*
Мөхәррире *А. В. Иҙелбәкова*
Биҙәлеш мөхәррире *З. И. Кәримова*
Техник мөхәррире *В. Р. Абдрахманова*
Корректорҙары *З. М. Камалова, Г. Ә. Таһирова*

Баҫырға ҡул ҡуйылды 07.06.2017. Форматы $60\times90\,^1/_{16}$. Офсет ҡағыҙы.
Офсет ысулы менән баҫылды. BTSchoolBook гарнитураһы.
Шартлы баҫма таб. 21,25+0,25 форз. Шартлы буяу отт. 22,75.
Иҫәп-нәшер таб. 14,24+0,40 форз. Тиражы 11400 дана. Заказ 1.0137.17.

Башҡортостан Республикаһының Зәйнәб Биишева исемендәге
Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.





КИТАП